# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

5



# ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯ

## Тамыр һәм ялғауҙар

***дуҫ*** *—* ***дуҫ****-лыҡ,* ***дуҫ****-лы-ғы*
***юл*** *—* ***юл****-даш,* ***юл****-даш-ым,* ***юл****-даш-ым-а*

## Ялғауҙарҙың төрҙәре

**Яһаусы ялғау** (яңы һүҙ яһай)**:**
*мал — мал****сы****, эл — эл****гес****,*
*хеҙмәт — хеҙмәт****кәр****.*

**Үҙгәртеүсе ялғау (**бер һүҙҙе икенсеһенә бәйләп килә**):**
*малсы****ға*** *(килдем), элгес****кә*** *(элдем),*
*хеҙмәткәр****гә*** *(әйттем).*

## Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы

1) *фестивал****ь*** *– фестивал****дән****, июн****ь*** *— июн****гә****;*
2) *вла****сть*** *— влас****ҡа****, пове****сть*** *— пове****сы****;*
3) *какао — какао****ны****, жюри — жюри****ға****,*
*меню — меню****ҙы****;*
4) *кро****сс*** *— крос****ҡа****, кла****сс*** *— клас****ты****;*
5) *Донба****сс*** *— Донба****сстан****, Ма****нн*** *— Ма****нн****ды;*
6) *Омск — Омск****иға****, Октябрьский — Октябрьский****ға****.*

# СИНТАКСИС ҺӘМ ПУНКТУАЦИЯ

## Һөйләм

*Алтын көҙ килде.* — хәбәр һөйләм
*Көн ниндәй матур!* — өндәү һөйләм
*Көҙ көнө һинә оҡшаймы?* — һорау һөйләм

## Һөйләм киҫәктәре

__________ — эйә
═══════ — хәбәр
(эйә, хәбәр — баш киҫәктәр)

\- - - - - - - - - - — тултырыусы
~~~~~~~~~~ — аныҡлаусы
–·–·–·–·–·– — хәл
(тултырыусы, аныҡлаусы, хәл — эйәрсән киҫәктәр)

Мансур ошо мөһабәт күренеште таң ҡалып күҙәтә. (Ә. Хәкимов.)

## Өндәш һүҙ

*Ғәли, туғаныңа ярҙамлаш.* — Ө, … .
*Һин, Ғәли, туғаныңа ярҙамлаш.* — …, ө, … .
*Туғаныңа ярҙамлаш, Ғәли.* — …, ө.

## Тура телмәр

*«Мин айран яратам!» — тине Таһир.* «Т!» — а.

*Таһир: «Мин айран яратам!» — тине.*
А: «Т!» — а.

*Таһир әйтте: «Мин айран яратам!»* А: «Т!»
~~~~~~~~~~

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

## 5

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Яңыртылған 7-се баҫма

КИТАП

Өфө • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

*Авторҙар коллективы:*
В. Ш. Псәнчин, Ю. В. Псәнчин, З. М. Ғәбитова,
Р. Р. Әйүпов, Р. М. Мөхәмәтова

**Шартлы билдәләргә аңлатма:**

● – ҡабатлау һәм күнегеүҙәргә өҫтәлмә эштәр

★ – яңы теманы аңлатыу һәм үҙ аллы күҙәтеү өсөн күнегеүҙәр

► – ятламайынса, аңлы үҙләштереү өсөн теоретик белешмәләр

**Тү** – телмәр үҫтереү күнегеүҙәре

⊙ – диктофон файҙаланыу

(★) – ҡатмарлы эш

☐ – картина буйынса эш

**Һүҙҙәр янындағы һандар түбәндәгеләрҙе аңлата:**

*көҙ*[1] – һүҙгә фонетик анализ яһарға,
*ҡулъяулыҡ*[2] – һүҙҙе составы яғынан тикшерергә,
*килгән*[3] – һүҙгә һүҙ төркөмө буйынса анализ яһарға,
*Бөркөтлө тауҙар араһында ултыра*[4] – һөйләмгә синтаксик анализ үткәрергә.

**Башҡорт теле** : уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып
Б28 барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [В. Ш. Псәнчин, Ю. В. Псәнчин, З. М. Ғәбитова, Р. Р. Әйүпов, Р. М. Мөхәмәтова]. – Яңыртылған 7-се баҫма. – Өфө : Китап, 2017. – Һүрәттәре менән 264 бит.

ISBN 978-5-295-06742-6

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП – 076/17**

**ISBN 978-5-295-06742-6**

© Псәнчин Ю. В., Ғәбитова З. М., Әйүпов Р. Р., Мөхәмәтова Р. М., яңыртылған, 2016
© З. И. Кәримова, дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## Һаумы, мәктәп!
## Белем бар байлыҡтан да артыҡ!

**1.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### СЕНТЯБРЬ КИЛДЕ

Һары япраҡтарын елпеп,
Сентябрь килде беҙгә.
Эй йылмаялар балалар,
Шатланып алтын көҙгә.

Яңы портфель тотоп ҡулға,
Яңы формалар кейеп,
Дәртле баҫып урамдарҙан,
Үтә улар гөр килеп.

Һағындырған мәктәптәре,
Яҡшы класс, парталар,
Хатта аҡбур, ҡара таҡта,
Глобустар, карталар.

Әллә күпме юлдар үтеп,
Урмандар гиҙгән улар,
Янып эшләгән баҫыуҙа,
Һыуҙарҙа йөҙгән улар.

Килә балалар, көс йыйып,
Яңы хеҙмәткә, эшкә.
Бар теләктәре уларҙың
Уҡырға дүрткә, бишкә.

*(Ф. Рәхимғолова)*

● Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ, һөйләмдәрегеҙҙең баш киҫәктәрен күрһәтегеҙ. Һөйләмдең баш киҫәктәре тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ, һөйләгеҙ.

а) Шиғырҙың авторы тураһында нимә беләһегеҙ?

б) Был шиғыр нимә тураһында?

в) Белем байрамы тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ?

г) Белем көнөнә нисек әҙерләндегеҙ, ниндәй теләктәр менән килдегеҙ?

д) Һеҙҙең мәктәптә Белем байрамы нисек үтте?

**2.** Тексты уҡығыҙ. Мәктәпкә тәү барған көнөгөҙ тураһында һөйләгеҙ. Ул көн ниндәй ине? Бирелгән текстан исем, сифат, ҡылымдарҙы табығыҙ.

## МӘКТӘПКӘ ТӘҮ БАРҒАН КӨН

Эйе, мәктәпкә тәү барған көн... Кемдең генә хәтерендә мәңгелеккә уйылып ҡалмай был көн! Бәхетле, аңлы ғүмергә тәү аяҡ баҫҡан тылсымлы көн! Минең дә хәтеремдә шул көйө һаҡлана ул. Эйе, тап бөгөнгөләй иҫемдә: бик матур сыуаҡ көҙгө көн ине. Ян-яҡта алтын япраҡтар туҙышып йөрөгәне әле булһа күҙ алдымда һымаҡ. Күрәһең, еллерәк тә булғандыр ул көн. Ләкин ғәжәп һәйбәт ине. Урам төрлө-төрлө күбәләктәр менән тулған яҙғы баҡсаға оҡшаған. Мин, матур кейемдәр кейеп, ҡулыма портфель тотоп, мәктәпкә китеп барам. *(З. Биишеванан)*

**3.** Тексты уҡығыҙ. Авторҙың әйтергә теләгән төп фекерен асыҡлағыҙ. Төп фекерҙе белдергән һөйләмде табығыҙ, үҙ-ара фекер алышығыҙ. Туған тел тураһында үҙегеҙ белгән шиғырҙарҙы иҫкә төшөрөгөҙ, һөйләп күрһәтегеҙ.

## ӘСӘМ ТЕЛЕ – СӘСӘН ТЕЛЕ

Донъяла һәр кемгә иң ҡәҙерлеһе – үҙенең туған теле. Туған телгә күпме маҡтау һүҙҙәре яуҙырылған! Ғабдулла Туҡайҙың:

«Эй туған тел, эй матур тел,
Атам-әсәмдең теле.
Донъяла күп нәмә белдем
Һин туған тел аркылы», –

тип әйткән һүҙҙәрен беҙ бала саҡтан ятлап, көйләп үҫтек. Әсәм теле – сәсән теле, ти шағир Рәми Ғарипов туған теле – башҡорт теле хаҡында. Минең өсөн дә туған башҡорт телем донъяны танып белеүҙә асҡыс булды. Ул мине киң донъяға алып сыҡты, бөтә кешелек ғилеменә, мәҙәниәт донъяһына юл асты, башҡа халыҡтар менән аралашырға мөмкинлек бирҙе. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

**4.** Уҡығыҙ. Текст нимә тураһында? Тел тураһындағы мәҡәлдәрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

ЙӘ...

Телдә ҡоро, буш һүҙ юҡ. Һүҙҙәр йә мәғәнәле, йә мәғәнәһеҙ. Йә һәйбәт, йә яман. Йә хаҡ, йә ялған. Йә ғәмле, йә ғәмһеҙ. Йә татлы, йә татһыҙ...

Телдән дә көслө нәмә юҡ. Тел ул ҡылыстан үткер. Бер һүҙ берәүҙе үлтерә икән, икенсеһе терелтә ала. Тел йыуата ла, уттарға ла һала, тартып та ала.

Телдән йомшаҡ нәмә юҡ. Татлы һүҙҙән йән ирей. Йылы һүҙҙән күңел тула. Хаҡ һүҙҙәрҙән донъя йәмләнә.

Бер-беребеҙҙән тейешле йылы һүҙҙәрҙе йәлләмәһәк ине донъяла.

Яман һүҙ йөрәктәрҙе яралай, донъяларҙы йәмһеҙләй, әҙәмдәрҙе ҡарайта, тормошто боҙа, күңелдәрҙе ҡыра.

Ямандарҙан йыраҡ, яман һүҙҙәрҙән һаҡ булһаҡ икән. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

● Мәҡәлдәрҙән исемдәрҙе, сифаттарҙы, ҡылымдарҙы табығыҙ. Был текста тел тураһындағы ҡайһы юлдар оҡшаны? Ни өсөн икәнен аңлатығыҙ, күсереп алығыҙ.

## § 1. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау

### Һүҙҙең морфологик киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар

**5.** 1. Тексты уҡығыҙ, тәбиғәттәге үҙгәрештәр тураһында һөйләгеҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән табып, аңлатығыҙ. 2. Билдәләнгән һүҙле һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ, ул һүҙҙәрҙең тамырҙарын күрһәтегеҙ. Бер тамырҙан яһалған һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың нисек аталыуын әйтегеҙ.

Август аҙаҡтары ине. Тирә-йүндә һиҙҙермәй генә бөтә нәмә үҙгәрҙе. Һәр төрлө үлән, сәскәһен ҡойоп, үҙенсә **орлоҡланды.** Берәүҙәре төҫөн, нәҫелен ерҙә ҡалдырыу өсөн, **орлоҡтарына** көмөш **елбәгәйҙәр** ҡуйып, **елгә** осорҙо, икенселәре, бөргәнәктәр, һырғанаҡтар булып, үткән-һүткән йән эйәһенә йәбешеп булһа ла, ситкә таралыу, һибелеү әмәлен тапты. **Орлоҡланмай** ҡыҫыр ҡалған үләндәр генә, ҡыу һабаҡтарын елгә бөгөп, ҡабат мәңге терелмәҫ өсөн, ерҙә серергә түшәлделәр.

Йәйге ҡупшы кейеме менән түш киреп, йыш яуған ямғырҙарға йыуынып, елгә **елһенеп** ятҡан Мораҙым тауының да төҫө алышынды. Тубылғы, сейә шырлыҡтары араһындағы ҡаулан һарғайҙы. Көҙгө ҡояш яҫы япраҡтарҙы көрән, ҡыҙыл төҫтәргә буяп ташланы.

● 1. *Һабаҡтарын, ямғырҙарға, япраҡтарҙы* һүҙҙәренең ялғауҙарын күрһәтегеҙ, уларҙың төрҙәрен билдәләгеҙ. Бындай ялғауҙар нисек атала?

2. *Орлоҡланды, елбәгәй, елһенеп, һарғайҙы, көҙгө* һүҙҙәренең ялғауҙарын табып, төрөн билдәләгеҙ. Бындай ялғауҙар нисек атала?

3. Башҡорт телендә ялғауҙар ниндәй төрҙәргә бүленә? Һығымта яһағыҙ.

**6.** Бирелгән һүҙҙәр менән яңы һүҙҙәр төҙөгөҙ, быньдай һүҙҙәрҙең нисек аталыуын әйтегеҙ.

Аҡ, күмер, ҡуш, эш, йөҙ, көн, төн, ҡул, тау, күл, һөйәр, йәшәр, көбәк, яулыҡ, яҡ, байыш.

**7.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ, дәфтәрегеҙгә күсереп яҙығыҙ.

Беҙҙең лагерь **Ҡыҙылъяр** ауылына яҡын урынлашҡан. Тирә-яҡта тәбиғәт бик матур. Йылғаның **аръяғында** бейек тауҙар башлана, **бирьяғында,** ҙур болонлоҡта, **төрлө-төрлө** сәскәләр үҫә. Тауҙан ҡарағанда болон өҫтөнә **ашъяулыҡ** япҡан төҫлө күренә. *(Ш. Янбаевтан)*

## Исем

**8.** 1. Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Уға исем бирегеҙ. 2. Текстан исемдәрҙе табығыҙ, уларҙың килешен, һанын билдәләгеҙ. 3. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табығыҙ, яҙылышын аңлатығыҙ.

Башҡортостан – йырҙар иле. Уға бары шундай ғына исем бирергә мөмкин. Башҡорт ерҙәренең шиғри исемдәре ниндәй генә йырҙарҙа йырланмаған да ҡайһы ғына яҡтарға барып етмәгән! Күкһелләнеп ятҡан Урал тауҙары, Ағиҙел, Ашҡаҙар, Дим, Һаҡмар йылғалары йөҙҙәрсә башҡорт, татар йырҙарында йырланалар. Хатта ғүмерендә Өфөнө, Ағиҙелде, Димде, Һаҡмарҙы, Уралды күрмәгән татар кешеһе лә шул исемдәр менән йырҙар ижад итә. Татарҙар башлыса Иҙел, Кама, Вятка, Ыҡ, Зәй, Чирмешән буйҙарында йәшәгәндәр. Әммә был йылғаларҙың исеменә арналған йырҙар беҙҙә бик аҙ.

Башҡортостан – ул ысын мәғәнәһендә йырҙар бишеге, көйҙәр ватаны, музыка шишмәһе, шиғырҙар баҡсаһы. *(Ш. Мөдәррис, Л. Ихсанова)*

**9.** 1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, төп фекерен аңлатығыҙ. 2. Шиғырҙан эйәлек затындағы исемдәрҙе табығыҙ, затын билдәләгеҙ.

УРАЛ БАТЫР ИЛЕ – САЛ УРАЛ

Урал, Урал – баһадирҙар иле,
Урал батыр иле – Уралтау;
Башҡорт тигән баш халыҡҡа иң тәү
Баш йорт булған изге Уралтау.

Урал, Урал – оҙон көйҙәр иле,
Йырҙар сәңгелдәге Уралҡай;
Күңелдәрҙе күккә олғаштырып,
Сыңрай-сыңрай һиндә ҡурайҡай.

Урал, Урал – тере һыуҙар иле,
Йәншишмәләр иле – киң Урал;
Буранбайҙың йырҙарылай иркен,
Рухыбыҙға беҙҙең тиң Урал.

Урал, Урал, Башҡортостан һинең
Тере йәнең, тере йөрәгең,
Имен генә булһын тыуған еркәй,
Тыуыр таңдар, килер көндәрең.

*(Р. Шәкүрҙән)*

● Үҙегеҙгә оҡшаған ике строфаны яттан яҙығыҙ. Аҙаҡ китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

## Сифат

**10.** 1. Тексты уҡығыҙ. Төп фекерен билдәләгеҙ. Башҡорт балы тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ. 2. Текстан сифаттарҙы табығыҙ, үҙҙәре асыҡлап килгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ. Сифат белдергән мәғәнәне асыҡлағыҙ.

## БАШҠОРТ БАЛЫ

Көньяҡ Урал урмандарындағы умарталыҡтарҙан алынған йүкә балы үҙенең ғәжәп һәйбәт сифаттары менән дан тота. Үҙе тәмле, үҙе туҡлыҡлы, үҙе шифалы был тәбиғәт бүләген кеше бик боронғо замандарҙа уҡ юғары баһалаған, уның тураһында күп әҫәрҙәр ижад иткән.

Башҡортостан тәбиғәте умартасылыҡты үҫтерергә уңайлы. Беҙҙә бының өсөн баллы үҫемлектәр бик күп. Ғөмүмән, сәскәле үҫемлектәрҙең күбеһе бал ҡорттары өсөн йәшәү сығанағы булып тора. Сәскәнән сәскәгә ҡунып, ҡорттар татлы һут, һеркә йыя. Улар һутты – балға, һеркәне һитәгә әйләндерә. Былар икеһе лә кеше өсөн ифрат файҙалы. Былардан тыш, ҡорт елеме, ҡорт һөтө лә кеше өсөн бик кәрәк – уларҙан дарыуҙар яһайҙар. *(В. Власовтан)*

**11.** Уҡығыҙ. Текстан сифаттарҙы табығыҙ, уларҙың дәрәжәләрен билдәләгеҙ. Бер сифатты дәрәжә менән үҙгәртегеҙ. Сифаттың телмәрҙә ни өсөн ҡулланылыуын аңлатығыҙ.

Бер көндө ҡоштар араһында ошондай хәбәр таралды:

– Илдәрҙең иле булған ошо йәмле ил уртаһында ҡалаларҙың ҡалаһы булған бер таш ҡала бар икән. Яҙғы байрамдарҙың иң матуры ошо ҡалала үтә икән. Унда бик матур музыка уйнала, кешеләр бик шат йырҙар йырлайҙар икән. Был ҡала эргәһендә ҙур-ҙур урмандар бар. Шул урмандарҙа бик дәртле, матур һайрай торған ҡоштар бар. Яҙғы ҙур байрамдарға улар бөтә илдәге ҡоштарҙың вәкилдәрен саҡыралар, ти. Беҙҙең яҡтан да бер ҡошто ебәрергә ҡушҡандар. Тик бик яҡшы ҡошто, бөтә ҡоштар яратҡан ҡошто ебәрһендәр, тип әйтәләр икән. Ҡоштарҙың да, кешеләрҙеке кеүек, бик ҙур байрамдары буласаҡ икән. *(А. Карнайҙан)*

## Һан

**12.** 1. Тексты уҡығыҙ. 2. Һандар булған һөйләмдәрҙе табығыҙ, уларҙы күсереп яҙығыҙ. Һандарҙың яҙылышы тураһында иҫкә төшөрөгөҙ. Цифр менән бирелгән һандарҙың яҙылышы тураһында һөйләшегеҙ.

МӘШҺҮР ҠУРАЙСЫ

1991 йылда музыка һөйөүселәр һәм республика йәмәғәтселеге 1920 йылдар урталарында Мәскәү, Париж, Стокгольм сәхнәләрендә сығыш яһап, донъяны таң ҡалдырған оҫта ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыу тантанаһын киң билдәләне.

Иҫәнбаев Йомабай Мотиғулла улы хәҙерге Хәйбулла районы Үрге Смаҡ ауылында тыуған. Йәштән үк йыр яратҡан. Ун ете йәшендә инде ул башҡорт халыҡ моңдарынан йөҙҙән ашыу көйҙө ҡурайҙа иркен уйнай белгән.

1925 йылдың июнь айында Йомабай Иҫәнбаевты Парижда асыласаҡ Бөтә донъя декоратив сәнғәт күргәҙмәһенә ебәреү өсөн Өфөгә саҡырып алалар.

Францияның баш ҡалаһындағы тәүге концерт 1925 йылдың 20 июлендә була. Совет артистары Париж тамашасылары өсөн бөтәһе 11 концерт бирә. Париж тамашасылары һәм музыка белгестәре ҡурайҙы бик оҡшата, уның менән бик ныҡ ҡыҙыҡһына.

**13.** 1. Тексты уҡығыҙ. Ете һаны тураһында белгәнегеҙҙе һөйләгеҙ. 2. Ете һанының ниндәй һөйләм киҫәге булып килеүенә иғтибар итегеҙ. 2-се, 7-се һөйләмдәрҙә шул һандың яһалышын аңлатығыҙ.

ЕТЕ

Ете – ғәжәйеп хикмәтле һан.

Донъяны етелек уратып алған кеүек: өҫтә ете ҡат күк, аҫта ете ҡат ер. Ете йондоҙ, ете мәғдән.

Аҙнаның ете көнө. Йәйғорҙоң ете төҫө, моңдоң ете өнө. Ете мөғжизә. Ата-бабалар Етегәнгә табынғандар, етегән шишмәне маҡтағандар, ете быуынды белергә кәрәк тип һанағандар.

Әкиәт батырҙары ете башлы аждаһаны еңгәндәр, ете йоҙаҡ менән бикләнгәндәр. Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫкәндәр. Кешенең ғүмере серле ете менән тулған кеүек. Ғәжәп хикмәтле лә, серле лә ул ете һаны. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

● 1. Ете һаны менән бәйле ниндәй мәҡәлдәр, ырымдар, йолалар, ышаныуҙар беләһегеҙ?

2. Башҡортостан Республикаһының ете мөғжизәһен атағыҙ. Береһе тураһында һөйләгеҙ.

★ 3. Үҙегеҙ белгәндәрҙе, ололарҙан ишеткәндәрҙе өҫтәп, ете һаны тураһында проект эшләгеҙ.

## Ҡылым

**14.** 1. Уҡығыҙ. Был өҙөк һеҙгә танышмы, ул ниндәй хикәйәнән алынған? 2. Өҙөктәге һөйләмдәрҙең эйә менән хәбәрҙәрен табығыҙ. Хәбәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен асыҡлағыҙ. 3. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең заманын, затын, һанын күрһәтегеҙ.

Класта уҡыу дәресе **бара.** Ғәлимә менән Зөлфиә был дәрестә икеһе лә ярата ине. Ләкин Ғәлимә бөгөн иғтибарһыҙ **тыңлай**. Әсәһен уйлай ул, бер-бер хәл булмағайы, тип ҡайғыра.

Бына ҡыңғырау шылтыраны. Уҡыусылар, инша яҙған дәфтәрҙәрен партала ҡалдырып, кластан **сыға башланы.** Ғәлимә дәфтәр-фәлән ҡалдырманы. Ҡабалана-ҡабалана алдан **сыҡты.** Уның артынан Зөлфиә эйәрҙе.

Өйгә ҡайтышлай Зөлфиә ғәҙәттәгесә **шаярҙы**, төрлө ҡыҙыҡ нәмәләр тураһында **һөйләне**. Ләкин Ғәлимәлә шаярыу ҡайғыһы юҡ ине шул... *(З. Хисмәтуллиндан)*

**15.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Төп фекерен билдәләгеҙ. Үҙегеҙҙең киләсәккә маҡсатығыҙ тураһында һөйләгеҙ.

### БЕЛЕМ ИЛЕ

Белем алыу еңел түгел,
Белем еңел бирелмәй.
Яулай уны бары шулар:
Кемдәр уңған, иренмәй.

Кемдәр ҡыйыу, кемдәр көслө,
Ҡыйынлыҡҡа бирешмәй,
Шулар үҙ маҡсаттарына
Ҡалмай һис тә ирешмәй.

Белем иле, ай-һай, алыҫ,
Юлдары борма-борма.
Серҙәр донъяһын ятаһаң,
Юлдарҙан ҡурҡып торма.

Атла бары алға ғына,
Боролмаларҙан урап.
Ҡалабыҙ был юлда һиңә
Бары еңеүҙәр юрап.

*(Р. Сабитовтан)*

- Үҙегеҙгә оҡшаған ике строфаны яттан яҙығыҙ. Аҙаҡ китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

# СИНТАКСИС ҺӘМ ПУНКТУАЦИЯ. ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ

## § 2. Һүҙбәйләнеш



★ Һүрәтте башта бер һүҙ менән, һуңынан тулыраҡ итеп әйтеп ҡарағыҙ. Предметты тулы итеп һүрәтләү өсөн нисә һүҙ ҡулланырға кәрәк?

● Предметты тулыраҡ сағылдырған һүҙҙәрҙе таҡтаға яҙығыҙ: яҙған һүҙҙәрегеҙҙе һорауҙар биреп тикшерегеҙ. Икешәр һүҙҙән торған атаманың ҡайһыһынан сығып һорау биреп булғанын әйтегеҙ: *әйәрле ат, егелгән ат.*

▶ Һүҙбәйләнеш – ул мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан үҙ-ара бәйле булған ике йәки бер нисә һүҙ. Улар бер бөтөн уйҙы, фекерҙе аңлатмайҙар, уларҙың тамамланған интонацияһы ла булмай.

Һүҙбәйләнештәр кәмендә ике һүҙҙән тора: уның береһе **төп** һүҙ йәки **эйәртеүсе** (буйһондороусы) һүҙ, ә икенсеһе **эйәреүсе** (буйһоноусы) һүҙ була. Мәҫәлән, *әйәрле ат. Ат* – төп йәки эйәртеүсе һүҙ; *әйәрле* – эйәреүсе һүҙ. *Әйәрле* һүҙе *ат* һүҙен тулыландырып, асыҡлап килә.

**16.** Һүҙбәйләнештәрҙе уҡығыҙ. Эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙе өлгөләгесә һорауҙар ярҙамында билдәләгеҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен әйтегеҙ.

Өлгө: 1) *көҙгө урман;* (ниндәй? ×) 2) *киноға киттек.* (ҡайҙа? ×)

Мәктәптә булдым, мәктәпкә барабыҙ, дүрт дәфтәр, урмандан ҡайттыҡ, йыртҡыс ҡош, мәктәптең баҡсаһы, эшле кеше, һүҙһеҙ барҙы, беҙҙә лә көҙ, ураҡ өҫтө, йәшел япраҡ.

**17.** Һүҙбәйләнештәрҙе уҡығыҙ. Эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙең үҙ-ара нисек бәйләнеп килгәнен асыҡлағыҙ.

Ҡояшлы көн, урманға барҙыҡ, һеҙҙең атығыҙ, алтын көҙ, боронғо сәғәт, йылға аша сыҡтыҡ, ҡәләм менән яҙа, биш китап, ҡаланан ҡайттылар, көмөш шикелле саф, тау йылғаһы, ат ярата.

► Һүҙбәйләнештәрҙә һүҙҙәр үҙ-ара ике төрлө юл менән бәйләнеп килә:

1) эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙгә мәғәнәһе буйынса бәйләнеп килә. Уларҙың мәғәнә бәйләнеше эйәртеүсе һүҙҙән сығып бирелгән һорау менән белдерелә;

2) эйәреүсе һүҙҙәр эйәртеүсе һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар, шулай уҡ *аша, менән, һуң, тиклем, кеүек, шикелле, саҡлы, бирле* һәм башҡа шуның кеүек һүҙҙәр ярҙамында бәйләнеп киләләр.

| Мәғәнәүи бәйләнеш | Миҫалдар |
| --- | --- |
| Предмет һәм уның билдәһе | *сал Урал, саф шишмә, йәшел урман* |
| Хәрәкәт һәм уның билдәһе | *яҡшы уҡый, матур яҙа, моңло йырлай* |
| Билдә һәм уның күләме | *бик матур, уғата шәп, үтә йылғыр* |

| Грамматик бәйләнеш | Миҫалдар |
| --- | --- |
| Эйәлек заты ялғауы ярҙамында | *атайымдың кәңәше, колхоз ере* |
| Килеш ялғауҙары ярҙамында | *илемде яратам, лагерҙа булдым, урмандан ҡайттыҡ* |
| Бәйләүестәр ярҙамында | *әсәйем менән барам, йәй тураһында һөйләштек, төштән һуң ҡайтабыҙ* |

**18.** Бирелгән төп һүҙҙәргә һорауҙар буйынса эйәреүсе һүҙҙәр ҡуйып яҙығыҙ.

Өлгө: *йөҙә* (ҡайҙа?) — *йылғала йөҙә.*

Йөҙә (ҡайҙа? нисек?), һикерә (ҡайҙа? ҡайҙан?), сыға (ҡайҙан? ҡайҙа?).

**19.** Ике бүлектәге һүҙҙәрҙән, мәғәнәләренә ҡарап, һүҙбәйләнештәр схемаһын өлгөләгесә яһап ҡуйығыҙ.

*фура́ж*
*фе́рмер*
*тра́ктор*

*оҫтахана*
*хеҙмәт*

ниндәй?

Өлгө: *йәштәр уйыны.*

көҙгө, ҡунаҡтан, ярышҡа, етмеш төрлө, егет, оҫтаханала, хеҙмәтте, уҡыуҙы, тимерлеккә, тәҙрәнән

ел, ҡайтҡан, киткән, һөнәр, кеше, эшләй, еңеләйтеү, яҡшыртыу, ҡуйҙылар, ҡарап тороу

**20.** Һүҙбәйләнештәрҙе тикшерегеҙ, эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ. Эйәреүсенең нисә һүҙҙән торғанын әйтегеҙ.

нимә? ниндәй? нимә?

Өлгө: *икмәк еҫе; йылы икмәк еҫе.*

Йылы икмәк еҫе, урман аша үтеү, көмөш шикелле саф, икмәккә хөрмәт күрһәтеү, йыр һымаҡ яңғырай, ветеран менән осрашыу, мәктәпкә саҡлы йүгерҙем, автобус менән килдек, яҡшы сифат өсөн көрәш, тәбиғәтте ҡәҙерләйек.

► Ике һүҙҙән торған һүҙбәйләнештәр – **йыйнаҡ**, ә унан да күберәк һүҙҙән торғандары **тарҡау** була. Мәҫәлән, *икмәк еҫе* – йыйнаҡ, *йылы икмәк еҫе* – тарҡау һүҙбәйләнеш.

**21.** Башта һүҙбәйләнештәрҙе, унан һүҙҙәрҙе генә яҙып алығыҙ, һүҙбәйләнештәрҙең эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрен билдәләгеҙ. Эйәртеүсе һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә (исем, сифат, ҡылым) ҡарағанын әйтегеҙ.

Бер ҙә, бер көн, уҡыусы өсөн, уҡыусы өсөн дәреслек, сәскә һымаҡ, болан һымаҡ йүгерә, урман да, урманда йәшәй, ошондай уҡ, ошондай уҡ ҡағыҙ, бик йылы, бик йылы ҡаршыланылар, иң көслө, иң көслө кеше, көтөү-көтөү, көтөүгә китте.

**22.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, уның төп фекерен билдәләгеҙ. Билдәләнгән ике һөйләмде күсереп алығыҙ, һүҙбәйләнештәргә тарҡатып, эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙең үҙ-ара нисек бәйләнеп килгәнен асыҡлағыҙ.

КӨҘ

Нарат еләктәре беште инде,
Көндәр һалҡыная төштө инде;
Көтөү-көтөү ҡоштар күк диңгеҙҙең
Арттарына ҡарай осто инде.

**Төрлө кейем менән биҙәнгән**
**Урман, ағас ҡалды ялтырап.**
**Тәмле еҫтәр сәскән гөл-сәсәктәр**
**Ҡаулан булды, барыһы шылтырап.**

Ҡояшҡай ҙа хәҙер һирәк көлә,
Ҡаплай уны томан, болоттар,
Оҙаҡламай һалҡын йәштәр менән,
Көҙкәй илай башлар — буҫығыр...

*(К. Бальмонт)*

**23.** А. Костиндың «Ураҡ өҫтө» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Унда ниндәй миҙгел һүрәтләнгән? Кемдәрҙе күрәһегеҙ? Улар ни эшләй? Ҡайһы заман һүрәтләнгән? Ҡайҙан белдегеҙ? Рәссам һүрәттә ниндәй төҫтәр ҡулланған? Ни өсөн? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

**ТҮ**

**24.** Башта эйәртеүсе һүҙе ҡылым, аҙаҡ эйәртеүсе һүҙе исем булған һүҙбәйләнештәрҙе күсереп алығыҙ. Аҙаҡ өлгө буйынса эшләгеҙ. Эйәртеүсе һүҙҙе билдәләгеҙ.

ниндәй?

Өлгө: *юртаҡ ат.*

Юртаҡ ат, оҫтаханаға китте, күҙгә ҡояш, хәбәрҙе ишетте, ситтән килгән, аш-һыуға оҫта ҡыҙ, һөнәрҙе һайлау, эштән уңып ҡайттылар, машина юлы, трактор менән ташыйҙар, урман юлы, математика буйынса белгес, белемгә ынтыла, ил тураһында шиғыр.

- Ялғауҙары булған исемдәрҙең ниндәй килештә торғанын да әйтегеҙ.

**25.** Өлгө буйынса һүҙбәйләнештәрҙәге һүҙҙәрҙең урындарын алмаштырығыҙ: тулы мәғәнә аңлатҡан яңы һүҙбәйләнеш йәки өсөн ҡайһы бер һүҙҙәрҙе үҙгәртергә лә мөмкин.

ниндәй? (нимәнең?)

Өлгө: *алһыу сәскә – сәскәнең алһыуы.*

Алһыу сәскә, тормош йәме, күр тауыш, матур тормош, йәшәү шатлығы, хеҙмәткә дан.

**26.** Тексты уҡығыҙ, төп фекерҙе сағылдырған һөйләмде яҙып алығыҙ. «Сифат + исем» һәм «исем + исем» рәүешендәге өсәр һүҙбәйләнеш яҙығыҙ. Ҡайһы бер исемдәрҙең ни өсөн ҙур хәреф менән яҙылғанын аңлатығыҙ.

Сал Урал һырттарынан таңдың тәүге нурҙары ҡала өҫтөнә һибелде. Йорттарҙан кешеләр иртәнге сменаға эшкә ашыҡтылар. Улар араһында, ныҡ

баҫып, тимерсе Фәйзулла Вәлиев тә атлай. Йырсы, ҡурайсы һәм тимерсе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәйзулла Абдрахман улы Вәлиев.

Матур йыр һымаҡ, өр-яңы көн тыуа ерҙә. Ҡотло булһын яңы көн! Хеҙмәт һәм ижад шатлыҡтары алып килһен ул һеҙгә, кешеләр! *(Р. Шәкүрҙән)*

★ **27.** Һөйләмдәрҙе өлгөләгесә яҙып тикшерегеҙ, һүҙбәйләнештәрҙе күрһәтегеҙ, эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙе әйтегеҙ.

*мәҙәниәт атҡаҙанған*

*даръя даирә*




Саф һыулы шишмәләр даръяларға ҡушыла, уларға көс-ҡеүәт өҫтәй. Дүртөйлө «Шишмә»һенең игене лә шул шишмәләргә оҡшай. Уның ағымы ла илебеҙ бураларына инеп тула. Тыуған илебеҙҙең көс-ҡеүәтен арттыра. Улар хеҙмәт кешеләренең тормошон яҡшырта, аҙыҡ-түлекте ишәйтеүгә ҙур өлөш индерә. *(З. Исмәғилевтән)*

**Һүҙбәйләнеште тикшереү тәртибе**

1. Эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙе әйтергә, эйәртеүсе һүҙҙән эйәреүсе һүҙгә һорау ҡуйырға.
2. Эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен әйтергә.

Һүҙбәйләнеште тикшереү өлгөһө

**Телдән:**

*саф шишмә*

Был һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һүҙ – *шишмә. Шишмә* (ниндәй?) *саф*. *Саф* – эйәреүсе һүҙ. Төп (эйәртеүсе) һүҙ – исемдән, эйәреүсе һүҙ сифаттан килгән.

**Яҙып:**

ниндәй?

*саф* *шишмә* ×

(сифат) (исем)

**28.** Һүҙбәйләнештәрҙе телдән, тик һуңғыһын ғына яҙып тикшерегеҙ.

Көҙгө ауыл, зәңгәр һауа, иген менән тулған, һандарға иғтибар итәйек, ихлас һөйләшер, тәжрибәһе менән уртаҡлаша.

## § 3. Һөйләм

★ Һүҙбәйләнештәрҙе иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Ул һүҙбәйләнештәрҙән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Уның өсөн нимә эшләргә кәрәклеген әйтегеҙ, һөйләмдәрегеҙҙе яҙығыҙ.

1. Шәрифулла ағай һөйләй, бик серле тауыш, тауыш менән һөйләй, нимә тураһындалыр һөйләй, әңгәмә һөйләй. 2. Ҡалған дүртеһе, дүртеһе ултыра, тын да ала алмай, тыңлап ултыра. 3. Байыр яҡҡа тәгәрәгән, тәгәрәгән ҡояштың, ҡояштың нурҙары, һарғылт нурҙары, нурҙары йымылдайҙар, Шәрифулланың мыйыҡ остарына, ысланған мыйыҡ остарына, мыйыҡ остарына төшөп, төшөп йымылдайҙар. 4. Йымылдайҙар ҙа төшәләр, уның ирененә, аҫҡы ирененә, һикереп төшәләр. 5. Шуға күрә уның ауыҙынан, ауыҙынан сыҡҡан, сыҡҡан һәр һүҙе, ниндәйҙер серҙе, бер серҙе, яңы серҙе, серҙе аса һымаҡ. *(М. Кәримдән)*

★ **29.** Схеманы тикшереп, ни өсөн эйә менән хәбәрҙең һөйләмдең грамматик нигеҙе тип аталғанын төшөндөрөгөҙ.

1. Зарифтар комбайнды төн буйы төҙәттеләр. 2. Улар таң атҡанын да һиҙмәнеләр. 3. Шул төндә Зариф тағы бер хәҡиҡәткә төшөндө. 4. Тырышҡан кеше һәр саҡ еңеп сыға. 5. Таң алдынан подшипниктар йыйылып бөттө.

> А ң л а т м а. Зарифтар (кемдәр?) – эйә, йәғни һөйләмдең эйәһе; төҙәттеләр (ни эшләнеләр?) – хәбәр, йәғни һөйләмдең хәбәре; комбайнды (нимәне?) – тултырыусы, йәғни һөйләмдең тултырыусыһы; төн буйы (күпме?) – хәл, йәғни һөйләмдең хәле.




● Ҡалған һөйләмдәрҙең дә схемаларын яһағыҙ.

**30.** 1. Уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең сиктәрен билдәләп, тыныш билдәләрен ҡуйып, күсерегеҙ. Ҡысҡырып уҡығанда тауыштың үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ (һөйләмдең аҙағында тауыш төшә). 2. Тәүге ике һөйләмдә эйә аҫтына – бер, хәбәр аҫтына икешәр һыҙыҡ һыҙығыҙ.

Беҙҙең телдә йөҙ меңләгән һүҙ бар мин *икмәк хеҙмәт халыҡ* һүҙҙәрен беренсе урынға ҡуям улар дәүләтебеҙҙе тотоп тороусы өс тамырға әйләнгән ул тамырҙар бер-береһенә тығыҙ үрелгән икмәк менән хеҙмәтте белмәгән кеше үҙ халҡының улы булыуҙан туҡтай хеҙмәтте тирҙе онотҡан кеше икмәктең дә ҡәҙерен белмәй. *(В. А. Сухомлинский буйынса)*

► Һөйләмдәр ярҙамында беҙ уй-тойғоларыбыҙҙы белдерәбеҙ, бер-беребеҙгә һорауҙар бирәбеҙ, аңлашабыҙ, үтенестәр, кәңәштәр әйтәбеҙ, бойорабыҙ һәм башҡа нәмәләр тураһында мөрәжәғәт итәбеҙ.

Һөйләмдең баш киҫәктәре уның грамматик нигеҙен тәшкил итә. Уның үҙенә генә хас тамамланыу интонацияһы була.

Һөйләм аҙағында нөктә, һорау йәки өндәү билдәләре ҡуйыла. Мәҫәлән: *Ҡоштар йылы яҡҡа китә. Көҙгө яланда һеҙ ни күрәһегеҙ? Ниндәй матур һин, алтын көҙ!*

Һөйләм – аралашыу берәмеге.

**31.** Уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең сиктәрен билдәләп, тейешле тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ. Берәр һәм бер нисә һүҙҙән торған һөйләмдәрҙе айырып күрһәтегеҙ. Улар һөйләмдең ниндәй билдәләрен үҙ эсенә ала?

Көҙ сентябрь урталары тымыҡ ҡыу үләндәр өҫтөнә һары ҡыҙғылт япраҡтар яуа өҫкө урамда һигеҙ мөйөшлө өй күкрәк киреп ултыра Ҡотлоғужаның өйө ауылдағы башҡа өйҙәр бер-береһенән әллә ни айырылмай мал-тыуар урманға иртәнсәк үҙе сығып китә кис үҙе әйләнеп ҡайта. *(Н. Мусиндан)*

● 1. Тыныш билдәләрен ҡуйып күсерегеҙ, тексҡа исем бирегеҙ. 2. Текстың йөкмәткеһенән сығып, уны өлөштәргә бүлегеҙ, уларҙы уҡып күрһәтегеҙ. 3. Һүҙбәйләнеш менән һөйләмдең үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ, уларҙы таблицаға яҙығыҙ.

| Һүҙбәйләнеш | Һөйләм |
|---|---|
| – кәмендә ике һүҙҙән тора | – тамамланған уй-фекерҙе белдерә |
| – айырым интонацияһы булмай | – ҙур хәреф менән башлана, кәмендә бер тыныш билдәһе була |

## § 4. Хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәр

★ Һәр һөйләмдең интонацияһына ҡарап, уларҙың аҙағына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙығыҙ. Ниндәй тыныш билдәләре ҡуйғанығыҙҙы дәлилләгеҙ.

Бына ҡапыл ҡапҡа асыла Мин яңынан һандыҡ өҫтөнә һикереп менәм дә тәҙрәгә ҡапланам Ана әсәйем, әсәкәйем ҡайтып инде Әсәйем, әсәкәйем Ә ниндәй бәләкәс ҡыҙҙы етәкләгән һуң ул *(М. Кәримдән)*

► Әйтелеү маҡсатына ҡарап, һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырып йөрөтәләр.

Нимәлер тураһында хәбәр итеүҙе белдергән һөйләмде – **хәбәр һөйләм**, һорауҙы эсенә алған һөйләмде – **һорау һөйләм**, ә кемде лә булһа эш-хәрәкәткә өндәүҙе, бойороуҙы, һоҡланыуҙы белдергән һөйләмде **өндәү һөйләм** тип атайҙар.

**32.** Бирелгән ике һөйләмде тейешле интонация менән уҡығыҙ, сағыштырығыҙ. Уларҙың мәғәнә буйынса айырмаһын билдәләгеҙ.

Матур ҙа инде үҙебеҙҙең баҡса!
Баҡсалағы йәшелсәләрҙе ваҡытында йыйып алығыҙ!

► Өндәү һөйләм өндәүҙе, саҡырыуҙы, һөйләүсенең эш-хәлгә булған ҡарашын, хис-тойғоһон белдерә.

Бойороҡ һөйләм эште эшләргә бойороуҙы, үтенеүҙе, теләкте, кәңәште белдерә.

Хәбәр һөйләмдәрҙе уҡығанда, ғәҙәттә, башта тауыш күтәрелә бара (↗), унан бер аҙ пауза (|) яһала, һөйләмдең аҙағына табан тауыш түбәнәйә (↘).

**33.** Түбәндәге һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Тәүге һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып яҙығыҙ.

1. Тыуып килгән иртә | матур һәм йылы ине.

2. Бәпкә үләндәрендә ысыҡ тамсылары | һикерешкән төҫлө тойола.

**34.** 1. Ҡуйылған паузаларға иғтибар итеп, хикәйәне уҡығыҙ. Һуңғы ике һөйләмдә паузаның урынын үҙегеҙ билдәләп, уҡығыҙ. Уларҙың әйтелешен уҡтар менән күрһәтегеҙ. 2. Хикәйәне, йөкмәткеһенә ҡарап, өлөштәргә бүлегеҙ. Һәр өлөштөң төп фекерен әйтегеҙ, һуңынан хикәйәне тотош һөйләгеҙ.

## ИҪКЕ ҠЫШЛАУ

Элек бында | бәләкәй генә утар булған. Пугачёв яуында ҡатнашыусылар | ошонда өс-дүрт өй һалған, | донъя көтә башлаған. Аҙаҡ | утар ҙурайған, | ауылға әйләнгән. Колхозлашыу йылдарында | **тары** сәсеп ҡарағандар | – уңмаған. Һуңынан | артель асылған, | урман кәсебе көсәйеп киткән. Ауыл кешеләре | ағас ҡырҡҡан, | һал ағыҙған, | һалабаш **һыҙырған.**

Үткән һуғыш йылдарында | улар әрҙәнә өйгәндәр, | паровоздарға, тракторҙарға яғырға «чурка»* сапҡандар, арҡан ишкәндәр, | септә һуҡҡандар. Дүрт-биш кеше дегет ҡайнатҡан, туғын бөккән. Дәртлеләр һунарға сыҡҡан, балыҡ тотҡан. *(С. Шәриповтан)*

- Тәүге һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып яҙығыҙ.

нимә?

Өлгө: *балыҡ торорға.* ×

---

* Чурка – 10–15 см оҙонлоғондағы һәм 5–8 см киңлегендәге утын киҫәге. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уны яғып тракторҙы йөрөткәндәр.

**35.** Һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡырға өйрәнегеҙ. Һорауҙы сағылдырған һүҙҙе әйткәндә тауыш күтәрелгәнен (↑) иҫегеҙҙә тотоғоҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Йәй лагерҙа кемдәр↑ булды? | 1. Йәй лагерҙа уҡыу↑сылар булдымы? |
| 2. Уҡыусылар лагерҙа ↑ҡасан булдылар? | 2. Уҡыусылар лагерҙа ↑йәй булдылармы? |
| 3. Йәй уҡыусылар ↑ҡайҙа булдылар? | 3. Йәй уҡыусылар ↑лагерҙа булдылармы? |

● 1. Һул бағаналағы һөйләмдәрҙең һорауҙары ниндәй һүҙҙәр менән бирелгән? Уңдағы бағанала һорау нисек белдерелгән? Ҡайһы һүҙҙәрҙе күтәренке тауыш менән уҡығанығыҙҙы әйтегеҙ.

2. Бирелгән һөйләмдәрҙе башта шул көйө, аҙаҡ хәбәр, өндәү, бойороҡ һөйләмдәр итеп үҙгәртеп уҡығыҙ, интонация үҙгәрешенә һәм ҡайһы һүҙҙе әйткәндә тауыш күтәрелеүенә иғтибар итегеҙ.

**36.** Түбәндәге ҡылымдарҙы файҙаланып, көҙгө көн темаһына һөйләмдәр төҙөгөҙ. Үҙегеҙ төҙөгән һөйләмдәрҙең ҡайһылары хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр икәнен айырып яҙығыҙ.

Һарғая башланы, йәйрәп ята, күҙ һалығыҙ, күргәнегеҙ бармы, ҡайҙа киттегеҙ, алтынлана, геүләй, оҙаталар.

**37.** Тәүҙә һөйләмдәрҙе эстән уҡығыҙ. Уларҙың сиктәрен билдәләгеҙ. Һәр һөйләмдең аҙағына ниндәй тыныш билдәһе ҡуйылғанын аңлатығыҙ, һөйләмдәрҙе төрлө интонация менән ҡат-ҡат уҡып ҡарағыҙ. Кәрәкле тыныш билдәләрен ҡуйып, күсерегеҙ.

...Ҡайҙарҙа ғына булманым ниҙәр генә күрмәнем ләкин бер ҡасан да турайғырҙың һомғол һыны күҙ алдымдан китмәне ауылыма ҡайтып уға оҡшаған

күпме толпар үҫтерҙем береһенән-береһе матурҙар килмәгән ерҙәре юҡ улар миңә һуғышта ятып ҡалған турайғырҙы хәтерләтә ҡәҙерле миңә донъялағы һәр бер ат. *(Т. Килмөхәмәтовтан)*

● Эйәртеүсе һүҙе ҡылым булған һүҙбәйләнештәрҙе айырып яҙып алығыҙ. Эйәреүсе һүҙҙең ниндәй һорауға яуап биргәнен әйтегеҙ. Өс һүҙбәйләнештең схемаһын эшләгеҙ.

**ТҮ** **38.** Инша темалары бирелгән. Уларҙы сағыштырығыҙ. Шуларҙың ҡайһылары һеҙҙең үҙ мөнәсәбәтегеҙҙе белдереүҙе һорап тора? Темаларҙы яҙып алығыҙ, иншаның төп фекерен сағылдырған һүҙҙең аҫтына һыҙығыҙ. Оҡшаған темаға инша яҙығыҙ. Уға ниндәй эпиграф һайлар инегеҙ?

| | |
|---|---|
| Уҡыуҙар башланды. | Мәктәбем, белем шишмәм минең! |
| Күңелле уйын. | Беҙҙең яратҡан уйыныбыҙ. |
| Беҙҙең туристик поход. | Поход миңә ниңә оҡшаны? |
| Уҡыусым, һәр минутың ҡәҙерле һинең! | Беҙ нисек уҡыйбыҙ. |
| Беҙҙең класс малайҙары. | Беҙ дуҫ йәшәйбеҙ. |

## § 5. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Йыйнаҡ һөйләм

★ Өҙөктө уҡығыҙ, кәрәкле урында пауза яһарға онотмағыҙ. Һәр һөйләмдең нигеҙен табығыҙ, уларҙың ниндәй һөйләм киҫәге булыуын билдәләп, ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнлеген әйтегеҙ. Өлгөнө ентекләп өйрәнегеҙ.

Өлгө: Быйыл көҙ Аҡселән буйҙарына | үтә матур килде. ||

Һөйләмдең нигеҙе – *Көҙ килде. Килде* (нимә?) *көҙ. Көҙ* (ни эшләне?) *килде.* Эйә – *көҙ,* исемдән килгән, берлектә, төп килештә; хәбәр – *килде,* ҡылымдан килгән, үткән заманда, барлыҡ формаһында.

Быйыл көҙ Аҡселән буйҙарына үтә матур килде. Көндәр һаман сыуаҡ, йылы тора. Күктә лә, ерҙә лә

күкшел монар еңел генә дерелдәй. Ҡояш байығанға тиклем үрмәкселәр ауҙары менән ағалар ҙа ағалар. Яландағы эштәр бөтөнләйгә тамамланды. Тик унда-бында ғына тракторҙар ер һөрә. Ер башынан боролғанда ялтыр төрәндәр күҙҙәрҙе сағылдыра. Ашыҡмай, яй ғына көҙ килә. *(Б. Бикбайҙан)*

● Текстан эйәртеүсе һүҙе сифаттан, исемдән, рәүештән килгән өсәр һүҙбәйләнеш һайлап алып яҙығыҙ.

▶ Эйә менән хәбәр һөйләмдең **баш киҫәктәре** була. Улар **һөйләмдең грамматик нигеҙен** барлыҡҡа килтерә. Эйәнең аҫтына – бер, хәбәрҙең аҫтына ике һыҙыҡ һыҙыла: *Бөркөттәр бейек оса.*

▶ Эйә менән хәбәрҙән генә торған һөйләмдәр **йыйнаҡ һөйләм** тип атала: *Ҡар яуа. Ҡояш ҡалҡа.*

**39.** Мәҡәлдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Уларҙың төп фекерен әйтегеҙ. Эйә менән хәбәр аҫтына һыҙығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләп, таблицаны тултырығыҙ.

Эшсән эштән туймаҫ. Уҡыған уңыр, уҡымаған туңыр. Кем эшләмәй, шул ашамай. Берәүҙән икәү яҡшы. Ҡабалан эшкә аҡыл эйәрмәй. Егәрлеләрҙең ҡулы етәү. Ере байҙың иле бай. Ялҡауҙың дуҫы – йоҡо. Эшләй белгән ашай ҙа белер.

| Һөйләм тәртибе | Эйә | Һүҙ төркөмө | Хәбәр | Һүҙ төркөмө |
|---|---|---|---|---|
| 1. | *Эшсән* | сифат | *туймаҫ* | ҡылым |
| 2. | | | | |

● Эйә менән хәбәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен асыҡлағыҙ, ҡағиҙә сығарығыҙ һәм миҫалдар менән нығытып ҡуйығыҙ.

**40.** Уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең эйә менән хәбәрен табығыҙ, аҫтарына тейешле һыҙыҡтар һыҙығыҙ. Эйәнең ниндәй килештә тороуын һәм ниндәй һорауға яуап биргәнен әйтегеҙ.

АЛАТУБА

Алатуба тыштан күгәрсенгә оҡшаған. Ул урманда йәшәй, шунда бала сығара. Алатуба балаларына ҡырлыҡ, алабута, иген бөртөктәре ашата. Ундай үҫемлектәр урманда үҫмәй. Алатуба емде боғағына тултырып, алыҫтағы игенлектән ташый. Ул емгә барғанда ла, ҡайтҡанда ла талпынып, елкенеп оса. Ҡоштар ҙа балаларын бик ярата шул!
*(Ғ. Ишбулатов)*

● Тәүге ике һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып тикшерегеҙ, эйәртеүсе һүҙ менән эйәреүсе һүҙҙең үҙ-ара бәйләнеү сараларын асыҡлағыҙ.

**41.** Шиғыр өҙөгөн тасуири уҡығыҙ. Унда ҡайһы осор һүрәтләнгәнен һөйләгеҙ. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен табығыҙ. Хәбәрҙәрҙең ниндәй һорауға яуап биргәнен әйтегеҙ һәм уларҙың ҡайһы һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ.

Һеҙ күрҙегеҙ:
бик ҙур һуғыш
Тетрәтте бөтә ерҙе,
Алыҫта бомба ярылды,
Тулҡыны бында килде.
Һуғыш монары ҡапланы
Ватандың яҡты күген.
Беҙҙең дә иңдәр күтәрҙе
Һуғыштың ауыр йөгөн.

*монар*
*томан*
*ҡыраү*

*заво́д*
*инжене́р*
*ҡорос*

Заводҡа китте ҡайһығыҙ,
Ҡайһығыҙ ҡырҙа булды:
Берегеҙ ҡорос ҡайнатты,
Берегеҙ иген урҙы... *(Р. Нигмәти)*

**42.** 1. Өҙөктө уҡығыҙ, унын йөкмәткеһен һөйләгеҙ. 2. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәләгеҙ, уларҙың ниндәй һорауҙарға яуап биргәнен тикшерегеҙ. 3. Хәбәрҙе белдергән ҡылымдарҙы уға эйәреп килгән һүҙҙәре менән һүҙбәйләнештәр яһап яҙып алығыҙ.

Икмәккә кеше йөрәк йылыһын, күңел хисен бирергә тырышҡан. Иҙәнгә икмәктең бер валсығын төшөрөү ҙә ҙур яҙыҡ һаналған. Кеше уң ҡулы менән икмәкте ашағанда, валсыҡ төшөп китмәһен өсөн, һул ҡулының усын эйәк аҫтына ҡуйған. Ашъяулыҡта ҡалған энә күҙендәй валсыҡты ла кеше, бармағына йәбештереп, ауыҙына ҡапҡан. Бер генә әҙәм дә икмәк һыныға янынан тыныс үтмәгән. Икмәк кешене әҙәплелеккә, намыҫҡа, иплелеккә өйрәткән. Икмәккә бағышлап, бик күп китаптар яҙылған. *(«Икмәккә баш эйәйек» китабынан)*

**43.** Эйәнән хәбәргә һорау биреп, һөйләмдәрҙе тикшерегеҙ. Тәүҙә эйә менән хәбәрҙе, унан хәбәрҙе уға ҡараған эйәрсән киҫәге менән яҙып алығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе мәғәнәһе яғынан тағы ниндәй һүҙҙәр менән алмаштырып булғанын әйтегеҙ.

Агроном Таһир ағай культивацияның тәрәнлеген үлсәне. Ул тракторсыларҙың эшенән ҡәнәғәт булды. Сөм ҡара тупраҡтан **быу борҡорай.** Унан сөскөл еҫ **аңҡый.** Ҡояшта ҡара янған механизаторҙар Таһир ағай яғына **йүнәлделәр.** *(Т. Килмөхәмәтовтан)*

● Һөйләмдәрҙе йыйнаҡ һөйләм итеп яҙып алығыҙ, һығымта яһағыҙ.

**44.** 1. Тексты уҡығыҙ. Исем бирегеҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. 2. Һәр һөйләмдең баш киҫәктәрен күсереп алып, ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ.

Бер ваҡыт баяғы тейен имән башынан төштө[4]. Алйырҙан үҙ ояһынан сыҡты. Улар ҡапма-ҡаршы осраштылар. Күрәһең, алйырҙан тейенде дошман күрә. Ул шунда уҡ уның өҫтөнә ташланды. Ләкин тейен еңел генә бер яҡ ситкә һикерҙе. Алйырҙан уның артынан йүгерҙе. Тейен һикерҙе. Алйырҙан сыйылданы, кире үҙенең тупраҡ өйөмө янына килде...

Ә тейен үрҙә, көслө имән ботаҡтары араһында, һаман да һикергеләп йөрөнө. Оҙаҡламай ул ергә төштө, тағы ла сәтләүек йыйырға тотондо. Мин шул тиклем яраттым шунда тейенде. *(А. Карнайҙан)*

| *алйырҙан*<br>*тейен*<br>*сәтләүек* | *баяғы*<br>*ояһынан*<br>*яраттым* |
|---|---|

## § 6. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Тарҡау һөйләм

★ Һөйләмдәрҙе өлгөләгесә тикшерегеҙ. Эйә менән хәбәргә эйәреп, уларҙы асыҡлап килгән һүҙҙәрҙе һорауҙар ярҙамында анализлағыҙ.

Өлгө:
*Уя эсендәге тумалаҡ юл беҙҙе тау башына алып менә.*



Беҙҙең ауылды дүрт яҡтан ҡуйы урманлы бейек-бейек тауҙар уратып алған. Шул тауҙар итәгенән сылтырап ҡына саф көмөш һыулы шишмә ағып сыға. Шатлыҡ йырын йырлай-йырлай ул иртәнге томан эсенә инеп юғала.

● Тыуған ауылығыҙҙың йә туғандарығыҙ йәшәгән ауылдың тирә-яғын тасуирлап һүрәтләгеҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған иң матур һөйләмдәрегеҙҙе дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.

**45.** Эйә менән хәбәрҙән генә торған һөйләмдәргә эйәрсән киҫәктәр өҫтәп, таркатып яҙығыҙ.

Таң ата. Яҡтылыҡ тарала бара. Ҡояш ҡалҡты. Ҡоштар сутылдаша. Көтөү сыға. Тирә-яҡ йәнләнә.

Өлгө: *Тирә-яҡ йәнләнә. – Тирә-яҡ яҡты нурға сумып йәнләнә.*

► Эйәрсән киҫәктәре булған һөйләмде **тарҡау һөйләм** тип атайҙар. Мәҫәлән: *Бейек тауҙар артынан алланып ҡояш ҡалҡа.*

Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәренә аныҡлаусы, тултырыусы һәм хәлдәр инә.

**46.** 1. Өҙөктө уҡығыҙ, фекер алышығыҙ. Текстҡа исем бирегеҙ. 2. Һөйләмдәрҙә эйәрсән киҫәктәрҙе табығыҙ. Уларҙың эйәне йә хәбәрҙе асыҡлап килгәнен әйтегеҙ.

Тәрәндән, ер ҡуйынынан, атылып килеп сыға ла сылтырап ағып китә шишмә һыуы. Һәр үткән берәү шишмә һыуын ауыҙ итмәй үтмәҫ. Ҡош-ҡорт шунда һыуларға килер. Һандуғас, сәпсек кинәнә-кинәнә һыуында ҡойонор. Һандуғасы, шишмә тауышына ҡушылып, өҙҙөрөп һайрап та ебәрер.

Тыуған ауылымдың бер шишмәһен Зиннәт ағай ҡарап, таҙартып торор ине. Инешенә бура ла бураны.

Зиннәт ағай оло яуҙа башын һалды. Ул шишмәһенә әйләнеп ҡайта алманы. Илгә даны ҡайтты ла,

исеме шишмәһенә ҡалды. Шишмә ағыуҙан туҡтаманы. Уның исеме лә онотолмаҫ. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

● Тәүге ике һөйләмде һүҙбәйләнештәргә айырып яҙығыҙ.

(★) Аҙаҡ схема буйынса йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәргә ҡағиҙә сығарығыҙ.




## § 7. Аныҡлаусы

★ Өҙөктәрҙе уҡығыҙ, уларҙы сағыштырығыҙ. Ҡайһы өҙөктә Сәлимә менән егет образдары тулыраҡ бирелгән? Ни өсөн? Үҙ фекерегеҙҙе өҙөктәге миҫалдар менән иҫбатлағыҙ.

1. Борон Һаҡмар буйындағы бер ауылда ярлы ғына ғаиләлә Сәлимә исемле ҡыҙ булған. Уны шул ауылдың ярлы егете яратҡан. Ул ҡурайсы һәм йырсы икән. Был ике йәш йөрәк осрашып, сер уртаҡлашҡандар. Егет Сәлимәгә бағышлап көй сығарған. Әммә уларҙың шатлығы оҙаҡҡа бармаған. Ялан яғынан бер бай килеп, Сәлимәне килен итеп алып ҡайтып киткән. Ләкин унда Сәлимә тыныслыҡ таба алмай. Кейәүенән ҡасып китә. Ирәндектең иң бейек ҡаяһынан ташлана. Һөйгән егете килеп өлгөрә алмай. «Сәлимәкәй» йыры шунан ҡалған.

2. Борон заманда Һаҡмар буйындағы бер ауылда, ярлы ғына ғаиләлә һылыуҙан-һылыу, уңған, ололарға ихтирамлы, ихлас күңелле, йыр-моңға оҫта Сәлимә исемле ҡыҙ булған. Уны шул ауылдың мөһабәт кәүҙәле ярлы егете өҙөлөп яратҡан. Ул да бик егәрле булған, өҫтәүенә, оҫта ҡурайсы һәм йырсы ла икән. Был ике йәш йөрәк осрашып, сер уртаҡлашҡандар. Егет Сәлимәгә бағышлап моңло көй сығарған. Әммә уларҙың шатлығы оҙаҡҡа бармаған.

Ялан яғынан бер бай килеп, Сәлимәне килен итеп алып ҡайтып киткән. Ләкин унда Сәлимә тыныслыҡ таба алмай. Кейәүенән ҡасып китә. Ирәндектең иң бейек ҡаяһынан ташлана. Һөйгән егете килеп өлгөрә алмай. «Сәлимәкәй» йыры шунан ҡалған.

- 1. Текстарға ниндәй уртаҡ исем бирергә мөмкин?

2. *Ниндәй? ҡайһы? нисә? ҡайҙағы? кемдең? нимәнең?* һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе үҙҙәре асыҡлап килгән һүҙҙәр менән бергә күсереп, һүҙбәйләнеш яһап яҙығыҙ. Эйәреүсе һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ.

Өлгө:

| Һүҙбәйләнеш | Һүҙ төркөмө | Нимә белдерә? |
|---|---|---|
| *ярлы* (ниндәй?) *ғаиләлә* | *ярлы* – сифат | билдәне |
| *бер* (нисә?) *бай* | *бер* – һан | иҫәпте |
| | | |

**47.** Уҡығыҙ. Тәбиғәтте һүрәтләүҙә ҡулланылған аныҡлаусыларҙы табығыҙ. Уларҙы асыҡлап килгән исемдәр менән бергә алып, һүҙбәйләнештәр яһағыҙ.

1. Тау битендә йәш имәндәр йоҡлай
Был тынлыҡтың алтын биләүендә.
Түгелерҙәй булып еләк бешкән
Салауаттың тыуған йәйләүендә.

* * *

2. Ҡыҙарып та ҡояш байып бара,
   Ҡыҙғылт нурҙар аға үләндәргә...

* * *

3. Донъя нурға сумған икән,
   Сыуаҡ көҙҙөң иртәһе.
   Оло болан һырты һымаҡ,
   Ҡайынлы тау итәге. *(Т. Йосопов)*

*ко́мплекс*
*асфа́льт*
*костёр*
*комбина́т*
*брига́да*

**48.** Сифаттарҙан йәйәләр эсендәге һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр яһағыҙ. Һуңынан яҙып алығыҙ.

Өлгө: *ҙур* (ниндәй?) ауыл, *бейек* (ниндәй?) тау.

Ҙур, дөрөç, бейек, текә, **ҡаты** (ауыл, тау, һүҙ, яр, һыуыҡ); биш, дүртенсе, **урмандағы,** уҡытыусының (аҡлан, дәфтәр, класс, китап); илгәҙәк, ғәҙәти, оялсан, **зиһенле**, ҡунаҡсыл, һепертмә (халыҡ, бала, буран, эш).

● Билдәләнгән һүҙҙәр менән яһалған һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ. Һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөп, һорауҙарын яҙып ҡуйығыҙ.

► Һөйләмдә предметтың берәй билдәһен, иçәбен, күләмен асыҡлап килгән эйәрсән киçәк **аныҡлаусы** тип атала.

Аныҡлаусылар *ниндәй? ҡайһы? ҡайҙағы? нисә? нисәнсе? күпме? кемдең? нимәнең?* һорауҙарына яуап бирә.

Аныҡлаусының аçтына тулҡынлы һыҙыҡ һыҙыла: *Малайҙар йыуан бүрәнәләрҙән өс кәшмәк* бәйләнеләр.*

* Кәшмәк – ике-өс бүрәнәне бергә бәйләп яһалған һал. Уны кәмә урынына файҙаланалар.

● Аныҡлаусыларҙың ниндәй һүҙ төркөмдәре менән биреләүе тураһында таблица тултырығыҙ, миҫалдарҙы үҙегеҙ уҡыған әҫәрҙәрҙән алығыҙ йә уйлап яҙығыҙ.

| Һүҙ төркөмдәре | Миҫалдар |
| --- | --- |
| Сифат | *Аҡйондоҙ* ***һуңғы*** *көлтәһен бәйләне.* |

**49.** Һорауҙар урынына белешмәләге һүҙҙәрҙе ҡуйып яҙығыҙ. Аныҡлаусының аҫтына һыҙығыҙ.

Бөгөн аяҙыған. (Ҡайҙағы?) (ниндәй?) болоттарҙың ситтәрен көмөшкә ҡаймалап, таң яҡтыра. Хәҙер инде ҡоштар (ниндәй?) саҡ үтһә лә, (нимәнең?) үҙ матурлығы бар. (Ҡайһы?) Үркәстау битләүендәге ағастарға көҙ үҙенең (ниндәй?) буяуҙарын һипкән. Һауа саф, (ниндәй?) һалҡынлыҡ (күпме?) тәнде рәхәт ҡытыҡлай, тороп йүгерге килә. Тынлығы һуң, тынлығы ниндәй! (Күпме?) өн сығарһаң да, (күпме?) ауыл тертләп уяныр төҫлө. *(Н. Мусин буйынса)*

*Белешмә өсөн һүҙҙәр:* офоҡтағы, ҡыйғас-ҡыйғас, аҡһыл, һайрар, көҙҙөң, шаршылағы, төрлө төҫтәге, иртәнге, бөтә, бер.

**50.** 1. Тексты тасуири уҡып сығығыҙ, фекер алышығыҙ. 2. Аныҡлаусыларҙың һөйләмдәге ролен билдәләгеҙ. Текстан аныҡлаусыларҙы табып, үҙҙәре асыҡлап килгән һүҙҙәре менән бергә күсереп алығыҙ.

Бынан 20–25 йылдар элек Туҡ йәки Соран һыуы буйындағы ерҙәрҙең барыһы ла башҡорт ҡулында ине. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ 25–30 саҡрымдарға йәйелеп, иркен сәхрәлә яталар. Бер ерҙән туйһа, икенсе ергә күсеп, бейә һауа, ҡымыҙ эшләр ине. Тамаҡтары туҡ, өҫтәре бөтөн, ҡатын-ҡыҙҙары баштан-аяҡ көмөш тәңкәләргә солғанып йөрөйҙәр ине.

Ул арала ерҙәребеҙҙең юҡ ҡына хаҡҡа ситтәргә һатыуҙарын һәм яныбыҙға башҡаларҙың килеп ултыра башлағанлығы күренде. Бер яҡтан, Һамар һәм Һарытау байҙары меңәр-меңәр дисәтинә ерҙәребеҙҙе биләй, ат заводы һала, бөтөн ерҙәргә иген сәсә башланылар. Икенсе яҡтан, немец һәм хохол ауылдары пәйҙә була башланы.

Яңғыҙ ата-бабаларыбыҙҙың малдары кәмеүе, ерҙәре таратыла башлауы арҡаһында башыбыҙға төрлө бәхетһеҙлектәр килә башлағанын һиҙҙек[4]. *(М. Буранғоловтан)*

● Ер тураһында мәҡәлдәр яҙығыҙ. Тыуған ерен һаҡлап яу сапҡан башҡорт батырҙары тураһында мәғлүмәт әҙерләгеҙ.

## § 8. Тултырыусы

★ Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙе, эйәртеүсе һүҙҙән эйәреүсе һүҙгә һорау биреп, өлгөләгесә күсереп алығыҙ. Эйәреүсе һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ.

нимәнән?

Өлгө: *япраҡтарҙан* (исем) *тама.*

Һиңә ҡарайым, яҡшыға юрайым, һөйләгәнен тыңланы, береһе менән көрәште, белемдә күренә, ел-дауылдарҙан ышыҡлай, аттар тураһында һөйләне, халыҡ өсөн тырышты, дәфтәр алды.

● 1. Һуңғы һүҙбәйләнештең үҙенсәлеген аңлатығыҙ.
2. Эйәреүсе һәм эйәртеүсе һүҙҙәрҙең үҙенсәлектәрен билдәләп, ҡағыҙә сығарығыҙ.

*юрға*
*юрғалатыу*

**51.** Уҡығыҙ. Һорауҙар урынына белешмәләге һүҙҙәрҙе ҡуйып, тултырып яҙығыҙ. Ул һүҙҙәрҙең һөйләмдә ниндәй һөйләм киҫәген асыҡлап килгәнен әйтегеҙ.

Бейек ҡарағайҙар араһында уҡыусылар ҡайын (нимәләре?) йыя. Йәнәшәлә үҫкән (нимәләрҙән?) орлоҡтар осоп төшкәндәр ҙә шытып сыҡҡандар. Тик ул үҫентеләр бында әкрен үҫә, сөнки зәңгәр (нимәне?), (нимәне?) ҡарағайҙар ҡаплаған. Шуға күрә балалар йәш ҡайындарҙы асыҡ ергә күсерергә булдылар. Үҫентеләр, (нимәгә?) сыҡҡас, тиҙ тамыр йәйәләр.

Оҙаҡламай ул (нимәләрҙән?) бына тигән питомник барлыҡҡа килер. 4-се һәм 5-се класс уҡыусылары урманды, (нимәне?) яраталар, улар (кемдәргә?) оло ярҙамсылар.

*Белешмә өсөн һүҙҙәр:* үҫентеләре, ҡайындарҙан, күкте, ҡояшты, иркенлеккә, үҫентеләрҙән, йәшеллекте, урмансыларға.

● Тексҡа исем бирегеҙ. Йөкмәткеһе буйынса уны нисә өлөшкә бүлеп була? Һәр өлөшкә исем бирегеҙ.

► Һөйләмдә ҡылымдан килгән һөйләм киҫәген асыҡлап, *кемде? нимәне? кемгә? нимәгә? кемдән? нимәнән? кемдә? нимәлә? кем менән? нимә менән?* кеүек һорауҙарға яуап биргән эйәрсән киҫәк **тултырыусы** тип атала. Тултырыусының аҫтына өҙөк һыҙыҡ һыҙыла. Мәҫәлән: *Еңеү көнөндә Бөйөк Ватан һуғышы ауырлыҡтарын үҙ иңендә күтәргән, илгә изгелек килтергән* ***апайҙарҙың, әсәйҙәрҙең, өләсәйҙәрҙең*** *эшсән һөйкөмлө ҡулдарын ҡыҫҡы килә.*

**52.** 1. Хикәйәне уҡығыҙ. План төҙөгөҙ. Шул план буйынса һөйләгеҙ. 2. Тултырыусыларҙы үҙҙәре буйһоноп килгән ҡылым менән өлгөләгесә яҙып алығыҙ.

кемде?　　　　　　нимәләргә?

Өлгө: *Зәбирҙе ҡуйҙы,* *урмандарға ҡуйҙы.*

ЗӘБИР ҠАРАҒАЙЫ

Граждандар һуғышы бөткәс, Совет власы Зәбирҙе ошо тирәләге урмандарға баш итеп ҡуйҙы. Ул үҙенең төп хыялын тормошҡа ашыра башланы. Теге саҡта, урманды ҡырҡтырғандан һуң, тирә-яҡ ҡола ялан булып ҡалғайны. Йәйге йәшенле ямғырҙарҙан, ел-дауылдарҙан, ҡышын бурандарҙан ышыҡлар нәмә юҡ. Бөтәһенә лә ҡарағай бер үҙе ҡаршы тора, йәйге эҫеләргә, ҡышҡы сасҡау һыуыҡтарға бирешмәҫкә тырыша. Ләкин ер йөҙөндә яңғыҙлыҡтан да ауыр нәмә юҡтыр. Ҡарағайға Зәбир ярҙамға килде. Тубырсыҡтар йыйып, орлоҡ әҙерләне, күҙ күреме ергә соҡорҙар ҡаҙҙы, уларға ҡырсынды көлгә ҡатнаштырып һалды, унан ҡарағай орлоҡтарын һибеп сыҡты. Ике-өс йыл үтеүгә, һәр соҡорҙа бер нисә йәм-йәшел ҡарағай күренде. Улар менән бергә хәҙер Зәбир ҡарағайы ла шаулап ултыра. *(Н. Мусиндан)*

**53.** Өҙөктө ентекләп уҡып сығығыҙ. Һүҙҙәргә тейешле ялғауҙарын ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй килештә икәнен күрһәтегеҙ.

– Ә бына, атай, самолёт.. да шәберәк осҡан ҡош бармы икән? – тип һораны Әғләм.

– Самолёт.. әйтә алмайым, мәгәр тибеүсе ҡоштар, уҡ һымаҡ, шыу итеп ҡала. Ҡуян.., төлкө.., бүре.. күргән бөркөттөң, ҡор.., һуйыр.. күргән ҡарсығаның, турғай.. күргән ҡыйғырҙың шыҡыйғанын күргәнең барҙыр. Һин «беер, икее» тигәнсе, улар ике йөҙ метр самаһы ер осоп, күргән ҡош.., йәнлек.. тибеп тә алалар. Ә сапсан, ыласын

минут.. – 5, сәғәте.. 300 километр тиҙлек менән шыҡыя ала. *(Ғ. Ишбулатов)*

**54.** Уҡығыҙ. Күсерегеҙ. Һөйләмдәрҙә баш киҫәктәрҙең, аныҡлаусы һәм тултырыусыларҙың аҫтына һыҙығыҙ. Тултырыусыларҙың үҙҙәренең эйәртеүсе һүҙ булып килеү осрағы бармы-юҡмы, шуға ла иғтибар итегеҙ.

***власть*** *– власы*
***текст*** *– тексҡа*
***съезд*** *– съезға*

ИРТӘН

Офоҡ алға мансылды. Таң да беленде. Яҡынтирәне сихри моңға күмеп, һандуғастар һайрай. Талғын ғына иҫкән иртәнге ел йөҙйәшәр имәндәрҙең, һылыу йүкәләрҙең, баҙыҡ сағандарҙың йәшел шәлдәре менән уйнай.

Тынлыҡты боҙоп, яңы көн тыуыуын белдереп, борғо яңғыраны. Уҡыусылар иртәнге зарядкаға теҙелде. Уларҙың берҙәм етеҙ хәрәкәте осорға әҙерләнгән аҡҡоштарҙы хәтерләтә. *(«Аманат» журналынан)*

● «Көҙгө ялан», «Урманда көҙ», «Сөгөлдөр баҫыуында», «Көҙгө хәстәрлек» темаларының береһенә үҙ-ара бәйле **ТҮ** булған 4–5 тарҡау һөйләм яҙығыҙ. Эйә, хәбәр, аныҡлаусы һәм тултырыусыларҙың аҫтына һыҙығыҙ.

**55.** 1. Уҡығыҙ. Өҙөккә исем бирегеҙ. Унда нимә хаҡында һүҙ барғанын һөйләгеҙ. Матурлыҡты сағылдырған һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ, уларҙың һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килеүен әйтегеҙ. 2. Эйә менән хәбәрҙе, тултырыусыны билдәләгеҙ.

Тирә-яҡты һоҡланып байҡайым. Зәңгәр күктә, бик бейектә, ҡара нөктәгә әйләнеп, ыласындар шыҡыя. Мәғрур ҡарағайҙар, зифа ҡайындар, тәлгәштәрен күтәрә алмай һығылып ултырған балан, муйыл, **йәмшегәндәр**, сылтыр шишмәләргә бөҙрә сәсле баштарын әйгән ерек, ҡара тал, ҡыҙыл мәр-

йендәй емештәрен ҡояшҡа балҡытып ултырған **осҡат**, эт муйылдары — бөтәһе лә әкрен генә шыбырлашып, **һил** донъяға сер сисә төҫлө. *(Д. Бүләковтан)*

● 1. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һүҙлектән ҡарап яҙығыҙ. 2. Тултырыусыларҙың ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүе тураһында таблица тултырығыҙ. Һөйләмдәрҙе үҙегеҙ уҡыған әҫәрҙәрҙән алығыҙ йә үҙегеҙ уйлап яҙығыҙ.

| Һүҙ төркөмдәре | Миҫалдар |
|---|---|
| Исем | *Ҡайындың* ***туҙын*** *маҡта, имәндең* ***үҙен*** *маҡта.* |

**56.** Тексты уҡығыҙ. Һеҙҙеңсә, кем дөрөҫ фекер йөрөтә: Азатмы әллә уның класташтарымы? Фекерегеҙҙе нигеҙләгеҙ.

Таҡтала «Сәскә үҫтерергә яратам» тигән һөйләм яҙылған. Азат:

– Сәскә һүҙе эйә булып килә, – ти.

– Дөрөҫ түгел, – ти класташтары. – Ул тултырыусы булып килә.

– Юҡ, ул – эйә, – тип бәхәсләшә Азат. – Сәскә төп килештә тора, шуға ул һөйләмдә эйә булып килә.

**57.** 1. Тексты уҡығыҙ, тасуирлауға иғтибар итегеҙ. 2. Һөйләмдәрҙән аныҡлаусы һәм тултырыусыларҙы табығыҙ, тултырыусыларҙың килештәрен билдәләгеҙ. 3. Үҙегеҙ ҙә берәй хайуанды тасуирлағыҙ.

### ҠОРАЛАЙ

Ҡоралайҙы ҡыр кәзәһе тип тә йөрөтәләр. Улар урмандарҙа тигеҙ һәм таулы урындарҙа йәшәйҙәр. Ҡоралайҙар бик һаҡ һәм ҡурҡаҡтар. Ләкин кешегә тиҙ эйәләшәләр. Ҡоралай – бик матур хайуан.

Унының күҙҙәре ҙур, матур. Күҙҙәрен оҙон керпекле ҡабаҡтары саҡ ҡына ҡаплап тора.

Ҡоралай ваҡыты-ваҡыты менән һауаны еҫкәй. Ел ят еҫ килтермәйме? Тирә-яҡ тынысмы? *(«Башҡортостан календары»нан)*

## § 9. Хәлдәр

★ Бирелгән һорауҙар ярҙамында күп нөктә урынына эйәреүсе һүҙҙәр өҫтәп, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. Эйәреүсе һүҙ эйәртеүсе һүҙҙең ниндәй билдәһен асыҡлауын билдәләгеҙ, ҡағиҙә сығарығыҙ.

**... (ҡасан?) уҡый, ... (ҡайҙа?) оса, ... (нисек?) йүгерә, ...(күпме?) атлай, ... (нилектән?) шатлана, ... (ни өсөн?) тырыша.**

● Бер нисә һүҙбәйләнеш менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

**58.** Уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ҡайһы һүҙгә эйәреп, ниндәй һорауға яуап ҡайтарғанын әйтегеҙ.

Дауыт **яҡтырыр-яҡтырмаҫ** юлға сыҡты. **Китер саҡта** Ылаcынын сыңйырлап ҡуйҙы һәм уны төш аумайынса ысҡындырмаҫҡа ҡушты.

**Үткән аҙнала Дауыт, Елмәрҙәк арьяғында торған будкаға** барғанда, **Сумған буйында** һигеҙ ҡоралай күргәйне. Ана шуларға «күстәнәс»кә йәшел бесән, таш тоҙ илтә ул **бөгөн.** Улар **Бөрйән яғынан** килгәндер әле.

**Офоҡ сигендә әкренләп** ҡыҙғылт пәрҙә эленде[4]. **Тиҙҙән** сағыу ҡояш моронланы[4]. Тәүге ҡарҙан саңғыла барыу ҡыҙыҡ та, күңелле лә[4]. *(С. Шәриповтан)*

● Өҙөктә нимә тураһында һүҙ барғанын һөйләгеҙ. Үҙегеҙҙең ҡышҡыһын йәнлектәргә нисек ярҙам итеүегеҙ хаҡында ла 3–4 һөйләм яҙығыҙ.

**59.** 1. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ, уның төп фекерен әйтегеҙ. Йөкмәткеһен һөйләп бирегеҙ. 2. *Күренгеләй* ҡылымының мәғәнә үҙенсәлеген аңлатығыҙ.

3. *Ҡайҙан? ҡайҙа? нисек? ҡасан?* һорауҙарына яуап биргән һөйләм киҫәктәрен табығыҙ. Уларҙы эйәртеп килгән ҡылымдар менән һүҙбәйләнештәр яҙығыҙ.

Күтәрмәнән башланған һуҡмаҡ — Ағиҙелгә, ҡапҡанан сыҡҡан юл ауыл араһына илткән.

Беҙҙең ауыл эргәһендә Ағиҙел уйһыу туғайлыҡтарҙан йәйрәп аға. Был тирәнән тиҙ киткеһе килмәгәндәй, боролоп-боролоп аға. Быуҙары ятыуҙарҙа тын ята, ситтәрендә ҡамыштар үҫә, томбойоҡтар күренгеләй.

Ағиҙел туғайҙарында тирәк, муйыл, балан, йүкәләр ишелеп ултыра. Яҙын, иртә йәйен муйыл, йүкә, туғай сәскәләренең хуш еҫен талғын ел ауылға тарата. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

Эштең, хәрәкәттең башҡарылыу ваҡытын, рәүешен, урынын, сәбәбен, маҡсатын белдереп, *нисек? ҡасан? ҡайҙа? нилектән? ни өсөн?* кеүек һорауҙарға яуап биргән эйәрсән киҫәк **хәл** тип атала.

Хәлдәрҙең аҫтына нөктәле һыҙыҡ (_._._._._._) һыҙыла: *Ҡуңыр ҡараһыу тупраҡ бурлаттай ҡыҙарған таң нурында емелдәне.* (Ә. Вахитов)

**60.** Белешмәләге һүҙҙәрҙе (42-се бит) йәйә эсендәге һорауҙар урынына ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Ул һүҙҙәрҙең һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгәнен әйтегеҙ, уларҙың ҡайһы һүҙгә эйәреп килгәнен уҡтар менән күрһәтегеҙ.

Күл тирәһе (ҡасан?) (нисек?) була. Ул (ҡасан?) йәнлелеген юғалта. Ундағы ҡоштар (ҡайҙа?) китәләр. Балыҡтар ҙа (ҡасан?) (нисек?) уйнамай, улар (ҡайҙа?) төшәләр. (Ҡасан?) Аҡкүл (нисек?) күренә. *(М. Ғафуриҙан)*

*Белешмә өсөн һүҙҙәр:* бик тыныс, ул саҡта, хәҙер, йылдам, аҫҡа, көньяҡҡа, көҙөн, күңелле, йәйгеһен.

**61.** Өҙөктө уҡып, уға исем бирегеҙ. Һуңынан тултырыусылар менән хәбәрҙәрҙе, хәлдәр менән хәбәрҙәрҙе ишләп күсереп яҙығыҙ. Тултырыусылар менән хәлдәрҙең хәбәргә бәйләнеүен уҡтар менән күрһәтегеҙ. Эйәртеүсе һүҙҙәргә × билдәһен ҡуйығыҙ.

Вәлитдиндәрҙең иңе-буйы бер ҡолас ҡына өйҙәре — беҙҙең төйәгебеҙ. Бында иркен. Тыйған, һуҡҡан кеше юҡ. Шуға күрә Ғизелниса әбейҙең бәләкәс кенә йомошон да ҙур итеп башҡарырға әҙер торабыҙ. Эш яғынан уның сибек кенә «алтын бағанаһы» ҡысҡырып маҡтарлыҡ түгел. Ул холҡона килһә, йомош тыңлай, холҡона килмәһә, ҡыл да ҡыймылдатмай. Тиҫкәрелек уға төйөп, тыңҡыслап тултырылған.

Беҙ бер йыйыла башлаһаҡ, туң майға ябырылған ҡарабаш турғайҙар кеүек, хәҙер тупланып алабыҙ. Иң һуңынан башлыҡ үҙе күренә. *(М. Кәримдән)*

- *Ҡыл да ҡыймылдатмай, тупланып алабыҙ* һүҙбәйләнештәрен, *Тиҫкәрелек уға төйөп, тыңҡыслап тултырылған* һөйләмен нисек аңлағанығыҙҙы һөйләп бирегеҙ.

**62.** Йомаҡтарҙы яҙып алығыҙ; хәлдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ һәм уларҙың ҡайһы һүҙгә буйһоноп (эйәреп) килеүен уҡтар менән күрһәтегеҙ.

1. Алып батыр килгән, ҡалҡанын түргә элгән. Балтаһыҙ, ҡулһыҙ боҙ тишә. Иртән килә, кис ҡайта. *(ҡояш)* 2. Алтын хужа яланға сыҡты, көмөш хужа яландан ҡайтты. Иртән сыға, кисен юғала; уның урынын иптәше ала. *(ҡояш менән ай)* *3.* Тәҙрәнән һыйҙы, ишектән һыйманы, һандыҡҡа һыйҙы, һалып бикләп булманы. Тәҙрәмдән инде, иҙәнемә йәйелде. *(ҡояш нуры)*

**63.** *Тау, ялан, ауыл* һүҙҙәрен индереп, һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ: тәүгеһендә улар – эйә, икенсеһендә – тултырыусы, өсөнсөһөндә хәл булһын.

**64.** Уҡығыҙ. Тексты һөйләмдәргә айырығыҙ. Тыныш билдәләрен ҡуйып, күсереп алығыҙ. Хәлдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ. Уларҙың ниндәй һорауҙарға яуап биргәнен әйтегеҙ. Хәлдәрҙе эйәртеп килгән һүҙҙең өҫтөнә × билдәһен ҡуйығыҙ.

Ҡарайылға тамағынан түбәндәрәк Көнтөшмәҫ ятыуы һуҙылған ике яҡтағы ҡаяларҙан һыуға көн яҡтыһы төшмәй, шуға ла ятыуға Көнтөшмәҫ тип исем биргәндәр электән балыҡҡа бай ятыу булған Әхиәр менән Рәйес бер урауҙа ике бәрҙе дүрт ҡыҙылса өс шамбы төртөп алдылар Рәйес ҙур бер ҡыҙыл балыҡ күрҙе Әхиәр шул ҡыҙылды шәйләп йөрәкһенде ул ҡармағын йәпләп тотто ла балыҡҡа яҡынлашты балыҡ та аңра түгел икән ул яй ғына өҫкәрәк шылды Әхиәр алыҫтан әкренләп ҡармағын тағы ҡыҙылға яҡынайтты ҡыҙыл уҡтай атылып тәрәнгә инеп юғалды. *(С. Шәриповтан)*

● Тәүге ике һөйләмде тикшереп, һөйләм киҫәктәренең аҫтына тейешле һыҙыҡтарын һыҙығыҙ.

**65.** Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре тураһында түбәндәге һорауҙар буйынса һөйләгеҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.

1. Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре була?
2. Ниндәй киҫәктәр һөйләмдең баш киҫәктәре була?
3. Ниндәй киҫәктәр һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре була?
4. Ҡайһы һөйләм киҫәге предметтың билдәһен, ҡайһыһы эш-хәрәкәттең рәүешен, урынын, ваҡытын белдерә?

● Таблицаны дәфтәргә эшләп, уны тултырығыҙ.

| Һөйләм киҫәктәре | | Һорауҙары | Миҫалдар |
|---|---|---|---|
| Баш киҫәктәр | Эйә | кем? нимә? ни? кемдәр? нимәләр? низәр? | |
| Эйәрсән киҫәктәр | | | |
| | | | |
| | | | |

## § 10. Һөйләмдең тиң киҫәктәре

★ 1. Тексты уҡығыҙ, төп фекерен билдәләгеҙ һәм уға исем бирегеҙ. 2. Һөйләмдәрҙән билдәләнгән һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, уларға һорау биреп тикшерегеҙ, һығымта яһағыҙ.

Өлгө: ҡайҙан? ҡайҙан?

*ер ярыҡтарынан, тау тоҡомдары араһынан сыҡҡан.*

Нефть бынан күп йылдар элек барлыҡҡа килгән. Ер геологик үҙгәрештәргә дусар ителеү арҡаһында, ул **ер ярыҡтарынан**, күҙәүле **тау тоҡомдары араһынан** һарҡып сыҡҡан. Ул шишмә кеүек **ағып ятҡан** һәм соҡор урындарға **йыйылған**. Шулай **нефть күләүектәре**, ә ҡайһы бер урындарҙа ҙур **нефть күлдәре** барлыҡҡа килгән. Ҡояш был күлдәрҙе тора-бара **киптергән** һәм **ҡуйы** йәки **ҡаты** массаға **әйләндергән**.

**Газды, нефтте** һәм уның ыҫмалаға әйләнгән **продукттарын хәрби маҡсаттарҙа ла**, көндәлек **тормошта ла** файҙаланалар. *(Д. Бураҡаевтан)*

● 1. Бер үк һорауға яуап биргән һүҙҙәрҙең ниндәй һөйләм киҫәге булыуын әйтегеҙ. Улар үҙ-ара нисек бәйләнгән?

2. Үҙ фекерегеҙҙе дауам итегеҙ, интонацияға һәм тыныш билдәләренә иғтибар итегеҙ. Ҡағыҙҙа сығарығыҙ, тиң киҫәкле һөйләмдең схемаһын төҙөгөҙ.

Өлгө: *Баҡсала <u>һуған</u>, <u>ҡыяр</u> һәм <u>кишер</u> <u>үҫә</u>.*

[ ◯, ◯ һәм ◯ ].

► Һөйләмдә бер төрлө һорауға яуап биреп, бер һүҙгә асыҡлаған һүҙҙәр **тиң киҫәктәр** була. Һөйләмдең тиң киҫәктәре бер төрлө генә һорауға яуап бирә, һөйләмдең бер үк киҫәгенә буйһона.

Тиң киҫәктәр үҙ-ара бер-береһенә буйһонмай үҙ аллы булалар, һанау интонацияһы менән әйтеләләр.

Һөйләмдең баш киҫәктәре лә, эйәрсән киҫәктәр ҙә тиң була ала.

**66.** Тәүҙә тиң эйәләре, унан тиң хәбәрҙәре, һуңынан тиң эйәрсән киҫәктәре (тултырыусы, аныҡлаусы, хәлдәр) булған һөйләмдәрҙе яҙып алығыҙ, тиң киҫәктәр аҫтына һыҙығыҙ.

1. Йәнозаҡ өс йәшенән ат менде, биш йәшенән уҡ атты. 2. Мыҡты, мәргән батыр яңғыҙы айыуға, бүрегә, һеләүһенгә һунарға йөрөнө. 3. Йәнозаҡ эргәһенә дуҫтары, иптәштәре, тиң-тоштары йыйыла торғайны. 4. Дүрт аяҡлы хайуан да, ҡанатлы ҡоштар ҙа үҙ ихтыяры менән тыуған төйәген ташламай. Уҡты һунарҙа – йәнлеккә, яуҙа дошманға аталар. Дуҫыңа, яуҙаш юлдашыңа уҡ атмайҙар. 5. Бөрйән ырыуында оҙон тороҡло, яҫы янбашлы, киң күкрәкле, таштан ҡаты йомро тояҡлы, ҡара төҫлө ат булған. 6. Эблəй күп һыуҙар кискән, күп йәйләүҙәрҙә ҡунған, күп урмандар, юлдар, тауҙар үткән. *(Эпостан)*

● Эйәртеүсе һүҙҙәре исемдән, ҡылымдан килгән тиң киҫәктәрҙең һорауҙарын әйтегеҙ.

**67.** 1. Тексты уҡығыҙ. Унда нимә тасуирланғанын әйтегеҙ. Исем бирегеҙ. 2. Һөйләмдәрҙең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгәнен, уларҙың ниндәй һорауға яуап биргәнен тикшерегеҙ. Тиң киҫәктәр араһында ниндәй тыныш билдәһе ҡуйылғанын һөйләгеҙ.

Гөлсибәр инәй Сәлихтәрҙе өйгә алып инде. Өй иркен, яҡты күренә. Залға, кухняға һәм йоҡо бүлмәһенә бәрхәт пәрҙәләр менән ҡоролған ике ишек сыға. Залда аш өҫтәле, түрҙә яҙыу өҫтәле, комод, шкаф, буфет, китап кәштәһе ҡуйылған. Ауыл өйөнә хас бер төрлө лә билдә юҡ. Ишек алды яныңдағы тәҙрәләр асыҡ, әкрен иҫкән елгә пәрҙәләр бер күтәрелә, бер төшә. Роза, Сәлих һәм Рәйес үҙҙәрен иркен генә тоталар. Гөлсибәр инәй кухня яғына сығып китте. *(С. Агиштан)*

► Яҙыуҙа тиң киҫәктәр бер-береһенән өтөр менән айырыла, улар араһындағы *ә, ләкин, шулай уҡ* теркәүестәре алдынан да өтөр ҡуйыла.

1. *Хеҙмәт лагерында уҡыусылар эшләнеләр, уйнанылар, төрлө ярыштар ойоштторҙолар.*

═══ , ═══ , ═══

2. *Ай яҡтырта, ләкин йылытмай.*

═══ , ләкин ═══

3. *Ҡапыл ҡара болот күтәрелде, ҡуйырҙы.*

═══ , ═══

Әгәр ҙә тиң киҫәктәр араһында *һәм* теркәүесе бер генә тапҡыр килһә, өтөр ҡуйылмай: *Фәйзулла «Урал», «Һандуғас», «Азамат», «Сибай», «Түрәкәй» һәм «Тәфтиләү» көйөк халыҡ йырҙарын оҫта башҡара.*

------- , ------- , ------- , ------- , ------- *һәм* ------- .

★ **68.** Һәр төркөмдә һөйләмдәрҙе берләштереп, тиң киҫәктәре булған бер ябай һөйләм төҙөп яҙығыҙ. Ниндәй киҫәктәрҙең тиң булыуын әйтегеҙ. Тәүге ике һөйләмегеҙҙең схемаһын шартлы билдәләр менән күрһәтегеҙ.

1. Йәйгеһен беҙҙең мәктәп уҡыусылары сөгөлдөр баҫыуында эшләнеләр. Йәйгеһен беҙҙең мәктәп уҡыусылары бесәндә эшләнеләр. 2. Беҙҙең мәктәптә яҡшы итеп йыһазландырылған оҫтахана бар. Беҙҙең мәктәптә бай китапхана бар. Беҙҙең мәктәптә спорт залы бар. 3. Ҡоштарҙы яратығыҙ һәм һаҡлағыҙ. Урманды яратығыҙ һәм һаҡлағыҙ, тәбиғәтте ҡәҙерләгеҙ. 4. Беҙҙең йылға буйында өйәңке үҫә. Беҙҙең йылға буйында аҡ һәм күк тирәк үҫә. Беҙҙең йылға буйында тал, ерек үҫә.

**69.** Өҙөктө иғтибар менән уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең сиктәрен күрһәтеп, тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ. Тиң киҫәктәрҙе табығыҙ, уларҙың ҡайһы һүҙгә эйәреп килгәнен һорауҙар менән тикшерегеҙ.

Июлдең урталары урманда емештәр өлгөргән саҡ беҙҙең юл үрләй башлай Алатауға күтәреләбеҙ башта урманға юлығабыҙ ҡуйы япраҡлы урмандарҙа тәүҙә имән йүкә йыла ҡарама саған ваҡ япраҡлы урмандарҙа ҡайын һәм уҫаҡ ағастары күберәк осрай ул ағастар аҫтында сәтләүек әлморон осҡат эт муйылы балан миләш муйыл кеүек эрелеваҡлы ҡыуаҡтар үҫеп ултыра ҡурай еләге ҡарағат ҡыҙыл бөрлөгән ҡара бөрлөгән көртмәле емерелеп уңған тауға менгән һайын урман һирәгәйә ташлы ер күбәйә бара. *(«Тыуған Башҡортостан» китабынан)*

● Текстың йөкмәткеһенән сығып, уға исем бирегеҙ. Имән ағасын тасуирлап яҙығыҙ.

*көртмәле*
*бөрлөгән*

**70.** Өҙөктәрҙе, төҙөк хикәйә булырлыҡ итеп, дөрөҫ урынлаштырып яҙығыҙ. Килеп сыҡҡан текстың планын төҙөп, шул план буйынса һөйләгеҙ. Һөйләмдәрҙә ниндәй киҫәктәр тиң булып килгәнен әйтегеҙ.

ТӘҮГЕ КӨН

Әрбәк-һәрбәк кенә яуған ҡар таң алдынан көслө **буранға** әйләнде. Ә кешеләр, иртәнсәк тороп тышҡа сыҡҡас, аптырап ҡалдылар, ярты метрҙан артыҡ ҡар яуған. Улар, калуштарын быймаға алмаштырыу өсөн, өйҙәренә кире инделәр.

Төн урталарында һалҡынайтты. **Дымлы** ер өҫтө шаҡырлап туңды. Төньяҡтан көслө, һалҡын ел иҫте. Ел көсәйҙе лә көсәйҙе. Сыуаҡай тауы төнө буйына ас бүре кеүек олоно, ярһыны, үкерҙе.

Ҡарағайлыға ҡыш **быйыл** көтмәгәндә килде. Кискә табан ваҡ **йылы** ямғыр яуып үткәйне. Ел дә һалҡын түгел ине. Кешеләр: «Тиҙ генә ҡар яумаҫ әле», – тигән уй **менән** йоҡларға яттылар. *(Н. Мусин)*

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын әйтегеҙ. Уларҙы эйәртеүсе һүҙҙәре менән күсереп яҙығыҙ.

► Тиң киҫәктәр араһында *да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә* теркәүестәре лә килә. Ундай теркәүестәр ҡабатланғанда өтөр ҡуйыла: *Быйыл Юлдаш ауылға барырға булды. Өләсәһе лә, кил дә кил, тип саҡырҙы. Атаһы ла, әсәһе лә быны хупланылар. Улар атаһы менән икәүләп өләсәләренә килделәр ҙә төштөләр. Өләсәһе лә, Кинйәбай ағаһы ла, Гөлйөҙөм еңгәһе лә уларҙы сикһеҙ ҡыуанып ҡаршыланылар.* (З. Биишева)

**71.** Шартлы билдәләр урынына кәрәкле тиң киҫәктәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ.

1. Беҙҙең республикала ________ , ________ яҡшы уңыш бирә. 2. ______ һәм ______ уҡыусылары лагерҙа ________ , ________ , ________ . 3. Ҡуйы ағастар араһынан ______ һәм ______ юл һуҙыла. 4. Ғәзиз ағай ҙур ______ , ҡулындағы ______ һәм ______ ергә ҡуйҙы ла палатка ҡора башланы.

● Үҙегеҙҙең яҡтағы ер-һыу атамаларын файҙаланып, мәғәнәләре яғынан үҙ-ара бәйләнешле булған 5—6 һөйләм яҙығыҙ. Ул ер-һыу атамалары һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәр булып килһен.

**72.** Ә. Сәйетовтың «Бесәндән ҡайтыу» исемле картинаһын ҡарағыҙ. Унда йәйҙең ниндәй осоро һүрәтләнгән? Алғы планда кемдәрҙе күрәһегеҙ? Һәр береһен һүрәтләгеҙ (кәйефтәре, кейемдәре, эш ҡоралдары). Бесәндә кем нимә эшләгән? Артҡы планда нимәләр, кемдәр күренә? Улар ни эшләй? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

## § 11. Текст

★ Уҡығыҙ. Ҡайһы өҙөк, бер-береһенә бәйле һөйләмдәрҙән тороп, ҡатмарлы фекер сағылдыра? Уларҙы бергә нимә тип атар инегеҙ? Өҙөккә ниндәй исем бирерһегеҙ?

I. Иртәнсәк, ҡояш ҡалҡып килгәндә, йәштәр ялан яҡҡа сыҡҡайнылар инде. Убалар өҫтөндәге сал ҡылғандар, гүйә, һирпелеп ҡарағандай баш сайҡаны.

Йыл һайын яҙғы һабан эше бөткәс уйнала торған һыу һалышыу быйыл айырата күңелле үтте. Элек был урында ике юллы, тирәсле ағас күпер тора ине. *(З. Биишеванан)*

II. Тау йылғаһы. Бына ул бер саҡ шомло, текә ҡаялар аҫтынан шат, нурлы балҡып сыға ла, тар, ҡырыҫ йырғанаҡтарҙан юл ярып, алға ынтыла. Һикәлтәле үҙәндәрҙән һикерә-уйнай алыҫҡа, ҡояшлы далаларға, күк диңгеҙгә табан ашҡынып аға башлай. Уның теремек, көслө шылтырауы көнөн

дә, төнөн дә тынмай. Арыу-талыуҙы белмәй, эре-эре һуйыrташтарҙы аҡтарып, ҡырсындарҙы тәгәрләтеп, көмөштәй саф һыуы менән күҙҙәрҙе иркәләп, йөрәктәрҙә бәхет тойғоһон үҫтереп, аға ла аға... *(З. Биишеванан)*

► **Текст** йөкмәткеһе яғынан тамамланған бер бөтөндө тәшкил итә. Икенсе төрлө әйткәндә, ундағы үҙ аллы һөйләмдәр, тығыҙ мәғәнәүи бәйләнештә булып, барыһы ла дөйөм бер уртаҡ теманы асырға ярҙам итә. Был уртаҡ тема тексттың мәғәнәүи үҙәге була.

Күп осраҡта бер абзац бәләкәй бер тексты барлыҡҡа килтерә, сөнки унда тамамланған тулы фекер әйтелә.

Алда килтерелгән күнегеүҙә ике абзацтан торған I өҙөк текст була алмай, сөнки һәр һөйләм үҙенә бер башҡа мәғәнә сағылдыра, ә II өҙөктә бөтә һөйләмдәр ҙә тау йылғаһын һүрәтләй, бер уртаҡ темаға ҡарай. Ул – текст.

**73.** Уҡығыҙ. Түбәндәге өҙөктө текст тип атарға мөмкинме? Ундағы һөйләмдәрҙән текст яһағыҙ. Уны яҙып алыр алдынан исем бирегеҙ. Һуңынан уны З. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәренән «Дауыл» бүлегендәге өҙөк менән сағыштырығыҙ.

Хәҙер уның иртәнсәк кенә яҡты күл булыуына ышаныуы ҡыйын. Был болоттар ҡаяларҙан боҫрап сыҡҡан һымаҡ күренәләр. Метрҙан бейек аҡбаш тулҡындар үкереп, шаулап ярға бәреләләр. Улар, кәмәне тирәккә бәйләгәс, йүгереп һыртҡа менделәр. Талҡаҫ һаман тулҡынлана, ҡайнай, үкерә ине. Ирәндеккә һырышып, аҡһыл һоро болот өйөрөлә. Шул болоттарҙы ҡыуған көслө ел Талҡаҫҡа тәгәрәп төшә лә күлдең аҫтын-өҫкә әйләндерә. Үҙҙәре шундай көләс, наҙлы саҡырып та, аҙаҡтан йота яҙған

мәкерле күл өҫтөнә ҡарап тынып ҡалдылар. Бынан ары тулҡын Юлдаштарҙы ярға сығарып ташланы. Күл өҫтө аҡ күбек сәсеп шаулай, геүләй ине.

► Текст үҙ-ара тығыҙ бәйләнгән бүлектәрҙән тора.

**74.** Тексты берегеҙ ҡысҡырып уҡыһын, ҡалғандарығыҙ иғтибар менән тыңлаһын. Һөйләмдәрҙең сиктәрен билдәләгеҙ, аҙағына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ. Тексҡа исем бирегеҙ. Һуңынан, йөкмәткеһенән сығып, уны айырым киҫәктәргә бүлегеҙ, һәр киҫәкте абзацтан яҙығыҙ.

Тауҙар теҙмәһен икегә ярып Ымыҡ йылғаһы аға кешеләр ул йылғаны йырҙарға ҡушып йырлайҙар, хикәйәләргә ҡушып һөйләйҙәр уның тураһындағы йырҙарҙы һеҙ үҙегеҙ ҙә йырлағанығыҙ, хикәйәләрен тыңлағанығыҙ барҙыр ул йылғаның исеме алыҫтарға таралған ғәжәп матур йылға ул – Ымыҡ йылғаһы уның уң яғында аҡ ҡайындар үҫкән бер ҡарауҙа улар биҙәкле суҡтар кеүек, икенсе күреүҙә ҙур елбәҙәк кеүектәр аҡ ҡайындарҙың ботаҡтарында һандуғастар һайрай яр башынан аяҡтарыңды һалындыр ҙа ултыр, төрлө ҡош тауыштарын тыңла. *(И. Насыриҙан)*

● Һөйләмдәрҙә аныҡлаусыларҙы, тултырыусыларҙы табып, аҫтына тейешле һыҙыҡтарҙы һыҙығыҙ.

**75.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Тәүге һәм өсөнсө абзацтағы һөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнеү юлдарын анализлағыҙ.

Ҡырлас тауҙы буйлатып часовойҙар баҫҡандар. Улар керпек тә ҡаҡмайҙар. Отрядтың һәр кешеһенә приказ бирелгән. Улар шул һуғышсан приказды эңерҙән үк алғандар ҙа теүәл үтәргә сигнал көтәләр.

Тирә-яҡ тын. Утарҙы уртаға ярып, тоноҡ, һалҡын шишмә аға. Әллә ҡайҙа бытбылдаусы бүҙәнәләрҙең тауышы ишетелде. Уларҙы уҙып, ҡайҙалыр алыҫта көйөлдө көйләй.

Тимербулат хәҙер ябай партизан түгел, ә разведчик, ул үткән заданиены тулыһынса үтәне. Был турала командирҙар уға рәхмәт әйттеләр. Уның өҫтөнә Тимербулат әсәһенең һаулығын ишетте. Ул хәбәргә бөтә отряд ҡыуанды. Бер нисә сәғәттән бөтә отряд һуғышҡа, бысраҡ дошмандарҙы бөтөрөү өсөн атакаға китәсәк.

Партизандар, арыҫлан кеүек, тыштан шымдылар ҙа дошманға аҙаҡҡы, яңынан ҡуҙғалмаҫлыҡ, хәл иткесударҙы бирергә әҙерләнеп, уңайлы моментты көттөләр. *(Һ. Дәүләтшинанан)*

► Текста үҙ аллы һөйләмдәр өсөн уртаҡ бер һөйләм кисәге була. Ул кисәк тәүге һөйләмдә бирелеп, һуңғыларында уны башҡа һүҙҙәр алмаштырып килә. Мәҫәлән: *Ҡырлас тауҙы буйлатып часовойҙар баҫҡандар* һөйләменә икенсе һөйләм *улар* алмашы менән бәйләнгән: *Улар* (часовойҙар) *керпек тә ҡаҡмайҙар*. Өсөнсө һөйләмдәге *отрядтың* тигән һүҙ *часовойҙар* һүҙен алмаштырған. *Отрядтың һәр кешеһенә приказ бирелгән*. Артабанғы һөйләмдә *улар* алмашы иһә, *отрядтың һәр кешеһен* тигән һүҙҙәрҙе алмаштырып, һөйләмдәрҙе үҙ-ара бәйләп килә.

Шул рәүешле тексттың эсендәге һөйләмдәр бер-береһенә эҙмә-эҙлекле бәйләнеп киләләр.

**76.** 1. Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ һәм уға исем бирегеҙ. Тексты мәғәнәһе буйынса киҫәктәргә бүлеп, уларҙың һәр береһенә исем ҡуйығыҙ. 2. Тәүге ике һөйләмдән хәбәрҙәрҙе табығыҙ, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен әйтегеҙ.

Тарихыбыҙ бик тәрәндән башланған. Илебеҙ халыҡтарының берҙәмлеге Пугачёв ихтилалынан башланған, тип һөйләргә күнеккәнбеҙ. Монгол-татарҙар баҫҡынында Ҡалҡа һуғышында (1223 йыл) Субудай ғәскәрҙәренә урыҫтар менән бергә ҡыпсаҡтар ҙа ҡаршы торған. Еңелеүен еңелгәндәр, әммә бер булып ҡаршылыҡ күрһәткәндәр. Урыҫтың да, ҡыпсаҡтың да яҙмышы бер булған. Улар күрше йәшәгәндәр, иң ауыр ваҡыттарҙа бер-береһенә ярҙам иткәндәр. Шул һуғышта Бошман бей үҙенең ерҙәренә (Яйыҡ буйҙарына) ҡайтып, монгол-татарҙарҙы 14 йыл буйы үткәрмәй тота. Ул хаҡта шул заман яҙыусыһы Ибн әл-Әсир «Бошман бей» тигән ҡиссаһында яҙып ҡалдырған. Бошман – халҡыбыҙҙың ҡаһарман улы Кинйә Арыҫлановтың туранан-тура бабаһы. Шул дәүерҙән башлап ырыу бошман-ҡыпсаҡ тип атала. Ә тағы күпме тарихыбыҙ – байлығыбыҙ бар! *(Ғ. Ибраһимов)*

## § 12. Өндәш һүҙ

★ Уҡығыҙ. Шиғырҙағы һөйләмдәрҙең кемдәргә ҡарата әйтелгәнлеген аңлатығыҙ. Ул һүҙҙәрҙең ниндәй тауыш менән уҡылғанына иғтибар итегеҙ. Яҙыуҙа ниндәй тыныш билдәләре ҡуйылған?

1. – Ирхан, ә был ниндәй рәсем,  
Буяуҙары тигеҙ ятмай?  
– Күрмәйһеңме, зәңгәр киңлек,  
Океан да инде, атай.

2. Һиңә ҡарап, терпекәйем,  
Аптырайым мин әле:  
Уҫал да кеүек түгелһең,  
Үҙең һәр саҡ энәле?

3. Ҡасма ҡабат, ҡасма, ҡояш,
Нурҙарыңды түк инде.
Болотҡа йәшенгәнеңде
Белеп торам бит инде. *(Г. Юнысованан)*

**77.** Һөйләмдәрҙәге эйәләрҙе өндәш һүҙҙәргә әйләндереп яҙығыҙ. Һуңынан «исем + ҡылым» тибындағы һүҙбәйләнештәрен әйтегеҙ һәм яҙып ҡуйығыҙ.

1. Уҡыусылар стеналарға лозунгылар ҡаҙаҡланылар. 2. Улар башта төркөм-төркөм булып залда теҙелделәр. 3. Иң бәләкәстәр класс бүлмәһен биҙәргә ярҙамлаштылар. 4. Бөтә уҡыусылар ҙа байрамса кейенгәндәр.

► Телмәрҙең кемгә, нимәгә төбәлгәнен белдергән һүҙ **өндәш һүҙ** тип атала. Өндәш һүҙ һүҙбәйләнештән дә торорға мөмкин: *Айбулат ағай, кисә мин йәбештергән яҙыуҙы староста олатайым килеп йыртып алды.* (Һ. Дәүләтшина)

Өндәш һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр һөйләмдең башҡа киҫәктәренән һәр саҡ өтөр менән айырыла:

***Малайҙар,*** *ҡайҙа киттегеҙ?* | Ө, ..........? |

*Әйтсе,* ***ҡошсоғом,*** *кемдәр һине ҡыйырһытты?* | ....., ө, ......? |

*Ҡасан ғына үҫеп етерһең инде,* ***ҡолонсағым!*** | ..........., ө! |

Өндәш һүҙ һөйләмдең башында килеп, көслө тойғо менән әйтелгәндә, унан һуң өндәү билдәһе ҡуйыла:

***Сәйҙел, Зәйнәп!*** | Ө, Ө! ........... . |
*Әйҙә, киттек шунда,*
*Бәлки, йырҙы ҡабат башларбыҙ.*

(Ғ. Сәләм)

**78.** Йырҙарҙы иғтибар менән уҡығыҙ: 1) өндәш һүҙҙәрҙе табып, өтөрҙәрҙе ҡуйып яҙығыҙ; 2) тыуған илгә һөйөүҙе, батырлыҡҡа өндәүҙе сағылдырған юлдарҙы күрһәтегеҙ.

1. Кәкүк кенә буйы тар килгән,
   Тар килгән дә ере яр килгән:
   Әйҙә дуҫтар атҡа менегеҙ,
   Ил сигенә дошман яу килгән.
2. Ант иттек беҙ Ватан алдында,
   Һуғыштарҙа сығыр данybыҙ.
   Ватан һиңә булһын көсөбөҙ
   Һәм иң һуңғы тамсы ҡаныбыҙ.
3. Йырла егет киреп киң күкрәгең,
   Яңғыратып Уралдың буйҙарын.
   Йәш йөрәккәйеңдән сыҡҡан йырҙар
   Дәртләндерһен Уралдың улдарын.

*(Халыҡ йырҙары)*

*республика*
*обелиск*
*часовой*
*яугир*

**79.** Хатты уҡығыҙ. Ғабдулланың өләсәһен яратҡанын ниндәй һүҙҙәрҙән, ялғауҙарҙан күреп булғанын әйтегеҙ. Һуңынан өндәш һүҙ, тиң киҫәктәр булған һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Яҙғандарығыҙҙы дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.

Ҡәҙерле һәм хөрмәтле өләсәйем! Минең ике ҡабырғам, бер ҡулым һынған булып сыҡты. Карауатҡа һалып ҡуйҙылар ҙа бер аҙна торғоҙманылар. Ҡулымды аҡ балсыҡ һылап ҡатырҙылар.

Докторҙар ифрат һәйбәттәр, өләсәй. Иң баш доктор минең менән гел шаярып һөйләшә. Бүлмәгә килеп ингәс тә: «Шәпме, ҡыйыу батыр?» – тигән була.

Өләсәйем, Айҙарға, Яҡупҡа әйт: теге балыҡтарҙың хәлен белеп торһондар, ем илтеп һипһендәр. Гөлнурҙың аяҡ-ҡулы иҫәнме?

Өләсәйем, ҡәҙерлем, мин һиңә бәләкәс кенә күстәнәс йыйҙым: ун бер печенье, һигеҙ кәнфит, ун шаҡмаҡ шәкәр. Улар артып ҡалғандары.

Хат аҙағында шуны яҙам: бөтә нәҫел-ырыуға, дуҫ-ишкә айырмайынса сәләм тапшыр. Үҙеңә һәм әсәйемә айырым-айырым сәләм.

Һау бул, йәндәй күргән өләсәйем. Ғабдулла. 1950 йыл, 9 июнь. *(М. Кәрим)*

● «Сифат + исем», «исем + ҡылым» ҡалыбындағы өсәр һүҙбәйләнеш яҙығыҙ, ҡайһы һүҙҙең ниндәй һүҙгә буйһонғанын күрһәтегеҙ.

**80.** Тыныш билдәләрен ҡуйып, шиғырҙы күсереп яҙығыҙ, өндәш һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ.

Ынйыҡай туңдырма аша
Ләйлә һин дә тик торма
Ҡыш бабайҙан бер күстәнәс –
Эҫе көндә туңдырма.

Ашыҡ Ләйлә һин дә Ынйы
Яйлап уйнап ултырма
Туңдырма тиҙ иреп аға
Ашамаһаң бер тында.

*(Г. Юнысованан)*

**Ябай һөйләмде тикшереү тәртибе**

1. Интонацияһы яғынан һөйләм төрө.
2. Һөйләмдең нигеҙе (баш киҫәктәре).
3. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.
4. Өндәш һүҙҙең булыу-булмауы.

Телдән тикшереү өлгөһө

*Һары үләндәрҙе көҙгө һалҡын ысыҡ ҡаплаған.*

Был хәбәр һөйләм. Һөйләмдең нигеҙе: *ысыҡ* (эйә), *ҡаплаған* (хәбәр). Һөйләмдә эйәрсән киҫәктәр бар, шуға күрә ул таралҡау һөйләм була. Һөй-

ләмдең эйәрсән киҫәктәре: *һары* (аныҡлаусы), *үләндәрҙе* (тултырыусы), *көҙгө* (аныҡлаусы), *һалҡын* (аныҡлаусы).

Яҙып тикшереү өлгөһө




1. *Һары үләндәрҙе көҙгө һалҡын ысыҡ ҡапланған.*

2. Шаян Нөгөш, шаршылы Эҫем, тулы һыулы Ҡариҙел, һалмаҡ ағышлы Танып Ағиҙелгә уң яҡтан ҡоялар.

## § 13. Ҡушма һөйләм

★ Һәр бағаналағы һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙең нигеҙен билдәләгеҙ. Ҡайһы бағаналағы һөйләмдәрҙең ябай, ҡайһыларының ҡушма һөйләм икәнен әйтегеҙ. «Исем + ҡылым», «рәүеш + ҡылым» ҡалыбындағы ике һүҙбәйләнеш яҙығыҙ.

Яҙ көндәре Үҙәште ярҙан ярға таша. Ул баш түбән аға, әрәмә араларында ҡылылар* яһай, йырындар барлыҡҡа килтерә, ҡолаҡтарға айырыла.

Яҙ көндәре Үҙәште ярҙан ярға таша, ул баш түбән аға, әрәмә араларында ҡылылар яһала, йырындар барлыҡҡа килә, ҡолаҡтар айырыла. *(Ж. Кейекбаев)*

* Ҡылы – йылға ташҡанда ярҙан сыҡҡан һыу юлы.

► Ике һәм унан да артыҡ ябай һөйләмдән төҙөлгән һөйләм **ҡушма һөйләм** тип атала: *Көҙгө ямғырҙар өҙлөкһөҙ һибәләй башланы, аяҡ аҫтындағы япраҡтар хәҙер ҡыштырламай.*

Был һөйләм ике ябай һөйләмдән тора: *Көҙгө ямғырҙар өҙлөкһөҙ һибәләй башланы (1), аяҡ аҫтындағы япраҡтар хәҙер ҡыштырламай (2).*

**81.** *Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң* һөйләмен, шартлы билдәләр урынына кәрәкле һөйләм киҫәктәрен ҡуйып, түбәндәге тәртиптәрҙә үҙгәртеп яҙығыҙ. Һуңынан һәр һөйләмдең эйәһен, хәбәрен, башҡа эйәрсән киҫәктәрен билдәләгеҙ.

1. Әгәр ҙә һин — — , үҙең — . 2. Кем — — , шул — —. 3. Һин — — , — төшөрһөң. 4. Кешегә — — , үҙҙәре — . 5. Әгәр ҙә — — теләмәһәң, кешегә — — .

► Ҡушма һөйләмдәге ябай һөйләмдәр бер-береһенә интонация менән дә, *һәм, ә, ләкин, йә, йәки, әгәр, шуның өсөн, шуға күрә, сөнки* кеүек ярҙамсы һүҙҙәр менән дә бәйләнеп киләләр. Ярҙамсы һүҙ алдынан һәр саҡ өтөр ҡуйыла.

**82.** 1. Өҙөктө уҡығыҙ, төп фекерен билдәләгеҙ, исем бирегеҙ. 2. Һөйләмдәрҙе тикшереп, ҡушма һөйләмдәрҙе генә күсереп алығыҙ, ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара нисек бәйләнеп килгәнен асыҡлағыҙ. Һөйләмдәрҙә баш һәм эйәрсән киҫәктәр аҫтына һыҙығыҙ.

Мин үҙәккә тоҫҡап сабам, ә балтам түмәрҙең эргәһенә әләгә лә, түмәрем икенсе яҡҡа йығыла. Мин уны торғоҙоп ултыртам да йәнә һелтәнәм. Тағы шул хәл ҡабатлана. Олатайыма күҙ һалам, ул миңә бөтөнләй иғтибар итмәй, шарт та шорт утын ярыуын белә. Ул мине тикшереп тормай икән. Мин тынныслана төштөм, тәүге түмәрҙе нисек тә ярып

бөттөм һәм икенсеһенә тотондом. Бынынына балтам тәүҙән үк уртаһына эләкте, һәм ул шартлап ярылып китте. Мин олатайыма башымды ғына бороп ҡарайым, әммә ул әйләнеп тә ҡарамай, үҙ эше менән мәшғүл. *(Н. Мусиндан)*

**83.** Һыҙыҡтар урынына ябай һөйләмдәр өҫтәп, ҡушма һөйләмдәр төҙөгөҙ. Ҡушма һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөгөҙ.

1. Көндәр һыуынды, һәм — — .
2. Уҡыусылар тәнәфескә сыҡтылар, — — .
3. Сәлих китап уҡый, — — .
4. Көҙ етте, ағастар һары япраҡтарын ҡоялар, ләкин — — .

**84.** Кәрәкле ярҙамсы һүҙҙәр өҫтәп, ябай һөйләмдәрҙе ҡушма һөйләмдәргә әйләндереп яҙығыҙ.

Өлгө: *Төлкө бик хәйләкәр. Кешеләр уны аулай.*
*1) Төлкө бик хәйләкәр булһа ла, кешеләр уны аулай. 2) Төлкө бик хәйләкәр, шулай ҙа кешеләр уны аулай.*

1. Арыҫлан — йыртҡыс хайуан. Кешеләр уны йыуашландыра ала. 2. Ҡояш бик ҙур. Ул беҙгә бәләкәй күренә. 3. Үрмәксе осмай. Ул осоп йөрөгән себендәрҙе тота. 4. Ябалаҡ сысҡан тота. Төлкө тауыҡ ашай. 5. Ҡояш көндөҙ яҡтырта. Ай төндә яҡтырта.

**85.** Мәҫәлде уҡығыҙ, уның йөкмәткеһен һөйләгеҙ, төп фекерҙе әйтеп бирегеҙ. Уға исем бирегеҙ. Йөкмәткеһенә ҡарап, мәҫәлде нисә өлөшкә бүлергә мөмкин? Һәр өлөшкә исем бирегеҙ: план төҙөгөҙ.

Бер бал ҡорто йылға ярына осоп килгән. Уның һыу эскеһе килгән. Эсәм тигәндә, һыуға йығылып бата башлаған. Уны күгәрсен күреп ҡалған. Ул ҡортҡа ағас ботағы ырғытҡан. Бал ҡорто шул ботаҡҡа йәбешеп, үлемдән ҡотолған.

Бер ваҡыт күгәрсен йоҡлап ултырған булған. Аусы уға мылтыҡ төҙәгән. Был хәлде бал ҡорто күреп ҡалған. Ул аусыны килеп саҡҡан. Уның ҡулы ҡалтырап киткән. Мылтыҡтың пуляһы күгәрсендең эргәһенән генә үтеп киткән. Шулай итеп, бал ҡорто күгәрсенде ҡотҡарған.

● 3-сө һәм 4-се, 5-се һәм 6-сы һөйләмдәрҙе берләштереп, ҡушма һөйләмдәр төҙөгөҙ. Һөйләмдәр төҙөгәндә ҡайһы бер үҙгәрештәр индерергә мөмкин.

**86.** 1. Өҙөктө уҡып, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Текстҡа исем бирегеҙ. 2. Ҡушма һөйләмдәрҙе яҙып алығыҙ, һәр ябай һөйләмдә баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе билдәләгеҙ.

Тәрбиәле бала алтындан да баһалы. Ундай бала шатлыҡ, йөҙгә аҡлыҡ килтерә, ә уны һәр кеше ярата һәм маҡтап һөйләр. Тәрбиәле балаларҙың ғәҙәттәре шулай була: ул йоҡоһонан иртә тора, сөнки кешеләр оҙаҡ йоҡлап ятҡан балаға ялҡау тиҙәр.

Тәрбиәле баланың бит-ҡул һөртә торған яулығы, тарағы айырым була, ул ҡулын үҙ ҡулъяулығына ғына һөртөр, үҙ тарағы менән генә сәсен тарар. *(Р. Фәхретдинов)*

**87.** 1. Хикәйәне уҡығыҙ. Һөйләү өсөн план төҙөгөҙ: хикәйәне өлөштәргә бүлеп, уларға исем бирегеҙ, унан һөйләгеҙ. 2. Ҡушма һәм тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе табығыҙ.

ТАШБАТҠАН

Ташбатҡан ауылы үркәсле бейек тауҙар итәгендә, бер битләстә, тау ҡуйынына һыйынып ултырған. Ҡайҡайып торған тауҙар ауылға ҡолай яҙып тора. Шул тауҙарҙан Урал башлана, артабан береһенең өҫтөнән икенсеһе аша ҡарап торған һыҙма тауҙар китә. Тауҙарҙың бүлкәттәре араһында тәрән уялар бар. Уя эсенән киткән тумалаҡ

юл тау башына, һыртҡа алып менә. Һырт өҫтөндә тумалаҡ юл бара-бара ла яҙлыға, әҙәм аяғы баҫмаған урмандар башлана.

Ташбатҡан ауылы Үҙәште йылғаһын һыулай. Ул тау-таш араһынан, ҡая таштарға бәрлегә-бәрлегә, тау морондарында бөгөлдәр яһап, шаршылы-ятыулы булып, ашҡынып килеп сыға. Ауылды үткәс, йылға туғайҙан талғын ғына аға башлай, ул әрәмә араларында айырсалар яһай, ҡолаҡтарға бүленә.

Үҙәште йылғаһынан кешеләр яҙғы ташҡында ҡыуғын ҡыуғандар, һал һаллағандар. Ҡыуғынға типһә тимер өҙөрлөк көслө, йөрәкле егеттәр генә йөрөй. *(Ж. Кейекбаев)*

**Ҡушма һөйләмде синтаксик тикшереү тәртибе**

1. Ҡушма һөйләм нисә өлөштән – нисә ябай һөйләмдән тора?

2. Һәр ябай һөйләмдең нигеҙен (баш киҫәктәрен), эйәрсән киҫәктәрен табығыҙ.

Ҡушма һөйләмде тикшереү өлгөһө

*Ваҡ ямғырҙар яуа башланы, һәм япраҡтарҙа тәүге һары биҙәктәр күренде.*

| Телдән: | Яҙып: |
|---|---|
| Ҡушма һөйләм, ике өлөштән – ике ябай һөйләмдән тора. Беренсе ябай һөйләмдең нигеҙе – *ямғырҙар яуа башланы,* икенсеһенеке – *биҙәктәр күренде; ваҡ, тәүге, һары* – аныҡлаусылар, *япраҡтарҙа* – хәл. | 1) *Ваҡ ямғырҙар яуа башланы, һәм* 2) *япраҡтарҙа тәүге һары биҙәктәр күренде.* |

**88.** Мәҡәлдәрҙе һәм тапҡыр һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Мәҡәлдәрҙең, тапҡыр һүҙҙәрҙең һөйләм төҙөлөшөн тикшерегеҙ. «Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын» темаһына инша яҙығыҙ.

**ТҮ**

1. Дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер. 2. Дуҫ көлгәндә беленмәй, бөлгәндә беленә. 3. Кеше юлдашынан беленә. 4. Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмаҫ. 5. Дуҫы күпте яу алмай. 6. Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын. 7. Ысын дуҫ ҡына үҙ дуҫының йомшаҡлыҡтарын кисерә ала. *(У. Шекспир)* 8. Ысын дуҫ бәхетһеҙлектә һынала. *(Эзоп)* 9. Ысын дуҫлыҡ үҙ-ара таяныстан тора. Дуҫым минең теләктәремде хуплай, мин уныҡын хуплайым. *(И. Гёте)* 10. Дуҫтарҙы күреүҙән дә ҙур шатлыҡ юҡ, дуҫтарыңдан айырылыуҙан да ҙур ҡайғы юҡ. *(Рудаки)*

## § 14. Тура телмәр

★ Билдәләнгән һүҙҙәр ҡайһы һөйләмдә һүҙмә-һүҙ, ҡайһыһында яҡынса алынған?

Мәшһүр ғалим Риза Фәхретдинов балаларға ғилемде аңлатып: «*Ғилем күңел күҙен асыр, наҙанлыҡ ҡараңғылығын бөтөрөр, оло дәрәжәләргә тоташтырыр, дошмандарға ҡаршы ҡорал булыр, донъя көтөү юлдарын белдерер*», – тип яҙған.

Мәшһүр ғалим Риза Фәхретдинов балаларға *ғилемдең күңел күҙен асасағын, наҙанлыҡ ҡараңғылығын бөтөрәсәген, оло дәрәжәләргә тоташтырасағын, дошмандарға ҡаршы ҡорал буласағын, донъя көтөү юлдарын белдерәсәген* төшөндөрөп яҙған.

| *наҙанлыҡ* | *ғилем* |
|---|---|

► Кешенең һүҙҙәрен үҙе һөйләгәнсә үҙгәртмәй һүҙмә-һүҙ биреүҙе **тура телмәр** тип атайҙар: *Уҡытыусы балаларҙан: «Өйгә бирелгән эште барығыҙ ҙа әҙерләп килдегеҙме?» – тип һораны.*

Тура телмәрле һөйләм автор һүҙенән һәм тура телмәрҙән тора. *Уҡытыусы балаларҙан* һәм *тип һораны* – автор һүҙҙәре. *«Өйгә бирелгән эште барығыҙ ҙа әҙерләп килдегеҙме?»* – тура телмәр.

Тура телмәр автор һүҙҙәренең алдында ла, уртаһында ла, һирәгерәк аҙағында ла килә.

**89.** Тура телмәрле һөйләмдәрҙе уҡығыҙ: автор һүҙҙәре менән тура телмәр араһында пауза яһағыҙ, тура телмәр ап-асыҡ айырылып торһон. Диктофонға яҙып тыңлағыҙ, уҡығандағы хаталарығыҙҙы әйтегеҙ. Һуңынан автор һүҙҙәренең тура телмәргә ҡарата ҡайһы урында торғанын әйтегеҙ. Тексты күсерегеҙ. Өлгө буйынса тура телмәрле һөйләмдәрҙең схемаларын эшләгеҙ.

Юлдаш: «Өләсәй, ҡымыҙҙы ниңә бешәләр?» – тип ҡыҙыҡһынды. «Ни өсөн булһын, ҡымыҙ эремәһен, ҡаймаҡ кеүек яҙылып торһон өсөн», – тине Зөлхизә әбей. «Нисек, нимә менән бешәләр?» – тип ныҡышты Юлдаш. «Ул һиңә ниңә кәрәк?» – тип аптыраны өләсәһе. «Ҡымыҙҙың нисек яһалғанын белгем килә», – тип яуап бирҙе ейәне. *(З. Биишеванан)*

Өлгө: 

– баш хәреф менән яҙыла торған автор һүҙҙәре,

– бәләкәй хәреф менән яҙыла торған автор һүҙҙәре,

– тура телмәр.

**90.** Һыҙыҡтар урынына тура телмәрҙәр ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Тыныш билдәләре ҡуйылышын аңлатығыҙ.

1. «— — ?» – тип малай ҡыйыуһыҙ ғына һорап ҡуйҙы. 2. Мәктәп директоры: « — — !» – тип һүҙен бөтөрҙө. 3. Әсә: «— — », – тине бышылдап ҡына.

4. Әхмәттән өләсәһе, тулҡынланып: «— —?» — тип һаулыҡ һорашты. 5. Әхмәт ышаныслы итеп: «— — », — тип өләсәһен тағы ла ҡыуандырҙы.

► Тура телмәр һәр саҡ тырнаҡтар эсенә алына, ҙур хәреф менән башлап яҙыла.

► Тура телмәр автор һүҙҙәренең уртаһында килһә, автор һүҙенең беренсе өлөшөнән һуң (тура телмәр алдынан) ике нөктә (:) ҡуйыла, автор һүҙҙәренең икенсе өлөшө (тура телмәрҙән һуң) бәләкәй хәреф менән башлап яҙыла, аҙаҡтан нөктә ҡуйыла: *Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, аҙыраҡ ултырғас:* «Һин, энем, монтёр булаһыңмы?» – *тине.*

А. һ: «Т. т?» – а. һ. ☐ : «▨ ?» – ☐.

Тура телмәр автор һүҙҙәренән алда килһә, ул тырнаҡтар эсенә алына, унан һуң өндәү, һорау билдәләренең береһе йәки өтөр, шунан һыҙыҡ (–) ҡуйыла һәм автор һүҙҙәре яҙыла: «Кәмәне көнбайышҡа бор, елгә арт менән барайыҡ!» – *тип ҡысҡырҙы Юлдаш Ҡыҙыраҫҡа.* (З. Биишева)

«Т. т!» – а. һ. «▨ !» – ☐.

**91.** Һөйләмдәрҙең билдәләнгән өлөшөн тура телмәр итеп яҙығыҙ. Тейешле тыныш билдәләре ҡуйығыҙ, һуңынан уларҙың схемаһын яһағыҙ.

1. Беҙ барғас та, бабай, **йәгеҙ балалар һыу алып килеп, сәй ҡайнатып ебәрегеҙ** тине. 2. Балыҡтарҙы күрһәтеп, ул дауам итте, **һин Ғабдрахман бынау балыҡтарҙы таҙартып бешерә башла. 3. Ағиҙелдең аръяғына сығып, ҡаршылағы Аҡташ тауына менергә кәрәк ине** тине арабыҙҙан берәү. *(С. Агиштан)*

**92.** Көләмәстәрҙе ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Бай менән хеҙмәтсенең һүҙҙәрен айырып әйтегеҙ. Уларҙың һүҙҙәре алдынан ниндәй тыныш билдәләре ҡуйылғанын әйтегеҙ.

### БАЙ МЕНӘН ХЕҘМӘТСЕ

Бер бай хеҙмәтсеһенә:

– Бар әле, бынау һауытты тултырып, бик тәмле эсемлек алып ҡайт, – тигән.

– Була ул, аҡсаңды ғына бир.

– Һай, иҫәр, аҡса биргәс, кем дә алып ҡайта уны. Һин бына, йүнле хеҙмәтсе булһаң, аҡсаһыҙ ғына алып кил.

Хеҙмәтсе сығып китә. Бер аҙҙан һуң ҡайтып:

– Бына, бай ағай, һорағаныңды алып ҡайттым, – тип һауытты алдына ҡуя.

Бай, һауыттың буш икәнен белгәс:

– Һуң, бының эсендә бер нәмә лә юҡ бит! – ти.

– Эсендә булғас, уны кем дә эсә ала, бына һин уның эсендә бер нәмә лә юҡ ваҡытта эсеп ҡара, – тигән хеҙмәтсе.

► Ике йәки бер нисә кешенең ҡара-ҡаршы һөйләшеүен **диалог** тип йөрөтәләр. Диалогтарҙа кешеләрҙең һүҙҙәре ҡыҙыл юлдан, һыҙыҡ ҡуйып, баш хәреф менән яҙыла.

**93.** Өҙөктө иғтибар менән уҡып, уны мәғәнәүи яҡтан нисә өлөшкә бүлеп булғанын әйтегеҙ. Һәр өлөштө нисек атар инегеҙ? Һәр бер киҫәктең ниндәй юлдан башлап яҙылғанына иғтибар итеп, һығымта сығарығыҙ.

Ана, зәңгәр йылға, тирә-яғында ҡоштар сут-сут һайрай, хуш еҫ таралған. Был – йәмле Инйәр буйы. Инйәр таштан ташҡа һикереп, ашҡынып аға. Ул Ямантау һыртынан башлана ла, Елмәрҙәкте киҫеп, Архангел районына еткәс, тыныслана төшә...

Архангелдә төрлө милләт кешеләре йәшәй: башҡорт та, рус та бар, латыш йә украин да бар, татар һәм сыуаш та бар. Улар бер туған ғаилә һымаҡ татыу йәшәй, бер үк колхозда, бер үк бригадаларҙа һәм фермаларҙа эшләй. Улар ысын мәғәнәһендә туғанлашҡан. *(Ш. Насыровтан)*

► Яҙыуҙа телмәрҙең һәр яңы фекер йәки йөкмәтке аңлатҡан өлөшө **ҡыҙыл юлдан** башлана.

## «Синтаксис һәм пунктуация» буйынса контроль һорауҙар һәм эштәр

1. Һүҙбәйләнештәр һүҙҙәрҙән нимәһе менән айырыла? Һүҙбәйләнеште тикшереү тәртибен әйтегеҙ, миҫалдар менән иҫбатлағыҙ.

2. Тултырыусы менән хәлдәр һөйләмдең ҡайһы киҫәгенә эйәреп килә?

3. Хәбәр һәм өндәү һөйләмдәрҙе нимәгә ҡарап айыралар? Уларҙа ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?

4. а) йыйнаҡ, б) тарҡау, в) тиң эйәле, г) тиң хәбәрле, д) тиң эйәрсән киҫәктәрҙән торған һөйләмдәр төҙөгөҙ. Уларҙың схемаларын эшләгеҙ.

5. Ҡушма һөйләмдәрҙең ябай һөйләмдәрҙән айырмаһын әйтегеҙ.

6. Ярҙамсы һүҙҙәр менән килгән ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын һөйләгеҙ.

7. Тура телмәр автор һүҙенән нисек айырыла?

★ **94.** 1. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Юлдаш менән Ҡыҙырастың портреттарын телдән тасуирлағыҙ. 2. Һуңынан тиң киҫәкле ҡушма һөйләмдәрҙе, тура телмәрле һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ. Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булыуын, уларҙың ҡайһы һүҙгә бәйләнеп килеүен әйтегеҙ, схемаларын төҙөгөҙ.

Юлдаш Ҡыҙырастың киреһе. Ул буйға Ҡыҙырастан бер башҡа бейек булып үҫкән. Төҫкә лә Ҡыҙырастан башҡараҡ: оҙонса яңаҡлы, көмрөрәк

ҡырлы танаулы, тулҡынланып торған ҡуңыр сәсле, уйсан түңәрәк күҙле. Уның ҡап-ҡара ҡалын ҡаштары ҡарлуғас ҡанаттары кеүек ҡыйылып тора. Яурындар киң, ҡулдар көрәк кеүек.

Юлдаш менән Ҡыҙырас бер йылда тыуғандар, быйыл икеһенә лә ун ике йәш тулды. Улар былтыр дүртенсене тамамлағандар, хәҙер бишенселә уҡыйҙар. Юлдаш «Маҡтау грамотаһы»н Ҡыҙырасҡа күрһәтте, тик Ҡыҙырас ҡына үҙенең грамотаһын күрһәтә алманы. Ул уны алып килергә онотҡан, ләкин Юлдаш уға шул көйөнсә лә ышанды. «Ошондай шәп малайҙың насар уҡыуы мөмкинме ни?» — тип уйланы ул. Уның менән осрашыуына ҡыуанып бөтә алманы. Ул Ҡыҙырастың үткерлегенә, теремеклегенә һоҡланды. «Их, уның кеүек булһаң ине, бындай егет бер ерҙә лә юғалмаясаҡ», — тип тә уйлап алды ул. *(З. Биишева)*

- Үҙегеҙ һайлаған берәй һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатып яҙығыҙ, уларҙың ҡайһыһы эйәртеүсе, ҡайһыһы эйәреүсе һүҙ икәнен күрһәтегеҙ.

**95.** Ә. Ситдиҡованың «Бал еҫе» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Йәйҙең ҡайһы осоро һүрәтләнгән? Унда нимәләр күрәһегеҙ? Уларҙы һүрәтләгеҙ. Рәссам ниндәй төҫтәр ҡулланған? Ни өсөн? Һүрәт буйынса инша яҙығыҙ.

# ФОНЕТИКА ҺӘМ ГРАФИКА. ОРФОГРАФИЯ. ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ

★ Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ниндәй өндәрҙән торғанын әйтегеҙ. Тәүҙә тартынҡыларын, һуңынан һуҙынҡыларын төркөмләп яҙығыҙ.

БАЛАН

Ап-аҡ сәскә атҡан баланды кем генә белмәй. Уның сәскәһе **бал ҡорттарын да** үҙенә тарта. **Йүкәнән** ҡала иң күп бал биргән ағас ул. Баландың емеше лә **витаминдарға** бай.

Балан сентябрь, октябрь айҙарында өлгөрә. Емештәрен **тәүге** һалҡындарҙан һуң йыялар. **Һыуыҡтан һуң** балан тәмләнә.

Баланды **ҡышҡылыҡҡа** ике төрлө юл менән һаҡлап була. **Тәлгәшләп** йыйылғанды соланға **баулап** эләләр. Тирелгән баланды **күнәккә** тултыралар ҙа унда һыу ҡоялар. Һыу менән ҡуша **туңған емеш** һәйбәт һаҡлана.

Баланды йыйғанда ҡыуағында ла ҡалдырырға **кәрәк,** сөнки ҡышын уны ҡоштар ҙа ашай.

● 1. [*ҡ*], [*г*]; [*м*], [*б*]; [*о*], [*ө*]; [*у*], [*ү*] өндәрен әйтегеҙ: уларҙы әйткәндә ниндәй телмәр ағзаларының ҡатнашҡанын һөйләп бирегеҙ.

2. Һорауҙарға яуап бирегеҙ: 1) Телмәрҙең иң ҡыҫҡа берәмеге нимә? 2) Һүҙ нимәләрҙән тора?

**96.** 1. Нәсихәттәрҙе уҡығыҙ. Аңлағанығыҙҙы үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ. Уларҙы күсереп алығыҙ.

2. *Эштәргә, өйрәнегеҙ, матур, ихлас* һүҙҙәрендә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе белдергән хәрефтәрҙе билдәләгеҙ.

* Белеме күп кешеләр алдында аҙ ғилемле булыуҙан оялмағыҙ. Ҡулығыҙҙан килгән нәмәләрҙе белмәй ҡалыуҙан оялығыҙ. Сөнки был ғәйептер.

* Һәр ваҡыт белемде яратығыҙ. Өйрәткәндәрҙе ихлас тыңлағыҙ, һуңынан кәрәккәнен өйрәнегеҙ, һәр ғилемдән матур нәмәләрҙе белегеҙ, һис бер ваҡыт ғилемгә тәкәбберлек күрһәтмәгеҙ.

| |
|---|
| *өгөт* *нәсихәт* |

* Белем алыу матур эш булһа ла, боҙоҡ ниәт менән уҡығанда матурлығы кәмей. Шуның өсөн: «Беҙҙән Аллаһы Тәғәлә риза булһын һәм яҡшы эштәргә сәбәп булһын ине», – тип ниәт итегеҙ. Был яҡшы ниәт...

| |
|---|
| *ниәт* *маҡсат* |

* Белемдең маҡсаты дәрәжәлә түгел, ә файҙалы кеше булыуҙа. *(Р. Фәхретдинов)*

- Аҙаҡҡы һөйләмдең мәғәнәһен үҙегеҙ аңлағанса яҙығыҙ.

► Кеше һөйләгәндә өндәр сығара. Уларҙы телмәр өндәре тип йөрөтәләр. Өн телмәрҙең иң ҡыҫҡа һәм бәләкәй берәмеге һанала.

Телмәр өндәрен, уларҙың төрлө шарттарҙа нисек үҙгәреүен өйрәнеүсе фәнде **фонетика,** ә өндәрҙең яҙыуҙа бирелешен өйрәнә торған фәнде **графика** тип атайҙар.

**97.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Тәүге дүрт юлда һүҙҙәрҙең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен атап күрһәтегеҙ. Ике өндө сағылдырған хәрефтәрҙе әйтегеҙ, һуңынан *йәй, көҙ* һүҙҙәренең һуҙынҡыларын алмаштырып, башҡа һүҙҙәр яһағыҙ.

ДҮРТ МИҘГЕЛ

Яҙһылыуҙы алмаштырған
Йәмле йәй ҙә үтә икән,
**Ерҙең йөҙөн алтынлаған**
**Аҫыл көҙ ҙә етә икән.**

Күктән ҡарап Ҡояш апай
Һаман **алсаҡ көлә** икән.
Атланып аҡбуҙ атына,
Ҡыш бабай ҙа килә икән.

Йәшел, һары, ҡара ялан
Таң атҡансы ап-аҡ булған.
Ҡарар күҙҙең яуын алып,
Биҙәкләнеп тәҙрә туңған.

*(Н. Иҙелбай)*

*ап-аҡ*
*күм-күк*
*йәм-йәшел*
*ҡап-ҡара*
*һап-һары*
*зәп-зәңгәр*

*сөм ҡара*
*дөм ҡараңғы*

● 1. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең, һөйләмдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. 2. Шиғырҙы уҡып, диктофонға яҙығыҙ, һуңынан тыңлап ҡарағыҙ. Шиғыр уҡығандағы хаталарҙы табығыҙ, күмәкләп төҙәтегеҙ. 3. Оҡшаған миҙгел тураһындағы строфаны яттан яҙығыҙ, аҙаҡ китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

## § 15. Өн һәм хәреф. Алфавит

★ Диалогтағы тыныш билдәләренә иғтибар итеп, уны дөрөҫ интонация менән ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.

ИРТӘНСӘК

– Һаумы!
– Хәйерле иртә!

– Һаулығың нисек?
– Рәхмәт, бер көйө.
– Яңы урында нисек йоҡланың?
– Бигүк яҡшы түгел. Аҙыраҡ өшөттөрҙө.
– Йәл.
– Уҡыуың нисек бара әле?
– Рәхмәт, яҡшы ғына.
– Ғәфү ит. Уҡырға китергә ваҡыт.
– Ярай. Әйҙә мин дә китәйем.

● 1. Тәүге биш юлдағы һүҙҙәрҙән яңғырау һәм һаңғырау тартынҡы өндәрҙең, һуҙынҡы өндәрҙең хәрефтәрен күрһәтегеҙ.

2. Һорауҙарға яуап бирегеҙ: 1) Хәрефтәр нимә өсөн файҙаланыла? 2) Алфавит тип нимәгә әйтәләр? 3) Алфавитты ни өсөн яҡшы белергә кәрәк?

► Һүҙҙе әйтәбеҙ ҙә, яҙабыҙ ҙа. Яҙғанда беҙ һәр өндө хәреф менән сағылдырабыҙ.

Өндәрҙе яҙып һүрәтләү өсөн ҡабул ителгән шартлы билдәләр **хәреф** тип йөрөтөлә. Хәрефтәрҙе бер тәртипкә теҙеп яҙалар. Хәрефтәрҙең теҙемен **алфавит** тип атайҙар. Бөтә төр һүҙлектәр, исемлектәр, китапханаларҙа китап исемдәре яҙылған карточкалар тик алфавит тәртибендә генә була. Алфавитты яҡшы белеү һәр кемгә кәрәк.

Башҡорт алфавитында **42 хәреф** бар.



Телмәр ағзалары: *1* – үпкә, *2* – тын юлы, *3* – тамаҡ төбө, *4* – ауыҙ ҡыуышлығы, *5* – тел, *6* – ирендәр, *7* – тештәр, *8* – танау ҡыуышлығы.

► Алфавит һүҙе грек алфавитының башында торған «альфа» һәм «вита» тигән хәрефтәрҙең исемдәренән ҡушылып барлыҡҡа килгән.

**98.** Ҡош исемдәрен алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

Һабантурғай, ҡарабаш турғай, тәгәрлек, сыйырсыҡ, сәүкә, төйләгән, ҡоҙғон, кәлмәргән, бүҙәнә, балғабаш, көйөлдө, һаралйын, тартай, яр ҡарлуғасы, әберсә турғайы, юл турғайы, сапсан, өкө, туғаҙаҡ, ҡарға, һандуғас, күгәрсен, ҡарағош, ҡыйғыр, аҡсарлаҡ, шоңҡар, ыласын, өйрәк, бөркөт, ҡарлуғас, таҙғара, ҡарсыға, буран турғайы, ябалаҡ, тутыйғош.

● *Һабантурғай, тәгәрлек, сыйырсыҡ, өйрәк, күгәрсен* исемдәре менән башта һүҙбәйләнеш, аҙаҡтан шул һүҙбәйләнештәрҙән һөйләмдәр төҙөгөҙ, уларҙы дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Ул ҡоштар ҡышты ҡайҙа үткәрә? Нисек туҡланалар? Шуларҙы һөйләп бирегеҙ.

**99.** Көләмәсте уҡығыҙ, һөйләп бирегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе өндәре буйынса тикшерегеҙ. Ул һүҙҙәрҙә нисә өн һәм нисә хәреф барлығын әйтегеҙ: өндәр һаны менән хәреф һаны тап киләме? Килмәһә, сәбәбе ниҙә?

## ЯХЪЯНЫҢ ҠЫШЫН САҢЛЫ ЮЛДАН ҠАЙТҠАНЫ

**Яхъя** һөйләгән, ти:

– Йылға **аръяғынан** киләм, йәшел балтырғанды бер ҡапсыҡ йыйҙым[4]. Бәләкәй санаға һалып алдым, ҡайтып еттем саңлы юлдан, борҡолдата баҫып **бирьяҡка** һыуҙан паром менән сыҡтым. Был яҡҡа сыҡһам, буран көрт һалған: ҡарҙы йыра-йыра, саҡ ҡайтып еттем саңлы юлдан, борҡолдата баҫып.

**100.** 1. Алфавитта бөтәһе нисә хәреф икәнен әйтегеҙ. Уны яттан үҙ тәртибендә һанап күрһәтегеҙ. 2. Өндәр менән хәрефтәрҙең әйтелешендәге айырманы күрһәтегеҙ. Алфавитта йәйәләр эсендә хәрефтәрҙең исеме бирелгән.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Аа, | Бб, | Вв, | Гг, | Ғғ, | Дд, | Ҙҙ, | Ее, | Ёё, | Жж, |
| (а) | (бы) | (вы) | (гы) | (ғы) | (ды) | (ҙы) | (йэ) | (й’о) | (жы) |
| Зз, | Ии, | Йй, | Кк, | Ҡҡ, | Лл, | Мм, | Нн, | ң, | Оо, |
| (зы) | (и) | (йы) | (кы) | (ҡы) | (лы) | (мы) | (ны) | (ңы) | (о) |
| Өө, | Пп, | Рр, | Сс, | ҫ, | Тт, | Уу, | Үү, | Фф, | Хх, |
| (ө) | (пы) | (ры) | (сы) | (ҫы) | (ты) | (у–уы) | (ү-үе) | (фы) | (хы) |
| Һһ, | Цц, | Чч, | Шш, | Щщ, | ъ, | | Ыы, | | ь, |
| (һы) | (цы) | (ч’е) | (шы) | (щ’а) | (ҡалын айырыу билдәһе) | | (ы) | | (нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе) |
| Ээ, | Әә, | Юю, | Яя | | | | | | |
| (э) | (ә) | (йу) | (йа) | | | | | | |

● 1. Алфавиттағы өн белдермәгән хәрефтәрҙе күрһәтегеҙ. Ул хәрефтәр булған һүҙҙәргә миҫалдар килтерегеҙ.

2. Алфавиттан ике өндө сағылдырған хәрефтәрҙе әйтегеҙ. Ул хәрефтәр булған һүҙҙәргә миҫалдар килтерегеҙ.

**101.** Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып яҙығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе индереп, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

**Аш..яулыҡ, мең..япраҡ,** бир..яҡ, ар..яҡ, **арам..я, ян..ял, ҡал..я, ал..юҫыҡҡа,** бур..яҡ, төн..яҡ, көн..яҡ, дон..я, ҡул..яулыҡ, ал..япҡыс, дар..я, **ҡыл..яйыу,** ҡуш..яулыҡ, ҡул..яҙма, йыл..яҙма, Ил..яс.

● Ошо уҡ һүҙҙәрҙе алфавит тәртибендә күсереп яҙығыҙ. Ҡалын һәм нәҙек айырыу билдәләре – *ъ, ь* ҡайһы осраҡтарҙа ҡуйылғанын әйтегеҙ.

| | |
|---|---|
| а, о, у, ы | ъ |
| ә, и, е(э), ө, ү | ь |

► **ъ, ь** айырыу билдәләре ҡайһы бер һүҙҙәрҙә тамаҡ төбө менән өҙөп әйткәндә белдерәләр: *тәьмин, мәсьәлә, тәьҫир, маъмай, тәьҫорат.*

**102.** Төп башҡорт һәм рус теле аша ингән һүҙҙәрҙәге бер төрлө өндәрҙең әйтелешен сағыштырығыҙ. Айырмаларын аңлатығыҙ.

Болот – мотор, элек – электр, тир(ләү) – тир(ҙа), иртән – Ирина, иркә – Ира, тип (әйтә) – (әҙәби) тип, типик.

## § 16. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр

★ 1. Өҙөктө дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Уны тамамланған мәғәнәле өлөштәргә бүлегеҙ, һәр бүлектә нимә тураһында һүҙ барғанын әйтегеҙ, бүлектәргә исем бирегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе атап күрһәтегеҙ.

ҠЫР ҠАҘЫ

Ҡыш **алдынан ҡаҙҙың** һынған ҡанаты яҡшы уҡ төҙәлде. Ҡанатын күтәреп арҡаһына ла һала башланы.

Ҡунағымды **көндөҙҙәрен** баҡсала йөрөтөр булдым. Ул унда иркен тын алғандай була. Ул әле һаман үҙенең **иркенлектәге** иптәштәрен онотмай.

Ҡар яуғас, мал өйөндә үҙе генә тororлоҡ урын яһаным. Иртән һабаҡҡа киткәнсе лә, ҡайтҡас та **ашарға** һалып, һыу биреп торҙом.

Уның **ҡанаты** бөтөнләй төҙәлде. Ул ҡаҙҙарҙың ҡысҡырғанын ишетһә, үҙе лә **ҡыйғаҡлап** ебәрә. Ҡанаттарын ҡағып ҡуя. Шунан мин уның һаман да туғандарын, иптәштәрен һағынғанын һиҙә инем. *(М. Ғафури)*

● 1. [*о*], [*ө*], [*у*], [*ү*] өндәрен әйткәндә ҡайһы телмәр ағзалары ҡатнашҡанын һөйләгеҙ. Уларҙы ниндәй һуҙынҡылар тип йөрөтәләр? Ҡалын һуҙынҡы өндәрҙе һанап күрһәтегеҙ.

2. Тартынҡы өндәрҙе барлап сығығыҙ. Нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы өн барлығын әйтегеҙ, һанағыҙ.

**103.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Текстҡа исем бирегеҙ.

Йыл **миҙгелдәренә** ҡарап күсеп йөрөүҙәренә бәйле ҡоштарҙы өс төркөмгә айыралар: ултыраҡ, күсеп йөрөүсе һәм күсер ҡоштар.

Ултыраҡ ҡоштар йыл әйләнәһенә бер урында йәшәй. Йәй аҙағында уларҙың ҡайһы берҙәре ҡышҡа аҙыҡ әҙерләй. Суҡтурғайҙар кедр һәм имән **сәтләүектәрен** ерҙәге соҡорҙарға һәм мүк араһына йәки ағас ҡыуыштарына йәшерә. Ҡарабаш турғайҙар менән шыуышҡаҡ турғайҙар ҡышҡа **орлоҡтар**, бөжәктәр йыя, уларҙы ағас ҡабығындағы ярыҡтарға, мүк араһына тығып ҡуялар.

Күсеп йөрөүсе ҡайһы бер ҡоштар бәләкәй туптарға тупланып, аҡрынлап көньяҡҡа күсә бара. Мәҫәлән, ҡара ҡарғалар, **ҡыҙылтүштәр** ҡар аҙ яуған йәки еләктәргә һәм башҡа аҙыҡҡа бай урындарҙы эҙләп оса, уларҙың даими ҡышлау урындары булмай.

Күсер ҡоштар көҙөн һалҡын һәм уртаса климатлы өлкәләрҙән бөтөнләй осоп китеп, ҡышты үткәреү өсөн йылы илдәргә йүнәлә. Туптарға йыйылып, улар йөҙәрләп, меңәрләп, берәүҙәре көндөҙ, икенселәре төнөн оса. Юлда ҡоштар туҡлана, ял итә һәм шул рәүешле үҙҙәре ғәҙәтләнгән даими **ҡышлау** урынына барып еткәнсе осалар. *(«Биология», 7–8-се кластар өсөн дәреслек)*

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙә һуҙынҡы өндәргә – бер, тартынҡы өндәргә ике һыҙыҡ һыҙығыҙ.

**104.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ, исем бирегеҙ.

1. **Ҡорҙоң** ҙурлығы өйрәктәй. Яңғыҙ ҙа, күмәкләшеп тә йөрөйҙәр. Яҙғыһын ата ҡорҙар аҡландарға уйынға сыға. **Төҫө** күкһел ҡара, ҡанаттары аҡ һыҙыҡлы ҡара көрән, **ҡойроҡ** төбө аҡ. Ҡара ҡойроҡ ҡауырһындары ике яҡҡа айырылып тора.

Ҡыҙыл ҡашы бар. Аяҡтары бармаҡтарына тиклем йөнлө. Инә ҡор ҡара һәм көрән һыҙыҡлы буҙ төҫтә. Ата ҡор уйын ваҡытында «шиуффый» тауышы сығара, инә ҡош ҡытҡылдай. Йәшәү урыны – ҡайынлыҡ, һирәк ҡарағайлыҡ. Төрлө үлән орлоҡтары, еләк, ағас **бөрөһө** менән туҡлана. Ултыраҡ ҡош 8–12 йомортҡа һала. *(Э. Ишбирҙинән)*

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙә тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙе әйтегеҙ.

**105.** Тексты уҡығыҙ. Текст нимә тураһында? Тағы ниндәй халыҡ байрамдарын беләһегеҙ?

ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

Айгөлдө өләсәһе иртүк уятты:

– Тор, ҡыҙым. Ҡарға бутҡаһына һуңға ҡалабыҙ бит.

– Бутҡа ашағым килмәй, – тине лә кире **ятты.**

– Балаҡайым, Ҡарға бутҡаһы – матур байрам бит ул. Һабантуй кеүек. Һинең уны бер ҙә күргәнең **юҡ** әле, – тине өләсәһе.

Улар килгәндә, Ҡарағайлы тауында бик күп кеше йыйылғайны. Бер урында ҙур ҡаҙанда бутҡа бешерәләр. **Яланда** сәй ҙә ҡайнаталар. Балалар бер урында, йәштәр икенсе **ерҙә** түңәрәк булып бейергә төшкәндәр. Уларға оло апайҙар, инәйҙәр ҙә ҡушылып китә. Был байрамға ир-**егеттәр** ҡатнашмай.

Бөтәһе лә бергәләп ҡарға бутҡаһы ашанылар. Айгөл сак телен йотманы. Бындай тәмле бутҡаны уның ашағаны юҡ ине әле.

Ағастарҙа ултырған ҡарғаларға ла өлөш тейҙе. Ашап туйғас, улар һауаға күтәрелделәр ҙә, кешеләргә рәхмәт әйткәндәй, байрам хәбәрен **тирә-яҡҡа** таратырға остолар. *(«Аҡбуҙат» журналынан)*

● 1. Ике өндө сағылдырған хәрефтәрҙе әйтегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең һуҙынҡыларын күрһәтегеҙ.

► Башҡорт алфавитында **я, ю, е, ё** хәрефтәре икешәр өндө сағылдыра: **я = [й + а]; ю=[й+у]; е = [й + э]; ё = [й' + о]:** *Юлай, ерән, ёлка.*

Ҡайһы бер өндө белдереү өсөн ике хәреф алынған: **э, е** хәрефтәре бер үк өндө **[э]** сағылдыралар, тик айырма шунда: **э** хәрефе – һүҙҙең башында, **е** һүҙҙең уртаһында һәм аҙағында яҙыла: *әлгес, элекке.*

**106.** Түбәндәге ҡалыптарҙы, һуҙынҡы хәрефтәр ҡуйып, бер нисә вариантта яҙығыҙ.

Өлгө: *тор, тар, тур; күр, көр, кер.*

Ҡ..р, к..р, ҡ..ҙ, к..ҙ, б..л, ҡ..л, ҡ..ш, к..с, б..ҙ, ..л.., к..л.., к..р,

● 1. Парлы һуҙынҡы, һуңынан парлы тартынҡы өндәрҙе әйтегеҙ.

а – о; ә – ө; у – э(е); д – т; б – п; ы – и

2. Ҡайһы өндәрҙе әйткәндә үпкәнән килгән һауа ҡаршылыҡҡа осрай, әйтәйек, иренгә, тел-тешкә ҡағылыуы беленәме?

Һуҙынҡыларҙы әйткәндә ундай ҡаршылыҡ буламы?

**107.** Һүҙҙең мәғәнәләрен ниндәй һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәргә ҡарап айырабыҙ? Мәғәнәләре берәр генә һуҙынҡы һәм тартынҡы өн менән айырылған тағы ла бер нисә һүҙ табығыҙ.

Ҡош, күҙ, ҡаҙ, ҡыҙ.

**108.** 1. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Нимә тураһында һүҙ барғанын аңлатығыҙ. Унда ниндәй ҡош тураһында яҙылғанын әйтегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ниндәй өндәрҙән торғанын әйтегеҙ.

**Ҡыуарған** ағас ҡабығын
Суҡып, **тишкеләп** бөтә,
Аҙаҡ, **суҡыуҙан** ҡаңғырып:
– Суҡымам, – тип ант итә.

Иртә менән тороп, **тағы**
Туҡтауһыҙ **туҡ-туҡ** итә.
Серек, **иҫке ҡабыҡтарҙы**
Өңөп, тишкеләп бөтә.

Ҡапыл **ултырған** еренән
Оса ла тағы **ҡуна.**
Кипкән ағастар **эсенән**
Ҡорттар суҡып **туйына.**

*(С. Кулибай)*

*кәкре*
*бөкрө*
*көмрө*

*көслө*
*ғәйрәтле*
*ғәййәр*

● 1. *Ҡап, тап, туп, көрәк, һәнәк* һүҙҙәрен эйәлек заты менән үҙгәртегеҙ; һуңғы өндәрҙең ниндәй өнгә үҙгәреүен һөйләгеҙ.

⊙ 2. Әйткәндәрҙе диктофонға яҙып, тыңлап ҡарағыҙ.

Ө р н ә к: *ҡап – ҡабым, ҡап – ҡабың, ҡап – ҡабы.*

3. *Көмрө, ғәйрәтле, ғәййәр, дәһшәтле* һүҙҙәре менән башта берәр һүҙбәйләнеш, артабан һөйләмдәр яҙығыҙ.

**109.** Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ниндәй өндәр мәғәнәләрҙе айырып килә? Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы күрһәтегеҙ.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| кеше | бәрә | бүлә | бөрөү | кеш | кер | өс | көлә | көрөҫ | көйә |
| мышы | бара | була | бороу | ҡыш | ҡыр | ос | ҡола | ҡорос | ҡоя |

● Ошо уҡ һүҙҙәр эсенән исемдәрҙе, ҡылымдарҙы әйтеп сығығыҙ. Тәүге биш пар һүҙҙе ҡулланып, һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ. *Кеш, көрөҫ, бөрөү* һүҙҙәрен индереп, һөйләм яҙығыҙ.

► Башҡорт телендә **[а], [ә], [о], [ө], [ы], [э (е)], [у], [ү], [и]** һуҙынҡы өндәре бар. Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә **[о], [ы], [э]** өндәре бар, тик улар киңерәк, оҙонораҡ булып әйтелә: *тыл, эле́ктр, о́рден.*

**О, ө, у, ү** һуҙынҡыларын әйткәндәирендәр ҡатнашҡанға, уларҙы **ирен һуҙынҡылары** тип йөрөтәләр.

**110.** 1. Һүрәтләмәне уҡығыҙ. Унда нимә тураһында һүҙ барғанын һөйләп бирегеҙ. 2. Тәүге ике һөйләмдән ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы атап күрһәтегеҙ.

Ҡыш. Ул ер өҫтөн аҡ йомшаҡ юрған менән ҡаплай. Тәбиғәт тыныс йоҡоға тала. Урмандарҙа ҡош тауышы ишетелмәй тиерлек. Йәнлектәр ҙә өңдәрендә йоҡоға китә. Ҡайһы берҙәре тундарын алмаштыра. Ҡыш бабай, ағастар өшөмәһен өсөн, йылы аҡ шәлдәр ябып сыға. Ҡышларға ҡалған ҡоштарға ашарға бер ни ҙә ҡалмай. Улар ауылдар тирәһенә йыйыла. Ҡыш көнө бик ҡаты һыуыҡтар була, шулай ҙа шыршы турғайы бала сығара.

- Һуңғы өс һөйләмгә синтаксик анализ яһарға: һөйләмдәрҙең эйәһен һәм эйәрсән киҫәктәрен һорауҙар ярҙамында тикшерегеҙ.

**111.** Һуҙынҡы өндәрҙе ҡалын һәм нәҙек, ирен һәм иренләшмәгән өндәргә бүлеп, таблица яһағыҙ. Таблицағыҙҙа һеҙҙең фекерегеҙҙе раҫлаған миҫалдар ҙа булһын.

► Башҡорт телендә **[б], [п], [д], [т], [ҡ], [к], [ҙ], [ҫ], [с], [ш], [г], [ғ], [һ], [ў]** *(ваҡыт)*, **[й], [м], [н], [ң], [л], [р]** тартынҡы өндәре төп башҡорт һүҙҙәрендә, **[в]** *(вагон)*, **[ф], [ж], [з], [ч], [ц], [щ], [х]** өндәре сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙә лә ҡулланыла. Башҡорт телендә бөтәһе 28 тартынҡы өн бар.

⊙ **112.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең әйтелешен диктофонға яҙып, яҙылыштары менән сағыштырып ҡарағыҙ.

Яҙылыш менән әйтелеш араһындағы айырманы төшөндөрөгөҙ. Ул һүҙҙәрҙе әйткәндә ҡайһы һуҙынҡы юғалып ҡала?

Күркәмерәк, ҡайтышыраҡ, матурыраҡ, дөрөҫөрәк, айырым, яңылыш, олоғайыу, сәйерерәк,

ҡыйыныраҡ, айырата, ҡыйшайыу, ҡыйыуыраҡ, бейегерәк, былайыраҡ, ҡалынайыу, сағыу.

► Баҫымһыҙ ижектәрҙәге һуҙынҡыларҙың көсһеҙләнеүе, йәғни юғалыуы **редукция** тип атала.

⊙ **113.** Бирелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешендә ниндәй үҙгәрештәр барлыҡҡа килгәнен аңлатығыҙ. Ул һүҙҙәрҙең дә әйтелешен диктофонға яҙҙырып, тыңлап ҡарағыҙ. Һуңынан, һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен сағылдырып, таҡтаға яҙығыҙ.

Йомшаҡ, йомро, осрау, бөҙрә, күкрәү, тупраҡ, япраҡ, тәҙрә, тетрәү, күрше, тыҡрыҡ, бысраҡ, томра, күкрәксә, сәсрәт, хәсрәт, шаҙра, йомран, осраҡлы, аңра, мөңрәү.

*ҡурҡыныслы*
*хәтәр*
*дәһшәтле*

Әйтелеш өлгөһө: *ҡар-шы, сәс-рәт, шаҙ-ра.* (ы, е, ы written above)

**114.** *Халыҡ, холоҡ, ирек, милек, бүрек* һүҙҙәренә эйәлек заты ялғауҙарын ҡуйып яҙығыҙ. Ниндәй үҙгәреш булғанын әйтегеҙ.

Өлгө: *халҡым, халҡың, халҡы; халҡыбыҙ, халҡығыҙ,* ләкин (уларҙың) *халыҡтары.*

► Һуҙынҡыларҙың юғалыуы яҙылышта сағылыш тапһа, йәғни бөтөнләй төшөп ҡалһа, **тулы редукция** барлыҡҡа килә: *ете – етмеш, төйөн – төйнә.*

**115.** Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ итеп әйтегеҙ, ике һүҙ араһында осрашҡан һуҙынҡыларҙың ниндәй үҙгәреш кисергәнен аңлатығыҙ. Ул әйтелеште таҡтаға яҙып күрһәтегеҙ.
⊙ Һүҙбәйләнештәрҙең әйтелешен диктофонға яҙҙырып тыңлағыҙ.

Өлгө: *ҡара урман – ҡар[**у**]рман, алма ашай – алм[**а**]шай.*

Ҡара урман, алма ашай, бүлмә эсендә, килде инде, һары үлән, ҡайта алманы, күрә алманы, ҡоро утын, яҡшы уҡыйҙар, яҡшы эшләй, уңайлы эш, эшкә инде, эшкә инмәне, эшкә ашманы, эшкә инә алманы.

► Ике һүҙ бер тында әйтелгәндә ике һүҙ араһындағы бер һуҙынҡының юғалыуы (төшөп ҡалыуы) **элизия** тип атала.

**116.** 1. Тексты тасуири уҡығыҙ. Ни өсөн уның «Шатлыҡ йыры» тип аталғанын аңлатығыҙ, һуңынан йөкмәткене тулы итеп һөйләгеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙбәйләнештәрҙең ике һүҙ араһындағы һуҙынҡыларын дөрөҫ итеп әйтегеҙ. Ни өсөн шулай әйтелгәнен төшөндөрөгөҙ. План төҙөп, тексты изложение итеп яҙығыҙ.

**ТҮ**

ШАТЛЫҠ ЙЫРЫ

Йәйҙе мин ауылда өләсәйем янында үткәрҙем. Шунда көйәҙ турғайҙың ояһын һаҡлап алып ҡалырға тура килгәйне.

Баҡсала бер ҡарт **сейә ағасы** бар ине. Өләсәйем уны тамырынан ҡырҡып, урынына йәш ағас ултыртырға ҡушты. Балта, көрәк алып, баҡсаға йүнәлдек тә туҡтап ҡалдыҡ. Ағаста бер бәләкәй генә ҡошсоҡ өҙҙөрөп һайрай, ә беҙ ҡуҙғалырға ла ҡыймайбыҙ.

Ниндәй ҡош икәнен белһәгеҙ ине! Үҙе матур, үҙе төрлө төҫтә, үҙенең башында ҡыҙыл башлығы бар. Ул ҡояшҡа маҡтау йыры йырлаймы ни! Ботаҡтар **араһындағы ояла** тағы ла бер **ҡошто күреп ҡалдыҡ.**

– Балтаны, көрәкте ташлайыҡ, сейә ағасын ҡырҡмайыҡ! – тинем мин.

Ҡошсоҡ, минең һүҙҙәремде аңлағандай, тағы ла шәберәк, дәртлерәк, шатланыбыраҡ һайрап ебәрҙе.

Көйәҙ турғайҙың шундай матур һайрағанын ишеткәнем юҡ! «Йәшәгеҙ һеҙ, көйәҙ турғайҙар, ҡарт **сейә ағасында,** ояғыҙҙы туҙҙырмайбыҙ», — тинем дә оҙаҡ ҡына уларҙың күңелле һайрауҙарын тыңлап торҙом. *(«Йәш натуралист» журналынан)*

*ҡош – ҡошсоҡ – ҡошсоғом*

## § 17. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше

★ Өҙөктө, тыныш билдәләренә иғтибар итеп, тасуирлап, дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Ҡайҙа пауза яһалғанын, ҡайҙа көслө баҫым төшкәнен әйтегеҙ. Уҡығанығыҙҙы диктофонға яҙҙырып та тыңлағыҙ. Хаталарығыҙҙы төҙәтегеҙ, һуңынан үҙегеҙҙең тыуған яҡ тәбиғәтен тасуирлап һөйләгеҙ. «Тыуған яғым – алтын бишегем» темаһына инша яҙырға әҙерләнегеҙ.

Ата кеше сәфәрҙән ҡайтҡан улдарынан һынамаҡҡа һорай икән: «Уландарым, ошо тыуған яҡтарҙан да хозурыраҡ ерҙәр бармы икән? Һеҙҙе донъяла нимә хайран итте?» — тигән. Оло улы шулай яуаплаған, ти: «Сәфәр йөрөп, мин күп илдәр күрҙем[4]. Мәңге ҡыш булмаған яҡтарҙа булдым, үтеп сыҡҡыһыҙ урмандарға осраным; осһоҙ-ҡырыйһыҙ шаулы даръя, диңгеҙҙәрҙе кистем; башы күктәргә ашҡан ҡарлы-боҙло тауҙарға тап булдым, тутыйғоштар[2], тауистар тауышын тыңланым, төрлө хуш еҫле сәскәләрҙең еҫенә иҫерҙем. Тик тыуған Уралымдағылай күкһел[2] тауҙарға, сылтыр шишмәләргә, сәхрәләй туғайлыҡтарға, беҙҙәгеләй ҡоштар моңона бер илдә лә тап булманым. Ят ерҙәрҙең күркен күберәк күргән һайын, тыуған яғымдың йәмен, ҡәҙерен нығыраҡ тойғандай булдым. Хайран булғаным — донъяның иҫ китмәле хозурлығы, тыуған яғымдың күңелгә яҡын күрке», – тигән. *(Ғ. Хөсәйеновтан)*

● 1. *Оло улы, ата кеше, ерҙәр күрҙем, диңгеҙҙәрҙе кистем, тап булдым, хайран булғаным* һүҙбәйләнештәрен әйткәндә, улар араһында пауза бөтөнләй юҡ тиерлек.

2. Һүҙбәйләнештәрҙе әйткәндә ниндәй үҙгәреш күҙәтелә? Әйтегеҙ.

**117.** Һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ яҙылышы менән дөрөҫ әйтелешен сағыштырып, һығымта яһағыҙ. Дөрөҫ әйтелештә ике һүҙ араһында ниндәй үҙгәрештәр булғанын әйтеп бирегеҙ.

| *Дөрөҫ яҙылышы:* | *Дөрөҫ әйтелеше:* |
|---|---|
| ҡайта алманым | ҡай-тал-ма-ным |
| ала алды | а-лал-ды |
| кәртә эсендә | кәр-тә-сен-дә |
| (еләге) эре икән | (еләге) э-ри-кән |
| (инеп) килә икән | (инеп) ки-ли-кән |
| аты арыған | а-та-ры-ған |
| килергә иткән | ки-лер-гит-кән |
| китте инде | кит-тин-де |

**118.** 1. Өҙөктө уҡығыҙ. Паузаһыҙ, бер тынала әйтелгән һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итегеҙ, һуңынан һүҙбәйләнештәрҙе айырып алып, дөрөҫ әйтелешен сағылдырып яҙып алығыҙ. 2. Өҙөктөң йөкмәткеһен бер нисә һүҙ менән генә һөйләп бирегеҙ. Төп фекерҙе әйтегеҙ, темаһын билдәләгеҙ. Оморҙаҡ бабайҙың тыуған яғының матурлығы нимәлә?

Оморҙаҡ бабай — бик күпте күргән кеше. Ул ниндәй генә тауҙарға артылмаған, ниндәй генә урмандарҙы үтмәгән, ниндәй генә ерҙәрҙе айҡамаған! Оморҙаҡ бабай яҡын-тирәлә бик данлы һунарсы булған. Үҙ ғүмерендә етмешләп кенә айыу, йөҙҙән ашыу бүре алған. Төлкө, һуҫар, бурһыҡтарҙы иҫәпләй ҙә алмай.

Әйткәндәй, Ташбатҡан ауылы һунарсылыҡ өсөн бик яйлы урында ята. Ул үркәсле тауҙар ҡуйынына

һыйынып ҡына ултырған. Көнсығыш яҡлап Урал башлана. Артабан ҡайҡайышып ятҡан тауҙар китә. Унда әле лә әҙәм аяғы баҫмаған урындар бар. Оморҙаҡ[2] бабай ул тауҙарҙы, һырттарҙы[3] һәм уяларҙы арҡыры ла, буй ҙа йөрөп сыҡҡан. *(Ж. Кейекбаевтан)*

● 1. Өҙөктө нисә мәғәнәүи киҫәккә бүлергә мөмкин? Һәр киҫәктең эсендә нисә һөйләм барлығын әйтегеҙ. Уларҙың бер-береһенә нисек бәйләнеп килгәнен аңлатығыҙ. Логик баҫым төшкән һүҙҙәрҙе лә күрһәтегеҙ.

**ТҮ** 2. 82-се биттәге тексты һәм өҙөктө ҡулланып, «Тыуған яғым – алтын бишегем» темаһына инша яҙығыҙ.

▶ ***М. Ғафури, Ғ. Хәйри, Р. Ниғмәти, Т. Йәнәби*** кеүек яҙыусыларҙың фамилияларындағы, ***тасуири, ижади, әҙәби*** кеүек һүҙҙәрҙең аҙағындағы **и** үҙгәрмәйенсә әйтелә. Ләкин ***Сәрби, Ғәли, Ғәйфи, Фәтхи, Нәжми, Биби, Ғилми, Дилми*** кеүек исемдәрҙең аҙағындағы **[и]** өнө **[ей]** тип әйтелә: ***Сәрб[ей], Ғәйф[ей], Ғәл[ей], Фәтх[ей], Нәжм[ей], Биб[ей], Ғилм[ей], Дилм[ей].***

Паузаһыҙ әйтелгән *ҡайта алмай* рәүешендәге һүҙбәйләнештәрҙә ике һүҙ ҡушылған урында бер һуҙынҡы төшөп ҡала: *ҡайталмай*.

| | |
|---|---|
| *фекер* <br> *зиһен* | *хикәйәт* <br> *ҡеүәт* |

**119.** Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға үҙ һүҙҙәрегеҙ менән яуап бирегеҙ. Нимә ул китап? Ниндәй китаптар бар? Ниндәй китаптарҙы һайларға кәрәк? Ни өсөн?

## КИТАП ҺӘМ УҠЫУ

Матур китаптар – ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгө, аулаҡта серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһөҙлөктә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе,

фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә. Шуның өсөн китап алғанда һаранланмағыҙ. Китаптарҙан айырылмағыҙ.

Ләкин китаптар араһында юҡ нәмәләр яҙылған, мәғәнәһеҙ нәмәләр менән тулғандары ла бар. Уларҙы уҡыу – ҡиммәтле ғүмерҙе бушҡа үткәреү. Шуның өсөн фекерҙәрҙе нурландырасаҡ, холоҡто пакларға ярҙам бирәсәк, аҡылды арттырасаҡ китаптарҙы һайлағыҙ, башҡаларынан йыраҡ булығыҙ. Файҙалы китаптарҙы уҡыу күңелгә шатлыҡ килтерә, фекергә аҙыҡ була, зиһенгә ҡеүәт бирә. *(Р. Фәхретдинов)*

ТҮ ● План төҙөп, текстағы фекерҙәрҙе файҙаланып, «Минең яратҡан китабым» темаһына инша яҙығыҙ.

## § 18. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы

### *О, ө, ы, е*

★ 1. Иҫтәлекте уҡығыҙ. Ғ. Сәләмгә ниндәй һыҙаттар хас булғанын һанап күрһәтегеҙ. 2. *О, ө, ы, е* хәрефтәре булған һүҙҙәрҙең яҙылышын тикшерегеҙ. Ул хәрефтәрҙең ниндәй осраҡтарҙа һүҙҙең ҡайһы урынында яҙылғанына иғтибар итегеҙ һәм һөйләгеҙ. Үҙегеҙ тағы миҫалдар килтереп дәлилләгеҙ.

Ғ. Сәләм оло йөрәкле шағир ине. Уның барлыҡ шиғырҙары халыҡ тормошоноң үҙ баҡсаһында үҫеп сыҡтылар. Шағирҙың эшсәнлеге, сапсанлығы, тынғыһыҙлығы беҙҙең күҙебеҙгә ташлана. Ул янып йәшәне, янып эшләне. Ул журналист сифатында төҙөлөштәргә, колхоздарға барырға ла өлгөрҙө. Комсомол ойошмаларының йомоштарын

да урынына еткереп үтәй, әҙәбиәт, театр тураһында йыйылыштарҙа ҡайнар сығыш яһай, клубтарҙа, уҡыу йорттарында ялҡынлы шиғырҙарын уҡый. Уларҙың һәр береһенә етешеү өсөн генә лә күпме көс, ваҡыт, мөхәббәт кәрәк! Шуларҙы уйлаһаң, шағир йөрәгендә «ун ғүмергә етерлек йәшәү дәрте» булыуына шик ҡалмай. *(Б. Бикбай)*

**Тү** ● Үҙегеҙҙең тәүге уҡытыусығыҙ тураһында стена газетаһына хәбәрләмә яҙығыҙ. Уны тәүҙә класығыҙҙа уҡып тикшерегеҙ.

**120.** Бирелгән исемдәрҙе башта эйәлек, унан төшөм килешкә ҡуйып, ә *-оу, -өү* ялғаулы ҡылымдарҙы өсөнсө зат ялғауы менән яҙығыҙ. Уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

Тормош, йомош, көлкө, көс, төҙөлөш, болон, болот, фото, совхоз;

төҙөлөү, көлөү, тороу, төрөү, бороу, өйөлөү, өйрөлөү.

► 1. Яһаусы ялғауҙарҙа ла **о** йәки **ө** хәрефтәре булһа, үҙгәртеүсе ялғауҙарҙа ла шул уҡ **о** йәки **ө** хәрефтәре яҙыла: ***боронғолоҡ-тоң, көлкө-нөң, бөлгөнлөк-тө;*** ҡылымдарҙа: ***ҡоро-но, төңөл-дө, болоҡһо-но, көлөш-төк*** һ. б.

2. Рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **о** хәрефе үҙ урынында яҙыла: *колхоз, завод, агроном, доктор, компьютер, район* һ. б. Ул һүҙҙәрҙең ялғауында **ы** яҙыла: *доктор-**ҙың**, район-**ды**, колхоз-**дыҡы**, агрономы-**быҙ*** һ. б.

3. **-оу, -өү** ялғаулы исем ҡылымдарҙың эйәлек заты ялғауҙарында һәр саҡ **ы, е** яҙыла: *көлөү-**е**, тороу-**ыбыҙ**, төрөү-**егеҙ**, ҡотолоу-**ығыҙ**, болоҡһоу-**ың*** һ. б.

► Тамыр һүҙҙең һуҙынҡыһы ҡалын булһа, ялғауҙарҙа ла тик ҡалын һуҙынҡылар була; нәҙек һуҙынҡы булһа, ялғауҙарҙа ла нәҙек һуҙынҡылар килә, уны **сингармонизм** (һуҙынҡылар гармонияһы) тип атайҙар. Мәҫәлән: *ҡал – ҡалды, ҡалдылар; кил – килде, килделәр, килеүселәр; бала – балалар, балаларҙың; төлкө – төлкөләр, төлкөләрҙең; бел – белем, белемле, белемлеләр, белдекле, белдекленең.*

**121.** 1. Йырҙы уҡығыҙ. Уның ҡайһы осорҙо сағылдырғанын һөйләгеҙ. 2. *Е, э* хәрефтәренең дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ. Уларҙың һүҙҙең ҡайһы урынында нисек яҙылғанын аңлатығыҙ, һығымта сығарығыҙ. Йырҙың исемен әйтегеҙ.

Ел, ерәнем, егетеңде
Еткер ел етмәҫ ергә.
Яланда түгел, яуҙа ла
Гел икәү булдыҡ бергә.
Менгән атым —
Уң ҡанатым,
Һин батыр егет күрке, һай!..
Һинең менән
Елдәй елгән
Батыр егет – ил күрке.

*(Н. Иҙелбай)*

● 1. Йырҙы тыңлағыҙ. *Батыр егет – ил күрке, менгән атым – уң ҡанатым* әйтемдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ат тураһында тағы ниндәй йырҙар, мәҡәлдәр беләһегеҙ?

2. Йырҙы ятлағыҙ, яттан яҙығыҙ, аҙаҡ китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

**122.** Нөктәләр урынына һуҙынҡылар ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсерегеҙ.

Төлкөн..ң, төрөү..г..ҙ, фотоғ..ҙ, совхозд..ң, төңөлд.., тормош..мд..ң, кофен.., белемл.., көтөүҙ.. .

**123.** Тексты уҡып, *е, э* хәрефтәренең әйтелеше һәм яҙылышы тураһында фекерегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.

ХӘЛИМ НИҢӘ ЯҢЫЛЫШТЫ?

Таҡтала эт, эл, эҙ, эш һүҙҙәре яҙып ҡуйылған ине. Уҡытыусы Хәлимде саҡырып алды ла таҡталағы һүҙҙәргә «т» хәрефен өҫтәп яҙырға ҡушты. Хәлим тиҙ генә былайтып яҙып ҡуйҙы: тэт, тэл, тэҙ, тэш.

Ҡапыл Хәлимдең иптәштәре шарҡылдап көлөп ебәрҙеләр. Зарифа сығып, уның хаталарын төҙәтте. Ул нисек яҙған тип уйлайһығыҙ? Хәлим ниңә хаталанған?

**Хәтереңдә тот**

«Э» хәрефе башҡортсала
Яҙылалыр гел башта.
Хата ебәрмәйем тиһәң,
Быны иҫлә һәр саҡта.

**124.** Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ, *е, э* хәрефтәренең әйтелешен һәм яҙылышын аңлатығыҙ.

ҺАЛСЫЛАР

«Емерелгән барка» мороно үҙенең ғорур ҡырыҫлығы, йәшерен серҙәре менән яҡынайғандан-яҡынайҙы. Һалдың ағымы етеҙләнде. Ошо ҡырас ярлы бөгөлдө Маликтың балыҡ ҡармаҡлағанда һәм экскурсияға килгәндә лә күргәне бар. Ололарҙан ишетеүенсә, был ҡаяға бәрелмәй-һуғылмай үтеү – ысын ир-егетлек.

Ни өсөн ҡаяның «Емерелгән барка» тип аталыуын да белә ул. 1920 йылдың яҙында Егәҙе суйын иретеү заводынан өс баркаға – баржа кеүегерәк, тик бәләкәй була улар – тейәп, Өфөгә

суйын плитәләр оҙатҡандар. Ҡорал эшләүгә! Шуларҙың береһе ҡаяға бәрелеп, фажиғәле емерелгән дә таралған. Уларҙы һаҡлап, оҙатып барыусы өс ҡыҙылармеецты Еҙем үҙ ҡосағына алған... Йәйге эҫе көндәрҙә, йылға нык һайыҡҡан саҡта, һыу төбөндә йәшел мүккә көпләнеп, ҡарайышып ятҡан дүрткел нәмәләр шаһит быға. Ә былтыр мәктәптең йәш эҙәрмәндәре ҡая һыртына янып торған биш сатлы йондоҙ ҡаҙап ҡуйҙы. Ул да оҙаҡламай күҙҙән юғаласаҡ. *(С. Шәрипов)*

▶ Һүҙ башында **[йэ]** ишетелгән урында **Е, е** хәрефе яҙыла: *Елмәрҙәк, елдәр, «Ете ҡыҙ» бейеүе, еңеүселәр.*

▶ Һүҙ башында э хәрефе яҙыла: *эшмәкәр, эсемлек, эремсек, эре*; һүҙ уртаһында шул уҡ э өнө **е** хәрефе менән бирелә: *теләк, тереклек, керһеҙ, серле* һ. б.

Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә э хәрефе һүҙҙең башында ла, уртаһында ла яҙыла: *аэросана, этаж, аэрозоль, поэма* һ. б.

**125.** Тексты ҡысҡырып уҡығыҙ. Һүҙҙәрҙә *я, ю* хәрефтәренең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ, һығымта сығарығыҙ.

Бәләкәй саҡта кем генә трактор, машина йөрөтөргә хыялланмай? Нәжметдин, яйы тура килгән һайын, атаһы янына һыйынып ҡына ултырып, иртүк яланға китә торғайны.

Атаһы йөрөткән трактор бураҙналар яра. Уны бөжәк сүпләүсе сәүкәләр, ҡарғалар оҙата. Бына бәрхәттәй ҡара тупраҡҡа алтын орлоҡтар сәселә. Атаһы эшкәрткән яланда арыш, бойҙай, һоло, көнбағыш, кукуруз, хатта сөгөлдөр ҙә үҫә.

Көҙгә мул уңыш йыялар. Тыуған яҡ биҙәктәре, күҙ яуын алып, һоҡландыра-һоҡландыра алмашынып тора. Тик уның матурлығын күрә генә бел!

Нәжметдин – бөгөн Мәләүездең данлыҡлы сөгөлдөрсөһө. Уның өсөн тыуған ерендәге баҫыу юлдары – тынғыһыҙ йәшлеге килтергән бәхет юлдары. *(Ғ. Дәүләтов)*

● 1. *Орлоҡ, һоло, сөгөлдөрсө* һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

2. Икенсе абзацты дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Уны күсереп алығыҙ. Һөйләмдәрҙә баш һәм тиң киҫәктәрҙе һыҙығыҙ.

**126.** 1. Өҙөктө дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Ҡайһы юлдарҙа шиғырҙың төп уй-фекере бирелгән?

2. Билдәләнгән һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтеп уҡығыҙ. Һуҙынҡыға бөткән һәм һуҙынҡыға башланған һүҙҙәр осрашҡан урында ул өндәрҙең нисек әйтелеүен аңлатығыҙ.

Яҡшының яҡшылығы һағыш булмаҫ,
Ямандың насарлығы алыҫ булмаҫ.

Һыйырға келәм ябыу килешмәгәндәй,
Йүкәне майлау менән ҡайыш булмаҫ.

**Һырлы аяҡтың** һыры китһә, һыны китмәҫ,
Яҡшының, **үҙе үлһә лә**, исеме китмәҫ.

Һөйләшерлек белем алып һәр бер баштан,
Бәләнән имен булыр телен баҡҡан.

**Һары алтын** – сабыр төбө, тигән һүҙ бар,
Күҙ һалып күреүселәй нәсихәттән.

*(Аҡмулла)*

► **[йа]** ишетелгән урындарҙа һүҙ башында, уртаһында, аҙағында һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **я** хәрефе үҙгәрешһеҙ яҙыла: ***я**ңы, **я**ныуыс, **я**лағай; ҡа**я**у, ҡы**я**ҡ, ҡы**я**р; донъ**я**, **Я**хъ**я**, таҡы**я**; буръ**я**ҡ, бирь**я**ҡ, Дани**я**, Коре**я**, **я**корь* һ. б.

► **[йу]** ишетелгән урындарҙа һүҙҙең башында, уртаһында һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **ю** үҙгәрешһеҙ яҙыла: ***юрға, юл, юғалыу, юғиһә, юйыу, юҡһыныу; Аҡъюл; июль, Юлия, союз, юнкер, юмор.***

**127.** Нөктәләр урынына *я, ю* хәрефтәре ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

Аҡъ..р, а..лау, а..ҡ, а.., а..ҙ, а..улы, б..джет, б..ллетень, б..ро, алъ..çыҡҡа, ба..н, ба.., ба..ғы, та..ҡ, ..у, ..уа, ..уын, ..мғыр, ка..та, ..йыу, ..йғыс, Аҡъ..л, ..ҡһыныу. ..нкер, ..ғымлы, ..бай, ша..н, ша..рыу.

● Билдәләнгән һүҙҙәрҙе индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ. Ул һүҙҙәр һөйләмдәрегеҙҙең ниндәй киçәге булып килгәнен әйтегеҙ.

### Хәтереңдә тот

Әйтәбеҙ **й** менән **а**,
Яҙабыҙ бер хәреф – **я**.

Һүҙ башында яҙыла:
**Я**мал **я**улыҡ **я**бына.

Һүҙ уртаһында килә:
Да**я**н ша**я**ра ниңә?

Һүҙ аҙағында була:
Ҡа**я** һүрәтен бу**я**.

**128.** Нөктәләр урынына кәрәкле хәрефтәр ҡуйып күсерегеҙ, аҙаҡ яҙғандарығыҙға аңлатма бирегеҙ.

..тәл, ..йғыс, ..лай, ..гән, ..ләр, ..нлә, ..лбарыç, ..ткер, ..рамал

## § 19. Тартынҡы өндәрҙең әйтелеше һәм дөрөҫ яҙылышы

★ Хикәйәне дөрөҫ интонация менән ашыҡмай ғына, үҙ-ара һөйләшкәндәге кеүек итеп уҡығыҙ. Уҡығанығыҙҙы диктофонға яҙҙырығыҙ. Билдәләнгән һүҙбәйләнештәрҙә ике һүҙ араһында [*ҡ*], [*к*] өндәренең әйтелешенә иғтибар итегеҙ. Ул өндәрҙең ни өсөн үҙгәргәнен аңлатығыҙ.

БАЛЫҠСЫ АЙЫУ

Урмандағы дымлы тупраҡтан туҡтауһыҙ быу күтәрелә: тын алыу ауырлаша. Томра. Башты күтәрмәй атлайбыҙ.

Алыҫ түгел йылға аға. Күҙебеҙ ҙур булмаған ятыуға төштө. Ни күрәбеҙ: ятыу бөткән ерҙәге шаршыла ҙур бер айыу тора. Бөтә взвод көтөлмәгән тамашаны күҙәтә ине.

Айыу алғы аяғын күтәргән дә һыуға текләгән. Әллә ни эшләй. Бына ул ҡапыл ҡулын һыуға сумырҙы ла балыҡ һөйрәп сығарҙы. Тәңкәләре ҡояш нурында йылтырай.

Януар балыҡты ҡулына ҡыҫты ла ярға ташланы. Башы эшләй ҡәһәрҙең. Айыу аяҡтары менән тегене баҫып ашарға керешә. Бик тәмләп ашаны. Юҡ, ашаманы ул. Балыҡтың ыуылдырығын ғына һурҙы. Нимәнең тәмле икәнен тайыш табан белә инде ул. *(Ғ. Хисамовтан)*

**129.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен күҙәтегеҙ. [*ҡ*], [*к*] өндәренең [*ғ*], [*г*] өндәре менән ниндәй осраҡтарҙа алмашынып килгәнен асыҡлағыҙ, һығымта яһағыҙ.

| *Дөрөҫ яҙылышы:* | *Дөрөҫ әйтелеше:* |
|---|---|
| беҙҙе бөтә кеше белә | беҙҙе вөтә-геше-велә |
| бер ҡабып та ҡараманы | бер-ғавып та-ғараманы |
| күңел күгендәге дәрт | күңел-гүгендәге дәрт |

| | |
|---|---|
| йәй көнө ялда булды | йәй-гөнө ялда-вулды |
| ҡаҙ ҡанаты ҡат-ҡат була | ҡаҙ-ғанаты ҡат-ҡат була |
| тиҙ килеп, тиҙ ҡайтығыҙ | тиҙ-гилеп, тиҙ-ғайтығыҙ |
| ауыл осонда көтөү килә | ауыл осонда-гөтөү-гилә |
| бишәү кәрәкмәй, икәү кәрәк | бишәү-гәрәкмәй, икәү-гәрәк |
| уң ҡул менән | уң-ғул менән |
| Ғилаж ҡарт ҡайҙа | Ғилаж-ғарт ҡайҙа |
| Фәрүәз килде | Фәрүәз-гилде |

► Баҫымһыҙ ижектәге һуҙынҡы өндәр дөрөҫ яҙылышта сағылдырыла, ләкин дөрөҫ әйтелештә юғалып ҡала, әйтелмәй: *күркәмерәк – күркәмрәк, ологайыу – олғайыу, бейегерәк – бейегрәк* һ. б.

Һуҙынҡы өнгә бөткән һүҙ һуңынан һуҙынҡы өн менән башланған һүҙ торһа һәм икеһе лә бер тынала әйтелһә, дөрөҫ әйтелештә ике һуҙынҡы өндөң береһе төшөп ҡала: *ҡара урман – ҡарурман, яҡшы эшләй – яҡшэшләй, эшкә инде – эшкинде* һ. б.

**[р], [л], [й], [ҙ], [у], [ү], [з], [ж], [а], [ә]** өндәренә бөткән һүҙҙәрҙән һуң **[ҡ], [к]** өндәре менән башланған һүҙҙәр килеп, ул һүҙҙәр бер тынала әйтелһә, дөрөҫ әйтелештә **[ҡ], [к]** өндәре **[ғ], [г]** өндәре менән алмашынып килә: *Беҙҙе бөтә кеше белә*. – [*Беҙҙе вөтә геше белә*].

⨀ **130.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ яҙылышы менән дөрөҫ әйтелешен диктофонға яҙып, сағыштырып ҡарағыҙ. [*б*], [*п*] өндәренең ниндәй шарттарҙа ниндәйерәк үҙгәреш кисергәнен асыҡлағыҙ, аңлатығыҙ.

| *Дөрөҫ яҙылышы:* | *Дөрөҫ әйтелеше:* |
|---|---|
| китап, китабым, китабың | китап, китавым, китавың |
| клуб, клубында | клуп, клувында |
| этап, этабы | этап, этавы |

урманға барҙым — урманға-варҙым
уңай булған — уңай-вулған
йылға буйында — йылға-вуйында
Сираж бабай — Сираж-вавай
китеп бара — китевара
уҡып бирҙе — уҡывирҙе
эшләп бөттөк — эш-лә-вөт-төк
арып бөттө — а-ры-вөт-тө

► Ике һуҙынҡы араһында һәм **р, л, й, ҙ, ж, уы, үе** тартынҡыларынан һуң килгәндә лә **[б]** өнө йомшаҡ яңғыраусы **[в]** кеүек әйтелә: *кәбән – кә[**в**]ән, та[б]аҡ – та[**в**]аҡ, ту[б]ылғы – ту[**в**]ылғы; тор[б]а – тор[**в**]а, һәй[б]әт – һәй[**в**]әт, ял-[б]ыр – ял[**в**]ыр, аҙ[б]ар – аҙ[**в**]ар, Һәү[б]ән – Һәү[**в**]ән.*

**[п]** өнөнә бөткән һүҙҙәргә һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ҡушылғанда дөрөҫ яҙылышта **[п]** өнө урынына **[б]** өнө яҙыла, ә дөрөҫ әйтелештә **[б]** өнө йомшаҡ яңғыраған **[в]** өнөнә үҙгәрә: *кита**п** – кита**б**ым – кита[**в**]ым; яуа**п** – яуа**б**ы – яуа[**в**]ы.*

**131.** 1. Текстарҙы уҡығыҙ. Уларҙың ҡайһыһында тасуирлауға, ҡайһыһында хәбәр итеүгә урын бирелгәнен әйтегеҙ. Һәр текстҡа исем бирегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә [*в*] өнөнөң дөрөҫ әйтелешен аңлатығыҙ.

1. Вафа көҙгө биҙәктәргә хайран ҡалып ҡарап тора. Көҙ миҙгеле һәр нәмәгә мул, ә төҫтәргә, биҙәктәргә айырыуса бай була. Ҡайын, йүкә, сағандар, наҙлы ҡыҙҙарҙай, алтын күлдәктәрен кейгән. Миләш иһә емештәрен генә түгел, япраҡтарын да ҡыҙарта. Алмағас йәшел күлдәген алмаштырырға ашыҡмай әле, шулай ҙа уны ҡыҙыл, һары һәм йәшкелт алмалар биҙәй. Өфө янындағы бер **коллектив** баҡсала бер алмағас бөтәһенән дә уҙҙырҙы. Көҙгө **ваҡыт** булһа ла, ҡыҙыл алмаларҙы йыйып

алыуҙы ла көтмәй, яңынан ул алһыу сәскәләргә төрөнөп, күп баҡсасыларҙы таң ҡалдырҙы... *(Календарҙан)*

2. Голландияла сәскә үҫтереүселәр үҙҙәре сығарған ләләгә Юрий Гагарин исемен биргәндәр. Беренсе космонавт исемен Тажикстанда – сирень, Мәскәүҙең ботаника баҡсаһындағы азалия сәскәһе лә йөрөтә. *(Календарҙан)*

★ ● *Вагон, негатив, штатив, Харисов, актив* һүҙҙәрен дөрөҫ итеп әйтегеҙ, ҡағыҙға сығарығыҙ. Һаналған һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙығыҙ.

► **У, ү** хәрефтәре лә икешәр өндө белдерә: ***урман – тау, үлән – тәүҙә*** һ. б. Тимәк, **у, ү** хәрефтәре тағы ла **[уы], [үе]** тартынҡы өндәрен белдерә. Һүҙ башындағы **[уы], [үе]** өндәре **в** хәрефе менән сағылдырыла: ***ватан, ваҡыт, Вәкил*** тип яҙыла, ә ***[у]атан, [у]аҡыт*** һәм **[ү]***әкил* тип әйтелә.

**132.** Шиғырҙарҙы уҡығыҙ. *У, ү* өн-хәрефтәренең ҡайһы һүҙҙә – һуҙынҡы [*у*], [*ү*], ә ҡайһы һүҙҙә тартынҡы [*уы*], [*үе*] өндәрен белдереүен асыҡлағыҙ.

ӘСӘ ҺҮҘҘӘРЕ

1. Ғүмер! Уны юғалтыуҙан ҡурҡа бәндә,
Тик ул түгел, беҙгә – тормош ҡәҙерле.
Ғүмер – һауыт ҡына тормош шарабына,
Ул буш булһа – бәр! Ват тере ҡәберҙе!

2. Шәүлә булма, улым, нур бул. Ҡыйыу тик нур.
Батырлыҡ сәс был донъяға, матурлыҡ ур.
Тик һиңәме? Көлтәңә лә бағыр халҡың.
Ҡабул итһә, һин – бәхетле, йырла, талпын.
Бар ул хаким! Хеҙмәтеңде тиңһенмәһә,
Нимә тиһен, нимә тиһен меҫкен әсә?!
Ҡул ҡылғанға ҡарай алһын күҙең тура.
Күҙ күргәнгә йөрәк түҙһен... Шуны юра.

3. «Үлгәндән һуң йәшәү бар», – тип боронғолар
Әйтмәгәндәр тиккә, ләкин, әй, дөрөҫлөк!
Түбән йәндәр үлә, ә ҙур йәндәр һаман
Йәшәп ҡала, тере йөрәктәргә күсеп.

*(Р. Назаров)*

● Шиғыр юлдарында бирелгән кинәйәле йөкмәткене үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ. Уға үҙ мөнәсәбәтегеҙҙе белдерегеҙ.

**133.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтегеҙ. Һүҙҙең аҙағындағы [*д*] өнөнөң ниндәй тартынҡыға әйләнгәнен аңлатығыҙ.

Пароход, парад, заряд, доклад, суд, завод, приклад, отряд.

► Иғтибар итегеҙ: башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башындағы [*в*] өнө дөрөҫ әйтелештә **[уы] – [үе]** өнө рәүешендә әйтелә. Мәҫәлән: ***ватан – [у]атан*** (дөрөҫ әйтелеш).

Рус һәм башҡа сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙең башында һәм һүҙ уртаһындағы ижек башында [*в*] өнө асыҡ әйтелә: *ваза, совет, революция* һ. б. Һүҙ уртаһындағы ижек аҙағында торғанда [*в*] өнө [*ф*] өнөнә үҙгәрә: *за**в**хоз – за**[ф]**хоз, со**в**хоз – са**[ф]**хоз* (дөрөҫ әйтелеш).

Һүҙ аҙағында ла [*в*] өнө дөрөҫ әйтелештә [*ф*] өнө булып әйтелә: *пасси**в** – пасси**[ф]**, штати**в** – штати**[ф]*** һ. б.

Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең аҙағындағы яңғырау [*д*] өнө дөрөҫ әйтелештә һаңғырау [*т*] өнө булып әйтелә.Мәҫәлән, *скла**д**, докла**д*** һүҙҙәренең дөрөҫ әйтелеше: *скла**[т]**, докла**[т]***.

**134.** Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып яҙығыҙ, уларҙың аҫтына һыҙығыҙ һәм һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

Толо.. – клу.., заво.. – боло.., кита.. – шта.., велосипе.. – биле.., ижа.. – сира.., похо.. – ҡоро.., мәғари.. – коллекти.. .

**135.** А. Костиндың «Ураҡ өҫтө» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Унда ниндәй миҙгел һүрәтләнгән? Кемдәрҙе күрәһегеҙ? Улар ни эшләй? Ҡайһы заман һүрәтләнгән? Ҡайҙан белдегеҙ? Рәссам һүрәттә ниндәй төҫтәр ҡулланған? Ни өсөн? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

**136.** 1. Хикәйәне дөрөҫ интонация менән, тейешле урында пауза яһап, баҫымдарын ҡуйып уҡығыҙ. Уның темаһын һәм төп фекерен әйтегеҙ. Хикәйәне тулы итеп һөйләгеҙ. 2. Һөйләмдәрҙе берәм-берәм уҡып, диктофонға яҙҙырып тыңлағыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә, һүҙбәйләнештәрҙә ҡайһы тартынҡыларҙың нисек үҙгәргәнен күҙәтегеҙ, һөйләп бирегеҙ. 3. × билдәһе ҡуйылған һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙ итеп, һүҙбәйләнештәр яһап яҙығыҙ.

Шулай кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә иркәләнеп үҫә инек беҙ. Ҡайһы **ваҡытта** оло кешеләр атайымдың беҙҙе артыҡ иркәләүен ятмай торғайнылар. Ләкин ул: «Әйҙә иркәләнһендәр, – ти торғайны, – үҙебеҙ батша **ваҡытында** ғаиләнән дә, хөкүмәттән дә **ҡағылып үҫтек**. Улар иркәләнһендәр».

Әсәйем беҙгә ҡарата ҡорораҡ. **Ул беҙгә йышыраҡ асыулана**, сөнки үҙебеҙ ҙә ҡайһы саҡта әйберҙәр **ватабыҙ**, аш-һыу түгәбеҙ[4]. Беҙ быны юрый эшләмәйбеҙ. **Ватырға ла,** түгергә лә теләмәйһең. Олатайым менән өләсәйем уртасараҡтар. Беҙ уларҙың **әйберҙәренә** артыҡ ҡағылмайбыҙ.

Өй эсе менән таныштырып сыҡтым, **буғай**, инде. Тик һүҙ унда **түгел бит әле**. Һүҙ кешеләрҙең быйыл үҙгәреүе **тураһында бара**. Беҙ үҙгәрҙек. Беҙҙең **тормоштоң** үҙгәреүенә немец фашистарының бәхетле **илебеҙгә** илбаҫарҙарса **баҫып инеүҙәре сәбәп булды.** *(С. Агиштан)*

**137.** Уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе уҡығанда *[н]* өнөнөң нисек әйтелгәненә иғтибар итегеҙ. Ул һүҙҙәргә оҡшаш һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр табығыҙ, һуңынан өҙөктөң йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

Әсәйем менән атайым йыл ярым самаһы торғас, беренсе бала булып, мин донъяға **килгәнмен**. Минең тыуыуыма биш ай самаһы үткәс, атайым аҙ ғына ауырып, үлеп киткән. Әсәйем, мине бер ҡарсыҡҡа ҡалдырып, кейәүгә киткән. Унда мин ике-ике ярым йәшемдә генә **булғанмын** тип уйлайым.

Бер ваҡыт әсәйем мине үҙе янына алып киткән. Уны мин үҙем дә саҡ ҡына иҫләгәндәй булам. Саснаға барып еткәнмен. Минең шунда **ҡыуанғандарым** төш кеүек кенә әле лә хәтеремдә.

Әсәйем үлеп киткәс, мин әллә нисә ауыҙлы булған олатайымдың ғаиләһенә килеп **ингәнмен**. Шул рәүештә көндәр үткән. Мин унда торғанда сәсәк менән дә **ауырығанмын**, башҡа әллә ниндәй ауырыуҙар ҙа күргәнмен, тамам **зәғифләнгәнмен**.

Ни күрһәм дә – **күргәнмен**, ни булһа ла – булған, мин был ғаиләгә **һыймағанмын**. Бер көндө олатай мине, бер ямщикка ултыртып, Ҡазанға ебәргән. *(Ғ. Туҡайҙан)*

- Ғ. Туҡай автобиографияһынан алынған өҙөктө нисә мәғәнәүи өлөшкә бүлергә мөмкин? Һәр өлөштөң темаһын билдәләгеҙ, һуңынан йөкмәткене тулы итеп һөйләгеҙ. Аҙаҡ үҙегеҙҙең автобиографияғыҙҙы яҙығыҙ.

► Ике һүҙ араһында йәки бер һүҙ эсендә **[м], [б]** өндәре алдынан килгән **[н]** өнө һәр саҡ **[м]** булып яңғырай: *һикһә**н** бер – һикһә**[м]**бер, кө**н**бағыш – кө**[м]**бағыш, быныһы**н** беләм – быныһы**[м]** беләм, тыуға**н**мын – тыуға**[м]**мын, күргә**н**мен – күргә**[м]**мен, у**н** биш – у**[м]**биш.*

▶ **Ҡ, ғ, к, г** тартынҡыларының алдынан торған **[н]** өнө **[ң]** булып ишетелә: *боронғо – бороңғо; кейенге килә – кейе[ң]ге килә; кәрәккәнгә – кәрәккә[ң]гә.*

**Л, р, й, ҙ, з, ж, у, ү** кеүек хәрефтәрҙең аҙағынан **[ҡ], [к]** өндәре **[ғ], [г]** булып ишетелә: *ҡыр кәзәһе – ҡыр [г]әзәһе, бер* ***кеше*** *генә – бер [г]еше генә, ҡор****о ҡ****айын – ҡоро [ғ]айын, багаж****ы ҡ****айҙа ята – багажы [ғ]айҙа ята, ғәзи****з к****еше – ғәзиз [г]еше, ай ҡалҡа – ай [ғ]алҡа* һ. б.

**138.** 1. Белешмәне иғтибар менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһен ★ һөйләп бирегеҙ. Уны йөкмәткеһе буйынса нисә бәләкәй темаға бүлеп булғанын әйтегеҙ, һәр өлөштөң исемен ҡуйығыҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙеге [*в*], [*д*] өнөнөң дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итегеҙ. Уларҙың әйтелешендәге үҙгәрештәрҙе аңлатығыҙ. Аҙағында *б, в, г, д* хәрефтәре булған һәм рус теленән үҙләштерелгән бер нисә һүҙ табып, дөрөҫ әйтелештәрен күрһәтегеҙ.

### ҠОРҒАҘАҠ ШИШМӘҺЕ

Янғантау курортынан өс саҡрым алыҫлыҡта, Йүрүҙән йылғаһының һул яҡ ярында, Ҡорғаҙаҡ шишмәһе ағып ята. Уның һыуы йылы, **радиоактивлы** һәм еңелсә генә минераллашҡан. **Секундына** 125 литр һыу урғылып сыға. Ҡышын да туңмай, сөнки шишмәнең температураһы йыл әйләнәһенә 16,5–18,0 градус тәшкил итә.

Элегерәк был шишмә хатта тирмәнде эшләткән. Быуаһы ла туңмағас, ҡышын ҡамыштар йәшелләнеп ултырған, һыу үҫентеләренә лә бай булған.

Ҡорғаҙаҡҡа, Йүрүҙәндән һәм күлдәрҙән тотоп, балыҡтар ебәреп ҡарағандар, ләкин улар тәүлек үтеүгә үлгәндәр. Был хәл һыуҙың еңелсә генә радиоактивлы булыуы менән аңлатыла.

Янғантау шифахананынa Ҡорғаҙаҡ һыуы торбалар буйлап килтерелә. Ул эске ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланыла. *(Календарҙан)*

● *Устав, отряд, флаг, клуб, коллектив, геолог, доклад* һүҙҙәренең дөрөҫ әйтелешен аңлатығыҙ. Ошо һүҙҙәргә индереп, берәр һөйләм яҙығыҙ.

**139.** Йомаҡтарҙы дөрөҫ тауыш менән уҡығыҙ. Уны диктофонға яҙып тыңлағыҙ. Әйтелеш менән яҙылыш араһында барлыҡҡа килгән айырманы әйтегеҙ. Йомаҡтарҙы сисегеҙ, билдәләнгән һүҙҙәргә төп килешкә ҡуйып яҙығыҙ. Ялғау ҡушылғас, уларҙың һуңғы хәрефенең ниндәй үҙгәреш кисергәнен әйтегеҙ.

1. **Аяғы** бар – ҡулы юҡ[4], арҡаһы бар – түше юҡ[4]. 2. Асылмаҫлыҡ **һандығымда** киҫелмәҫлек ебәк бар[4]. 3. Туны бар – сапаны юҡ, **мыйығы** бар – һаҡалы юҡ[4]. 4. Кәүҙәһе күлдә, **ҡойроғо** ҡорола. 5. Башы – тараҡ, **ҡойроғо** – ураҡ. 6. Ҡырлы-ҡырлы йор бала, йөрәгеңә моң һала. 7. Эйелә, бөгөлә, аҡ **мамығы** түгелә. 8. Ҡыҙыл **ситегем** менән ҡара **ситегем** ағас башында элеүле ҡалды. 9. Башы елбәҙәк, төбө түңәрәк.

Йомаҡтарҙың яуаптары: *ултырғыс, уй, бесәй, сүмес, әтәс, ҡурай, муйыл, миләш, картуф.*

● 1. *Ҡара* һүҙенең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ул һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?

2. Үҙегеҙ өсәр йомаҡ табып яҙығыҙ.

► **К, ҡ, п** хәрефтәренә тамамланған һүҙҙәргә һуҙынҡы менән башланған ялғауҙар ҡушылғанда, ул хәрефтәр **[г], [ғ], [б]** булып ишетелә һәм шулай яҙыла: *тара**ҡ** – тара**[г]**ым, күкрә**к** – күкрә**[г]**ем, һәнә**к** – һәнә**[г]**ебеҙ, мәктә**п** – мәктә**[б]**ебеҙ, като**к** – като**[г]**ы, кү**п** – кү**[б]**әйә, та**п** – та**[б]**ыу.*

● Тәбиғәт темаһына бәйле һүҙҙәр уйлағыҙ һәм өлгө буйынса һүҙбәйләнештәр яһап яҙығыҙ.

нимәгә?

Өлгө: *щитҡа бәрелде.*

**140.** 1. Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен тулы итеп һөйләгеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә **ҡ, к** хәрефтәренең **ғ, г** өндәренә үҙгәреүен күҙәтегеҙ. 3. Ҡыҫҡа изложение яҙығыҙ.

### КӨСӨК АУЫЛЫ

Исәмәт, **Ҡаракүл**, Бүләк, Һарыһаҙ, Көсөк ауылдары Сөн буйына ултырғандар. Көсөк ауылының исеме башта Күсем булған. Уға йыраҡ башҡорт олатайыбыҙҙың исеме бирелгән булған.

1400–1500 йылдарҙа бында Дөмәй нәҫеле башҡорто йәшәгән. Ул икһеҙ-сикһеҙ ер-һыу, урмандарға хужа булған. Үҙе ҡартая башлағас, Тамъян-Teләү ырыуынан Күсем исемле хужа булырҙай башҡортто килтергән.

Күсем хәҙерге Исәмәт **ҡалҡыулығы**, эре ҡарағай урманындағы аҡланда утар төҙөгән. Ете ир балаһы менән шунда йәшәгән. Бер нисә яуҙан һуң балалары менән иҫән ҡалып, әлеге урында Көсөк ауылын нигеҙләгән. Ул умартасылыҡ, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән. Көсөк исеме Күсем атамаһынан үҙгәреп яһалған. Шулай итеп, Шаран районындағы Көсөк ауылы Күсем исемле башҡорттан ҡалған. *(М. Мөхәмәтйәновтан)*

● 1. Текстағы яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

2. *Умартасылыҡ, йылҡысылыҡ* һүҙҙәрен эйәлек заты менән үҙгәртегеҙ. Уларҙың дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ.

**141.** Һүҙҙәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Яҙылыштарын иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Аҙаҡтан һүҙлек диктанты яҙығыҙ һәм китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

Йырғанаҡ, төйләгән, сыйырсыҡ, йылъяҙма, маляр, бармаясаҡ, вәғәҙә, ҡеүәт, ауырыу, самауыр, яуын, юбилей, Ҡәйүм, боролошто, рюкзагы, донъя, баяғы, януар.

## § 20. Өндәрҙең оҡшашыуы

★ 1. Һүҙҙәрҙе, тик ҡалын йәки нәҙек өндәрҙән генә тороуҙарына ҡарап, төркөмләп яҙығыҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ, шул һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

Ҡайраҡ, ҡайыш, ҡабаҡ, ҡаршылыҡ, ҡорот, ҡырағай, **ҡырпаҡ,** мөгөҙ, муйыл, остоҡ, өҙгөләнеү, аҡһаҡал, алъяпҡыс, баҫалҡы, бейей, берәү, бесәй, **берекмә,** бирге, бурыл, гөрләүек, дала, дөйөм, иптәш, иңкеш, итәк, йәмшек, йышҡы, көләс, саған, **сәкән, сапсан**, суҡыш, **сүре**, тупраҡ, төтөн, **тырыҙ**, түшәм, үҫмер, әрем, әсетке, йүгәнләү, юғалтыу, **ябаға, йүргәк**, ябалаҡ, яҡташ.

► Телмәр ағышында өндәр бер-береһе менән яраҡлашып, оҡшашып киләләр. Башҡорт теленең үҙенең төп һүҙҙәрендә йә гел ҡалын һуҙынҡылар, йә тик нәҙек һуҙынҡылар ғына була: *боролош, бөрсөкләнеү, бөгөнгө, бурыл, былтырғы, бүлексә, аҡһаҡал, йылғырлыҡ, егәрлелек, йәйен.*

Ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙәргә тартынҡылар – ҡалын, ә нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙә нәҙек әйтеләләр: *ҡараҡ, көрәк; боролдо, бөрөлдө; ҡора, көрә; ҡыйыҡ, кейек; ҡарағай, тәгәрлек (ҡош исеме); төргәк, талғын.*

► Башҡорт телендә ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙәрҙә **[ҡ], [ғ],** нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙә **[к], [г]** өндәре килә: *ҡара ҡарға, ала ҡарға; сәүкә, илгиҙәр, кәрәк, ҡырғыс.*

*Мәғәнә, мәҡәлә, Сәғиҙә, ғәрсел, ғилем, ҡеүәт, ҡиммәт, ҡиәфәт, ҡәнәғәт* кеүек һүҙҙәр ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән. Шуға нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙә лә **[ҡ], [ғ]** өндәре килә ала.

Рус теленән үҙгәрешһеҙ килеп ингән һүҙҙең эсендә ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡы ла, ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡы ла бергә тора ала: *сентябрь, социализм, брошюра, интернациональ, информация.*

**142.** 1. Тексты дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. 2. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышына һәм әйтелешенә иғтибар итегеҙ.

## ҠАҺАРМАН ҠОТДОС

Минән, һеҙгә ни өсөн Герой исеме бирҙеләр, тип һорайҙар. Документта: «Штурм барышында 134 һуғышсан осошто уңышлы яһағаны, дошман истребителдәре атакаһын оҫта кире ҡайтарғаны өсөн, һауа алыштарында иптәштәренә ярҙамы өсөн», – тип яҙылған. Артабан фашистарҙың 22 танкыһын, 30 орудиеһын, 40 автомашинаһын, 5 самолетын, 3 боеприпас складын, 450 һалдатын һәм офицерын, 2 тимер юл эшелонын юҡҡа сығарыуым хаҡында әйтелгән.

Минән үҙемдең тыуған Мәсетле районы мәктәптәрендә уҡыусылар: «Ундай ҡаһарманлыҡҡа нисек өлгәштегеҙ, Ҡотдос бабай?» – тип һорайҙар. «Иң мөһиме – мин һәр саҡ Ватанымды йөрәгемдә

йөрөттөм. Хәтәр осоштар мәлендә лә үҙебеҙҙең йәмле Төлкөтау, Ташкеләт битләүҙәрен, сылтырап аҡҡан шишмәләребеҙҙе күҙ алдына баҫтыра инем».
*(Ҡ. Латипов)*

● 1. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышын әйтегеҙ. Текстағы яңғыҙлыҡ исемдәрҙе һанап күрһәтегеҙ.

2. «Сифат + исем» ҡалыбындағы һүҙбәйләнештәрҙе табығыҙ, һорауҙар менән схемаларын төҙөгөҙ.

► Ялғауҙың ниндәй өндән башланыуы ялғау ҡушыласаҡ һүҙҙең аҙаҡтағы өнөнә бәйләнгән.

**Ҡ, к, п, с, т, ф, һ, ч, ш, щ, г, х, ц, д, б** тартынҡыларының береһенә бөткән һүҙгә **[т], [ҡ], [к]** өнө менән башланған ялғауҙар ҡушыла: *балыҡ-тар, балыҡ-ҡа; күрәк-тәр, күрәк-кә; тарих-ты, тарих-ҡа; туп-тар, туп-ҡа; төп-кә; балаҫ-ты, балаҫ-ҡа; плащ-та, плащ-ҡа; иңкеш-те, иңкеш-кә; флаг-ты, флаг-ка; доклад-ты, доклад-ҡа; клуб-тан, клуб-ҡа* һ. б.

**[л], [м], [н], [ң], [з], [ж]** яңғырау өндәренең береһенә тамамланған һүҙгә **[д], [ғ], [г]** өндәре менән башланған ялғауҙар ҡушыла: *урам-дар, урам-ға; үлән-де, үлән-гә; тырыз-ды, тырыз-ға; гараж-ды, гараж-ға* һ. б.

**[р], [й], [ҙ], [у (уы)], [ү (үе)], [и], [ю]** өндәренең береһенә бөткән һүҙгә **[ҙ], [ғ], [г]** өндәре менән башланған ялғауҙар ҡушыла: *ҡар-ҙар, ҡар-ға; тай-ҙы, тай-ға; көй-ҙәр, көй-гә; таяу-ҙан, таяу-ға; Р. Нигмәти-ҙән, Р. Нигмәти-гә; меню-ҙа, меню-ға* һ. б.

**А, ә, о, ө** һуҙынҡыларына тамамланған һүҙҙәргә **[л], [н], [ғ], [г]** өндәре менән башланған ялғауҙар ҡушыла: *бала-лар, бала-ны, бала-ға; кәйлә-ләр, кәйлә-не, кәйлә-гә; оло-лар, оло-но, оло-ға; бөрө-ләр, бөрө-нө, бөрө-гә* һ. б.

**143.** Өҙөктө уҡып, уның темаһын, төп фекерен билдәләгеҙ. Ҡуйылған һорауҙарға ҡарап, һүҙҙәргә күп нөктәләр урынына кәрәкле ялғауҙарҙы ҡуйып яҙығыҙ, ялғауҙарҙың ни өсөн шул өн менән башланырға тейешлеген аңлатығыҙ.

Ҡыш.. (нимәнең?) тағы үҙ йәме. Тирә-яҡ.. (нимәнең?) аҡ төҫ.. (ниндәйгә?) инеүенәнме, донъя иркенәйеп, киңәйеп киткәндәй. Күпме атлама, юл.. (нимәләрҙең?) осона, ялан.. (нимәләрҙең?) сигенә етә алмаҫһың кеүек. Ҡотлобаев, үҙе лә һиҙмәҫтән, хыялға бирелә: «Был ер.. (ҡайҙа?) бабаларыбыҙ, атай.. (кемдәребеҙ?) йәшәгән. Беҙҙән һуң – үҙебеҙ.. (кемдең?) балалар, улар.. (кемдәрҙең?) балалары йәшәйәсәк. Йыл.. (нимәнең?) йыл.. (нимәгә?), бер быуын.. (нимәнең?) икенсеһенә ялғаныуына, тормош.. (нимәнең?) үлемһеҙлегенә тағы бер ҡат ышанаһың. Баҫыу күкрәгенә һыҙылған бәрәкәтле бураҙна.. (нимәләр?) киләсәк.. (ҡайҙа?) алып барыусы юл.. (нимәләр?) түгелме һуң?..» *(Ә. Хәкимов)*

► Башҡорт телендә ялғауҙар һуҙынҡы өндәр буйынса ла төрҙәргә бүленә. Уны күплек ялғауҙары ла асыҡ күрһәтә: 1) *ат-**тар**, эт-**тәр**;* 2) *урман-**дар**, тау-**ҙар**, үлсәү-**ҙәр**;* 3) *бала-**лар**, бәлә-**ләр***.

**144.** Кәрәкле һуҙынҡы йә тартынҡы хәреф ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ, уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

1. Төҙөл..шт..ң, с..вхозд..ң, тоҙҙ..ң, һөтһ..ҙ, болонд..ң, боланд..ң, докт..рҙ..ң, көлөүҙ..ң;
2. ..р..мсек, ..с..млек, а..розоль, по..ма;
3. ..лән, бесә..м, ..лан, ша..н, ..рған, ..нсел;
4. ..агон, ..аҡыт, акти.., штати.., заво.., за..хоз, космона..т, пара.., прикла.., фла.., като.., клу.., шта..ым;
5. ҡар..ар, Р. Нигмәти..е, Ғәли..е, байрам..ар, тау..ы, ҡоралай..ар, эш..әр, көтөүсе..әр, балыҡсы..ар.

**Тү** **145.** Хәбәрләмәне уҡығыҙ. Аҙаҡ һөйләгеҙ. Йөкмәткеһенә ҡарап, уны бәләкәй темаларға бүлегеҙ, һәр бүлеккә исем бирегеҙ. Шул исемдәрҙе текстың планы итеп алып, һуңынан текст буйынса изложение яҙығыҙ.

АҠҠОШ КҮЛЕ

Совхозыбыҙ, Сабаҡлы йылғаһын быуып, һуғарыу бассейны эшләгәйне. Тирә-яҡ тәбиғәткә быуа ыңғай йоғонто яһаны. Һуғарылған бесәнлектәрҙе йылына ике тапҡыр саба башланыҡ. Быуала ҡарпы, суртан үрсей. Төрлө ауылдарҙан һәүәҫкәр балыҡсылар килә. Быуа тирәһе тал, ҡамыштар менән ҡапланды. Иң ҡыуаныслыһы – бында аҡҡоштар күренде.

Донъяла хәтһеҙ йәшәһәм дә, ошоғаса аҡҡоштарҙы яҡындан күргәнем юҡ ине әле. Бына уларҙы үҙ төбәгемдә осраттым. Алыҫтан күреп киләм: һыу өҫтөндә ниндәйҙер эре ҡоштар йөҙә. Һаҡ ҡына атлап, күлгә яҡынлашам. Ни күрәм – минең алдымда – аҡҡоштар! Дуғаланып торған муйындарын алға һоноп, улар күл уртаһына китә башланылар.

Һис көтмәгәндә, һул яҡтан бер туп өйрәктәр һауаға күтәрелде. Улар быуаны уратып остолар ҙа арғы ярҙағы ҡамышлыҡҡа төштөләр. Ҡоштарҙың күплегенә һоҡланып торған арала, аҡҡоштар күл уртаһына уҡ киткәндәр. Бөтәһе етәү ине улар. Күрәһең, улар ял итеп, ҡанаттарын алыҫ сәфәр алдынан нығытып китергә булғандар.

Ҡоштар – тәбиғәт күрке. Аҡҡоштар күрһәгеҙ, уларҙы өркөтмәгеҙ, ҡәҙерләгеҙ. *(«Аманат» журналынан)*

**146.** Йомаҡ итеп бирелгән һүҙ айырым мәғәнәләргә эйә булған айырым өлөштәрҙән тора. Йомаҡ һүҙҙе тулы көйө ошо өлөш мәғәнәләренән сығып табырға.

1. ***Киң*** һүҙенең киреһе
Булыр тәүге ижеге;
Икенсеһен уйлап тап:
Ҡырҙа уйнай уйнаҡлап;
Бергә ҡушһаң,
ҡош булыр –
Уйлап тапҡан
сос булыр.

2. Бер өлөшө бик
тәмле,
Икенсеһе – бер йәнлек.
Бергә ҡушһаң,
һуғылған,
Түргә йәйеп ҡуйылған.

3. Ҡом далаһына сәскә исеме ҡушһаң, суйын һауыт килеп сыға.

4. Тәүге ижеге ***ярлы*** һүҙенә антоним, икенсеһе – ағас исеме; икеһе бергә йылҡы малының исеме.

**147.** Уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәргә фонетик анализ яһағыҙ. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы төркөмләп яҙығыҙ. Уларҙың нисек әйтелгәнен күрһәтегеҙ. Әйткәнегеҙҙе башта диктофонға яҙҙырығыҙ ҙа, һуңынан уны әкрен тиҙлектә тыңлап ҡарағыҙ.

## БАШҠОРТ АТЫ

**Борон**[1] башҡорт атҡа бик йәштән атланған, ярты ғүмерен ат өҫтөндә үткәргән. Башҡортто аттан айырыу уны аяҡһыҙ ҡалдырыуға тиң булған.

Ниндәй һуң ул башҡорт аты? 18-се быуатта башҡорттарға ҡаршы көрәшеүсе генерал Румянцев: «...Ул аттарҙың артынан ҡыуыу елде ҡыуыу менән бер, беҙҙең аттарға уларҙың аттарына етеү ҡайҙа!» – тип яҙған. **Икенсе**[1] бер батша **генералы**[1] Чернов та шуны ҡеүәтләй: «... **башҡорттар**[1] юлда осраған ҡаршылыҡтарҙы бар тип тә белмәйҙәр: **йылғаларҙы**[1] ат өҫтөндә йөҙөп сығалар, ҡуйы урманға ингәндә, башҡорттоң ҙур булмаған аты бөгөлөп-һығылып ағастар араһынан етеҙ йөрөй, ә текә тауға **менеүҙе** йәки **төшөүҙе** бөтөнләй һанға

һуҡмай, башҡа кеше йәйәү үткән ерҙе башҡорт мотлаҡ һыбай үтә». *(Календарҙан)*

● «Сифат + исем», төрлө килештәге «исем + ҡылым» ҡалыбындағы һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың араһындағы бәйләнеште өлгөләгесә күрһәтегеҙ, һорауҙарын ҡуйығыҙ.

ниндәй? ҡайҙа ғына?

Өлгө: *Бөйөк Ватан; музейҙарҙа ғына осратаһың.*

**Һүҙҙе фонетик тикшереүҙең тәртибе**

1. Һүҙҙе күсереп яҙ. Уны ижеккә бүлеп яҙ. Нисә ижек икәнен күрһәт.
2. Һүҙҙә нисә хәреф, нисә өн бар?
3. Һуҙынҡыларҙы күрһәт: ҡалынмы – нәҙекме, иренләшкәнме – иренләшмәгәнме? Ниндәй хәреф менән тамғалана?
4. Тартынҡыларҙы күрһәт: яңғыраумы – һаңғыраумы? Ниндәй хәреф менән тамғалана?

### Тикшереү өлгөһө

Күргәҙмә – күр-гәҙ-мә – 3 ижек, 8 хәреф, 8 өн.

к – [к] – тартынҡы, һаңғырау, **к** хәрефе менән тамғалана,

ү – [ү] – һуҙынҡы, нәҙек, ирен өнө, **ү** хәрефе менән тамғалана,

р – [р] – тартынҡы, яңғырау, **р** хәрефе менән тамғалана,

г – [г] – тартынҡы, яңғырау, **г** хәрефе менән тамғалана,

ә – [ә] – һуҙынҡы, нәҙек, **ә** хәрефе менән тамғалана,

ҙ – [ҙ] – тартынҡы, яңғырау, **ҙ** хәрефе менән тамғалана,

м – [м] – тартынҡы, яңғырау, **м** хәрефе менән тамғалана.

## § 21. Ижек. Уларҙың төрҙәре

★ Тексты уҡығыҙ ҙа артабан уның нисек дауам ителергә тейешлеген күрһәтегеҙ, йәғни дауамын һөйләп күрһәтегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлегеҙ.

**Төрлө** төҫтәге йәш **уҫаҡтар** көҙгө **ҡояшлы** көндө шыршы **урманының ситенә** сығып баҫҡан. Ҡапҡа алдына ҡояшҡа **йылынырға** сығып ултырған кешеләр һымаҡ, улар **һыуыҡтан** бер-береһенә бик ныҡ **һыйынғандар. Шылт иткән тауыш та юҡ.**

● Тикшергән миҫалдарға ҡарап, ижектәрҙең төрҙәрен һанап күрһәтегеҙ. Мәҫәлән: *у-ҫаҡ-тар, ур-ма-ны-ның, шылт.*

► Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең һүҙ эсендә килеү тәртибенә ҡарап, ижектәр түбәндәге төрҙәргә бүленә:

– бер генә һуҙынҡы өндән торған ижектәр: ***у**-ҫаҡтар*;

– һуҙынҡы һәм тартынҡынан торған ижектәр: ***ур**-ма-ның;*

– тартынҡы һәм һуҙынҡынан килгән ижектәр: *си-те-нә;*

– тартынҡы + һуҙынҡы + тартынҡы өндәрҙән торған ижек: *бар, ҡат, бат-ҡаҡ, бал-сыҡ* һ. б.;

– һуҙынҡы + тартынҡы + тартынҡы өндәрҙән тороусы ижектәр: *аҫт, өҫт, илт* һ. б.;

– тартынҡы + һуҙынҡы + тартынҡы + тартынҡынан килгән ижек: *шылт, ҡорт, салт, ҡылт, ҡарт* һ. б.

**148.** 1. Шиғыр өҙөгөн тасуири уҡығыҙ. Һәр дүрт юллыҡтың төп фекерен әйтегеҙ. Шиғырҙы матурлап торған күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе табығыҙ. Уларҙы нисек аңлауығыҙ тураһында һөйләгеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп, күсереп яҙығыҙ. Һуңынан ул ижектәрҙең ҡалыбын өлгөләгеҫә (110-сы биттә: тартынҡыны – *т,* һуҙынҡыны *h* хәрефе менән билдәләп) яҙып күрһәтегеҙ.

Өлгө: *һыҙҙырт – һыҙ-ҙырт;* ижек ҡалыбы: *тһт-тһтт.*

ҠУРАЙҠАЙҒА

**Һыҙҙырт,** ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
**Өҙҙөрт,** ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
**Һиҙҙерт,** ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
**Һөйҙөрт,** һөйләп башҡорт моңдарын…
Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә **яңғыраһын**!
Ҡыуанып китһен урман, сәхрә, туғай,
Буҙ турғайҙар ҡыуанып һайраһын!
Уйна, ҡурай, күктән йәм шаулаһын,
Нур уйнаһын баштар өҫтөндә!
Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар **өҫтөндә**! *(Ш. Бабич)*

● 1. Өндәш һүҙе булған һөйләмдәрҙе күрһәтегеҙ. Тиң киҫәкле һөйләмде табығыҙ, һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгәнен әйтегеҙ. 2. *Ҡайнар тойғолар, йөрәккәй ҡылдарын* һүҙбәйләнештәрен нисек аңлайһығыҙ? Шулар менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

| |
|---|
| *сәхрә* |
| *хазина* |
| *шөһрәт* |
| *ләззәт* |
| *шөғөлләнер* |

**149.** Оҙон һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙарҙы, таҡмаҡты уҡығыҙ. Уларҙың һәр юлындағы ижектәрен һанап сағыштырып ҡарағыҙ. Һәр юлдың аҙағына ижек һанын яҙып ҡуйығыҙ.

1. Саңҡып та ғына саңҡып, ай, ҡысҡыра
   Урал тауҙарының шоңҡары[4].
   Яҫы ғына яурын, киң күкрәкле
   Урал егетенең толпары. *(«Урал» йыры)*

2. Аҡбуҙаттың яҡшыһы
   Ал сәскәне тапамаҫ.
   Ебеп торған егеттәрҙе
   Бер китап та маҡтамаҫ. *(«Йәштәр йыры»)*

3. Баҫыр ул, баҫыр ул,
Баҫыр өсөн килгән ул.
Дуҫтарының күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул. *(«Бейеү таҡмағы»)*

● *Яҫы* һүҙендә *я* хәрефенең, *егетенең* һүҙендә *е* хәрефенең (һүҙ башында) ни өсөн бер ижек икәнен аңлатығыҙ.

► Һүҙҙе бер юлдан икенсе юлға ижеккә бүлеп күсерәләр. Мәҫәлән: *тау-ҙа; ҡала-нан, ҡа-ланан; йәт-сә, со-циа-лизм.*

*Бая, тая, оя, еләң, атай, әсәй* кеүек һүҙҙәрҙе юлдан юлға бүлеп күсереп булмай, сөнки бер хәрефтән торған ижек яңғыҙы ғына юл аҙағында ҡалдырылмай ҙа, икенсе юлға күсерелмәй ҙә.

**150.** Бер юлдан икенсе юлға күсерелә торған урындарҙа һыҙыҡсалар ҡуйып, түбәндәге һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ.

Ирәбе, ирәмек, исем, оҙаҡ, оҙаттырт, осорғос, осраҡлы, параллель, Сания, Ғәли, Ғәлиә, президентлыҡ, сыҙамһыҙлыҡты, сыйҙырттырыу, тинтәклек, тыңдәшлек, үгәйһетеү, үреү, үңәҙләнеү, мәсьәлә, донъя, Аҡъюл, тиерһең.

● *Ирәбе, ирәмек, тинтәк, тинтәклек, үңәҙләнеү, сыйыу* һүҙҙәренең мәғәнәләрен һүҙлектән ҡарап аңлатығыҙ.

## § 22. Баҫым

★ Шиғыр өҙөгөн тасуири уҡығыҙ. Ҡайһы һүҙҙәргә көслө баҫым төшкәнен күҙәтегеҙ һәм билдәләгеҙ. Шағир һәм сәскәләр булып, диалог рәүешендә лә уҡығыҙ.

Нәфис төҫтәренә, буйҙарына
Хайран ҡалып, ҡыҙығып[1] ҡараным:
– Эй, сәскәләр, һеҙгә кемдәр дуҫтар?
Кемдәр дошмандар? – тип һораным.

Гүйә, улар шунда йәнләнделәр,
Нурҙар сәсеп, ем-ем көлдөләр[4].
Әкрен генә иҫкән ел аркылы
Миңә былай яуап бирҙеләр:
«Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙа,
Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,
Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле –
Шулар беҙгә дуҫтар!» – тинеләр.
«Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,
Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәйҙәр,
Кемдәр килеп, беҙҙе хаҡһыҙ өҙә –
Шулар беҙгә дошман!» – тинеләр.

*(М. Ғафури)*

● 1. *Ҡара эсле, тар күңелле, ҡул бирмәү* әйтемдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

2. «Сифат + исем» схемаһындағы һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ.

► Һүҙҙең бөтә ижектәре лә бер төрлө тауыш менән әйтелмәй. Көслөрәк тауыш менән әйтелеүҙе **баҫым** тип атайҙар.

Башҡорт телендә баҫым һәр саҡ тип әйтерлек һуңғы ижеккә төшә: *урма́н, урмансы́, урмансылы́ҡ, урмансылыҡта́, урмансылыҡтағы́; бала́, балала́р, балаларға́.*

Ҡайһы бер рәүештәрҙә, алмаштарҙа баҫым беренсе ижеккә төшөүсән: *я́ңы* (ҡайтты), *ҡа́пыл* (күренде), *ба́йтаҡ* (эшләнгән), *һа́ман* (йөрөй), *ҡа́сан, ни́лектән, ни́сә* (тапҡыр) һ. б. Был осраҡта әйтеләсәк уй, фекер көсәйтелеп, ҡабартылып бирелә. Шуға күрә айырым осраҡтарҙа һүҙҙең мәғәнәһен көсәйтеүсе ярҙамсы һүҙҙәргә лә баҫым төшә: *би́к күңелле, би́к яҡшы* (булған), *и́ң матурын* (ал), *һәлә́к уңған* һ. б.

► Рус теленән бер ниндәй үҙгәрешһеҙ үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең баҫымы үҙ урынында ҡала: *комба́йн, элева́тор, тра́ктор, телеви́зор, самолёт, карти́на.*

**151.** Һөйләмдәрҙе иғтибар менән, дөрөҫ әйтелештең бар талаптарын ҡулланып уҡығыҙ. Һәр һөйләмдең төп мәғәнәһен белдергән һүҙҙе күрһәтегеҙ. Ул мәғәнә төрләнөгәнөнөң нимәгә бәйләнгәнен әйтегеҙ.

1. Уҡыусыларҙың район слётына иртәгә бишенселәр бара.
2. Бишенселәр уҡыусыларҙың район слётына иртәгә бара.
3. Иртәгә бишенселәр уҡыусыларҙың район слётына бара.
4. Иртәгә уҡыусыларҙың район слётына бишенселәр бара.

► Һөйләмдәге һүҙҙәрҙең барыһына ла баҫым бер тигеҙ төшмәй. Аралашыуҙың маҡсатынан сығып, билдәле бер һүҙгә көслө баҫым төшә. Ундай көслө баҫым **логик баҫым** тип атала. Логик баҫым һәр саҡ тип әйтерлек хәбәр ролен башҡарған ҡылым алдындағы һүҙгә төшә. Мәҫәлән: *Олатайым менән әсәйем мине* ***тышҡа сыҡҡас ҡына*** *күрҙеләр. – Олатайым менән әсәйем тышҡа сыҡҡас ҡына* ***мине*** *күрҙеләр.* (С. Агиштан)

**152.** Һөйләмдәрҙе ныҡлап өйрәнегеҙ. Һәр һөйләмде, төрлө мәғәнә бирерлек итеп, көслө баҫым төшкән һәм төп мәғәнәне белдергән һүҙҙе тейешле урынға ҡуйып, үҙгәртеп яҙығыҙ. Шул рәүешле бер һөйләмде нисә тапҡыр яҙырға мөмкинлеген әйтегеҙ.

Мин ял көнө урманға сәтләүеккә барам[4]. Тейенде мин ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрә инем[4]. Ул ҡарт

имәндең ҡыуыш урынында үҙенә ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ әҙерләй икән[4]. *(А. Карнайҙан)*

**Тү** **153.** Түбәндә һүрәтләнгән хәлде уҡығыҙ. Һуңынан ул хәлгә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы тулы итеп яҙығыҙ.

Кәрим менән Урал айырылғыһыҙ йән дуҫтар ине. Көтмәгәндә улар үпкәләштеләр. Нилектән? Кәрим ангина менән ауырып, бер аҙна буйы дәрескә килә алманы. Урал уның хәлен белергә инмәгән.

Кәрим мәктәпкә килгәс, Уралдан: «Минең ауырығанымды белмәнеңме әллә, нишләп инеп сыҡманың?» – тип һорай. Урал: «Белдем дә ул, тик ваҡытым булманы, әсәйемә ярҙамлаштым, һеңлемде лә ҡараным», – тип яуап биргән.

Кәримгә ҡыйын булып китте. Ул Урал менән ҡабат һөйләшергә лә теләмәне. Ғәфү ҙә итмәне.

Кәрим дөрөҫ эшләгәнме? Уралды аҡлап буламы?

● «Рәүеш + ҡылым» ҡалыбындағы һүҙбәйләнештәрҙе айырып яҙып алығыҙ. Һорауҙарын күрһәтегеҙ.

## «Фонетика» темаһын ҡабатлау өсөн һорауҙар

*(Һәр һорауға миҫалдар менән яуап бирергә)*

1. Башҡорт телендә өндәр ниндәй төрҙәргә бүленә?
2. Һуҙынҡы өндәрҙең бүленешен күрһәтегеҙ.
3. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы һанап сығығыҙ. Уларҙың айырмаларын әйтегеҙ.
4. Өндө яҙыуҙа нисек сағылдыралар?
5. Өн менән хәреф ни өсөн бер-береһе менән тап килмәй?
6. Алфавитта нисә хәреф бар? Өндө сағылдырмаған хәрефтәрҙе һанап бирегеҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.
7. Алфавитты яттан әйтегеҙ.
8. *О, э (е)* хәрефтәре ниндәй өндәрҙе сағылдыра?

9. Ике һуҙынҡы араһында һәм яңғырау тартынҡылар янында *ҡ, к, п* өндәре ниндәй өндәргә үҙгәреп килә?

10. Ижек тип нимәгә әйтәләр?

11. Һүҙҙе юлдан юлға нисек күсереп була?

12. Башҡорт телендә баҫым күберәк һүҙҙең ҡайһы ижегенә төшә?

## «Фонетика» бүлеге буйынса белемегеҙҙе тикшерегеҙ (тест)

**1.** Телмәр өндәрен өйрәнеүсе фәнде билдәләгеҙ.

1) фонетика 2) графика 3) лексика

**2.** Ҡалын һуҙынҡылар ғына булған рәтте билдәләгеҙ.

1) а, о, у, ы 2) ә, ө, ү, и, е (э) 3) о, ө, у, ү

**3.** Ирен һуҙынҡылары ғына булған рәтте билдәләгеҙ.

1) а, о, ө, ә 2) ә, и, ө, ү 3) о, ө, у, ү

**4.** Ике өндө белдергән хәрефтәрҙе билдәләгеҙ.

1) ө, и, ә, ы 2) е, ё, ю, я 3) о, у, а, ы

**5.** Тартынҡылар ниндәй төрҙәргә бүленә?

1) яңғырау, һаңғырау 2) ҡалын, нәҙек 3) иренләшкән һәм иренләшмәгән

**6.** Яңғырау тартынҡылар ғына бирелгән рәтте билдәләгеҙ.

1) б, д, к, р, ф, с 2) б, в, г, д, ж, з 3) к, л, м, н, п, ф

**7.** Һаңғырау тартынҡылар ғына бирелгән рәтте билдәләгеҙ.

1) к, ҡ, п, ф, с, ҫ, ч 2) б, в, г, ғ, д, ж, з 3) в, ф, к, м, л, н, с

**8.** Ҡайһы рәттә *у, ү* өндәре һуҙынҡы өндө белдерә?

1) урман, үлән 2) һыу, кеүек 3) һыуыҡ, әүәҫ

**9.** Ҡайһы һүҙҙә *ъ, ь* дөрөҫ ҡуйылмаған?

1) аръяҡ 2) көньяҡ 3) бирьяҡ

**10.** Ҡайһы һүҙҙә ялғау дөрөҫ яҙылмаған?

1) тормошто 2) фотоны 3) төҙөлөште

## ЛЕКСИКА. ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ

### § 23. Лексика тураһында төшөнсә. Һүҙҙең мәғәнәһе

★ Уҡығыҙ. Текста нимә тураһында һүҙ бара?

Һүҙ – телмәрҙең нигеҙ ташы. Шунлыҡтан уны телдең төҙөү материалы тип бик тапҡыр әйтәләр. Телдә һүҙҙәр бик күп, улар төрлө-төрлө.

Тормоштағы иҫәпһеҙ-һанһыҙ күренештәр, ваҡиғалар, әйберҙәр, хайуандар һәм йәнлектәр, бөжәктәр, эш-хәрәкәттәр – бөтәһе лә һүҙҙәр менән аңлатыла. Шулай итеп, һәр һүҙ нимә лә булһа аңлата, йәғни уның лексик мәғәнәһе була. Мәҫәлән, *бейек* һүҙе тигеҙ урындан бик күпкә ҡалҡыу, юғары урынды белдерә:

Тауҙар, тауҙар! Ҡайһы тау *бейек* тип
Мин Уралға тағы ла ҡараным.
Тик тапманым шул тауҙарҙа тыуған
Шатлыҡтан да бейек ҡаяны! *(Ғ. Сәләм)*

**154.** Өҙөктө уҡып, яҙыусының һүҙ тураһындағы фекерен аңлатығыҙ. Үҙегеҙҙең тормошоғоҙҙан һүҙгә бәйле булған берәй һөйөнөслө йәки көйөнөслө ваҡиға хаҡында һөйләгеҙ.

Һүҙ – бөйөк нәмә ул. О һүҙ! Кешеләрҙе бер-береһе менән осраштыраһың, яҡынайтаһың, уларҙы һин айыраһың да; мөхәббәткә лә, дошманлыҡҡа ла, күрә алмаусылыҡҡа ла берҙәй үк хеҙмәт итәһең.

Шуға ла мәңге бөйөкһөң һин! О кешем! Бер-берегеҙҙе айыра торған һүҙҙән һәр саҡ һаҡ бул.
*(Л. Толстой буйынса)*

**155.** Һүҙ тураһында мәҡәлдәр яҙығыҙ. «Башҡорт халыҡ ижады»ның мәҡәлдәр һәм әйтемдәр китабынан (1980) 339–346-сы биттәрҙе ҡарағыҙ.

Өлгө: *яҡшы һүҙ – йән аҙығы, яман һүҙ – баш ҡаҙығы; утыҙ тештән сыҡҡан һүҙ утыҙ ауылға еткән.*

► Телдәге бөтә һүҙҙәр телдең **һүҙ байлығын** йәки **лексик составын** тәшкил итә.

Төшөнсәнең һүҙ менән бирелеүе, һүҙҙә сағылыуы һүҙҙең **лексик мәғәнәһе** тип атала.

Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен һүҙлектәрҙә аңлаталар. Башҡорт телендә аңлатмалы, башҡортса-русса, русса-башҡортса, орфография һәм башҡа төрлө һүҙлектәр бар.

Һүҙҙең мәғәнәһен төрлө юл менән аңлатырға мөмкин. Мәҫәлән, а) мәғәнәләре буйынса яҡын һүҙҙәрҙе йәнәш ҡуйыу юлы менән (*булдыҡлы* – һәләтле, эшсән, тырыш кеше), б) шул һүҙ аңлатҡан предметтың билдәләрен күрһәтеү юлы менән (*арпа* – оҙон ҡылсыҡлы, орлоғо көп эсендә өлгөргән, ярма әҙерләүгә файҙаланыусы башаҡлы үҫемлек), в) һүҙ киҫәктәренең мәғәнәләрен асыу аша (*ҡулъяулыҡ* – танау, ауыҙ, ҡул һөртөү өсөн ҡулланылған бәләкәй дүрткел сепрәк).

Һүҙҙең, лексик мәғәнәһенән тыш, **грамматик мәғәнәһе** лә була. Мәҫәлән: *ат* – исем, уртаҡлыҡ исем, берлектә, төп килештә; *алды* – ҡылым, хәбәр һөйкәлеше, үткән заманда, берлектә, барлыҡта.

**156.** 1. Өҙөктө дөрөҫ итеп ҡысҡырып уҡығыҙ. Унда ҡайһы ваҡыт һүрәтләнгәнен һөйләгеҙ. Һуңынан күсереп алығыҙ. 2. Өс исемдең, дүрт ҡылымдың лексик һәм грамматик мәғәнәләрен күрһәтегеҙ.

Туғайҙы яңғыратҡансы салғымды янып алдым да бакуйҙарҙы ҡайырып һала башланым. Үксәмә баҫа яҙып килеүсене күрәм дә ҡыҙа төшәм. Манма тирләгәнсе сабам. Беләктәр талғас, туҡтап хәл алғылайым да, йәнә тотонам. Салғым аҫтынан сиңерткәләр һикерешеп сығалар, күбәләктәр пырылдашып күтәреләләр, тирә-яҡта ҡоштар сырҡылдаша. Тик минең генә уларҙа эшем юҡ... Аҡландың икенсе башына сыҡҡас ҡына әйләнеп ҡараным. Баяғы егеттәрем, минән көлгән ҡыҙҙар әллә ҡайҙа уҡ тороп ҡалғандар... *(Д. Бүләковтан)*

● Өҙөккә исем бирегеҙ. Бесән сабыу, уны йыйыу эшенә бәйле тағы ниндәй һүҙҙәр беләһегеҙ? Һанап, аңлатып бирегеҙ.

**157.** Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Тыуған яҡты, уның тәбиғәтен данлаған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

### ТИМЕРҒӘЛЕ БАБАЙҘЫҢ ҺӨЙЛӘГӘНЕ

Тыуған яҡтарҙың тарихын белгән кеше тыуып үҫкән төбәгенә ихтирам менән ҡарай. Беҙҙең Башҡортостан ҙур ҙа, матур ҙа. Бына Биксән ауылын ғына алайыҡ. Тирә-яғын урман уратҡан, эргәһенән Һәләүек ағып ята. Һыуҙың төбөнә энә төшһә лә күренә. Башҡорт халҡы элек-электән тәбиғәтте яратҡан. Беҙ малай саҡта туғайҙа үлән күпереп үҫер ине. Бөрлөгән менән ҡарағатты әйтеп тораһы ла юҡ. Яланда еләк ҡыҙыл балаҫ булып йәйелгән. Их, заманалар ауыр булһа ла, тәбиғәттең матурлығы йәшәргә дәрт, көс бирә торғайны.

Һәләүек буйында, туғайҙың иң уртаһында, күккә олғашып торған тирәк бар ине. Уны Сығырлы тирәк тип йөрөттөләр. Ауылдың оло ваҡиғалары шуның янында үтер ине. Ул да ҡартайҙы, йәшен һуғып яндырҙы. Шул тирәк һымаҡ беҙ ҙә ҡартайҙыҡ. Хәҙер донъя һеҙҙең ҡулға ҡала. Тыуған ерҙәребеҙҙе ҡәҙерләгеҙ, һыуҙарыбыҙҙы ҡоротмағыҙ. Беҙ бәләкәй саҡтағы кеүек муйылдар, баландар яңынан мул емеш бирһен ине. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

**158.** Түбәндәге һүрәтләмәләр буйынса һүҙҙәрҙе табығыҙ. Шул һүҙҙәрҙе индереп, берәр тарҡау һөйләм яҙығыҙ.

1. Йәй менән ҡыш араһындағы йыл миҙгеле. 2. Һыуҙа йөҙә торған, ҡышын йылы яҡҡа китеүсе ҡош. 3. Ярыштарҙа беренселекте алған спортсы. 4. Самолёттар осоп китә, килеп төшә торған урын.

## § 24. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге

★ *Аҡ* һүҙенең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Аҡ сәскә, аҡ ҡағыҙ; аҡ мунса, аҡ тирмә; аҡ юл (аҡ юл теләү); аҡҡа ҡара төшһә, юйылмаҫ; аҡҡа күсереү; һыйырыңды яҡшы баҡ, өҫтәлеңдә булыр аҡ; һөттән аҡ, һыуҙан пак; аҡланыу; Ағиҙел; аҡ күңелле кеше; аҡ икмәк.

► Ҡайһы бер һүҙҙәр бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла. Уларҙы **күп мәғәнәле һүҙҙәр** тип йөрөтәләр: *кире* юл, *кире* яуап, *кире* кеше, *кире* боролоу, *кире* килеү, *кире* китеү, *кире* уйлау һ. б.

Бер генә мәғәнәлә йөрөгән һүҙҙәр **бер мәғәнәле һүҙҙәр** тип атала: *Һуңғы йылдарҙа беҙҙең урмандарҙа мышы бик үрсеп китте. Шулай ҙа мышы-*

*ны атыу нык тыйыла.* Был һөйләмдәрҙә тик бер генә мәғәнәлә ҡулланылған *мышы* һүҙе бар.

► Күп мәғәнәле һүҙҙәр төп мәғәнәле бер һүҙҙән киңәйеп барлыҡҡа килгәндәр. Мәҫәлән, *баш* тигәндән иң тәүҙә кеше башын аңлайбыҙ. Был төп мәғәнә була. Башҡа һүҙҙәр менән килгәндә лә ул теге йәки был предметтың башланған өлөшөн, юғары нөктәһен аңлата: тау *башы,* таяҡ *башы*, йылға *башы* һ. б.

**159.** Уҡып сығығыҙ. Бер үк һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнәләрҙә ҡулланылғанын әйтегеҙ. Билдәләнгән һүҙбәйләнештәрҙе индереп, һөйләмдәр яҙығыҙ.

Өлгө: *Илшаттың ҡулындағы сумаҙан **еңел** ине.*

*Бер эшкә лә **еңел** ҡарарға ярамай.*

1. Кеше йөрөй; сәғәт йөрөй. Өфө менән Күмертау араһында поезд йөрөй. Әлфиә бейеү түңәрәгенә йөрөй. 2. Еңел йөк; еңел мәсьәлә; еңел эш; еңел уйлау; еңел ҡотолоу.

**160.** *Еңел, баш, йөҙ* һүҙҙәренең түбәндәге ҡайһы һүҙҙәр менән йәнәшә тора алғанын әйтегеҙ ҙә һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Өлгө: *тау башы, асыҡ йөҙ, еңел һөйәкле.*

Аңлайышлы, тау, асыҡ, сумаҙан, яҡты, өй, эшләйәсәк, һытыҡ, йылға, аҡыллы, ер, таяҡ, аҙыҡ, икмәк, эш, ҡулдан, нурлы, мейес, оялыу.

**161.** *Бит, ауыҙ, тамыр, ҡултыҡ, морон* һүҙҙәренең бер нисә мәғәнәһен әйтегеҙ. Улар менән тәүҙә – һүҙбәйләнеш, унан һөйләмдәр төҙөгөҙ. Тәүге өс һүҙ менән төҙөгән һөйләмдәрегеҙҙе дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

Өлгө: *1. Тау морононан ғына сыҡҡан шишмә ҡуйы үләндәр араһынан сылтырап аға ла аға. 2. Кәмә мороно ҡапыл ярға төртөлдө. 3. Сәйнүк мороно кителеп төштө.*

**162.** Өҙөктө дөрөҫ тауыш менән уҡығыҙ; уның төп фекерен асығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тағы ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуын әйтегеҙ. Шул һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.

Башҡортостан – **иркен** ил, биләгән ере 143 мең 600 квадрат километрҙы тәшкил итә. Әгәр уны дүрткел өҫтәл рәүешле күҙаллаһаҡ та, 380 километр булыр ине ул өҫтәлдең һәр яғы. Шундай ҙа киң майҙанлы ул тыуған Башҡортостаныбыҙ. Илебеҙҙең сиктәре ут күршеләребеҙ Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Татарстан, Удмурт республикалары ерҙәре менән тоташҡан. Ошо әйтелгән күрше өлкәләрҙә һәм республикаларҙа ла йәшәй башҡорттар.

Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы – Өфө. 1 миллиондан артыҡ кеше йәшәй унда. Баш ҡалабыҙ гүзәл Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының **күркәм** бейек ярында – изге Ҡобатау менән изге Торатау түбәләрендә урынлашҡан. *(Й. Солтанов)*

## § 25. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе

★ Уҡығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырығыҙ, айырмаларын әйтегеҙ. Йөрәктең таш булыуы мөмкинме?

| | |
|---|---|
| **ныҡ** ағас | **ныҡ** ихтыяр |
| **йомшаҡ** яҫтыҡ | **йомшаҡ** күңел |
| **ҡаты** ер | **ҡаты** күңел |
| **таш** өй | **таш** йөрәк |

● Һул яҡтағы билдәләнгән һүҙҙәр тура мәғәнәһендә торалар, уңдағы һүҙбәйләнештәрҙә ошо уҡ һүҙҙәр күсмә мәғәнәлә ҡулланылғандар.

**163.** Һөйләмдәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙең ҡайһылары

тура, ҡайһылары күсмә мәғәнәлә ҡулланылғанын әйтегеҙ. Шул һүҙҙәр ҡатнашҡан һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ.

1. Һай, Уралтау, Уралтау — **күпте күргән** Уралтау. *(Ҡобайыр)* 2. Ишек асыусы Фәррәх ағай **күпте күргән, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған,** бөтә Рәсәйҙе, Ҡытайҙы **арҡырыға-буйға үлсәп** сыҡҡан. *(И. Насыри).* 3. Полк командиры өлкән генә икән, **ут-һыу кискән** кешегә оҡшап тора. 4. **Кәкре** юл. **Кәкре** урам. **Кәкре** һыҙыҡ. **Кәкре** ҡайында ҡар тормаҫ, алама кешелә һүҙ тормаҫ. *(Мәҡәл)* Бармаҡтары үҙ яғына **кәкре. 5. Көс йыйыу; көс һалыу; көс түгеү.** Ни өсөн кешеләр **көсө еткәнгә** көсөктәй, ни өсөн **көсө еткәнде** шул тиклем ҡәһәрләйҙәр? *(М. Басыров)* Был Новалихин байҙың яңы һалдырған фабрикаһы торбаһынан сыҡҡан пар **көсөнөң** тауышы ине. *(Т. Хәйбуллин)*

► Һүҙҙәр, тура мәғәнәнән тыш, күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла. Ундай һүҙҙәрҙе **күсмә мәғәнәле һүҙҙәр** тип йөрөтәләр: *алтын күҙ, тәрән тойғо, шаян нур.*

**164.** Р. Ниғмәти һәм М. Кәрим шиғырҙарынан күсмә мәғәнәлә торған һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙҙәре менән бергә яҙып алығыҙ.

Өлгө: *Ҡорос ҡанат бирҙе беҙгә Ватан,*
*Ир ҡанаты хәҙер ат түгел.* (Ҡ. Даян)

***Ҡорос ҡанат, ир ҡанаты.***

**165.** Тексты уҡығыҙ, һөйләргә әҙерләнегеҙ. Уның төп фекерен асыҡлағыҙ, шунан сығып, исем бирегеҙ. Тексты йөкмәткеһе буйынса бүлектәргә бүлегеҙ, һәр бүлектең йөкмәткеһен бер-ике һүҙ менән әйтегеҙ. Һуңынан күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың текстағы ролен билдәләгеҙ.

Республиканың баш ҡалаһы Өфө йылдан-йыл үҙгәрә, матурлана. Ағиҙелдең бейек ярында дүрт

быуаттан ашыу мөһабәт булып баҫып тора. Ҡаланың туған халҡым ғорурланыр бай тарихы бар. Беҙҙең өсөн уның үткәне лә, бөгөнгөһө лә, киләсәге лә ҡәҙерле, яҡын һәм изге.

Өфө беҙҙең илдәге ҙур ҡалалар иҫәбенә инә. Ағиҙел аҡҡошоноң ҡанаттары 65 километрға йәйелә. Өфө киңлектәрендә яңынан-яңы матур районлар барлыҡҡа килде. Был яңы райондарҙа күпме кеше йәшәй хәҙер!

Ҡалалар ҙа бала һымаҡ. Үҫкәндәре һиҙелмәй ҙә, нисек тиҙ үҫәләр! Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә, саф тулҡындар араһында гүзәл аҡҡош булып йөҙгән Өфө шулай үҫә, ҡупшылана. Ул үҙенең тағы ла яҡты, бөйөк киләсәгенә ҡарай елә. *(Календарҙан)*

● *Ғорур, саф, яҡты* һүҙҙәренең мәғәнәһен «Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге»нән ҡарағыҙ. Уларҙың текста ниндәй мәғәнәлә ҡулланылғанлығын әйтегеҙ.

## § 26. Синонимдар

★ Уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Мәғәнәләрендә ниндәй айырма һәм оҡшашлыҡ барлығын һөйләгеҙ. Шиғырҙы яҙып алығыҙ.

Быға оҡшаш... Ләкин таныш ерҙә
Яңғыҙ түгел инем ул саҡта;
Бәхет **юлы** булып, пар эҙ ҡалды
Тәүге ҡарҙар яуған **һуҡмаҡта.** *(М. Кәрим)*

**166.** Һәр төркөмдәге һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Уларҙағы мәғәнә яҡынлығын һәм айырмалыҡтарын һөйләгеҙ. Ул һүҙҙәр менән «сифат + исем», «исем + ҡылым» ҡалыбындағы һүҙбәйләнештәр яһап яҙығыҙ.

1. Ваҡлау, онтау, турау, тураҡлау, бүлгеләү, бүлгесләү. 2. Йылғыр, етеҙ, йылдам, теремек, сос, осҡор, өлгөр. 3. Ысын, дөрөҫ, хаҡ, раҫ. 4. Бәләкәй,

бәләкәс, кескәй. 5. Быулау, еүешләү, сылатыу, мансыу, дымлау. 6. Ҙур, оло, өлкән, дәү, эре, гигант.

► Мәғәнәләре менән бер төрлө йәки бер-береһенә бик яҡын булған һүҙҙәр **синонимдар** тип йөрөтөлә: *алыҫ, йыраҡ, өҙәрем, аралы; һылыу, матур, сибәр; юл, һуҡмаҡ; йәштәш, тиңдәш, тиҫтер, ҡорҙаш, тиң, тиң-тош; ҡурҡыу, шөрләү, шыртлау, өркөү.*

**167.** Бирелгән күп мәғәнәле һүҙҙәргә башта мөмкин тиклем күберәк синонимдар яҙығыҙ; һуңынан, һуңғы өс оя синонимдарҙы индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Өлгө: *кәбән һалыу – ҡойоу, өйөү;*
*ҡапҡан һалыу – ҡороу, ҡуйыу.*

1. иҙән һалыу – ...
2. йоҡларға һалыу – ...
3. юл һалыу – ...
4. юлға һалыу – ...
5. һыу һалыу – ...
6. баҫма һалыу – ...

► Һүҙҙәрҙең синонимдарын күп белгән кешенең телмәре тулы, матур, аныҡ була, ул үҙенең фекерен асыҡ һәм дөрөҫ сағылдыра. Ундай кеше һөйләгәндә бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатламай.

**168.** Билдәләнгән һүҙҙәр эргәһенә (йәйәләр эсендә) ул һүҙҙәрҙең синонимдарын ҡуйып яҙығыҙ.

Йәш замандаштарым! Һеҙ **Ватаныбыҙҙың** таңы, **өмөтө,** киләсәге. Беҙ, ветерандар, Ватаныбыҙ **яҙмышын** ышанып һеҙгә тапшырабыҙ. Һеҙгә, атайҙарығыҙҙың **хәрби** һәм хеҙмәт данын дауам итеүселәргә, ныҡлы ышанабыҙ. Был изге ышаныҫҡа **лайыҡ** булһағыҙ ине! Еребеҙҙең **күркен** һаҡлаһағыҙ, уның йәмен тағы ла **арттырһағыҙ** ине! Унда һәр ваҡыт туҡ башаҡтар **тулҡынһын**, урмандар **шаулаһын,**

**саф** йылғалар аҡһын. Тәбиғәтте һаҡлағыҙ! Һеҙҙән һуң киләсәк тиҫтерҙәрегеҙ ҙә тәбиғәт ҡосағында иртәнге саф һауаны **кинәнеп** һулай алһындар. Йәштәргә **һәр саҡ** һандуғас **моңо** юлдаш булһын, һәр яҙ **игенсегә** һабантурғайҙар дан йырлаһын!

Йәштәр, һеҙгә мөрәжәғәт итәм: тәбиғәтте һаҡлауҙы үҙ ҡулығыҙға алығыҙ! Бының өсөн хәл иткес көрәш мәле етте. Уны һаҡлай алмаһаҡ, килер быуындарға бер нәмә лә ҡалмаясаҡ. *(Т. Мальцевтан)*

**169.** Һәр төркөмдәге һүҙҙәрҙең ҡайһылары синоним булғанлығын әйтегеҙ; синоним булған һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙығыҙ. Һуңынан уларҙың синонимлығын һүҙбәйләнештәр менән күрһәтегеҙ.

1. Исемдәр: өлгө, саң, сынаяҡ, сәй, туҙан, белеш, ҡыуаныс, танау, үрнәк, ҡаҙау, шәшке, миҫал, морон, ҡаҙаҡ, таныш, томшоҡ, шатлыҡ, терәк, һөйөнөс, таяныс, таяу.

2. Сифаттар: сабыр, ҡыҙғаныс, ҡыҙыҡ, матур, саф, сыҙамлы, аяныс, мәрәкә, һылыу, таҙа, йәл, мәҙәк, күркәм, пак, түҙем, сибәр, керһеҙ, түҙемле, нәфис, ирмәк, зифа, көлкө.

3. Ҡылымдар: ҡырҡыу, ҡыбырлау, менеү, тейәү, ҡыймылдау, киҫеү, күтәрелеү, ҡымшаныу, телеү, үрләү, ҡағылыу, ҡуҙғалыу, йыбырлау, ҡалҡыу.

4. Рәүештәр: киҫкен, мәртәбә, саҡ, тағы, тиҙҙән, ҡайтанан, ҡырҡа, тапҡыр, киренән, көскә, йәнә, оҙаҡламай, ҡабат, яңынан.

**170.** Йәйәләр эсендәге синонимдарҙың тейешлеһен ҡуйып, **ТҮ** тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ ҙә уны өлөштәргә бүлегеҙ, һәр өлөшкә исем бирегеҙ. Һуңынан тексттың йөкмәткеһен файҙаланып, «Спорт — һаулыҡ сығанағы» темаһына бәләкәй генә инша яҙығыҙ.

Бөтә кеше лә бәхетле, (сәләмәт, һау), (матур, күркәм, гүзәл, һөйкөмлө) булыу өсөн тыуған. (Әммә, ләкин, шулай ҙа) беҙ йәш саҡта (һаулыҡтың, сәләмәтлектең, арыулыҡтың, таҙалыҡтың, иҫәнлектең, шәплектең) (да, дә), матурлыҡтың да (ҡәҙерен, тәмен, яҡшылығын, рәхәтлеген) белеп еткермәйбеҙ. Һаулығың булмаһа, (донъяның, тормоштоң, йәшәүҙең, ғүмер итеүҙең) бөтә (матурлығы, күрке, гүзәллеге, йәме) юғала.

Кешелекле һәм яҡшы (ҡараштә, мөғәмәләлә, мөнәсәбәттә) булыу, (иптәштәреңә, дуҫтарыңа, тиңдәштәреңә, тиҫтерҙәреңә), ата-әсәңә, туған-тыумаларыңа, үҙеңдән (ололарға, ҙурҙарға, өлкәндәргә) һиҙгер һәм ярҙамсыл булыу — кеше күңелен күтәреү, сәләмәтлекте һаҡлауҙа, ғүмерҙе оҙайтыуҙа иң беренсе шарт. *(Ә. Мифтахова буйынса)*

**171.** Синонимдар буйынса викторина һорауҙарына яуап бирегеҙ, ярыш ойоштороғоҙ, үҙегеҙ ҙә викторина, кроссворд төҙөп ҡарағыҙ.

ВИКТОРИНА

**I. 1.** *Салыш* һүҙенең синонимы, киреһенсә уҡыһаң, *ҡуйы* һүҙенең антонимы.

**2.** *Яҡын* һүҙенең антонимы, тартынҡы өндәрҙең урынын алмаштырып ҡуйһаң, *затлы, ҡиммәтле* һүҙҙәренең синонимына әүерелә.

**3.** *Һунар* һүҙенең синонимы, алдына бер хәреф өҫтәһәң, ер өҫтөндәге бейек урынға әйләнә.

**4.** *Сәңгелдәктең* синонимы, бер хәрефен алып ташлаһаң, инеп-сығып йөрөй торған нәмәнең исеме була.

**5.** *Ваҡыт, саҡ* һүҙҙәренең синонимын киреһенсә уҡыһаң, һыу ситендәге ҡоро батҡаҡ була.

**6.** *Өйөм, өйкөм* һүҙҙәренең айырмаһы нимәлә?

**II.** Бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләш һүҙҙәрен дөрөҫ тапһағыҙ, тәүге хәрефтәренән (аҫҡа табан уҡығанда) уларҙың дөйөм исеме килеп сыға.

алыш-биреш –
сәләмәт –
сират –
өлкән –
нескә –
ашлыҡ –
ҡыҙыҡ –
дауа –
яй –
һүрәт –

## § 27. Антонимдар

★ Шиғырҙы дөрөҫ интонация менән уҡып, уның төп фекеренә төшөнөгөҙ, һуңынан билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен сағыштырығыҙ. Уларҙың мәғәнәләре араһында ниндәй айырма барлығын аңлатығыҙ.

Бөтә нәмә була ике яҡлы:
Ике яҡлы ҡапма-ҡаршылыҡ,
**Изгелеккә** ҡаршы – **яуызлыҡ,**
**Яманлыҡҡа** ҡаршы – **яҡшылыҡ.**
**Дарыу** ҡаршы тора **ағыуға,**
**Тоғролоҡҡа** ҡаршы – **хыянат,**
**Йүнһеҙ** әйләнә алмай **арыуға,**
**Яҡшатыңды** керләй **яманат.**
**Батыр** тиңдәш түгел **ҡурҡаҡҡа,**
**Юха** телде һөймәҫ **тура** һүҙ.
Кем **сабанды*** тиңләр **юртаҡҡа,**
**Яғымлынан** хәтәр **яман** күҙ.

---

* Сабан – ялҡау тәбиғәтле яй йөрөгән ат.

Был донъяны ҡап уртаға бүлеп,
Елә заман осҡор толпарҙа,
Яҡшы ниәт менән атлан уға
Ҡулдарыңда ғәйрәт, көс барҙа.

*(В. Әхмәҙиев)*

● 1. Шиғырға исем бирегеҙ.

2. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән икәнен әйтегеҙ.

**172.** Өҙөктәрҙе ҡысҡырып, тасуири уҡығыҙ. Нимә тураһында һүҙ барғанын һөйләгеҙ. Класығыҙҙағы дуҫлыҡты шиғырҙағы уйҙар менән сағыштырығыҙ, һуңынан ыңғай һәм кире сифаттарҙы сағылдырған ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе табып, уларҙы ишләп яҙығыҙ. Шиғырға исем бирегеҙ.

1. Дуҫ тигәнең тыштан матур, эстән насар
булмаһын,
Донъяһы тар булһа булһын, күкрәге тар
булмаһын.
Бар көнөңдә дуҫ булып, тарлыҡта ташламаһын...

2. Ахмаҡ дуҫтан аҡыллы дошман артыҡ –
Ахмаҡ дуҫтан һәр әҙәм яфа татыр...
Аҡылыңды өскә бүл: берен һөйлә,
Икеһе эстә торһон – уға теймә.
Алды-артыңды байҡамай һүҙең һөйләп,
Вайымлашып, аҙағында һин үкенмә.

Аҡыллының кәңәше эстә торор,
Аҡылһыҙҙың үҙ һүҙе үҙен ҡоротор.
Үҙендә теүәл аҡыл булһа ла, ир,
Кәңәш итеп, һәр кемдән аҡыл һорар.

*(Аҡмулла)*

► Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр **антонимдар** була: *тәрән – һай, насарлыҡ – яҡшылыҡ, тәүге – һуңғы, уң – һул, арғы – бирге.*

**173.** Предметты, эш-хәлде, ваҡытты, төҫтө белдергән ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙығыҙ.

Алыу – биреү, көндөҙөн – кисен, ҡара – аҡ, иртә – кис, асыҡ – тоноҡ, яҡты – ҡараңғы, баш (йылға башы) – тамаҡ, ҙур – бәләкәй, дуҫ – дошман, егеү – туғарыу, йомарлау – тағатыу, тегеү – һүтеү, ап-аҡ – ҡап-ҡара, илтеү – килтереү, йомарт – һаран, йөҙ түбән – салҡан, ҡайғы – шатлыҡ, көйөнөс – һөйөнөс, йәшлек – ҡартлыҡ, оло – кесе.

**174.** Түбәндәге антоним һүҙҙәрҙең һәр береһенә синонимдар һайлап яҙығыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатып, тәүҙә һүҙбәйләнештәр, аҙаҡ һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Хаҡлыҡ – ялған, тәрән – һай, тырыш – ялҡау, ҡараңғы – яҡты, ҡайғылы – шатлыҡлы, йыуаш – уҫал, йыш – һирәк, йыуан – нәҙек, бойоҡ – шат, берлек – тарҡаулыҡ.

**175.** Бирелгән миҫалдарҙа нөктәләр урынына антонимдар ҡуйып, һөйләмдәргә күсереп яҙығыҙ.

1. Ялҡау аҙ эшләй. Аҙ эшләһә лә, ... тешләй.
2. Мартта йылы булһа, яҙ ... елле була.
3. Дуҫ күп булһа ла – ..., дошман бер булһа ла – күп.
4. Яҙын – аҙыҡһыҙ, ... кейемһеҙ юлға сыҡма.
5. Ялҡаулыҡтан ауырырһың, ... һауығырһың.

**176.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең антонимдарын табып яҙығыҙ. Уның өсөн М. Әхтәмовтың «Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге»н файҙаланығыҙ. Үҙегеҙ өҫтәп яҙған тәүге өс һүҙҙе индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ. Ул һүҙҙәрҙең һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килгәнен әйтегеҙ.

1. Аҡыллы – ..., аһ-зар – ..., батыр – ..., изгелек – ..., изге – ..., йомарт – ..., йыуаш – ..., кешелекле – ... . 2. Аҙайыу – ..., аҙсылыҡ – ...,

бейек – ..., бәләкәй – ..., алыҫ – ... . 3. Иртә – ..., иртән – ..., иртәнге – ..., иртәнсәк – ..., йәй – ..., йәйге – ... , йәйен – ... , йәйләү – ..., көҙ – ..., көҙөн – ..., көҙгө – ..., көн – ..., көндөҙ – ..., көнөн – ... .

**177.** Бирелгән һүҙҙәргә синонимдар һәм антонимдар яҙыуҙы дауам итегеҙ.

| *Бирелгән һүҙ* | *Синонимдар* | *Антонимдар* |
|---|---|---|
| артыу | күбәйеү, өҫтәлеү, ишәйеү, күмәгәйеү | кәмеү, әҙәйеү, һирәгәйеү, бүҫкәреү |
| атаҡлы матур | ... | ... |

**178.** Мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе ҡысҡырып уҡығыҙ, уларҙың мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, аңлатып бирегеҙ. Һуңынан антонимдарҙы күрһәтегеҙ, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен әйтегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең синонимдарын табығыҙ.

1. Яҡшы кеше йөрөгән ерен маҡтап йөрөр, яман кеше йөрөгән ерен үртәп йөрөр; яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ – һәр кешенең эшелер, яманлыҡҡа яҡшылыҡ – ир кешенең эшелер.

2. Азамат ирҙең билдәһе – аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар; бер олоноҡон, бер кесенекен тыңла; бауҙың оҙоно, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы; ҡаты һүҙҙән тал һына, йомшаҡ һүҙҙән таш ирей.

3. Дөйәләй алтының булғансы, төймәләй аҡылың булһын; **йәш** саҡта уҡыу – ташҡа яҙыу, ҡартайғас уҡыу – боҙға яҙыу;

4. **Алыҫтағы** дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман; дошмандан илең һаҡла, дуҫыңдан серең һаҡла; дуҫ илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.

**179.** А. Костиндың «Ҡыш» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Ҡышҡы көндөң ниндәй мәле һүрәтләнгән? Көн ниндәй? Ҡышҡы урман, шыршылар, ағастар, өйҙәр нисек һүрәтләнгән? Ә ҡар ниндәй? Ҡышҡы урманда булғанығыҙ бармы? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

## «Лексика» бүлеге буйынса белемегеҙҙе тикшерегеҙ (тест)

**1.** Күп мәғәнәле һүҙҙе билдәләгеҙ.

1) китап 2) бит 3) ҡояш

**2.** Антонимдар булған рәтте билдәләгеҙ.

1) Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.
2) Сафлыҡ, паклыҡ менән үтһен беҙҙең һәр көнөбөҙ.

**3.** Тура мәғәнәле һүҙбәйләнешле рәтте билдәләгеҙ.

1) Ҡорос ҡанат бирҙе Ватан,
Ир ҡанаты хәҙер ат түгел. *(Ҡ. Даян)*
2) Ҡаҙ ҡанаты ҡат-ҡат була,
Ир ҡанаты ат була. *(Халыҡ йыры)*
3) «Тормош юлынан атлағанда, ҡанаттарығыҙ ҡайырылмаһын, талмаһын», – тине уҡытыусы.

**4.** Күсмә мәғәнәле һүҙҙәр булған рәтте табығыҙ.

1) алтын аҡса, алтын балдаҡ, алтын миҙал
2) алтын ҡул, алтын аҡыл, алтын күҙ
3) таш юл, таш өй, таш балта

**5.** Башҡорт телендәге бөтә һүҙҙәр йыйылмаһы нисек атала?

1) фонетика 2) графика 3) лексика

# ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯ. ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ

## § 28. Тамыр һәм ялғауҙар

**180.** Яһалма һүҙҙәрҙе – бер бағанаға, ялғау ҡабул итеп тә мәғәнәһен үҙгәртмәгән һүҙҙәрҙе икенсе бағанаға теҙеп яҙығыҙ. Яһалма һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнә аңлатҡанын әйтегеҙ.

Күҙле, күҙ, күҙгә, күҙлек, күҙҙән, күҙһеҙ, күҙләш, күҙәмәгә, күҙәнәк, күҙҙе, күҙәтеүсе, күҙҙә, күҙәтеүсән, күҙкәй, күҙәтсе, күҙләү; ике, икеләнеү, икенсе, икеләтә, икәү, икешәр, икелек; ирек, ирекле, ирекка, иректе, ireклек, иркен, иркенлек, ирекән, иркенләү, иркенлектән; эшлекһеҙ, эшлекленең, эштән, эшсе, эшсән, эштең, эшкә, эшсәнлек, эшһеҙлек, эшһеҙлеккә, эшем, эшең.

● 1. *Ирекле, иркенләү, күҙлек, күҙәтеүсән, эшсән* һүҙҙәрен индереп, һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. Уларҙың бер нисәһен таҡтаға яҙып тикшерегеҙ.

2. Башланғыс кластарҙа һүҙҙең тамыры, ялғауҙары тураһында алған белемегеҙҙе иҫкә төшөрөп, һығымта яһағыҙ.

► Һүҙҙең тулы мәғәнә аңлатыусы бүленмәй торған иң бәләкәй өлөшөн **тамыр** тип йөрөтәләр: *күҙ, ел, кил, ал.*

Тамырға ҡушылып, яңы мәғәнәле башҡа бер һүҙ яһаусы йә уның формаһын ғына үҙгәрткән өлөшөн **ялғау** тип атайҙар: *-лыҡ/-лек, -лы/-ле, -ла/-лә, -ҙы/-ҙе, -ты/-те, -ға/-гә, -ҡай/-кәй, -саҡ/ -сәк, -ыу/-еү, -раҡ/-рәк* һ. б.

► Ялғауҙар үҙҙәре айырым ғына ҡулланылмай, мәғәнә лә аңлатмай.

**181.** Тексты уҡығыҙ, һуңынан һөйләгеҙ. Һүрәтләмәгә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ. Төп фекерен әйтегеҙ, һүрәтләмәне йөкмәткеһе буйынса өлөштәргә бүлеп, һәр өлөшкә исем бирегеҙ. Һуңынан яһалма һүҙҙәрҙе табып, уларҙың тамырҙарын айырып күрһәтегеҙ.

ТЕМӘС

Темәс – Башҡортостандың ҙур ауылдарының береһе. Исемен ул 1735–1740, 1755 йылдарҙағы башҡорт яуҙарында ҡатнашҡан Темәс Илекәйевтән алған. Французларға ҡаршы 1812 йылғы Ватан һуғышында ауылдан Исмәғил Иҫәнғолов, Ирназар Иҡбаҡтин, Юныс Рахманғолов, Исламбай Мәһәҙиев, Алыта Мамалиндар Парижға барып еткән һәм икешәр миҙал менән ҡайтҡан.

Шырҙы һәм Талашты йылғаларының Һаҡмарға ҡойған ерендә, тәбиғәттең һоҡланғыс төбәгендә ултырған ауылдың эргәһенән генә урмандар башлана. Шул тәбиғәт борон-борондан халҡының кәсеп-һөнәрен билдәләгән. Унда малсылыҡ, урмансылыҡ, һал ағыҙыу, һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ, игенселек менән шөғөлләнгәндәр, тире иләү, кирбес һуғыу заводтары, мастерскойҙар, бер нисә тирмән булған. XX быуат башында ауылда 2 мең самаһы кеше йәшәгән. 1874 йылда асылған өс класлы рус-башҡорт мәктәбе булған.

Октябрь революцияһынан һуңғы ваҡиғалар Темәстең тормошона яңылыҡтар өҫтәй. 1919 йылдың 21 февралендә Башҡортостан республикаһы төҙөлә. Темәс республикабыҙҙың баш ҡалаһына әйләнә. Ул – тәүге баш ҡалабыҙ. *(Д. Мәһәҙиев)*

● Һуңғы ике һөйләмде һөйләм киҫәктәре яғынан анализлағыҙ.

**182.** Тексты уҡығыҙ, уның йөкмәткеһе буйынса фекер алышығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын, ялғауҙарын күрһәтегеҙ. Ялғауҙарҙың төрҙәре тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ, үҙегеҙ ҡағыҙә сығарығыҙ.

## ТАУҘАН ҠАЙТҠАНДА

*(Йылайыр районы Мәҡсүт ауылындағы осрашыуҙан)*

Беҙ бер төркөм балалар менән ауыл эргәһендәге тау башына мендек. Тау башынан байтаҡ ерҙәге түбәләр, аралыҡтар, ҡаялар күренә. Уларҙың һәр береһенең исеме генә түгел, легендаһы йә тарихы бар. Балалар берен-бере төҙәтә-төҙәтә һөйләп тә бирҙеләр. Быуаттар төпкөлөнән килгән был хикәйәләрҙә ғәҙеллеккә, батырлыҡҡа, азатлыҡҡа күпме маҡтау йырлана.

Тау итәгенән төшкәс, балалар йүгерә-атлай сәскә йыйырға тотондолар. Сәскәле ялан буйлап беҙ зыярат эргәһенә килеп еттек. Ҡапыл балалар төрлөһө төрлө ерҙән зыярат кәртәһенә үрмәләргә тотондо. Мин шунда ғына баяғы сәскәләрҙең кемдәр өсөн өҙөлөүен аңланым. Был кәртә аръяғында күбеһенең олаталары һәм өләсәләре ята. Улар эргәһенән балалар ғәмһеҙ генә үтеп китә алманылар. Тимәк, шулай өйрәтелгән улар. *(М. Кәримдән)*

**183.** 1. Уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын һәм ялғауҙарын күрһәтегеҙ. Өлгө буйынса тамыр аҫтына бер, яһалма һүҙҙәрҙең аҫтына ике, үҙгәртеүсе ялғау аҫтына тулҡынлы һыҙыҡ һыҙығыҙ. Яһалма һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. 2. Хикәйәләүҙе тағы ла бер тапҡыр иғтибар менән уҡығыҙ; үҙ һүҙегеҙ менән һөйләгеҙ.

Өлгө: *кил-әсәк-тә, әҙ-лә-п.*

Ер йөҙөндә күпме генә әсә булмаһын, һәр кешегә үҙ әсәһе һәйбәт һәм матур тойола. Шулай булырға тейеш тә инде.

Әсәй! Минең **ҡәҙерле әсәкәйем**! Һиңә ниндәй генә матур, иркә, йылы һүҙҙәр әйтһәм дә, аҙ булыр – улар **йөрәгемдәге** иң-иң нескә **тойғоларымды** асып еткерә алмаҫ кеүек. Әсәкәйем! Бергенәм! Күк йөҙөндәге яҡты ҡояшҡа тиңләйем һине. Мең-мең рәхмәттәр уҡыйым.

Ауыр ваҡыттарҙа **таяныс** эҙләп тә, урғылып торған **шатлыҡтарымды уртаҡлашырға** ла һиңә йүгереп киләм, иң яҡын кешем һин, әсәй. Һәр ваҡыт мине **аңлайһың**, дөрөҫ юл өйрәтәһең.

Әлбиттә, һине рәнйеткән саҡтарым да булғандыр. Бөтәһе өсөн дә ғәфү ит, әсәйем. **Киләсәктә** һинең йөҙөңә бер ваҡытта ла **ҡыҙыллыҡ** килтермәм! *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

● Һүҙҙең тамыры тип уның ниндәй өлөшөнә әйтәләр? Аңлатығыҙ. Ялғауға аңлатма бирегеҙ. Миҫалға бер нисә тамыр һүҙ һәм шул тамырҙарға ҡушылырҙай ялғауҙар килтерегеҙ, уларҙы тамырҙарға ялғап әйтегеҙ.

**184.** Һүҙҙәрҙә тамыр һүҙҙе һәм яһаусы ялғауҙарҙы күрһәтегеҙ. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе төркөмләп күсерегеҙ, уларға тағы ниндәй тамырҙаш һүҙҙәр өҫтәй алаһығыҙ?

Бәйләм, ик, йөрөмтәл, күсергес, бәйләүсе, күр, иген, күркәм, күрше, күсемле, йөрөмлө, игенсе, күренеш, күсермә, бәйләнеш, игенселек, күркәмлек, йөрөмһәк, ташҡын, упҡын, ҡапҡан.

Ө л г ө: ***бәй**лә, **бәй**ләм, **бәй**ләүсе, **бәй**ләнеш, **бәй**ләнешле, **бәй**ләнсек* һ. б.

**185.** 1. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Уның төп фекерен, темаһын билдәләгеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырҙарын һәм ялғауҙарын айырым-айырым әйтеп бирегеҙ.

БӘПЕМБӘ БАЛАЛАРЫ

Борон-борон заманда урман буйында **йәшәгән**, ти, бер бәпембә. Уның бер нисә улы һәм ҡыҙы булған. Бәләкәй бәпембәләр эргә-тирәләге ағастарҙан, **үләндәрҙән** башҡа донъяны **белмәгәндәр**. Ағастар кеүек бейек **булғылары**, бөтә донъяны күргеләре килгән.

– Тик ағастарҙан да бейек **күтәрелмәгеҙ**, ел һеҙҙе **осортоп** алып китер, – тип киҫәткән, ти, уларҙы әсәләре.

Бәпембә балалары ағастарҙан да **юғарыға** күтәрелгәндәр ҙә ел ыңғайына төрлөһө төрлө яҡҡа осоп киткәндәр. Бер бәпембә малайы Ҡаф тауы артына сәйәхәт иткән, өсөнсөһө сәскәгә һыу ҡойған малайҙың сәстәренә **ултырған**. Шулай **таралышып** бөткәндәр. Ҡайһылары бәпембә **йәшәмәгән илдәргә** лә килеп сыҡҡан. Уларҙың күптәре тыуған **яҡтарына** юлды белмәйенсә, төшкән урындарында ҡалған. Ана шулай бәпембәләр бөтә ер йөҙөнә **таралғандар**, ти. *(Календарҙан)*

## § 29. Ялғауҙарҙың төрҙәре

★ 1. Мәҡәләне уҡығыҙ. Уның йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Төп фекерҙе әйтегеҙ. Һүрәтләнгән күренешкә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ. Үҙегеҙ ҙә стена газетаһына «Хуш, алтын көҙ!», «Алтын көҙ», «Уңыш байрамы», «Көҙ менән хушлашыу» кеүек тантаналар үткәреүегеҙ тураһында мәҡәлә яҙығыҙ.

2. Мәҡәләнән яһалма һүҙҙәрҙе, уларҙың яһаусы ялғауҙарын күрһәтегеҙ; исемдәрҙең – килеш, эйәлек заты, ҡылымдарҙың зат ялғауҙарын табығыҙ, × билдәһе ҡуйылған һүҙҙәрҙе эйәртеүсе һүҙ итеп, һүҙбәйләнештәр яһап яҙығыҙ.

ТЕЛДЕҢ КҮРКЕ НИҘӘ?..

Беҙҙең мәктәп уҡыусылары «Тел күрке» түңәрәгенә йөрөйҙәр. Унда һүрәт төшөрәләр, тәбиғәткә

экскурсияға сығалар. Уҡытыусылары Венера Булатовна тәбиғәттәге матурлыҡты күрергә өйрәтә. Шул гүзәллекте уҡыусылар тел байлығы ярҙамында шиғыр юлдарына күсерәләр, төрлө буяуҙар менән һүрәткә төшөрәләр.

Хәҙер уҡыусылар «ҡар яуа» тип кенә әйтмәй, ә «күбәләк кеүек, әкрен генә осоп, ҡар бөртөктәре ергә төшә» тип, төрлө сағыштырыуҙар аша бирергә тырышалар. Шул рәүешле телдең күрке ниҙә икәнен аңлай балалар.

Уйлап ҡараһаң, көҙгө лә алтын менән юҡҡа сағыштырмайҙар бит. Хикмәт япраҡтарҙың һары төҫкә инеүендә генә түгел. Көҙ – байлыҡ, муллыҡ, уңыш мәле. Шуға ла халҡым уны алтынға тиңләгән. *(«Йәншишмә» гәзитәһенән)*

● Исемдәрҙең килеш, эйәлек заты ялғауҙарының ҡылымдарҙың зат ялғауҙары яһаусы ялғауҙарҙан ни яғы менән айырылғанын әйтегеҙ.

► Тамырға ҡушылып, унан яңы һүҙ яһаған һәм һүҙгә мәғәнә биҙәге өҫтәгән ялғауҙарҙы **яһаусы ялғауҙар** тип йөрөтәләр: *-сы/ -се, -ла/ -лә, -таш/ /-тәш, -ҡыс/ -кес, -келт/ -ҡылт, -кер/ -кәр, -ҡы/ -ке* һ. б. Мәҫәлән: *малсы, йылҡысы, эшлә, серҙәш, йәйге, ҡышҡы, хеҙмәткәр, еткер, йәшкелт, ҡырҡҡыс, элгес* һ. б.

Һөйләмдә бер һүҙҙе икенсеһенә бәйләп килгән ялғауҙар (*-тың/ -тең, -ға/ -гә, -ым / -ем, -м, -быҙ/ -беҙ* һ. б.) **үҙгәртеүсе ялғауҙар** була.

Үҙгәртеүсе ялғауҙарға килеш *(аттың)*, эйәлек *(атым)*, күплек *(балалар)*, зат *(барам)* ялғауҙары ҡарай.

**186.** Хикәйәне уҡып, төп фекерен әйтегеҙ, ул фекерҙе ҡайһы һүҙҙәр сағылдырғанын күрһәтегеҙ. Хикәйәгә ниндәй исем ҡуйырһығыҙ? Билдәләнгән һүҙҙәрҙә яһаусы һәм үҙгәр-

теүсе ялғауҙарҙы билдәләгеҙ, уларҙың ниндәй ялғау икәнен аңлатығыҙ.

Бер ваҡыт мин, әле үҫмер сағымда, ҡояш **байып барғанда** Сағылтау башында **йөрөгәнемдә** саҡматаш **өйөмөнә** тап булдым. Кемдер мунса ташына тип йыйғандыр, күрәһең, уларҙы. Ни эшләптер, эйелеп, өйөмдәге бер йомро **ташты** алдым. Ул йып-йылы ине. Мин быға ғәжәпләндем. Икенселәрен дә **тотоп ҡараным**. Улары ла йылы ине. Ситтәрәк таралып ятҡан бер нисә ташты өйөмгә алып һалайым тип, ҡул һондом. Былар һап-һалҡын ине. Тимәк, күмәк булғанда таштар ҙа, ҡояштан алған йылыны үҙ-ара **бүлешеп**, оҙаҡ һыуынмайҙар икән. *(М. Кәрим буйынса)*

● Билдәләнгән һүҙҙән сығып һорау биреп, һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрен атап күрһәтегеҙ.

**187.** 5-се класс уҡыусыһы Айбулат Ғәлиев яҙған мәҡәләне уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы күрһәтегеҙ. Ҡайһы ялғауҙарҙың һүҙҙең мәғәнәһен һәм формаһын үҙгәртеүен, ҡайһыларының һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнешен булдырыу өсөн ҡулланылыуын әйтегеҙ.

Ҡапҡанан шаулашып инеп килгән балаларҙы күргәс, Нәфисә инәй йәһәтләп ҡаршы сыҡты:

– Эй, тағы ла килдегеҙме ни, **балаҡайҙарым**! Рәхмәт инде, ҡарт кешене онотмағас!

Бер нисә минут эсендә ҡыҙыу эш башланды. Малайҙар йәйҙән ярып өйөлгән утындарҙы өйгә индерҙеләр. Ҡыҙҙар, ни арала өлгөрөп, һыу килтерҙеләр. Етмәһә, соланды матурлап һеперен ташланылар. Ул эштәрҙә бигерәк тә Рәзилә Мусина, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Нәсимә Сәмиғуллина, Шәмсиүәрә Мәсәғүтова, Илдар Мәсәғүтов, Йәмил

Заһитов, Байрас Таһиров һәм Айсыуаҡ Юлаевтар **уңғанлыҡтарын** күрһәттеләр.

Беҙҙең класс аҙна һайын ололарға шулай ярҙам итә.

● Тимурсылар тип кемдәргә әйтәләр? *Тимурсылар* һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан? Өлкәндәргә нисек ярҙам итеүегеҙ тураһында «Беҙ – тимурсылар» тигән темаға газетаға мәҡәлә яҙығыҙ.

ТҮ

## § 30. Тамыр һәм яһалма һүҙ

★ Түбәндәге һүҙҙәрҙең яһаусы ялғауҙарын күрһәтегеҙ. Һәр ялғауҙы һыҙыҡсалар менән айырып яҙығыҙ. Һәр яһалма һүҙҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

1. Күҙ. Күҙле, күҙлек, күҙһеҙ, күҙәт, күҙәтеү, күҙәтеүсән, күҙәтеүсе, күҙәтеүсәнлек, күҙләү, күҙәнәк, күҙһенеү, күҙәтселек, күҙлекле, күҙәнәкле, күҙәнәкһеҙ, күҙләштереү, күҙләшеү.
2. Ел. Еләҫ, елле, елбер, елкән, елкенеү, елпеүес, елбәҙәк, елһеҙ, еллек, елгәргес, елбәгәй, елкенеү, елтерәү, елһенеү, елберләү, елләү, елеү, елгәр.
3. Ҡап. Ҡабыу, ҡапҡан, ҡаптырма, ҡапсыҡ, ҡаптырмалы, ҡаптырғыс, ҡабым, ҡапҡа, ҡабыҡ, ҡапҡас, ҡабырсаҡ.

● *Еләҫ, күҙәнәк, күҙләштереү, елбәҙәк, ҡапҡа, ҡапҡас* һүҙҙәре менән тәүҙә һүҙбәйләнештәр, аҙаҡ һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| *-лоҡ* | *-лөк* |
| *-лыҡ* | *-лек* |
| *-сан* | *-сән* |
| *-со* | *-сө* |
| *-сы* | *-се* |

**188.** Бер үк тамырҙан яһалған һүҙҙәрҙе төркөмләп яҙығыҙ, улар нисек атала? Үҙегеҙ ҡағиҙә сығарығыҙ.

Көндөҙ, тын, көн, сүп, тынлыҡ, ҡабартма, сүпләү, көнлөк, тыныс, ҡабарынҡы, сүплек, көнлөксө[1], көндөҙгө, ҡабар, тынғы, тынғыһыҙ[2], ҡабартҡыс, сүпләнеү, көндәлек, ҡабарыныу, сүпле, көндәгесә, тынысланыу, ҡабарыныусан, сүплә, сүбек.

| | |
|---|---|
| *-ғос* | *-гөс* |
| *-ғыс* | *-гес* |
| *-ҡос* | *-көс* |
| *-ҡыс* | *-кес* |
| *-тыр* | *-тер* |
| *-ло* | *-лө* |
| *-лы* | *-ле* |

**189.** 1. Һүҙҙәрҙе тикшерегеҙ, яһалма һүҙҙәрҙә тамыр һүҙ, яһаусы ялғауҙарҙың аҫтарына һыҙығыҙ; яһалма һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. 2. Тамырҙаш булмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ. 3. Тәүге өс төркөмдәге һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙә эйәреүсе, эйәртеүсе һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ.

1. Һыныу, һыныҡ, һыныусан, һынлы, һынау, һынһыҙ, һыныҡлы, һындырыу, һынсыл.

2. Табыш, табаҡ, табан, табылдыҡ, табышлы, тапмаҡ, табышһыҙ, табындаш.

3. Борғос, бороу, боролош, боролмалы, боролмала, борос, борсаҡ, бормалы, борғоса.

4. Йыу, йыуғыс, йыуынты, йыуынды, йыуаныс, йыуыу, йыуылмаҫлыҡ, йыуаш, йыуатыу.

5. Бел, белем, белгес, белдекле, беләк, белеү, беләү, белемһеҙ, белеш, белмәмеш, белекһеҙ, белекһеҙлек, беләҙек.

► Бер тамырҙан яһалған һүҙҙәр **тамырҙаш һүҙҙәр** була: *телсе, телләшеү, телһеҙ, телсән, телсәр.*

Тамыр һүҙгә яһаусы ялғау ҡушылып яһалған һүҙҙе **яһалма һүҙ** тип атайҙар: *күҙлек, күҙәнәк; еләҫ, елкән, елпеүес*.

► Тамыр һүҙгә яһаусы ялғау ҡушылып яһалған һүҙ **нигеҙ һүҙ** була: *белемленең* тигән һүҙҙә *бел* – тамыр һүҙ, ә *бел* + *ем* + *ле* – нигеҙ һүҙ, *-нең* – үҙгәртеүсе ялғау.

**190.** 1. Бирелгән һүҙҙәр араһынан тамырҙаш булмағандарын табығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Уларҙы файҙаланып, һөйләмдәр яҙығыҙ.

1. Һан, һандыҡ, һана, һанһыҙ; осло, ос, осла, осҡон, осһоҙ (арзан); һөҙгөс, һөҙмә, һөҙгәк; яҙма, яҙыу, яҙмаса, яҙғы; ерле, ерһеҙ, ерән, ерләшеү, ерек, ерһеҙлек, ерлек; май, майлы, майлау, май (ай исеме), майһыҙ.

2. Әкиәтте уҡығыҙ. Төп фекерҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

ЕЛЛЕ ЕЛ

Борон-борон заманда булған, ти, бер Ел. Ул ҡайҙа барып һуғылырға белмәйенсә йөрөгән, ти, унда-бында сабып. Кешеләрҙең әле береһенә, әле икенсеһенә ҡағылып, уларҙы тамам аптыратып бөтөргән, ти.

Шунан уны бер аҡыллы ҡарт тотоп алды ла: «Был Ел, елгә елеп, әрәм булып йөрөмәһен әле», – тип бер орлоҡҡа әүерелдерҙе лә ташланы, ти, тегене. «Исмаһам, – тип уйланы, ти, аҡыллы ҡарт, – һинән берәй файҙалы нәмә үҫеп сыҡһын».

Берҙән-бер көндө был Ел-орлоҡ шытып сыға башланы, ти. Күп тә тормай, ул, тармаҡ-тармаҡ булып, бер ағас шикелле үҫеп китте, ти. Һәр тармағы һайын бер һүҙ икән быбың. Кешеләр, ғәжәпләнеп, һәр һүҙҙе тотоп-тотоп ҡарайҙар икән, ә бөтә һүҙҙәр ҙә бер үк тамырҙан үҫеп сыҡҡандар, ти.

Шунан алып кешеләр, **мәғәнәләре яғынан бер-береһенә яҡын һүҙҙәрҙең бөтәһе өсөн дә уртаҡ**

**өлөшөн тамыр, ә былдай һүҙҙәрҙе тамырҙаш һүҙҙәр тип йөрөтә башлағандар,** ти. *(Әкиәттән)*

► Һүҙ төҙөлөшөнөң дөйөм ҡалыбы башҡорт телендә түбәндәгесә була:

| | | |
|---|---|---|
| *юлсыға* | | |
| *юл* | *-сы* | *-ға* |
| тамыр | яһаусы ялғау | үҙгәртеүсе ялғау |

**191.** Ҡобайырҙы тасуири уҡығыҙ, уның төп темаһын һәм фекерен билдәләгеҙ. Төп фекерҙе ҡайһы һүҙҙәр сағылдырғанын әйтегеҙ. Уралды матур итеп тасуирлаған сифаттарҙы, сағыштырыуҙарҙы табығыҙ. Артабан яһалма һүҙҙәрҙе табып күсерегеҙ, уларҙың тамырын, нигеҙен, үҙгәртеүсе ялғауҙарын билдәләп сығығыҙ.

Шыр урманда маһайып,
Лап-лоп баҫыр айыулы;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡара бауыр төлкөлө;
Кем уҙарҙан һайраған,
Сыр-сыу килгән ҡош-ҡортло;
Һарайҙағы хан һымаҡ,
Эре йәшәр бөркөтлө;
Алдынан ҡош уҙғармаҫ
Күк ҡарсыға, ҡыйғырлы;
Ҡарасай, өйрәк көлөшкән
Ҡамышлы күл, йылғалы;
Йырсы менән ярышып,
Моңон бөркәр ҡурайлы;
Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял,
Өйөр һаҡлар айғырлы –
Бына шундай Уралым.
Урал тигән илем бар,
Илем барҙа көнөм бар.

*(«Урал тигән илем бар» ҡобайыры)*

● Ҡобайырҙағы төрлө тасуирлау сараларын файҙаланып, Ту «Минең урмандарым, яландарым» исемле темаға инша яҙырға әҙерләнегеҙ.

**192.** Схемалағы тамырҙарҙан тамырҙаш һүҙҙәр яҙығыҙ.

*таныш* *бүлек* *уйсан*

*таны* *бүл* *уй*

● Һеҙ тапҡан тамырҙаш һүҙҙәрҙең яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарын билдәләп сығығыҙ.

## § 31. Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы

★ «Ҡамыр батыр» әкиәтенең өҙөгөн иғтибар менән уҡығыҙ. Уның ни өсөн «Батыр егет – ил күрке» тип аталғанын әйтегеҙ. Исеменең йөкмәткеһенә тап килеүен күрһәтегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

БАТЫР ЕГЕТ – ИЛ КҮРКЕ

Ҡанескес ҡыҙ батша менән Ҡамыр батыр көрәшә башлағандар. Көрәш өс көн, өс төн барған. Дүртенсе көндө Ҡамыр батыр, **ҡыҙҙы билендән** ҡыҫып алып, баш осона күтәргән дә ергә атып бәргән. Ҡыҙ барып **төшкән** ер **уйылып** киткән. **Ҡыҙҙың** үлек кәүҙәһе ятҡан урында **тоҙло, ағыулы** һыулы тәрән күл **барлыҡҡа** килгән. Егеттең ике аяғы батҡан урындан ике йылға атылып сыҡҡан да, шаулап-гөрләп, **түбәнгә** ағып киткән.

**Йылғалар** йыуып үткән бар ер хәтфәләй йәшел **үләндәр, сәскәләр** менән ҡаплана барған. Ҡамыр батыр күпереп үҫкән үләндә йоҡоға талған. Сәскәләр уның ауыҙына балдай татлы тамсыларын тамыҙғандар. Зәңгәр **күбәләктәр, ҡанаттарын елпеп,**

еләҫ яһап, уның өҫтөндә елпенеп **оҫкандар**. Өс көндән һуң Ҡамыр батыр тағы ла шатыраҡ, тағы ла күркәмерәк булып йоҡоһонан уянған.

Бөтә урында халыҡ яуыз батшанан ҡотҡарған **батырҙарҙы хөрмәтләп**, ҙурлап, **юлдарына гөлдәр** һибеп оҙатып ҡалған.

- *Шатланыу, күркәмләнеү, батыр, ҙурлау, оҙатыу* һүҙҙәренең антонимдарын табып, ишләп яҙығыҙ.

**193.** Исемдәрҙе килеш, һан менән, ә ҡылымдарҙы зат менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Һуңынан ул ялғауҙарҙың ҡалынмы, нәҙекме икәнен аңлатығыҙ.

Бала, үлән, һарай, емеш, төлкө, ҡуян; кил, кит, ҡайт, өйрән.

Өлгө:

| | | Берлек | Күплек |
|---|---|---|---|
| Төп. к. *бала* | | | |
| Эй. к. *бала-ның* | 1-се з. *кил-әм* | | *кил-әбеҙ* |
| Төб. к. *бала-ға* | 2-се з. *кил-әһең* | | *кил-әһегеҙ* |
| Төш. к. *бала-ны* | 3-сө з. *кил-ә* | | *кил-әләр* |
| Ур.-в. к. *бала-ла* | | | |
| Сығ. к. *бала-нан* | | | |

- Тәүге биш һүҙ менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

**194.** 1. Хикәйәне уҡып, йөкмәткеһен һөйләп бирегеҙ. «Кешегә соҡор ҡаҙыма, үҙең төшөрһөң» тигән мәҡәлдең хикәйәгә булған мөнәсәбәтен төшөндөрөгөҙ. Хәбир менән Фәрихкә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы яҙығыҙ. Тормошоғоҙҙа уға оҡшаш хәл булһа, һөйләп бирегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

### ҺЫҢАР САҢҒЫ

Аҡлан тулы **малайҙар.** Улар **саңғыларының** ныҡлығын **тикшерәләр.** Хәбир ҙә саңғыларын ентекләп ҡарап сығыуға, ярыш **судьяһы** уларҙы стартҡа саҡырҙы. Малайҙар спорт **костюмдарын-**

**да, ҡоштар** һымаҡ талпынып, стартҡа ыңғайланылар.

**Судьяның** ҡыҙыл флагы саңғысыларҙы тигеҙ рәткә теҙҙе. Ул секундомерлы ҡулын алға һуҙҙы, флаг юғары күтәрелде. **Фәрихтең** саңғы ҡайышын Хәбир телеп ҡуйған, сөнки Хәбир нисек тә унан алда килергә уйлай.

Судьяның **командаһы** булыу менән, **саңғысылар** алға ынтылды. Яртылыҡ юлды үткәс, **Фәрихтән** саҡ ҡына ҡалышып килгән Хәбир тиҙлеген арттыра төштө. Фәрих тә елдерә. Хәбир, бөтә көсөнә ынтылып, **класташын** үтәйем генә тигәйне, ул үҙ саңғыһына үҙе эләгеп йығылды, саңғының береһе һынып та китте.

Шул саҡ Фәрих үҙенең һыңар саңғыһын **Хәбиргә** бирҙе. Хәбир беренселекте алды. Ә Фәрих **майҙанға** ҡайышы өҙөлмәй ҡалған саңғыһын тотоп килеп етте. *(Д. Бүләковтан)*

► Төп башҡорт һүҙҙәрендә ялғауҙарҙың ҡалынлығы һәм нәҙеклеге һүҙҙең нигеҙенә ҡарап йөрөй: нигеҙе ҡалын һүҙгә ҡалын ялғау ҡушыла: *ҡая – ҡаяны, һарыҡ – һарыҡҡа, тоҙ – тоҙҙоң, ҡар – ҡарҙа, таш – таштан;* нигеҙе нәҙек һүҙгә нәҙек ялғау ҡушыла: *өй – өйгә, бәйге – бәйгене, беренсе – беренселәр, төлкө – төлкөнөкө.*

Һүҙ **-ль, -нь, -фь** хәрефтәренә тамамланһа һәм бер рәттән килгән ике тартынҡының һуңғыһы йомшаҡ булһа, ул һүҙҙәргә нәҙек ялғау ҡушыла: *фестива**ль** – фестивалгә, ию**нь** – июндә, приста**нь** – пристанде, не**фть** – нефттән, вер**фь** – верфте.*

Аҙағы **-рь, -сь, -чь, -шь** хәрефтәренән торған һүҙҙәргә ҡалын ялғау ҡушыла: *ту**шь** – туш**ҡа**, гуа**шь** – гуаш**тың**, секрета**рь** – секретар**ға**, лаге**рь** – лагер**ҙан**.*

► Ялғау ҡушылғанда һүҙ аҙағындағы **-ь** билдәһе һәр ваҡыт төшөп ҡала: *июнь – июнгә.*

**-сть** хәрефтәренә бөткән һүҙҙәр ҡалын ялғау ҡабул итәләр, ә һуңғы **-ть** хәрефтәре төшөп ҡала: *вла**сть** – власҡа, пове**сть** – повестың, ча**сть** – часҡа.*

Һуҙынҡы, ҡаты тартынҡы йәки **-и** менән тамамланған рус һәм башҡа сит тел һүҙҙәренә ҡалын ялғау ҡушыла: *лупа – лупаны, какао – какаоға, жюри – жюриға, такси – таксиҙа, ателье – ательенан, приз – призды, люкс – люксҭа, кафе – кафеға, фильм – фильмды, асфальт – асфальтта* һ. б.

Фамилиялар **-ев, -ин** хәрефтәренә бөткәндә нәҙек нигеҙле һүҙгә – нәҙек, ҡалын нигеҙле һүҙгә ҡалын ялғау ҡушыла: *Исмәғилев**те**, Ғәлин**гә**; Байышев**тан**, Мостафин**дың**, Сафин**дың**.*

**195.** Тексты уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ. Уны йөкмәткеһе яғынан өс өлөшкә бүлегеҙ. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр яҙып, күсерегеҙ.

Маһинурҙы 1942 йылдың октябрендә 766-сы авиация полк..на ебәрҙеләр. Һуғыштың аҙағынаса Маһинур һәм уның әхирәттәре параш..т төрөүсе булып оҙон юл үттеләр.

Еңел түгел параш..т төрөүсенең хеҙмәте. Бик яуаплы ла. Десантсының хәрби задани..ны уңышлы үтәүе параш..т төрөүсенең үҙ эшен с..фатлы башҡарыуына ла бәйле. Һәр хәрби самол..т экипажын, изге теләктәр теләй-теләй, сәфәргә оҙатты, л..тчикт..рҙың һәм параш..тсы һалдаттарҙың ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтөп алды.

Маһинурҙың һуғыш юлдары Воронеждан башланды. Смоленск, Курск һәм башҡа бик күп ҡа-

лаларҙы азат итеүҙә, Белоруссия, Балтик буйы ерҙәренән фашист..рҙы ҡыуыуҙа ҡатнашты.

Маһинур апай хәҙер ялда. Әммә Этҡол мәктәбе колл..ктивы ла, ауылдаштары ла, 766-сы авиация полкы яугирҙары ла уны онотмай. *(«Башҡортостан ҡыҙы»нан)*

● 1. *Парашют, экипаж, яугир* һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

2. *Ғәли, Ғәфур, Хәким, Хәйрулла, Харис, Фәрит* исемдәренән фамилиялар яһағыҙ, артабан уларға эйәлек ялғауҙарын ҡуйып яҙығыҙ.

**196.** Уҡығыҙ. Төп фекерҙе асыҡлағыҙ. Ул хәбәргә үҙ ҡарашығыҙҙы яҙығыҙ. Мәктәптә ул йүнәлештә нимәләр эшләнгәнен һөйләгеҙ. Ер-һыу атамаларының дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ.

Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, күсерегеҙ.

МОРАҠ УҢҒАНДАРЫ

*адрес – адресҡа*
*ателье – ательеға*
*поезд – поезға*

*хозур*
*ихлас*
*тәьмин*
*ихтыяж*

Энәк, Наҡаҫ, Оло һәм Кесе Эйек буйҙарындағы ауылдарҙа йорттар бик күркәм. Ул яҡтың хозур тәбиғәтенә ҡуш булып тора улар. Таҡта менән көпләнгән өйҙәрҙә бу..уҙар йәйғ..р төҫтәре һымаҡ: кәрниздәре – зәңгәр, ҡыйыҡтары – ҡыҙыл, тәҙрәләре – аҡ, стеналары – йәшел. Тәҙрәләре бу..у менән генә түгел, семәрле б..ҙ..ктәре менән дә матур.

Тәҙрә ҡапҡастары, йөҙләктәр яһау ябай эш түгел. Был эшкә һәр кемдең оҫталы..ы етмәй. Мәктәптә шундай һ..нәргә өйрәнгән уҡыусылар ауыл халҡына үҙҙәренең хеҙмәттәрен тәҡдим итә. Был эште улар мәктәптәге хеҙмәт дәрестәрендә башҡаралар.

Уҡыусылар эшләгән әйберҙәрҙе кешеләр ихлас һатып алалар. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

● 1. *Һөнәр* һүҙенән тамырҙаш һүҙҙәр яһағыҙ. Һәр һүҙҙән һүҙбәйләнештәр яһап яҙығыҙ, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.

2. *Ҡапҡас, йөҙлөк, семәрле, кәрниз, хозур* һүҙҙәренең мәғәнәләрен һүҙлектәрҙән ҡарап аңлатығыҙ. Улар күп мәғәнәле һүҙ була аламы? Була алһалар, күрһәтегеҙ.

**197.** Һул яҡта бирелгән исемдәр менән уң яҡтағы ҡылымдарҙы ҡуйып, һүҙбәйләнеш яһағыҙ һәм яҙығыҙ. Ул исемдәрҙең һәм ҡылымдарҙың тамырҙарын билдәләгеҙ.

костюм, власть, секретарь, сәнәғәт, тәртип, тарих, тел, исем, подъезд

кейеү, күҙәтеү, яулау, яҙышыу, үҫеү, өйрәнеү, тикшерелеү, ҡушылыу, йыуыу

● Бөтә исемдәрҙе лә – һан, ә *власть, секретарь, подъезд* һүҙҙәрен килеш менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Яҙғанда исемдәрҙәге *-д, -ть, -ь* хәрефтәренең төшөп ҡалыуын күрһәтегеҙ.

**198.** Түбәндәге һүҙҙәргә тәүҙә күплек ялғауы ҡушып, унан уларҙы 1-се һәм 2-се зат формаларына ҡуйып яҙығыҙ, һуңынан уларҙан һүҙбәйләнештәр яһап, дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. Ялғауҙар ҡушылғас, һүҙҙәрҙең аҙағында торған ҡуш тартынҡыларҙың ниндәй үҙгәрештәр кисергәнен һөйләгеҙ.

Өлгө: *дискылар, лозунгылар, Омскиҙа, танкыбыҙ, танкығыҙ.*

Отпуск, диск, пропуск; лозунг, митинг; танк, банк; Омск, Минск, Октябрьский; артист, солист, текст, шрифт; чекист, ландшафт.

► Рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән **-ск, -нг, -нк, -мы** тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда ике араға, тамыр менән ялғау араһына, **-ы-** өҫтәлеп яҙыла: *прииск – прискы**ға**, прииск**ым**; киоск – киоск**ыға**, штамп – штамп**ының**; митинг – митинг**ынан**.*

► *Омск, Минск* кеүек **-ск** тартынҡыларына бөткән ҡала исемдәренә ялғау ҡушҡанда, **-и-** өҫтәп яҙыла: *Омскиҙан, Минскиға.*

**-сть, -ст, -фт, -зд** ҡуш тартынҡыларына бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушылғанда, **-ть, -т, -д** хәрефтәре төшөп ҡала: *артист – артисҡа, **власть** – власҡа, ландша**фт** – ландшафына, съе**зд** – съезға.*

*Кронштадт, Брест, Шмидт* кеүек яңғыҙлыҡ исемдәрҙә **-т** һаҡлана: *Шмидтты, Брестҡа, Кронштадттан.*

*Кросс, металл, ватт, грамм* кеүек бер иш ҡуш тартынҡыларға тамамланған һүҙҙәргә ялғау ҡушылғанда, береһе төшөп ҡала: *кросҡа, металды, грамдың, ватҡа.*

*Донбасс* кеүек бер иш ҡуш тартынҡыларға бөткән яңғыҙлыҡ исемдәрҙә ялғау алдынан икеһе лә һаҡлана: *Донбассҭа.*

**199.** Һөйләмдәрҙең һәр береһен иғтибар менән уҡығыҙ. Һүҙҙәрҙәге нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып һәм йәйәләрҙәге һорауҙарға ҡарап, һүҙҙәрҙең ялғауҙарын тултырып яҙығыҙ. Ялғауҙарҙы ҡушҡанда, кәрәк урында һүҙҙең аҙағын үҙгәртегеҙ.

1. Үрге Ҡыйғылағы яңы тракт..рҙы ҡабул итеп алыуға бағышланған тантаналы митинг.. (нимәне?) әле лә хәтерләй Нәҡиә. 2. Бер кил..гра.. бал йыйыу өсөн, бал ҡорттарына 150 меңгә ҡәҙәр осош яһап, биш милл..он сәскәгә ҡунырға кәрәк. Умартасы ошо ҡатмарлы, йәнле процесс.. (нимәгә?) идара итә белергә тейеш. 3. 1786 йыл полковник Н. Н. Аршеневский Башҡортостандан дүрт умарта бал ҡортон Усть-Каменогорск.. (ҡайҙа?) ат менән

алып килгән. 4. Исмәғил Әхмәтов ошо йылда иһә метиз промышленность.. (ҡайҙа?) эшкә өйрәнде. *(«Хеҙмәт юлы – хөрмәт юлы» китабынан)* 5. Мин.. (кемдең?) ҡайтыуыма сикһеҙ ҡы..анғандай, көләп-йылмайып ятҡан йәшел тал..ыҡлы Дим йылғаһы ла, Урал күрке – ҡайын урмандары ла, көҙгөләй түңәрәк томбойоҡло күл.. (нимәләр?) ҙә, сәскәле аҡландар ҙа – бөтәһе лә үҙҙәренә тартып торалар. *(Р. Ханнанов)*

● *Митинг, килограмм, съезд* һүҙҙәрен өсөнсө затҡа ҡуйығыҙ ҙа килештәр менән үҙгәртегеҙ. Мәҫәлән: 3-сө зат – митингыһы; төп.к. *митингыһы*, эй. к. *митингыһының*, төб.к. *митингыһына*, төш.к. *митингыһын*, ур.-в.к. *митингыһында*, сығ. к. *митингыһынан*.

| | |
|---|---|
| *такси –* | *таксиҙар, таксиҙа* |
| *меню –* | *менюҙар, менюҙы* |
| *Баҡы –* | *Баҡынан, Баҡының* |
| *Сочи –* | *Сочиҙан, Сочиҙа* |

**200.** Бирелгән һүҙҙәр менән башта һүҙбәйләнештәр, аҙаҡтан һәр һүҙбәйләнеш менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. Ул һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

Санаторий, профилакторий, лекторий.

ҡайҙа?

Өлгө: *Санаторийҙа дауалана. Атайым тирә-яғы ылыҫлы урман менән ҡапланған һәм минераль һыуҙарға бай булған санаторийҙа дауалана.*

**201.** «Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге»нән *-зд, -нк, -ст, -нг, -сть, -ск* ҡуш тартынҡыларына тамамланған һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ. Уларға ялғауҙар ҡушып яҙығыҙ, ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ. Шул һүҙҙәр менән биш һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

**202.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Ниндәй һүрәт күҙ алдына килде? Ул һүрәтте шиғыр йөкмәткеһенә бәйләп һөйләгеҙ. Шиғырҙы күсерегеҙ. Һәр һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табып, аҫтарына һыҙығыҙ.

ТАМСЫЛАР

Тамсылар, тыпылдап,
Түбәнән тамдылар,
Ҡояшта йымылдап,
Ынйылай яндылар.

Әйтерһең, тәңкәләр
Сылтырап һибелде.
Ваҡ боҙҙар тәгәрәп,
Йырлашып йүгерҙе.

Ҡояш та көн һайын
Йылыраҡ йылмайҙы.
Асылды тау яны,
Туғайҙы һыу алды.

*(Ғариф Ғүмәр)*

- Шиғырҙы өйҙә ятлап килегеҙ, дәрестә яттан яҙығыҙ, китап буйынса тикшерегеҙ.

**203.** Тексты уҡығыҙ. Уны мәғәнәүи өлөштәргә бүлегеҙ. Һәр бүлеккә исем бирегеҙ. Ул исемдәрҙе изложениеның планы итегеҙ ҙә, шул план буйынса изложение яҙығыҙ.

СУРХАРБАН БАЙРАМЫ

Байкал аръяғы далаларында эҫе ҡояш аҫтында кипкән үләндәрҙең әскелтем еҫе ҡыуан елдәр менән таралған осорҙа Бүрәтстанда халыҡ спорты байрамы – Сурхарбан үткәрелә. Ул байрам беҙҙәге һабантуйға тартым. Байрам үҙенең төрлө төҫтәге биҙәк-

тәре менән онотолмаçлыҡ картинаға әйләнә. Сурхарбан йәйәнән атыу ярышы тигәнде аңлата. Байрамдың тамыры боронғо замандарға барып тоташа.

Халыҡ араһында үҙҙәренең мөһабәт дәрәжәләре һәм сағыу милли кейемдәре менән аҡһаҡал ҡарттар айырылып тора. Ул кейем иркен асыҡ күк атластан тегелгән халаттан, ҡыҙыл яçы билбауҙан һәм суҡлы бүректән тора.

Бүрәт халыҡ музыка ҡоралдары оркестры тантаналы көй уйнай, байрамдың башланыуы тураһында белдерә. Өлкән йәштәге уҡсылар ярышты башлайҙар. Ярышыусылар дебеттән эшләнгән сәпкә аталар. Еңеүселәргә «Мәргән» тигән маҡтаулы исем бирәләр. Артабан батырҙар милли көрәште башлап ебәрәләр. Милли көрәш ирекле көрәште хәтерләтә. Байрамдағы ярышты ат сабыштырыу тамамлай. Абсолют еңеүсегә йола буйынса йәш ҡуй тәкәһе бирәләр.

Милли байрам фольклор фестивале менән тамамлана. Сурхарбан байрамы шикелле, ул да бик күңелле үтә. Ундай фестиваль дуçлыҡ биҙәгенә әйләнә: республикала бүрәттәрҙән башҡа ла бик күп милләт вәкилдәре йәшәй. *(Календарҙан)*

## § 32. Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары

★ Бирелгән һүҙҙәрҙе төҙөлөшө буйынса анализлағыҙ: уларҙың тамырын, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарын һыҙыҡсалар менән тарҡатып яҙып күрһәтегеҙ.

Өлгө: *тимер-се-ләр-ҙе.*

Тимерселәрҙе, белемлене, белекһеҙгә, йылҡысының, бүлмәнең, һөйөнөс, тараҡ, ҡырҡҡысты.

● *Тимерселәрҙе, һөйөнөс, ҡырҡҡысты* һүҙҙәре менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. Һөйләмдәрегеҙҙә ул һүҙҙәргә тағы ла ниндәй ялғауҙар ҡушылғанын әйтегеҙ.

► Тел белеменең һүҙ төҙөлөшөн һәм һүҙҙәрҙең яһалыу юлдарын өйрәнә торған бүлеге **һүҙьяһалыш** тип атала. Мәҫәлән, һүҙьяһалыш өсөн *белемлене* һүҙенең мәғәнәһе һәм грамматик билдәләре мөһим түгел, ә унның ниндәй өлөштәрҙән яһалыуы беренсе урында тора: 1) ҡоролошо яғынан ул тамыр *(бел-)* һәм ялғауҙарҙан *(-ем, -ле, -не)* тора; 2) сығышы яғынан яһалма һүҙ; 3) ҡылымға исем яһаусы *-ем* һәм сифат яһаусы *-ле* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән (морфологик юл) яһалған, *-не* – төшөм килеш ялғауы, ул үҙгәртеүсе ялғау.

**204.** Тексты уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе яһалыштары яғынан тикшерегеҙ. Тамырын, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы шартлы билдәләр менән айырып күрһәтегеҙ.

МЕҢ БАШҠОРТТАРЫ

Мең ҡәбиләһе башҡорттарының биләмәләре төньяҡтан, Ағиҙелдең урта ағымынан, **көньяҡҡа**, Дим, Өршәк йылғаларының үренә саҡлы, һуҙылған булған. **Көнбайышта** иһә Ҡармасан, Сәрмәсән, Өҫән, Сөн һәм Ыҡ йылғаларына тиклем барып еткән. Ул биләмәләр хәҙерге Туймазы, Йәрмәкәй, Шаран, Бүздәк, Илеш, Баҡалы, Бәләбәй, Бишбүләк, Миәкә, Татарстандың Мөслим, Аҡтаныш, Бөгөлмә райондарына ҡарай.

Меңдәр ерендә, Башҡортостандың өс ҙур йылғаһы – Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары ҡушылған урында, Өфө ҡалаһына нигеҙ һалына.

Мең башҡорттарының ерҙәре **малсылыҡ** менән шөғөлләнеү өсөн бик файҙалы һәм үтә бай булған. Унда һутлы үләнле киң далалар йәйрәп ятҡан. Меңдәрҙең ере **йәйләү** өсөн дә, **ҡышлауға** ла уңай була.

Ул ерҙәргә хужа булыу өсөн һәр саҡ киҫкен көрәш барған. Шуға ла мең башҡорттары **беренселәрҙән** булып Рус дәүләтенә ҡушылыу тураһында **илселәр** ебәргәндәр. *(Ә. Усмановтан)*

*Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар*

▸ **Яһаусы ялғауҙар** һүҙҙең тамырына, нигеҙенә ҡушылып, уның лексик мәғәнәһен үҙгәртәләр һәм яңы лексик мәғәнәле һүҙ яһайҙар: *ҡыҫ-**ҡыс**, сәнс-**ке**; тау-**лы**, ҡыш-**ҡы**; йәш-тәр-**сә**; таш-**сы**; урман-**лыҡ**.*

Ҡайһы бер яһаусы ялғауҙар һүҙгә айырым мәғәнә биҙәге генә өҫтәйҙәр. Был төр яһаусы ялғауҙарға түбәндәгеләр ҡарай:

1) кесерәйтеү һәм иркәләү ялғауҙары: *ҡош-**соҡ**, мал-**ҡай**, ҡолон-**саҡ**, уйын-**сыҡ**, ҡыҙ-**ый**;*

2) сифаттарҙың, рәүештәрҙең дәрәжә ялғауҙары: *яҡшы-**раҡ**, сағыу-**ыраҡ**, тиҙ-**ерәк**, йәш-**келт**.*

**Үҙгәртеүсе ялғауҙар**, һүҙҙең тамырына йәки нигеҙенә ҡушылып, уның лексик мәғәнәһенә тәьҫир итмәйенсә, тик грамматик мәғәнәһен генә үҙгәртәләр. Улар һүҙбәйләнеш, һөйләм эсендәге һүҙҙәрҙе үҙ-ара бәйләү вазифаһын башҡара. Ул төр ялғауҙарға 1) килеш ялғауҙары: *ауыл-**дың**, ауыл-**ға*** һ. б., 2) ҡылымдарҙың зат ялғауҙары: *уҡы-**й**, уҡы-й-**ым**, уҡы-й-**һың***, 3) эйәлек заты ялғауҙары: *ат-**ым**, аты-**быҙ**, ауыл-**ың***, 4) хәбәрлек заты ялғауҙары: *уҡыусы-**мын**, ташсы-**һың**, ауылдан-**мын***, 5) күплек ялғауҙары: *китап-**тар**, дәфтәр-**ҙәр**, һөйләй-**ҙәр**, яҙа-**лар*** ҡарай.

**205.** Йырҙарҙы уҡығыҙ. Ундағы хис-тойғо биҙәген сағылдырған һүҙҙәрҙе, ялғауҙарҙы күрһәтегеҙ. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы тикшереп, һүҙьяһалыш юлын аңлатығыҙ.

*фолькло́р*
*фестива́ль*
*абсолю́т*
*му́зыка*
*кио́ск*

1. Аҡ ыласынҡайҙарҙың, ай, ояһы
   Ирәндеккәйҙәрҙә ташлыҡта,
   Йөрәгендә янған ялҡын менән
   Ниҙәр ҡылмай егет йәшлектә.

2. Елмәрҙәккәй тауҙың көн битендә
   Елберләйҙер ҡайын елдәрҙә.
   Ир-егеткәй ситтә йөрөһә лә,
   Уйҡайҙары тыуған илдәрҙә.

3. Саңлы үҙәккәй, һиндә бесән саптым,
   Сапҡан ерем күбә булһын тип.
   Саңлы үҙәккәй, һиндә йыр йырланым,
   Дуҫ-ишемдең күңеле булһын тип.

*(Халыҡ йырҙары)*

● 1. Йырҙарҙан бер-береһенә мәғәнәләре яҡын булған (синоним) һүҙҙәрҙе табығыҙ. 2. *Йәшлек, янған, елдәр* һүҙҙәренең ҡапма-ҡаршы мәғәнәләрен табып яҙығыҙ. 3. *Ыласынҡайҙарҙың, Ирәндеккәйҙәрҙең, йырланым, йылҡысыларҙы* һүҙҙәрен тамырға, һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарға тарҡатып, өлгө буйынса һыҙыҡсалар аша яҙығыҙ. Ҡайһы ялғауҙан һуң ниндәй ялғау килгәнен әйтегеҙ.

Өлгө: *йылҡы* (тамыр) *-сы* (һүҙ яһаусы ялғау) *-лар, -ҙы* (үҙгәртеүсе ялғауҙар).

► Ялғауҙарҙың тамырға ҡушылыу тәртибе түбәндәгесә: тамырға иң тәүҙә һүҙ яһаусы, унан һуң һүҙ үҙгәртеүсе ялғау ҡушылып килә. Мәҫәлән: *икенселәргә – ике-нсе-ләр-гә; уйынсыҡтарҙы – уйын-сыҡ-тар-ҙы.*

**206.** *-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк; -сы/-се; -со/-сө, -ос/-өс; -ҡыс/-кес, -ҡыр/-кер* яһаусы ялғауҙарын тамырға ҡушып, яңы һүҙҙәр яһағыҙ. Башта ул һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, артабан һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

ниндәй?

Өлгө: *ҡая-лыҡ; бейек ҡаялыҡта; Урал тауҙарының әҙәм аяғы баҫмаҫ ерҙәрендә бейек ҡаялыҡта ғына була ҡоштар батшаһы бөркөттөң ояһы. Бик һирәк осраҡтарҙа ғына унан меҫкен ҡуян ҡасып ҡотола.*

**207. 1.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсерегеҙ. Тексттың ике өлөшө бер-береһенән нимә менән айырыла? Ошо күренеште үҙ һүҙҙәрегеҙ менән аңлатығыҙ. Ни өсөн шулай тип уйлайһығыҙ? 2. Тәүге абзацтағы һөйләмдәрҙең бер-береһенә бәйләнеү юлдарын һөйләгеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе һүҙьяһалыштар яғынан тикшерегеҙ.

Д..кабрь – йыл аҙағы, ҡыш башы. Ул айҙа тынл..ҡҡа сумған тәб..ғәт тормошо ҡыш **хакимл..ғ..на** күсә. **Ап-аҡ** ҡарға төр..нгән ер, гүйә, ел ығы-зығыһынан ял итә.

Д..кабрь – ҡыш йырының башы. Тыуған тәбиғәттең **тигеҙл..ктәрен, ҡалҡыулыҡтарын, тауҙарын, урмандарын, яландарын** һәм **ҡышҡы** торм..ш..б..ҙҙ.. беҙ ҡарһыҙ күҙ алдына килтерә **лә** алмайбыҙ. Ҡыш санаға юл, йылғаға күпер һала. Ҡары ҡалын **ҡыштың** йәй үләне ҡалын булыр, тигәндәр.

Ҡар һауа тор..ш..на ныҡ тәьҫир итә. Ул халыҡ хужалығына ла йоғ..нт.. яһай. Ҡар ҡатламы – ерҙең туны. Ул **ҡышлаусы үҫемлек** һәм **йәнлек-бөжәктәрҙе** туңып үлеүҙән һаҡлай, план..-табыҙҙы ҡышын **һыу..н..уҙан** ҡотҡарып ҡала. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

● Ҡышҡы тәбиғәтте һүрәтләп, бәләкәй генә инша яҙығыҙ.
**ТҮ** Декабрь айы тураһындағы тексты файҙаланығыҙ. Тәүҙә план төҙөгөҙ.

*Һүҙьяһалыштың мәғәнәүи, фонетик, морфологик, синтаксик юлдары*

► Башҡорт телендә һүҙьяһалыштың **мәғәнәүи, фонетик, морфологик** һәм **синтаксик** юлдары бар.

**1. Мәғәнәүи һүҙьяһалыш** тип быға тиклем йәшәп килгән һүҙҙәрҙең өҫтәлмә мәғәнәләр алыуына әйтәләр: *түңәрәк* (түңәрәк әйләнәһе – геометрик термин), *түңәрәк* (драма, хор, бейеү, тел өйрәнеү, һөнәрҙәрҙе өйрәнгән кешеләр төркөмө); *көрәш* (көс һынашыу), *көрәш* (сәйәси *көрәш,* эшселәр *көрәше,* яҡшы уҡыу өсөн *көрәш* һ. б.); *эйә* (хужа), *эйә* (һөйләмдең эйәһе – грамматик термин); *май* (һыйыр майы), *май* (календарҙағы бишенсе ай); *моңһоҙ* (көйһөҙ), *моңһоҙ* (бошонмаған да, шатланмаған да, бер нәмәлә лә эше булмаған кеше) һ. б.

**2. Фонетик һүҙьяһалыш** тип һүҙҙең өндәре, баҫымы үҙгәреүе арҡаһында яңы һүҙҙәр яһалыуға әйтәләр: *һары – һыры* (ҡорт *һарый,* дегәнәк *һырый*), *ырғы – ырғы* (*ырғып* ҡайнай, *ырғып* йүгерә), *бөртөк – бөрсөк* (бер *бөртөк* бойҙай, *бөрсөк* кенә йәш тамды), *быс – бес* (утын *быса,* кейем *бесә*), *һалмаҡ – һәлмәк* (*һалмаҡ* атлау, был тимер *һәлмәк*), *ғазап – аҙап* (ниңә *ғазапланаһың,* юҡҡа *аҙапланма*), *яңы* кейем (сифат) – *яңы* килде (рәүеш) һ. б.

**3. Морфологик һүҙьяһалыш** тип һүҙҙең тамырына яһаусы ялғауҙар ҡушыу һәм бер нисә тамырҙың йәки нигеҙҙең бергә ҡушылыу юлы менән яһалыуына әйтәләр. Мәҫәлән: а) исемдәр: *бел-гес, ауыл-даш, колхоз-сы, тимер-лек, йылҡы-сы* һ. б.; б) сифаттар: *күңел-ле, йәйәү-ле, йөрөм-тәл* һ. б.; в) ҡылымдар: *эш-лә, яй-ла, күңел-лән,*

*күҙ-лә* һ. б.; г) рәүештәр: *кисәге-сә, аҡса-лата, ҡыш-ын* һ. б.

**4. Синтаксик һүҙьяһалыш** тип бер нисә тамырҙың бергә ҡушылып һәм бер нисә һүҙҙән торған һүҙбәйләнеш юлы менән яңы һүҙҙәр яһалыуға әйтәләр: *тимер юл, Башҡорт дәүләт университеты, ҡурай еләге* һ. б.

**208.** Тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһе буйынса фекер алышығыҙ, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән ҡарағыҙ. Һүҙьяһалыш юлдарына миҫалдар табығыҙ, уларҙың яһалышын аңлатығыҙ.

БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ

Беҙҙең халыҡты борон-борондан йырсы халыҡ, бейеүсе халыҡ тип йөрөтәләр. Башҡорттоң оҙон йыры менән ҡурайы милләтебеҙ өсөн операны алмаштырып килһә, башҡорт халыҡ бейеүе милли балеттың нигеҙе булып ҡала. Башҡорт моңо, башҡорт йыры, башҡорт бейеүе бөтә Ер шарын урап сыҡты. Гениаль бейеүсе Рудольф Нуриев Башҡортостан егете ине бит. Уның балет сәнғәте өлкәһендәге ҡаҙаныштарын бер кем дә ҡабатлай алғаны юҡ. Рәшиҙә Туйсина, Әнүәр Ишбирҙин, Мөхәммәт Иҙрисовтар киң танылған халыҡ бейеүен башҡарған оҫталары ла етерлек. Ә күпме йәш таланттар бар!

Һуңғы йылдарҙа башҡорт милли сәнғәтенең өр-яңы бите асылды. Ул – Стәрлетамаҡтағы бейеү театры. Ойоштороусылары – Римма һәм Хәлил Ишбирҙиндәр. Был үҙенсәлекле театр хореография ысулы ярҙамында тамашасыны халҡыбыҙҙың тарихы, рухи донъяһы, характеры һәм изге ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыра.

Эшләй башлауына бер нисә йыл ғына булыуына ҡарамаҫтан, бейеү театры үҙен ил күләмендә танытып та өлгөрҙө. II Бөтә Рәсәй фестиваленда лауреат исеменә лайыҡ булды. *( Р. Әфләтунова)*

## § 33. Ҡушма һүҙҙәр

★ Хикәйәне иғтибар менән уҡығыҙ. Уның йөкмәткеһен тулы итеп һөйләгеҙ. Тәүге өс абзацтағы һөйләмдәрҙең бер-береһенә ниндәй һүҙҙәр ярҙамында бәйләнеп килеүен әйтегеҙ. Һуңынан хикәйә буйынса план төҙөгөҙ. Уны изложение итеп яҙырға әҙерләнегеҙ. Хикәйәнән ҡушма һүҙҙәрҙе табып, уларҙың нисек яһалғанын аңлатығыҙ.

АҠКҮЛ

Беҙҙең ауылдан ике саҡрым самаһында ергә төшкән ай кеүек ялтырап ятҡан Аҡкүл тигән бер ҙур күл бар. Йәй көндәрендә күлдең тирә-яғы йәшел үләндәр, төрлө игендәр менән уратып алынған, тау башынан ҡарағанда, ул көҙгө кеүек ялтырап ята.

Май айы башланыу менән, күлдең әйләнә-тирәһендә кешеләр ҡайнаша башлай. Унда яҡын-тирәләге ауылдарҙан әллә ни тиклем халыҡ йыйыла, уйнап-көлөп көн үткәрә. Кис булһа, күлдең тош-тош урындарында, ҡамыштар араһында төрлө ҡош-ҡорт һайрай.

Көҙ яҡынлашып, һалҡын елдәр иҫә башлау менән, күл йәнлелеген юғалта. Ҡыр өйрәктәре һәм башҡа ҡоштар, туп-туп булып, көньяҡҡа китәләр. Күл өҫтөн шаҙраландырып уйнаған балыҡтар ҙа төпкә төшәләр. Көҙгө көндәрҙә Аҡкүл төньяҡтан күсеп барыусы ҡыр ҡаҙҙарының туҡтап китә торған урындарына әйләнә. Улар күлгә төшөп хәл йыйып, йыуынып, тағы ла һауаға күтәрелеп, көньяҡҡа осоп китәләр. Уларҙың «ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ» тигән тауыштары күл буйына йәм һәм йән биреп тора. *(М. Ғафури)*

● *Көҙгө көндәрҙә, ҡыр ҡаҙҙарының, һауаға күтәрелеп, күл буйына йәм һәм йән биреп тора* һүҙбәйләнештәрен дөрөҫ итеп, ғәҙәттәге һөйләшеүҙә нисек әйтелһә, шулай әйтегеҙ. Әйтелештә ике һүҙ араһындағы өндәрҙең үҙгәрешенә иғтибар итегеҙ.

**209.** Түбәндәге ҡушма һүҙҙәрҙең яһалыштарын тикшерегеҙ. Яһалыш үҙенсәлектәренә ҡарап, уларҙы төркөмләп яҙығыҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалыу ысулдары тураһында һығымта сығарығыҙ.

Тана-торпо, ҡулъяулыҡ, аҡҡош, арлы-бирле, аҙыҡ-түлек, эләгә-йығыла, абына-һөрөнә, ел-дауыл, ағас-таш, инәле-сығалы, ҡара-ҡаршы, икһеҙ-сикһеҙ, барыбер, елғыуар, Ағиҙел, Ҡариҙел, ҡурай еләге, айыу еләге, ҡыр ҡаҙы, тимер юл, үҙ аллы, бүре-маҙар, яҙын-көҙөн, БДУ, быйыл, ҡарағош, Янартау, ағас-мағас, кәкре-бөкрө, сейле-бешле, иртәле-кисле, тирә-яҡ, аҡһаҡал, бөгөн, берүк, бала саҡ, таш күмер, буш баш, баш мәҡәлә, һигеҙ йыллыҡ, ҡайын еләге, бер рәттән, бер килке, көс-хәл, тапҡан-таянған, бата-сума, унда-бында, көнө-төнө, илай-илай, аҡһыл күк.

► Ике йәки бер нисә тамыр һүҙҙән яһалып, бер нисә мәғәнә аңлатҡан һүҙҙәр **ҡушма һүҙ** тип йөрөтөлә. Мәҫәлән: *аҡҡош, һарытүш, өсаяҡ, бишбармаҡ, Оло Эйек, Кесе Эйек, Ҡара диңгеҙ, ҡурай еләге, Үрге Муса.*

Башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәр түбәндәге юлдар менән яһала:

1) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән: *ҡулъяулыҡ, ҡулъяҙма, ҡарағас, аҡҡош, алъяпҡыс, ҡыҙылгүҙ, ҡыҙылғанат, терегөмөш, Тимерғаҙыҡ, яргынат;*

2) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән: *арлы-бирле, һауыт-һаба, бала-саға, дуҫ-иш, йәш-елкенсәк, егет-елән, тимер-томор, тирә-яҡ, түгеп-сәсеп, ҡайғы-хәсрәт, аллы-гөллө;*

3) һүҙҙе ҡабатлау юлы менән: *юл-юл, шәп-шәп, тиҙ-тиҙ, буй-буй, матур-матур, төрлө-төрлө, юлаҡ-юлаҡ, тимгел-тимгел;*

4) һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән: *тимер юл, ала ҡарға, ҡара ҡарға, таш күмер, һоро күмер, шәкәр ватҡыс, газ үткәргес, аяҡ өҫтө, ҡот осҡос, ҡара һауыты, тәртә төбө, Башҡорт дәүләт университеты;*

5) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән: *БР* – Башҡортостан Республикаһы; *БДПУ* – Башҡорт дәүләт педагогия университеты; *БМО* – Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы; *АҠШ* – Америка Ҡушма Штаттары; *БДБ* – Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе. Бындай һүҙҙәр *аббревиатура* тип атала.

**210.** Уҡығыҙ. Текстан ҡушма һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың яһалыу юлдарын һөйләп бирегеҙ, һуңынан ҡушма һүҙҙәрҙе яһалыу юлдары буйынса төркөмләп яҙығыҙ. Уларҙың дөрөҫ яҙылыштарына иғтибар итегеҙ, нисек яҙылғанын төшөндөрөгөҙ, һығымта яһағыҙ.

### КИТАП ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ

Борон-борон заманда бер ярлы кешенең үтә зирәк улы булған. Белем алыу дәрте бик көслө булһа ла, ғаилә ярлылыҡта йәшәгәнлектән, уҡый алмаған. Ауылдарында уҡый-яҙа белгән кеше булмаған. Үҫә төшкәс, белем эҙләп, ауылынан сығып киткән. Оҙон-оҙаҡ юл үтеп, хәүеф-хәтәр күреп, ғазап сигеп, бәләкәй генә ҡалаға килеп, арыҡ ҡаҙырға ялланған. Китап баҫҡан ерҙә хәреф йыйыусы булып эшләгән бер егет менән дуҫлашҡан, унан уҡырға-яҙырға өйрәнгән. Ғүмерендә ҡулына китап алғаны булмаһа ла, китап яҙып ташлаған. Ҡулъяҙмаһын теге егеткә биргән, эшләгән ерендә күрһәтеп ҡарауын һораған. Ул, ҡулъяҙманың эстәлеге һәйбәт, тик уҡыу бик ауыр, ҡоршауы юҡ, тип әйткән. Зирәк егет китап баҫыусыға барып, ҡоршауҙы ҡайҙан алырға, тип һораған. Уны бер кеше менән

таныштырғандар. Ул ҡулъяҙманы уҡып сыҡҡас, ҡоршау өсөн бик ҡыйбат хаҡ һораған. Егет түләргә риза булған. Теге кеше ҡулъяҙмаға бер һүҙ өҫтәмәй һәм бер һүҙҙе алып ташламай төҙәткән: ул уны абзацтарға бүлгән, һөйләм эсендә тейешле тыныш билдәләрен ҡуйған. Шунан китап баҫылып сыҡҡан. *(«Мәктәп календары»нан)*

● Һөйләмдәрҙәге ҡушма һүҙҙәргә һорауҙар биреп, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән (исем, сифат, ҡылым, рәүеш) килгәнен асыҡлағыҙ.

**211.** Килтерелгән ҡушма һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә (исем, сифат, ҡылым, рәүеш) бүлеп яҙығыҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы хаҡында һығымта сығарығыҙ.

Ала-ҡола, алабута (ҡош), аҡсәскә, аллы-гөллө, алпан-толпан, алдап-йолдап, алан-йолан, алтынбаш, аң-белем, ағалы-һеңлеле, аңҡы-тиңке, ары-бире, арымай-талмай, ауыл-ара, Асылыкүл, ашҡаҙан, бары-юғы, баш ҡатырғыс, башбаштаҡ, башватҡыс, башкиҫәр, баш ҡала, Башҡорт дәүләт академия драма театры, башма-баш, баштан-аяҡ, бер күңелдән, бөтә күңелдән, бисә-сәсә, бирьяҡ, аръяҡ, сатай-ботай, бөрсөк-бөрсөк, буҙтурғай, ваҡ-төйәк, ваҡытлы-ваҡытһыҙ, генштаб, Донбасс, Кузбасс, ғөрөф-ғәҙәт, дөйәғош.

● Ошо ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын «Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге»нән ҡарап тикшерегеҙ.

## § 34. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы

★ Өҙөктө уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙе төркөмләгеҙ, уларҙың нисек яҙылғанын тикшерегеҙ, һығымта яһағыҙ.

Яңы йыл байрамы алдынан ғына ауылдың иң ябай кешеһе – почтальон Мөхәмәтша бабай

райондан «Батырлыҡ өсөн» миҙалы тағып ҡайтты. Ул яңылыҡҡа ишеткән-күргән бөтә кеше шаҡ ҡатты. Кем-кем, Мөхәмәтша бабай... Уның эшендә ниндәй батырлыҡ булһын инде, уйлап ҡараһаң. Юрттырып ҡына барып, элемтә бүлексәһенән гәзит-журналды, хаттар алып ҡайта. Кискә тиклем ул барыбер өләшеп бөтә.

Телеграмма килгәндә лә үтә янып-көйөп йөрөмәй. Һирәк-һаяҡ ҡына, берәйһенең туған-фәләне ауырып, ашығыс хәбәр алынғанда ғына, телефондан белдерер.

Мөхәмәтша бабай – бик алсаҡ кеше. Уның юҡҡа-барға орошоп барғанын хәтерләмәй Хәйҙәр.

Хәйҙәр тирләп-бешеп мәктәпкә килеп инде. Яңы йыл байрамы башланып китте. Ишектән, миҙалын таҡҡан Мөхәмәтша бабайҙы ике яғынан ҡултыҡлап, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу күренде. Бабайҙы шыршыға яҡын ғына ултырттылар. Уның тирә-яғында төрлө хайуан-януар, әкиәт геройҙары булып кейенгән бала-саға сыр-сыу килә. Район газетаһы фотохәбәрсеһе бабайҙы фотоға төшөрә. *(Д. Бүләковтан)*

● Тәүге абзацты дөрөҫ әйтелеш нормаларын күҙәтеп уҡығыҙ. Унда ҡайһы һүҙбәйләнештәрҙе уҡығанда ниндәй өндәрҙең әйтелешендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килгәнен әйтегеҙ. Әйтелештә үҙгәреш кисергән һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ.

*Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылыуы*

► **А. 1.** Тәүге һүҙе аныҡлаусы вазифаһын юғалтып, икеһе бергә бер атама булып киткән һүҙҙәр бергә яҙыла: *айғолаҡ, ағалтын, сүмесбаш; аҡбалыҡ, аҡһөйәк* (юғары ҡатлам кешеһе), *аҡһаҡал, алабуға, ҡыҙылғанат, Тимерғаҙыҡ* (йондоҙлоғо), *өсҡат* (үҫемлек), *өсмөйөш, һигеҙгүҙ, билбау, күкйөн* (балыҡ) һ. б.

2. Эйәлек заты өлгөһөндә яһалып та, аҙағында эйәлек ялғауы төшөп ҡалған исем һәм исемгә ҡылым ҡушылып яһалған һүҙҙәр бергә яҙыла: *гөлйемеш, ҡолаҡбау, ҡолонҡойроҡ, һабантуй, елғыуар, илбаҫар, һыубаҫар, көньяҡ, көнбайыш, көнкүреш* һ. б.

3. Кеше исемдәре, руссаға оҡшатып яһалған һүҙҙәр, туғанлыҡ һүҙҙәре бергә яҙыла: *ҡәйенбикә, ҡайнаға, өләсәй, олатай, Аҡйегет, Миңлеғәли, Айбулат, өҫҡорма, үҙҡиммәт, ярымутрау, ысынбарлыҡ* һ. б.

**Б.** 1. Ике йәки бер нисә һүҙҙән тороп, һуңғы һүҙендә эйәлек ялғауы булһа, ундай ҡушма һүҙҙәр айырым яҙыла: *айыу көпшәһе, айыу еләге, ҡурай еләге, ишек алды, муйыл ағасы, ҡара һауыты* һ. б.

2. Бәйләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр айырым яҙыла: *Яңыбай урта мәктәбе, Мәҙәниәт йорто, Спорт һарайы, Мәғариф министрлығы, Башҡортостан Республикаһы* һ. б.

3. Тәүге һүҙе аныҡлаусы мәғәнәһен һаҡлағанда ҡушма һүҙҙәр айырым яҙыла: *бала саҡ, ала ҡарға, ялан баш, аҡһыл күк, алһыу ҡыҙыл, баш ҡала* һ. б.

**В.** 1. Ул һүҙҙәрҙе парлау һәм ҡабатлау юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр һыҙыҡса аша яҙыла: *тирә-яҡ, тирә-йүн, юл-юл, буй-буй, бала-саға, тел-әҙәбиәт, кәкре-бөкрө, белер-белмәҫ, көнө-төнө* һ. б.

2. Ике аралағы сикте, ваҡытты белдергән ҡушма һүҙҙәр һыҙыҡ аша яҙыла: *Өфө – Мәскәү поезы, Мәскәү – Волга каналы, 1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы* һ. б.

## Башҡорт телендә һүҙ составы

| Һүҙҙәр | Һүҙьяһалыш юлы | Яҙылышы | Миҫалдар |
|---|---|---|---|
| Тамыр | тамырҙан ғына тора | – | мәктәп, китап, дәфтәр |
| Яһалма | яһаусы ялғау ҡушыу юлы менән | бергә (ҡушып) | уҡыусы, белем, дәрес-лек, тәртипле |
| Ҡушма | 1) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән | бергә (ҡушып) | бишбармаҡ, Ағиҙел, аръяҡ |
| | 2) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән | һыҙыҡса аша | халыҡ-ара, бала-саға, үрле-ҡырлы, йүгерә-атлай |
| | 3) һүҙҙәрҙе ҡабат-лау юлы менән | һыҙыҡса аша | уҡый-уҡый, яҙа-яҙа, бара-бара |
| | 4) һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән | айырым | Мәғариф министрлығы, Башҡортостан Республикаһы |
| | 5) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән | бергә | БДУ, педучи-лище, совхоз |

**212.** Тасуирламаны уҡығыҙ. Уның темаһын билдәләгеҙ, уны тағы ла бәләкәй темаларға бүлегеҙ, һәр бәләкәй темаға исем бирегеҙ. Шуның буйынса план төҙөп, изложение яҙығыҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

ЯНҒАНТАУ

Республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә Урал тауҙары араһынан борғаланып-борғаланып Йүрүҙән йылғаһы аға. Уның йәшеллектәр ҡапла-

ған йәмле ярында ғәжәп бер урын бар. Уны Янғантау тип йөрөтәләр.

Тауҙың түбәһендә йылылыҡ майҙандары бар. Уларҙағы ярыҡтарҙан һәр ваҡыт йылы сығып тора. Хәҙерге ваҡытта шундай биш майҙан барлығы беленде. Ул майҙандарҙың ҡоролары һәм быулылары бар. Ҡоролары эҫе һауа сығара. Ҡоро һауаның температураһы утыҙ икенән алып бер йөҙ илле бер градусҡа тиклем булғылай. Быулы майҙандар ап-аҡ быу сығара. Ерҙән күтәрелеп сыҡҡан урында быуҙың температураһы етмеш биш градусҡа етә.

Тау янында Ҡорғаҙаҡ тип аталған йылы сығанаҡ бар. Унан сыҡҡан һыуҙың температураһы йәй ҙә, ҡыш та ун алты ярым градус була.

Ул тирәлә йәшәүселәр Янғантау быуының һәм газының шифалы булыуын күптән үк белгәндәр.

Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылда Янғантауҙа ҙур булмаған шифахана (санаторий) төҙөлә. Быу ваннаһындағы температура ҡырҡ биш-илле, һауа ваннаһында илле-һикһән градус була. Шифаханала күбеһенсә нервылары, быуындары, бөйөрҙәре ауыртҡан кешеләр дауалана. Уларҙың ундан һигеҙе һауығып сыға.

Йылдан-йыл шифахана киңәйгәндән-киңәйә бара. Әле һыу бассейны йорто тапшырылды, Мәҙәниәт һарайы төҙөлөп бөттө. *(«Ағиҙел» журналынан)*

*санато́рий*
*профилакто́рий*
*куро́рт*

*шифахана*
*температу́ра*
*бассе́йн*
*ва́нна*

## «Һүҙьяһалыш» бүлеге буйынса белемегеҙҙе тикшерегеҙ

**1.** Тамырҙан ғына торған һүҙҙәр бирелгән рәтте билдәләгеҙ.

1) ағас, таш, үлән, һауа
2) уйынсыҡ, игенсе, эшсән, маҡтаулы
3) күл, боҙло, һунарсы, һыу

**2.** Үҙгәртеүсе ялғауы булған һүҙҙәр рәтен табығыҙ.

1) эшсе, эшсән, эшһеҙ, эшлекле
2) эшһеҙ, эште, эштә, эшһеҙлек
3) эштәр, эшем, эшемде, эштән

**3.** Яһаусы ялғаулы һүҙҙәр рәтен билдәләгеҙ.

1) ауыл, йылға, күл, шишмә
2) уҡыусы, аҡыллы, эшләү, йәйге
3) уҡыуҙар, мәктәпте, ҡышты, ял

**4.** Тамырҙаш һүҙҙәрҙән генә торған рәтте билдәләгеҙ.

1) өй, өйҙә, өйҙәр, өйҙө
2) белем, белгес, белемле, бел
3) уҡы, уҡыу, уҡыуға, уҡыуҙан

**5.** Дөрөҫ ялғаулы рәтте билдәләгеҙ.

1) класста, властҡа, лагерҙә
2) класта, власты, лагерҙан
3) повесты, таксиҙа, жюриgә



*Ә. Ситдиҡова.* Бал еҫе. 1976



*Э. Сәйетов*. Бесәндән ҡайтыу. 1969



*А. Костин*. Ҡыш



*А. Костин*. Ураҡ өҫтө




*В. Меос*. Тауҙарҙа томан. 1981



*Ф. Кащеев.* Бабай. 1965



*М. Нестеров.* Яз. 1905



*Р. Ишбулатов.* Өфөлә Еңеү байрамы. 1949



*Б. Домашников.* Һаҙ томбойоғо сәскә ата. 1954

## МОРФОЛОГИЯ. ОРФОГРАФИЯ. ТЕЛМӘР МӘҘӘНИӘТЕ

Морфология грек телендәге *морфе* «форма» һәм *логос* «тәғлимәт, фән, ғилем» һүҙҙәренән ҡушылып яһалған. Морфологияла һүҙ, уның төҙөлөшө, үҙгәреүе, шулай уҡ һүҙ төркөмдәре, уларҙың мәғәнәләре өйрәнелә.

### § 35. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Һүҙ төркөмдәре

★ Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Күп нөктәләр урынына һүҙ төркөмө атамаларын ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

Тирә-яғығыҙға күҙ һалығыҙ. Һеҙҙе төрлө предметтар, күренештәр уратып алған. Шул предметтарҙы, күренештәрҙе атап килеүсе һүҙҙәрҙе ... тип, ә уларҙың билдәләрен белдереүсе һүҙҙәрҙе ... тип йөрөтәләр. Ул предметтарҙы, әйберҙәрҙе үлсәп тә, һанап та була, уның өсөн ... ҡулланыла.

Предметтар хәрәкәтләнәләр, эш башҡаралар. Эш-хәрәкәтте аңлатҡан һүҙҙәр ... тип атала. Кешеләр үҙ-ара аралашҡанда кешегә лә, үҙенә лә күрһәтеп һөйләй. Уның өсөн ... ҡулланыла. Предметтар үтәгән эш-хәрәкәттең дә билдәһе була. Эш-хәрәкәттең билдәһен ... сағылдыра: *шәп йүгерә, әкрен атлай.* Бөтә был килтерелгән һүҙ төркөмдәре үҙ аллы һүҙ төркөмдәрен тәшкил итә.

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре лә бар. Уларға *менән, тураһында, шикелле, өсөн, һәм, ә, ләкин,*

*шуға күрә, ғына, генә, -мы, -ме, -уҡ, -үк* һ. б. инә. Уларҙы бәйләүес, теркәүес һәм киҫәксәләр тип йөрөтәләр. Күрһәтелгән һүҙ төркөмдәренән башҡа, ымлыҡтар тип аталған *ах, их, ох, эх, и-и* кеүек һүҙҙәр бар.

● Текст менән ныҡлап танышығыҙ. Үҙегеҙ яҙған һүҙ төркөмдәренең ниндәй һорауға яуап биргәнен әйтегеҙ.

**213.** Хәбәрләмәне уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Артист ижад иткән геройҙарҙы һанап күрһәтегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәргә һорауҙар биреп, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын тикшерегеҙ, һөйләп бирегеҙ. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр яҙып күсерегеҙ.

СӘХНӘ ҠАҺАРМАНЫ

Халыҡ артис.. **Арыҫлан Мөбәрәков** һоҡланғыс та, **эскерһеҙ кәңәшсе** лә, яҡын иптәш тә ине. Ул ижад иткән һәр һын сәхн..лә үҙ..нсә **йәшәне, к..рәште,** кешеләрҙе лә шуға саҡырҙы. Арыҫлан Мөбәрәков с..хн..лә йәшәткән образдар **ике йөҙҙән** артып китә. Шуныһы ғәжәп: улар с..хн..гә, **күң..лгә** бер-береһенә оҡш..ш образдар (һындар) булып инмәй, һәр береһе айырым ш..хес булып йәшәй. Уның сере бер генә нәмәлә – **оҫталыҡта.**

Арыҫлан Мөбәрәков башҡорт **с..хн..һендә** иң оло ш..хес ине. Икенсе төрлө күркәмләндереп әйткәндә, ул с..хн.. ҡаһарманы булды.

С..хн..лә балҡып йәшәгән Арыҫлан Мөбәрәковтың һөйгән халҡына ҡалдырған ижад емештәре бер ваҡытта ла **иҫкермәҫ** һәм **һулымаҫ,** бер ҡасан да **онотолмаҫ** һәм **юйылмаҫ,** үлемһеҙ бер һәйкәл булыр. *(Я. Ҡолмой)*

● *Ижад, Арыҫлан* һүҙҙәренең, *күркәмләндереп әйткәндә, артып китә* һүҙбәйләнештәренең дөрөҫ әйтелеш үҙенсәлектәрен, ҡайһы өндәрҙең ниндәй шарттарҙа нисек үҙгәргәнен әйтегеҙ.

▶ **Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре** предметтарҙы, уларҙың билдәләрен, эш-хәрәкәтте, һанды атап киләләр. Һөйләмдә һөйләм киҫәктәре булалар. Ул һүҙ төркөмдәренә **исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш** инә.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре** үҙ аллы һүҙҙәр менән бергә генә ҡулланылалар һәм һөйләм киҫәктәре була алмайҙар. Ул һүҙ төркөмдәренә **бәйләүес, теркәүес, киҫәксәләр** инә.

Был ике ҙур төркөмдән башҡа айырым урын алып торған һүҙҙәр ҙә бар. Мәҫәлән, **ымлыҡтар:** *ох, ах, их* һ. б.

**214.** Өҙөктө иғтибар менән уҡығыҙ. Яҙыусының бала сағы тураһында һөйләгеҙ. *Теремек, уҫал дала еле, халыҡ тарихының бер күҙәнәге* тигән һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе нисек аңлағанығыҙҙы төшөндөрөгөҙ. Өҙөктән үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен табығыҙ. Күп нөктәләр урынына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Икенсе абзацта һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.

БАЛА САҠ

Ҡаһарман яҙыусы Һәҙ..ә Дәүләтшин..н..ң тормош юлы – халыҡ тарихының бер күҙәнәге. Ул үҙенең т..ған халҡы менән бергә үҫте. Ауыр шарттарҙа данлы «Ырғыҙ» романын яҙыуы унын ҡыйыу батырлы..ы булды.

Һәҙ..ә о..лсан, уйсан бала булып үҫте. Йәйҙәрен ул Һамар далаларында ..ләк йы.., Ырғыҙҙа һыу ҡойона. Ә ҡыш ажғырып уйнаған уҫал дала елдәренең оло..ы аҫтында, өл..с..һенең ту..ы..ына ятып, унын әк..әттәрен тыңлап үҫә. Ул әк..әттәр күп һәм төрлө булалар, уларҙы күпме һуҙһаң да бөтмәй, күпме тыңлаһаң да ялҡытмай. Һәҙ..әнең өл..с..һе бәхет ҡошо – Һомай ҡош әкиәтен башлай ҙа үҙе

белгән кешеләр тураһында һөйләп китә. Ундай саҡтарҙа ҡыҙға эк..әт менән ысын тормош бер булып тойола башлай.

Бәләкәй саҡта тыңлаған эк..эттәр Һәҙ..әнең хы..лын үҫтереп ебәрә. Уны «ҡыҙҙар мәҙрәсәһе»нә уҡырға бирәләр. Отҡор, хәтергә шәп булған Һәҙ..ә уҡыуҙы тиҙ төшөнөп ала. Зирәк ҡыҙҙы мөғәллимәләр бик яратып өлгөрәләр. *(М. Минһажетдиновтан)*

● Һуңғы абзацтың беренсе һөйләмен һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ: һәр һүҙбәйләнештең эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәрен әйтегеҙ.

**215.** Өҙөктө уҡығыҙ. Йөкмәткене һөйләгеҙ. Уны йөкмәткеһе буйынса нисә өлөшкә бүлеп булыуын әйтегеҙ. Аҡмулланың эшмәкәрлеген һүрәтләгән юлдарҙы, һүҙбәйләнештәрҙе әйтегеҙ. Тәүге абзацтан исемдәрҙе, ҡылымдарҙы күрһәтегеҙ. Икенсе абзацтан ярҙамсы һүҙҙәрҙе табығыҙ.

## ЯҠТЫЛЫҠ ЙЫРСЫҺЫ

*мәшһүр*
*ғүмер*
*аһәң*
*шиғыр*
*шиғриәт*

19-сы быуат башҡорт шиғриәтен мәшһүр шағир Аҡмулланан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Ғалим һәм уҡытыусы, шағир һәм балта оҫтаһы Аҡмулла ауылдан ауылға, ҡаланан ҡалаға аң-белемгә өгөтләп йөрөгән. Бөтә аңлы ғүмерен халыҡ араһында башҡорт илен, ҡаҙаҡ далаларын гиҙеп, шиғыр-моң сәсеп үткәргән. Был илгиҙәр шағирҙың поэтик аһәңе оҙаҡ йылдар буйы «ҡара төндәге яҡты йондоҙ» булып балҡыған.

Аҡмулланың күпселек ғүмере ярлы-ябаға араһында үткән. Ул башҡорт хеҙмәтсәндәренең дә, ҡаҙаҡ ярлыларының да хәл-торошон, уй-ынтылыштарын, рухын яҡшы аңлаған. Хатта уларға ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышҡан. Шулай итеп, ҡайҙа ғына бармаһын, кемдәр менән

генә осрашмаһын, үҙенең ҡарашын үткер шиғыр менән әйтер булған. Шиғриәттә Аҡмулла ынтылған бейеклекте яулау М. Ғафури, Д. Юлтый, Ш. Бабичтар өлөшөнә төшә. *(Ә. Вилдановтан)*

● 1. *Илгиҙәр, Аҡмулла* һүҙҙәрен яһалыштары буйынса тикшерегеҙ. Ул һүҙҙәрҙе эйәлек заты менән үҙгәртеп ҡарағыҙ.

2. *Ҡара төндәге яҡты йондоҙ, үҙенең ҡарашын үткер шиғыр менән әйтер булған, бейеклекте яулау ... өлөшөнә төшә* тигәнде нисек аңлағанығыҙҙы һөйләгеҙ.

## § 36. Исем

★ Шиғыр өҙөгөн уҡығыҙ; унда кемдәр хаҡында һүҙ барғанын һөйләгеҙ. Үҙегеҙ белгән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һанап сығығыҙ. Улар менән булған осрашыуҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Шиғырҙан *кем? нимә?* һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанын әйтегеҙ. Уларҙың һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килгәнен билдәләгеҙ.

ВЕТЕРАНДАР

Ветерандар – беҙҙең олатайҙар,
Ҡалҡандары ғәзиз еремдең.
Байрамдарҙа оло ҡунаҡ булып,
Биҙәй улар түрен илемдең.

Һәр береһен, мәңге үлмәҫ итеп,
Тарих биттәренә яҙырлыҡ...

Ветерандар – атай-олатайҙар,
Сатҡылары ҡояш нурының,
Тыныслыҡҡа изге ҡалҡан булып,
Беҙ алайыҡ улар урынын.

*(Ф. Юлдашбаева)*

● 1. Исемдәрҙең ниндәй килештә торғанлығын тикшерегеҙ, уларҙың һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килгәнен әйтегеҙ.

2. Күплектә һәм берлектә торған исемдәрҙе атап күрһәтегеҙ, күплек ялғауҙарын таҡтаға яҙығыҙ.

3. *Ҡалҡандары гәзиз еремдең* һөйләмен, *саткылары ҡояш нурының* һүҙбәйләнешен нисек аңлауығыҙ хаҡында һөйләгеҙ. Уларҙағы күсмә мәғәнәләге һүҙҙәрҙе күрһәтегеҙ.

► Предметтың атамаһын белдергән һүҙгә **исем** тиҙәр. Исем *кем? нимә? ни?* һорауҙарына яуап бирә. Мәҫәлән: ***Айсыуаҡ*** *әле ауылда уҡый.* (Кем уҡый?) ***Айсыуаҡ***. *Айсыуаҡ* ***гармунда*** *уйнай.* (Айсыуаҡ нимәлә уйнай?) ***Гармунда***.

Кешеләргә ҡарата *кем?*, башҡа бөтә йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы белдергән исемдәргә *нимә? ни?* һорауҙары бирелә.

Исемдәр һан, эйәлек заты, килештәр менән үҙгәрә. Мәҫәлән: *бала – балалар; урман – урмандар; ат – атым, атыбыҙ, аты; ат – аттың, атты, атҡа* һ. б.

**216.** Шиғырҙы иғтибар һәм тейешле интонация менән уҡығыҙ. Уҡығанығыҙҙы диктофонға яҙығыҙ, һуңынан тыңлап, хаталарын әйтегеҙ. Шиғырҙың темаһын һәм төп фекерен билдәләгеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең һанын, затын һәм ниндәй килештә икәнен, һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килеүен әйтегеҙ.

**Илем** әгәр сикһеҙ йыһан икән,
Мин – күгендә яныр **йондоҙмон.**
**Илебеҙҙең** йөҙөн балҡытырлыҡ
Нур һибергә тыуған бер **ҡыҙмын.**

Башҡортостан күркәм туғай булһа,
Мин – ундағы наҙлы **сәскәмен.**
**Тормошта** бер биҙәк арттырырлыҡ
Изге **орлоҡ ергә** сәскәнмен.

**Йылайырым** гүзәл баҡса икән,
Мин – **һандуғас** талда һайрарға.
Һыҙылып атҡан **таңда** йыр башлайым
**Илкәйемде** һөйөп данларға.

*(Ф. Юлдашбаева)*

► Һөйләмдә исем эйә, тултырыусы, хәл, һирәгерәк хәбәр булып йөрөй. Мәҫәлән: *Мин – һандуғас талда һайрарға* һөйләмендә *һандуғас* – хәбәр, ә *талда* хәл булып килгән.

**217.** 1. Нәҫерҙе дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Уҡыуығыҙҙа күтәренке кәйеф сағылһын. Уҡығанығыҙҙы диктофонға яҙып, күмәкләп тыңлап ҡарағыҙ, хаталарын тикшерегеҙ. 2. Тәүге алты һөйләмде тикшереп, ундағы исемдәрҙең һөйләмдә ниндәй киҫәк булыуын аңлатығыҙ.

## ҠАРҘАР ЯУА

Ҡар яуа! Тирә-яғың ап-аҡ. Ерҙә, ҡоймаларҙа, түбәләрҙә – ап-аҡ ҡар. Түбәләрҙәге ҡарҙарға ғына ҡара әле. Ундағы ҡарҙың боҙ-ҡәләмгә әйләнәсәген, тамсылар булып тамасағын beләһеңме? Тамсылар йырлай-йырлай тамасаҡ, һин бөгөн үк тамсыларҙың ни йырлауҙарын белә алаһыңмы һуң? Белә алһаң, һин киләсәктә йырсы-композитор буласаҡһың. Ҡар аҫтында ҡалған баҫыуҙарға ҡарап, ергә эйелеп тирбәлгән алтын башаҡтарҙы күрәһең икән, һинең игенсе булырыңа, тыуған ереңде һөйөп, уға тир түгеп йәшәйәсәгеңә шик юҡ. Бәҫ һырыған ботаҡтарҙы йәм-йәшел япраҡтарға, ҡар яланын аллы-гөллө сәскәләргә оҡшатаһың икән, һинең рәссам булырыңа ышанаһың.

Ҡар яуа! Яуһын, яуһын, ҡар ул – беҙҙең шаулап килер яҙыбыҙ, шау сәскәле йәйебеҙ, мул уңышлы көҙөбөҙ. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

● Текстан «сифат + исем», «исем + ҡылым» ҡалыбындағы бишәр һүҙбәйләнеш һайлап алығыҙ, дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ, өлгө буйынса эйәртеүсе һүҙҙән эйәреүсе һүҙгә уҡтар менән күрһәтеп, һорауҙарын да ҡуйығыҙ.

ниндәй? нимәләргә?

Өлгө: *сәскәле йәйебеҙ; сәскәләргә оҡшатаһың икән.*

## § 37. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр

★ 1. Тексты уҡығыҙ. Төп фекерен әйтегеҙ. Төп фекерҙе ҡайһы һөйләм сағылдыра? Тексҡа исем бирегеҙ. 2. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙе билдәләгеҙ. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең билдәләрен әйтеп бирегеҙ.

Зәңгәр таҫма булып Ағиҙел аға. Ул күк Уралдың көньяҡ битләүендәге ҡаяларҙы ярып килә лә Мәләүез ҡалаһына етәрәк төньяҡҡа борола. Ошо тирәлә уға Нөгөш йылғаһы ҡушыла. Бында 1966 йылда Нөгөш һыуһаҡлағысы төҙөлдө.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан ҙур нефть химияһы үҙәгенә әүерелде. Аҙ ғына ваҡыт эсендә Салауат, Күмертау, Мәләүез ҡалалары үҫеп сыҡты. Ишембайҙа, Стәрлетамаҡта яңы заводтар һалынды. Уларҙың артабанғы үҫеше өсөн йәй айҙарында Ағиҙелдең генә һыуы етмәйәсәк. Бына шуның өсөн дә йә Ағиҙелдә, йә уға ҡоя торған бер йылғала ҙур һыуһаҡлағыс төҙөү кәрәк ине.

Геологтарҙы һәм төҙөүселәрҙе ҡыҙыҡһындырған иң уңайлы урын Нөгөш үҙәгендә табылды. Шул үҙәндең бер яғынан әллә нисә саҡрымдарға Сыбарт, Ҡышлауарҡа, Ҡыҙылташ тауҙары, ә икенсе яғынан дуға һымаҡ уратып алған Ҡаршытау, Буҙанбей, Ҡыҙҙар тауы һуҙыла. Шул ике арала Үрге Таш, Кинйәбай, Һәргәй ауылдары урынлашҡан. *(Ғ. Дәүләтовтан)*

► Донъяла предметтар шул тиклем күп, уларҙың иге-сиге юҡ. Мәҫәлән: тауҙар, йылғалар, урмандар, үҫемлектәр, кешеләр, хайуандар, төрлө йәнлектәр, китаптар, йорттар, заводтар... Уларҙың һәр береһе тураһында беҙ *был – ағас, был – урман, был – таш, тау* тип әйтә алабыҙ. *Ағас, урман, таш, тау* – **уртаҡлыҡ исемдәр.**

Ниндәй ҙә булһа берәй предметты уға оҡшаш башҡа предметтарҙан айырып йөрөтөү өсөн бирелгән атамалар ҙа була.

**Яңғыҙлыҡ исемдәр** тип айырым предметтарҙың атамаларына әйтәләр. Һәр йылғаның, географик урындың, кешенең һәм башҡаларҙың үҙҙәренә генә бирелгән исемдәре була: *Урал* (тауҙар теҙмәһе, йылға), *Ағиҙел, Ҡариҙел, Оло Эйек, Кесе Эйек* (йылғалар), *Ирәмәл, Ирәндек* (тау һырттары), *Тамара Ғәниева, Рәми Ғарипов, Рәшит Назаров* (кеше исемдәре, фамилиялары); *«Һабантуй», «Иман» – Тайфур Сәғитовтың романдары.*

Яңғыҙлыҡ исемдәргә шулай уҡ тарихи ваҡиғалар, картиналар, кинофильмдар, спектаклдәр, завод-фабрикаларҙың атамалары, хайуандарға бирелгән ҡушаматтар ҡарай: *Етегән, Ҡояш, Ер, Өлкәр* кеүек планета һәм йондоҙ атамалары ла яңғыҙлыҡ исемдәргә инә.

★ **218.** Башҡортостан картаһын (178-се бит) иғтибар менән ҡарағыҙ. Унан район исемдәрен алфавит буйынса яҙып алығыҙ. Аҙаҡ Башҡортостандағы ҡала, йылға атамаларын, үҙегеҙҙең районығыҙҙағы ауыл исемдәрен өҫтәп яҙығыҙ.

**219.** Һеҙгә башҡа бер республикалағы туғандарығыҙ килгән, ти. Уларҙың һеҙҙең йәштәге улы (ҡыҙы) бар. Ул һинән Башҡортостандың үткәне һәм хәҙергеһе тураһында һораша. Диалог шул турала. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ.


Яңауыл
Тәтешле
Асҡын
Мәсетле
Краснокама
Ҡалтасы
Балтас
Борай
Ҡариҙел
Балаҡатай
Мишкә
Дыуан
Илеш
Дүртөйлө
Нуриман
Салауат
Ҡыйғы
Бөрө
Баҡалы
Саҡмағош
Благовещен
Кушнаренко
Шаран
Иглин
Өфө
Благовар
Өфө
Туймазы
Бүздәк
Архангел
Шишмә
Ҡырмыҫҡалы
Учалы
Дәүләкән
Йәрмә-
кәй
Бәләбәй
Ауырғазы
Ғафури
Белорет
Әлшәй
Бишбү-
ләк
Стәрлетамаҡ
Миәкә
Ишембай
Стәрлебаш
Әбйәлил
Бөрйән
Федоровка
Мәләүез
Күгәрсен
Көйөргәҙе
Баймаҡ
Йылайыр
Хәйбулла
Ейәнсура

– Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы нисек атала?

– Беҙҙең Башҡортостандың баш ҡалаһы – Өфө.

– Стәрлетамаҡ ҡалаһының исеме ҡайҙан алынған?

– Ҡала өс йылға – Стәрле, Ашҡаҙар, Ағиҙел араһында Стәрле йылғаһының тамағында урынлашҡан, уның исеме шунан.

– Башҡортостандың ниндәй наградалары бар?

– Башҡортостан – дүрт орденлы республика.

– Өфө ҡалаһындағы Салауат Юлаев һәйкәленең авторы кем?

– Һәйкәлдең авторы – скульптор Сосланбәк Тавасиев, архитекторы – Исмәғил Ғәйнетдинов.

– Республикабыҙҙағы иң бейек тау түбәләре нисек атала?

– Ямантау һәм Ирәмәл.

– Башҡортостанда ниндәй ял йорто, шифаханалар бар?

– Башҡортостанда «Йоматау», «Янғантау», «Красноусол», «Яҡтыкүл», «Шафран», «Чехов» шифаханалары бар.

– Әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре өсөн республика премиялары бармы?

– Эйе, бар. Әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә Салауат Юлаев һәм Шәйехзада Бабич исемендәге премиялар бирелә.

**220.** Тексты уҡығыҙ. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табып, Рәсәй картаһынан күрһәтегеҙ. Башҡортостан ҡайҙа урынлашҡан?

ЕВРОПА – АЗИЯ

Рәсәйҙең урта өлөшөндә урынлашҡан Өфө ҡалаһынан Европаға ла, Азияға ла төрлө транспорт менән барып була. Самолёттар пассажирҙарҙы илебеҙҙең төрлө ҡалаларына ташый.

Пароход менән Ағиҙелдән Кама, Волга йылғаларына сығаһың. Унан Мәскәү, Санкт-Петербург, Волгоград ҡалаларына барып була. Ял итеүселәр пароходта Каспий һәм Ҡара диңгеҙгә тиклем йөҙәләр.

Автобустар кешеләрҙе Өфөнән Һамар, Ырымбур, Пермь, Екатеринбург, Силәбе кеүек ҙур ҡалаларға өҙлөкһөҙ ташып тора.

Европанан Азияға, Азиянан Европаға елдереүсе поездар Өфө, Дим, Шишмә станциялары аша үтә.

Әгәр берәй ергә барырға булһаң, рәхим ит: һине транспорт теләгән ереңә илтеп ҡуйыр. *(Календарҙан)*

● 1. Һеҙ Рәсәйҙең ниндәй ҡалаларында булғанығыҙ бар? Унда ниндәй иҫтәлекле урындар күрҙегеҙ?

2. 2015 йылда Башҡортостанда ниндәй мөһим ваҡиға үтте? Баш ҡалабыҙ Өфөлә ниндәй үҙгәрештәр булды? Башҡортостанға килгән ҡунаҡтарға, туристарға тыуған еребеҙҙең ниндәй матур урындарын күрһәтер инегеҙ? Башҡортостанда туризмды үҫтереү маҡсатында үҙегеҙҙең проектығыҙҙы төҙөгөҙ.

3. ШОС һәм БРИКС илдәре тураһында нимә беләһегеҙ? Ул илдәр тураһында төркөмләп белешмә әҙерләгеҙ.

**221.** Ғаризаны яҙып алығыҙ. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ. Бер нисә һүҙҙән торған яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышындағы үҙенсәлектәрҙе лә абайлағыҙ. Һығымта сығарығыҙ.

Етеболаҡ урта мәктәбе директоры
А. Ә. Хөсәйеноваға
мәктәптең саңғысылар түңәрәге етәксеһе
И. А. Айбулатовтан

## ҒАРИЗА

Райондың Советтар Союзы Геройы С. Суфиянов исемендәге кубок өсөн саңғысылар ярышына Уралов Илшат, Кәримов Азамат, Әкрәмов Айнур,

Вәлишин Юныс, Әнүәрова Зөлфирә, Уралова Зәлифә ҡатнашлығындағы команданы алып барырға рөхсәт итеүегеҙҙе һорайым.

И. Айбулатов
12.02.2016

► Яңғыҙлыҡ исемдәр ҙур хәреф менән башлап яҙыла.

Китап, журнал, газета, картина, кино, спектакль, карап, төрлө предприятие исемдәре ҙур хәреф менән башланып, тырнаҡтар эсенә алынып яҙыла. Мәҫәлән: *«Башҡортостан», «Йәншишмә» газеталары, «Аманат», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдары, «Сыңрау торна» балеты, «Шәүрә» операһы, «Ҡарағол» спектакле, «Муса Гәрәев» теплоходы, «Рекорд» телевизоры, «Салауат Юлаев» кинофильмы.*

**222.** Түбәндәге һорауҙарға яуап бирегеҙ. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуйып, һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

*скýльптор*
*áвтор*
*сәнғәт*
*óрден*

1. Һеҙҙең рай..нға ниндәй ауылдар ҡарай?
2. Ғаиләгеҙҙә ниндәй газеталар, журнал..ар уҡыйҙар?
3. Һуңғы йылдарҙа ниндәй кинофильм..ар нығыраҡ оҡшаны?
4. Быйыл ниндәй спектак..дәрҙе ҡаранығыҙ?
5. Уларға һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ нисек?
6. Телев..дение тапшырыуҙарынан ҡайһы программаны йыш ҡарайһығыҙ? Ул тапшырыу ни яғы менән һеҙгә оҡшай?
7. Башҡорт яҙыусыларының ниндәй әҫәрҙәрен яратып уҡыйһығыҙ?

**223.** Тексты уҡығыҙ. Исем бирегеҙ. Яңғыҙлыҡ исемдәр осраған һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙе күсерегеҙ, нисә һүҙҙән торғанлығын билдәләгеҙ.

Ҡылыскүл эргәһендәге бейек түбәне Күкрәктау тип йөрөтәләр. Уның төньяҡ битләүен ҡуйы ҡарағай урманы ҡаплаған, ә көньяҡ битләүе тап-таҡыр сиҙәмлек. Бер ҡараһаң, ул яртылаш сәсе алынған малай башына оҡшап ҡуя. Был яҡта ул шулай: ағастар тауҙарҙың төньяҡ итәктәренә һыйынып үҫәләр. Әйтерһең, улар тауҙарҙы һалҡын елдәрҙән ышыҡлар өсөн шулай итәләр.

Күкрәктау[2] башына менеп ҡараһаң, күк сите әллә ҡайҙа алыҫҡа күсеп китә. Түбәндә, Яйыҡ буйында, ултырған Тирмә ауылының йорттары умарталыҡтағы умарталар саҡлы ғына күренә.

Ә Урал итәгендә көтөүселәр яҡҡан усаҡтың төтөнө Шәрифулла төрөпкәһенән сыҡҡан төтөн хәтле генә. Тик әллә ҡайҙа ятҡан Кирәмәт кенә аяҙ көндәрҙә ҡараған һайын яҡынайған һымаҡ күренә. Тулҡын-тулҡын булып күгәреп ятҡан бүтән түбәләр араһында уның ғына башы ҡояшта ялтырап ағарып тора. Йәйге селләгә тиклем унда ҡар ята. *(М. Кәрим)*

● 1. Ҡушма һүҙҙәрҙе табып күсерегеҙ, нисә һүҙҙән торғанын күрһәтегеҙ.

2. Үҙегеҙҙең яҡтағы ер-һыу атамаларын яҙығыҙ.

▶ 1. Төп атамаға ингән бөтә һүҙҙәр ҙә ҡушылып яҙыла: *Баламйәбеш* (тау), *Биштәкә* (ауыл), *Һыйырғасҡан* (тау), *Алайғыр, Атйетәр* (ауыл), *Бурлыҡашҡа* һ. б.

2. Үҙ аллы ике һүҙҙән ҡушарлап яһалған ер-һыу атамаларының өлөшө ҙур хәреф менән һыҙыҡса аша яҙыла: *Ҡолтай-Ҡаран, Еҙем-Ҡаран, Ҡыпсаҡ-Асҡар, Ҡаңны-Төркәй* (ауылдар) һ. б.

3. *Оло, бәләкәй, кесе, беренсе, иҫке, яңы, үрге, түбәнге, арғы, бирге, икенсе, ҙур* кеүек аныҡлаусылар ҙур хәреф менән айырым яҙылалар: *Оло Һырт, Кесе Көйөргәҙе, Ҙур Ҡыҙыл, Кесе Ҡыҙыл, Беренсе Дәүләтҡол, Икенсе Дәүләтҡол, Арғы Етеболаҡ, Иҫке Муса, Яңы Муса, Үрге Һаҙ, Түбәнге Һаҙ.*

4. Төп исемгә эйәреп килгән *тау, йылға, урам* кеүек һүҙҙәр бәләкәй хәреф менән яҙыла: *Урал тауы, Әй урамы, Дим йылғаһы, Октябрь проспекты* һ. б. Ләкин шул уҡ һүҙҙәрҙең эйәлек ялғауы булмаһа, ҡушылып яҙылалар: *Арҡылыйылға, Арҡылытау, Ямантау, Яҡтыкүл, Аҡкүл, Ағиҙел* һ. б.

5. Төрлө ойошма атамалары һәм башҡа яңғыҙлыҡ исемдәрҙең төп өлөшө генә ҙур хәреф менән яҙыла. *Өфө дәүләт сәнғәт академияһы, Стәрлетамаҡ аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы, Белорет металлургия комбинаты, Дәүләкән район мәғариф идаралығы* һ. б.

**224.** Топонимдар һүҙлегенән *оло, кесе, иҫке, яңы, үрге, түбәнге* һүҙҙәре менән башланған бишәр ер-һыу атамаларын, ауыл исемдәрен яҙып алығыҙ.

**225.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Теманы һәм төп фекерҙе әйтегеҙ. Шиғырға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдереп, һығымта сығарығыҙ.

БАШҠОРТОСТАН

Ҡырлас тауҙар иле Башҡортостан –
Ата-бабаларҙың баш йорто,
Баш йортҡайын яҡлап яуға сапҡан
Күк Уралдың ҡыйыу башҡорто.

Сал бөркөттәр осҡан Башҡортостан –
Салауаттай ирҙәр төйәге,
Нисә быуын яугир ҡаһармандар
Россияның булды терәге.

Мең ғазаптар йотҡан Башҡортостан –
Ҡанһырап та баҡҡан ергенәм,
Ни күрһәң дә, ниҙәр кисерһәң дә,
Бөгөлмә һин, Тыуған илгенәм.

Башҡортостан беҙҙең азатлыҡтың,
Берҙәмлектең ныҡлы ҡалҡаны,
Уралдағы барлыҡ милләттәргә
Һин, атайсал, дуҫлыҡ Ватаны.

*(А. Игебаев)*

● 1. Шиғыр юлдарынан синонимдарҙы табып яҙығыҙ.

**Ту** 2. «Башҡортостан – тыуған төйәгем» темаһына проект эше эшләгеҙ.

**Исемдәрҙең яһалышы**

Исемдәр яһалыштары яғынан биш төргә бүленә: 1) тамыр исемдәр; 2) яһалма исемдәр; 3) ҡушма исемдәр; 4) парлы исемдәр; 5) ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәр.

*мәрхәмәт*
*бәрәкәт*
*ҡот осҡос*
*бөрлөгән*

► Тамыр көйөнсә лә тулы мәғәнә аңлатып килгән исемдәрҙе **тамыр исемдәр** тип йөрөтәләр. Мәҫәлән: *ат, һыйыр, мал, кеше, ут, ял, юл, бау, ҡар, ҡыҙ, ҡыр* һ. б.

**Ту** **226.** Ф. Кащеевтың «Бабай» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Бабай ҡайҙа һүрәтләнгән? Һеҙ уны ҡайҙан белдегеҙ? Кейгән кейемен, нисек ултырғанын һүрәтләгеҙ. Йөҙө, ҡарашы, ҡулдары нисек һүрәтләнгән? Улар бабай тураһында ни һөйләй? «Бабай» исемле инша яҙығыҙ.

## § 38. Ялғауҙар ҡушыу юлы менән исем яһалыу

★ Бирелгән исем һәм ҡылымдарға ялғауҙар ҡушып, яңы һүҙҙәр яһағыҙ. Улар ниндәй исемдәр тип атала? Ялғау ҡушҡас, ниндәй мәғәнәле исем яһалғанын әйтегеҙ. Ҡағиҙә сығарығыҙ.

Ҡарауыл, эш, юл, ауыл, яҡ, заман, уйын, төйөн, аш, көн; эл, ас, йыш, быс, бел, күтәр, баҫ, ҡырҡ.

**227.** Түбәндә *-сы, -се* яһаусы ялғауы ҡушылып яһалған һүҙҙәр теҙмәһе бирелә. Шуларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ, һәр береһе менән һүҙбәйләнеш яһағыҙ.

1. Комбайнсы, эшсе, ташсы, тракторсы, нефтсе, докладсы, урмансы, ҡарауылсы.
2. Мәғрифәтсе.
3. Алдаҡсы, теләнсе, ғәйбәтсе, ошаҡсы, хыянатсы, хәйерсе.
4. Фетнәселәр, тәжрибәселәр, ярышсылар, уйынсылар.
5. Хужалыҡсы, ойоштороусы (уңған ойоштороусы, тәжрибәле ойоштороусы).

**228.** 1. Өҙөктө иғтибар менән уҡығыҙ. *Сәсән* һүҙенең төп мәғәнәһен әйтегеҙ. Сәсәндең эштәренә үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы һөйләгеҙ, һуңынан яҙығыҙ. 2. Ялғауҙар ҡушылып яһалған исемдәрҙе табығыҙ, уларҙың яһалышында ниндәй яһаусы ялғауҙар ҡатнашҡанын һанап бирегеҙ.

«Шуны ла әйтәйем әле, уландар: ир-егеттең егетлеге ҡоро ғәйрәттә, таһыллыҡта ғына булмайынса, башында булыр аҡылда, күңелендә ятыр инсафлыҡта ла. Ирмен тигән ир кеше ил-йорт йолаларын да йолалай белер, ололарҙы ололоҡлар, ата-бабаларының изге эшенә, оло тарихына аманат итеп ҡарар. Тамағы туҡ, өҫтө бөтөнгә генә ҡәнәғәт

булып, бүтәненә аңшай булмаç. Бөгөнгөһөн дә, үткәнен дә ҡәҙерләй белер, киләсәген дә онотмаç».

Артабан Айҙар сәсән тантаналы бер тынлыҡ эсендә һөйләр тарихын башлап ебәрҙе: «Унынсы быуатта башҡорттар, ҡәбилә-түбә булып, ҡаралтылы ауылдарҙа йәшәгәндәр. Малсылыҡ, һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ[2], игенселек менән шөғөлләнгәндәр.

Шулай бер заман аҡ батша Ҡазан ҡалаһын алғас, башҡорт халҡы үҙ аҡһаҡалдарын аҡ батшаға баш һалырға ебәргән. Унан башҡорттар үҙҙәре хужа икәнлеккә яҙыу алғандар. Шунан һуң ғына башҡорттар бер аҙ тынныслыҡ алғандар».
*(Ғ. Хөсәйеновтан)*

● Өҙөктәге яһалма исемдәр күберәк ниндәй ялғау ярҙамында яһалған?

**229.** Бирелгән исемдәргә яһаусы ялғауҙар ҡушып, тәүҙә һөнәр эйәһе исемдәрен, артабан ҡайһыларынан һөнәр атамаларын, урынды белдергән исемдәр яһағыҙ.

Умарта, ҡорт, иген, юл, гармун, урман, баçыу, йыр, итек, һауын, бейеү, ҡыл, ҡоротҡос, ишкәк, яҙыу, хәбәр.

Өлгө: *мал – мал-сы, мал – мал-сы-лыҡ.*

► Башҡорт телендә исемдәр түбәндәге ялғауҙар менән яһалалар: *-сы/-се, -со/-сө; -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк; -даш/-дәш, -ҙаш/-ҙәш, -таш/-тәш, -лаш/-ләш; -са/-сә; -ма/-мә; -ыс/-ес, -ос/-өс; -ғыс/-гес, -ҡыс/-кес, -ғос/-гөс, -ҡос/-көс; -ҡы/-ке,*

---

[2] Солоҡсолоҡ – үçкән ағас ҡыуышында яһалған солоҡ умартала бал ҡорто аçрау һөнәре.

*-ғы/-ге; -аҡ/-әк; -ом/-өм, -ым/-ем* һ. б. Мәҫәлән: ***итексе, һауынсы; бишлек; ауылдаш, юлдаш, фекерҙәш, замандаш; киҫәксә, һыҙыҡса; кәңәшмә; һөйөнөс, үтенес; киҫкес, төйгөс; төҙөлөш; ҡыуғын, сапҡын; бешкәк, ишкәк; йыйырсыҡ; төшөм; ҡарымта*** һ. б.

**230.** 1. Уҡығыҙ. Яһалма исемдәрҙе табығыҙ, уларҙы өҙөктән айырып алып, тамыр йәки ялғауҙарға тарҡатып, һәр ялғауҙан һуң һыҙыҡса ҡуйып яҙығыҙ. 2. Өҙөктөң йөкмәткеһенә ҡарап, уға исем бирегеҙ. Ҡортсолоҡ тураһында белгән һүҙҙәрегеҙҙе теҙеп яҙығыҙ.

Ҡортсолоҡ – бик ҡыҙыҡлы, файҙалы һәм тырышлыҡ талап иткән эштәрҙән һанала. Беҙҙең туған республика шарттары тәбиғи аҙыҡҡа бай булғанға, умартасылыҡ баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Башҡорт балы донъя күргәҙмәләрендә өс тапҡыр алтын миҙал менән бүләкләнде. Бал ҡорттарының файҙаһы бал һәм балауыҙ менән генә сикләнмәй. Улар сәскәле үҫемлектәрҙе һеркәләндерә, шуның менән ауыл хужалығы культураларының да уңышын күтәрә.

Бал ҡорттарын өйрәнеп, беҙ тәбиғәт тураһындағы белемебеҙҙе киңәйтәбеҙ. Ҡортсолоҡ, йәғни солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, менән шөғөлләнеү кешелә күҙәтеүсәнлек, йыйнаҡлыҡ, эш һөйөүсәнлек тәрбиәләй. Ләкин ҡортсолоҡ ябай ғына эш түгел, уның менән шөғөлләнеү өсөн белем һәм практик күнекмәләр талап ителә. Шуларҙы булдырғанда ғына ысын умартасы булырға мөмкин.

● Умартасылыҡ солоҡсолоҡтан нимәһе менән айырыла? Шул турала һөйләгеҙ.

**231.** Тексты тасуири итеп уҡығыҙ. Күп нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.

Бал ҡорто ме..әрләгән сәскәнән хуш е..ле бал йыйыуы менән кешеләргә борондан билдәле.

Бал татлы а..ыҡ ҡына түгел, ә унда организмға кәрәк булған алтмыштан артыҡ шифалы матдә бар. Тын юлдарына һал..ын тейгәндә лә, күп ҡан ю..алтҡанда ла, һы..ланғанда ла бал алыштырғыһыҙ дауа булып һанала. Бал ҡорттарының а..ыуы, балауыҙы, инә ҡорт һ..тө бик шифалы.

Татлы һәм шифалы булыуы менән башҡорт балы сит илд..рҙә лә билдәле. Донъяның төрлө ҡалаларында үткәрелгән халыҡ-ара йәрминк..ләрҙә, күргә..мәләрҙә башҡорт балы һәр ваҡыт иң юғары наградаларға лайыҡ булып тора. *(Г. Базекиндан)*

● 1. Башҡорт балы тураһында нимә беләһегеҙ? Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда ҡортсолоҡто үҫтереү буйынса нимәләр эшләнелә?

2. Ҡортсолоҡ, умартасылыҡ, солоҡсолоҡ менән бәйле һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, аңлатмалы һүҙлекте файҙаланып, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

**232.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Йөкмәткеһен башҡортса һөйләгеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе башҡортсаға тәржемә итегеҙ. Ул һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, ялғауҙарын табып күрһәтегеҙ.

## РАБОЧИЕ ПЧЁЛЫ

У **рабочих** пчёл дел очень много. Труд их строго разделён.

Пчёлы-разведчицы ранним утром вылетают на поиски богатых нектаром цветов. Обнаружив источники, где можно поживиться, разведчицы возвращаются домой. О своей **находке** они сообщают товарищам замысловатым танцем. Если цветущие растения находятся близко, пчёлы движутся по

кругу. Если же далеко, то **танцоры** выделывают в воздухе движения, похожие на восьмёрки.

Пчёлы-сборщицы, разобравшись в танцевальном «сообщении», устремляются вслед за разведчицами к обнаруженной сладкой **добыче**.

Вот пчёлка опустилась на долгожданный цветок. Своим тоненьким хоботком она начинает высасывать из глубины сок – нектар, заполняя им свой медовый зобик для транспортировки в улей. Зобик пчелы вмещает столько нектара, сколько весит само насекомое.

На задних лапках у пчелы есть корзиночки, в которые она складывает пыльцу с цветов. Пригодится потом покушать! *(Р. Гайсина)*

## § 39. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһалыу

**233.** Ике бағанала бирелгән һүҙҙәрҙән исемдәр яһап яҙығыҙ. Улар ниндәй исемдәр тип атала? Ул исемдәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм яҙылышын аңлатығыҙ.

| | |
|---|---|
| аҡ, көн, алма,<br>йәш, гөл, ялан,<br>ҡул, ил | тырнаҡ, сыбар,<br>үҫмер, һылыу,<br>аяҡ, күреш,<br>сарлаҡ, бәҙәр,<br>яулыҡ, нур |

● *Баш, яулыҡ, ағас* һүҙҙәре менән яһалған ҡушма исемдәрҙе яҙып алығыҙ.

▶ **Ҡушма исемдәр**, ике һәм унан да күберәк тамыр һүҙҙәрҙең ҡушылыуынан яһалып, бер генә предмет атап киләләр: *Аҡбуҙат* < *аҡ буҙ-ат; Аҡбуҙ* < *аҡ-буҙ; ҡулъяҙма* < *ҡул-яҙма, тәүтормош* < *тәү-тормош, аҡҡош* < *аҡ-ҡош, балғалаҡ* < *бал-ҡалаҡ, аръяҡ* < *арғы-яҡ* һ. б. Был төр ҡушма исемдәр һәр саҡ ҡушылып яҙылалар.

**234.** + билдәһе урынына *ь, ъ* айырыу билдәләренең тейешлеһен ҡуйып, исемдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

Ҡул+яҙма, юл+яҙма, ал+япҡыс, аш+яулыҡ, көн+яҡ, төн+яҡ, ар+яҡ.

- Һәр ҡушма исемде ҡулланып, икешәр һүҙбәйләнеш яҙығыҙ, дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

**235.** Уҡығыҙ. Күсерегеҙ. Яңғыҙлыҡ ҡушма исемдәрҙе табығыҙ, күсереп алығыҙ. Ниндәй һүҙҙәрҙән яһалғандарын күрһәтегеҙ.

Һирәк һуғылам хәҙер Аҙнағолома. Ҡайтҡас та Ҡыяюл яланына йүгерәм. Ҙур түгел ул, бейек тауҙың һөҙәк көн битләүендә ике кәбәнлек бесән ала торған сабынлыҡ. Уң яҡта, аҫта, ҡуйы ботаҡтар араһынан тәңкә-тәңкә булып көмөш һыулы Ағиҙел ялтырай. Һул яҡта, юғарыла, урман шырлығы һәм һөҙәк булһа ла офоҡҡа уҡ барып тоташҡан Көрәнайғыр тауы. Уртала – ат һәм арба тәгәрмәстәре яһаған өс йомро һуҡмаҡ... *(Т. Сәғитовтан)*

- *Гөл, ил* һүҙҙәрен индереп, кеше исемдәре яҙығыҙ.

**236.** Төркөмләп бирелгән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Уларҙың яһалышын тикшерегеҙ, яһалышындағы фонетик үҙгәрештәрҙе төшөндөрөгөҙ, һуңынан яҙып алығыҙ.

1. Ағалтын, көнсығыш, Ағиҙел, Стәрлетамаҡ, көнбағыш, ҡырсынташ, ҡыҙылғанат, ҡыҙылгүҙ (балыҡ), үҙҡиммәт, өҫҡорма, быйыл, бөгөн, көнбайыш, үҙешмәкәр.
2. Һарут, күҙлут, ҡарағанат, алабута, йыланҡараҡ (шеш).
3. Сынаяҡ, өсаяҡ, этаяҡ, ҡашығаяҡ, ағасаяҡ.

● 1. *Көнбайыш, йыланҡараҡ, үҙҡиммәт* ҡушма исемдәрендәге *нб, нк, ҙк* ҡуш тартынҡыларының дөрөҫ әйтелешен аңлатығыҙ.

2. Икенсе төркөмдәге исемдәрҙе тамыр исемдәргә тарҡатығыҙ, уларҙың ниндәй һүҙҙәрҙе ҡушып яһалғанын әйтегеҙ.

**237.** Әкиәт өҙөгөн дөрөҫ тауыш менән уҡып, диктофонға яҙығыҙ. Һуңынан яҙҙырғанығыҙҙы тыңлағыҙ. Ҡушма исемдәрҙең нисә тамырҙан тороуын асыҡлағыҙ. Һәр ҡушма исемдең әйтелешенә иғтибар итегеҙ.

Урал Аҡбуҙатҡа иҫе китеп ҡарап торҙо-торҙо ла әкрен генә янына барҙы, ти. Аҡбуҙат бер боролоп ҡараны ла ятһынмай-нитмәй тик торҙо, ти. Шунан йәһәт кенә Аҡбуҙҙы менергә булғайны, Аҡбуҙ Уралды бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти. Аҡбуҙ Уралды өс тапҡыр шулай сойорғотоп торҙо, ти. Унан инде Аҡбуҙ Уралды баш тартҡан яҡҡа ҡарай елдертеп алып китте, ти.

Урал, артабан ҡайҙа барырға тип торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәгән бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп ҡала. Ҡыҙ илай-илай ҡайғыһын һөйләп бирә. Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы дейеүҙәр үҙҙәренә ҡол иткән икән. Ҡарағаш дейеүҙең балаларына уйнарға иртәнән кискә саҡлы йылға буйынан ҡырсынташ ташый икән.

Урал батыр үҙенең Аҡбуҙын менеп, алдына Ҡарағашты ултыртып ала ла Тереһыуҙы ташлап китеп тә бара. *(«Урал батыр» әкиәтенән)*

● 1. *Ҡарағаш* исеменең ниндәй һүҙҙәрҙән ҡушылып яһалғанын әйтегеҙ. Өндәрҙең үҙгәрешен төшөндөрөгөҙ. *Аҡбуҙат* исемендә нисә тамыр һүҙ бар?

2. *Иҫе китеп, янына барҙы, бер ҡыҙ, уҙып барғанын* һүҙбәйләнештәрен дөрөҫ итеп әйтегеҙ. Ул һүҙбәйләнештәрҙә урталағы өндәрҙең ниндәй үҙгәреш кисереүҙәрен һөйләгеҙ.

**238.** Һүҙҙәрҙе башҡортсаға тәржемә итегеҙ. Уларҙың башҡортса дөрөҫ яҙылышын һәм әйтелешен аңлатығыҙ.

Север, юг, запад, восток, головоломка, ледокол, треугольник, полуостров, двухстволка, чайная ложка, яблоня, подсолнечник, жаворонок.

## § 40. Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу

★ Ике бағанала бирелгән һүҙҙәрҙән ҡушма исем яһағыҙ. Улар ниндәй исем тип атала? Ул исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ. Ҡағиҙә сығарығыҙ.

| | |
|---|---|
| һауыт, аш, мал, әбей, ҡарт, егет, аҙыҡ, ир, ағай, йомош, йәш, көньяҡ, ағас, йәбер | һыу, һаба, тыуар, ҡоро, һәбей, елән, түлек, ат, юл, эне, елкенсәк, таш, көнсығыш, золом |

**239.** Парлы исемдәрҙең мәғәнәләрен һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ. Билдәләнгән парлы исемдәрҙе индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Табаҡ-һауыт, **тай-тулаҡ,** талаш-ҡысҡырыш, таныш-белеш, тап-топ, тау-таш, тау-урман, тауыш-ғауға, тауыҡ-себеш, тел-теш, **теш-тырнаҡ,** тимер-томор, **тиң-тош** (йәштәштәр), тире-яры, тирә-йүн, **тирә-яҡ,** тоҙ-моҙ, тормош-көнкүреш, **төбө-тамыры,** туған-ҡәрҙәш, **туған-тыумаса.**

► Парлы исемдәрҙең араһына һыҙыҡса ҡуйыла: *бала-саға, йорт-ҡура, килем-китем, аш-һыу, тимер-томор, нәҫел-нәсәп.*

► Парлы исемдәр күплек мәғәнәһен белдерәләр: *кейем-һалым, туған-тыумаса, соҡор-саҡыр.*

► **Парлы исемдәр** ҡапма-ҡаршы мәғәнәле, үҙ-ара синоним исемдәрҙең ҡабатланыуынан, шулай уҡ рифмалашыуҙы булдырған һүҙҙәрҙең эргәләш килеүе менән яһалалар: *килем-китем* (ҡапма-ҡаршы мәғәнәле), *йорт-ҡура* (синоним исемдәр), *соҡор-саҡыр* (икенсеһе рифмалаштырыусы).

**240.** «Башҡорт теленең һүҙлеге»нән 15 парлы исем һайлап алып яҙығыҙ һәм уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

**241.** Өҙөктө иғтибар менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Уны тағы ла бәләкәй өлөштәргә бүлегеҙ, һәр бүлеккә, йөкмәткеһенән сығып, исем бирегеҙ. Шул исемдәрҙе план
**ТҮ** урынына алып, өҙөктө тулыландырып, инша-изложение итеп яҙығыҙ.

Милли аш-һыу башҡорттарҙа малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Туҡланыуҙа һөт һәм һөттән яһалған төрлө ризыҡтар мөһим аҙыҡ булған. Һөттө айыртып, ҡаймаҡ, ҡаймаҡтан май яһағандар. Ҡышҡылыҡҡа сейә майлағандар. Айыртылған һөттән ҡатыҡ ойотҡандар. Уны күп итеп йыйып ҡайнатып, ҡорот эшләгәндәр. Ҡатыҡтан йәй көндәрендә айран яһап эскәндәр. Ул һыуһынды ҡандыра.

Башҡорттарҙың милли аш-һыуында итле ризыҡтар ҙур урын тотҡан. Иттән тултырма, ҡаҙы эшләгәндәр, бишбармаҡ, һалма бешергәндәр. Итле аштан һуң ҡоротлап һурпа эскәндәр.

Борон-борондан башҡорттарҙың көндәлек ризығында иген аҙыҡтары урын алған. Ҡурмас, талҡан эшләгәндәр, бауырһаҡ, ҡоймаҡ, күмәс һәм башҡа ризыҡтар бешергәндәр. *(«Башҡорт халыҡ аштары» китабынан)*

● *Күмәс, ҡурмас, ҡоймаҡ, талҡан, һалма* исемдәренең мәғәнәләрен һүҙлектән ҡарап аңлатығыҙ.

## § 41. Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу

★ Бирелгән тексты уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләп бирегеҙ, төп фекерен билдәләгеҙ. Бәйләү юлы менән яһалған исемдәрҙе күрһәтегеҙ. Уларҙың нисәшәр һүҙҙән торғанына ла иғтибар итегеҙ.

1995 йылда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында Берлин университеты профессоры Маргарет Эрсен-Раш башҡортса сығыш яһап, бик күптәрҙе хайран ҡалдырҙы. Үҙе тураһында саф башҡортса ошоларҙы һөйләне:

– Мин Германиянан килдем. Үҙем Берлиндағы Азат университетының Тюркология институтында эшләйем. Унда төрөк, башҡорт, татар, әзербайжан телдәрен уҡытам.

Башҡорт теле менән мин 1992 йылда ҡыҙыҡһына башланым. Ул йылда мин Өфөгә Башҡорт дәүләт педагогия институтына төрөк телен уҡытырға килгәйнем. Дәрестәр күп булды, башҡорт телен өйрәнергә ваҡыт әҙ ҡалды. Германияға ҡайтҡас, башҡорт телен етди өйрәнә башланым. Бер нисә студентым башҡорт теле, йолалары, музыкаһы, бейеүе менән бик ҡыҙыҡһынды. Улар 1993–1994 йылдарҙа Башҡортостанда булды.

Берлиндан тыш, мин Майнц университетында етеҙ ысул менән башҡорт телен уҡыттым. Шундағы студенттарымдың береһе Михаэль Гесс хәҙер Майнцта үҙе башҡорт телен уҡыта. Ул тиҫтәләгән башҡорт әкиәттәрен немецсаға тәржемә итте. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

► **Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән** яһалған исемдәргә үҫемлек, ҡош-ҡорт, төрлө предметтарҙың, ойошмаларҙың, дәрәжәләрҙең атамалары инә: *айыу көпшәһе, тимер юл, ҡурай еләге, ер еләге, ҡайын еләге, директор урынбаҫары* һ. б.

**242.** Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙән һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән яһалған исемдәрҙе һәм ирекле һүҙбәйләнештәрҙе төркөмләп яҙып алығыҙ.

Ҡурай еләге – ҡурай сәскәһе; күк шыршы – күк сепрәк; ҡара болот – ҡара ҡарға; ала һыйыр – ала ҡарға; һуҡыр кесерткән – һуҡыр кеше; таш күмер – таш стена; ҡара ҡурғаш – ҡара яулыҡ; аҡ ҡурғаш – аҡ ҡағыҙ; бесәй табаны – итек табаны; күгәрсен күҙе (сәскә) – энә күҙе.

▶ **Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән** яһалған исемдәргә төрлө фирҡә, ойошма һ. б. атамалары инә. Мәҫәлән: *профком* (профсоюз комитеты), *универмаг* (универсаль магазин), *телеүҙәк* (телевизион үҙәк).

**243.** Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән яһалған исемдәрҙе ҡыҫҡартып, дәфтәрегеҙгә яҙып алығыҙ. Башта ул ҡыҫҡартмаларҙы күмәкләп таҡтала тикшерегеҙ.

Драма түңәрәге, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы, Америка Ҡушма Штаттары, Башҡортостан Республикаһы, Мораҡ халыҡ театры, спорт залы, Башҡорт дәүләт университеты, Ҡытай Халыҡ Республикаһы.

**244.** Ҡыҫҡартылып бирелгән ил һәм ойошма исемдәрен оҙонайтып яҙығыҙ. Уларҙың яҙылышын аңлатығыҙ.

БМО, РФ, БР, БДБ, БДПУ, универмаг, профком.

**245.** 1. Тыуған Уралға маҡтауҙы иғтибар менән уҡығыҙ. Уның төп фекерен билдәләгеҙ. Тотош тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлегеҙ. Һәр өлөштөң йөкмәткеһен һөйләгеҙ, уға исем бирегеҙ. Сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы күрһәтегеҙ.
2. Ҡушма һәм парлы исемдәрҙе табығыҙ, уларҙың дөрөҫ яҙылышына иғтибар итегеҙ.

Аҡыҡ ҡашлы эйәренә таянып, Йәноҙаҡ уйға талған. Уның эргәһенә дуҫ-иштәре, тиң-тоштары

йыйыла. Илдең аҡыллы ҡарттары килә. Йөҙйәшәр олатаһының тапҡыр һүҙе:

– Күрәһеңме, Йәноҙаҡ балам, дүрт аяҡлы хайуан да, ҡанатлы ҡоштар ҙа ихтыяры менән тыуған төйәген ташларға риза түгел! Тыуған төйәген ташламаған өсөн Аҡһаҡ ҡолаңа уҡ тоҫҡаның. Уҡты уны һунарҙа – йәнлеккә, яуҙа дошманға аталар. Дуҫыңа, яуҙаш юлдашыңа уҡ атмайҙар, балам! – тигән. Йәнә лә: – Бына һинең тыуған илең – күк Уралың! Ана эскән һыуың – Бишҡолоноң! Тирә-йүнеңдә күҙ һал: еләк-емешең, шифалы дауа үләндәрең. Бына һиңә теләктәш булып үҫкән өйөр йылҡың. Ана һаҡта торған яугир юлдашың – Аҡһаҡ ҡолаң. Ана һинең менән ер сигенә китергә әҙер торған, Уралына йырҙар йырлап үҫкән тиңһеҙ һылыу Үлмәҫбикәң! Бына төҙ ҡарағайҙар менән ярышып буй еткергән дуҫтарың. Тыуған төйәгең Уралды һаҡларға ла бәһлеүән һәм мәргән егеттәр кәрәк буласаҡ. Тыуған ерең – йөрәк тибешең – күк Урал ул. *(Эпостан)*

**246.** Владислав Меос тураһында яҙылғандарҙы уҡығыҙ. Уның ижады тураһында уҡығандарҙан сығып һөйләгеҙ. Бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән яһалған исемдәрҙе билдәләгеҙ, төркөмләп күсереп алығыҙ.

### ВЛАДИСЛАВ МЕОС

Рәссам Владислав Меос Силәбе ҡалаһында тыуған. Кесе йәштән үк ата-әсәһе менән Өфөгә күсеп килә. 25-се мәктәптә уҡый. 1957–1961 йылдарҙа Ленинград художество графика педагогия училищеһында белем ала.

1964 йылда рәссамдың картиналары тәүге тапҡыр М. В. Нестеров исемендәге Республика художество музейында ойошторолған күргәҙмәгә ҡуйыла. Шунан һуңғы ижади эшмәкәрлек осо-

ронда ул үҙ картиналары менән республика, зона, Рәсәй Бөтә Союз күргәҙмәләрендә, Япония, Германия, АҠШ, Финляндия һәм башҡа сит илдәрҙә ойошторолған күргәҙмәләрҙә ҡатнаша.

Владислав Меос ижадының төп темаһы – тыуған яҡ тәбиғәте. Уның картиналарында республикабыҙҙың гүзәллеге, уның хеҙмәт һөйгән кешеләре, тарихи ҡомартҡылары һүрәтләнә. Уларҙан тыуған яҡтың күп төрлө тауыштары моң булып ишетелгәндәй. *(«Шоңҡар» журналынан)*

**247.** В. Меостың «Тауҙарҙа томан» картинаһын иғтибар менән ҡарағыҙ. Башҡортостан, уның тәбиғәте тураһында шиғыр, йырҙарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

Синонимдар ҡулланып, картина буйынса инша яҙғанда эпиграф өсөн шиғыр юлдарының ҡайһыһын һайлар инегеҙ?

1. Тыуған ерем – гөллө Башҡортостан,
Һиндә генә шундай матурлыҡ.

*(Д. Булгакова)*

2. Башҡортостан, Тыуған илем,
Ниндәй йәмле ерҙәрең!

*(Ә. Ихсан)*

3. Күлдәр бында тәңкә-тәңкә,
Толом-толом йылғалар;
Ата-бабам ҡото булып,
Ғорур баҫҡан ҡаялар.

*(С. Әлибаев)*

● Картина буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ. Әңгәмә өсөн яҡынса һорауҙар: Картина ни өсөн «Тауҙарҙа томан» тип атала? Картинала ниндәй миҙгел һәм тәүлектең ҡайһы ваҡыты тасуирлана? Көн ниндәй? Картинала ауыл, урман, тау, ағастар, һауа, сәскәләр нисек һүрәтләнгән? Һеҙ йәйге урманды яратаһығыҙмы? Һеҙҙең ауыл (ҡала) янында урман бармы?

Инша яҙыу өсөн яҡынса план:
1. Тауҙарҙа томан.
2. Тәбиғәт күренеше.
3. Йәй – йылдың иң матур миҙгеле.

**«Исем» һүҙ төркөмөн тикшереү тәртибе**

1. Ниндәй һүҙ төркөмө, дөйөм мәғәнәһе?
2. Тамыр исемме, яһалма исемме?
3. Яңғыҙлыҡмы, уртаҡлыҡмы?
4. Һөйләмдең ниндәй киҫәге?

*Күршеләргә ҡунаҡ килгән, инде ни хәл итәйем?* («Гөлнәзирә» халыҡ йыры)

Телдән тикшереү:

Өлгө: *Ҡунаҡ* – исем; ул предметты, кешене белдерә, шуға ул *кем?* һорауына яуап бирә. Тамыры – *ҡун-, -аҡ:* – яһаусы ялғау; уртаҡлыҡ исем. Һөйләмдә эйә булып килә.

Яҙып тикшереү:

1. Ҡунаҡ – *исем* (кем?).
2. Уртаҡлыҡ исем, берлектә, яһалма исем, төп килештә; тамыры – *ҡун-, -аҡ* – яһаусы ялғау.
3. *Ҡунаҡ килгән* (кем килгән?) – һөйләмдә эйә ролен башҡара.

**248.** Уҡығыҙ. Исемдәрҙе яҙып алығыҙ, анализлағыҙ.

Талғын яуған ҡарҙар һуҡмағымды
Әйләнеүгә күмеп бөтөрә.
Йылға аръяғында ут йымылдай,
Йылға аръяғында эт өрә.
Ошо утҡа ҡышҡы оҙон юлдан
Шыҡырлатып та ҡайтып киләйем,

Ояһына ингән көсөк кеүек,
Йылы өйкәйемә инәйем.

*(Р. Бикбаев)*

## «Исем» темаһы буйынса белемегеҙҙе тикшерегеҙ (тест)

**1.** Исем нимә белдерә?

1) предметтың атамаһын 2) предметтың билдәһен 3) предметтың иҫәбен

**2.** ***Кешегә** шәфҡәт ит, **уҙаманға** хөрмәт ит.* Билдәләнгән исемдең килешен билдәләгеҙ.

1) төп килеш 2) төбәү килеш 3) төшөм килеш

**3.** *Эшсән, эшлекле, эшсе.* Был һүҙҙәрҙең ялғауҙары нисек атала?

1) үҙгәртеүсе ялғау 2) яһаусы ялғау

**4.** Үҙгәртеүсе ялғауы булған һүҙҙе билдәләгеҙ.

1) тимер 2) тимерлек 3) тимергә

**5.** *Олатай* һүҙе ниндәй юл менән яһалған?

1) һүҙҙәрҙе ҡабатлау 2) һүҙҙәрҙе ҡушыу 3) һүҙҙәрҙе бәйләү

**6.** *Китаптар, дәфтәрҙәр, ҡәләмдәр.* Был һүҙҙәргә ниндәй ялғау ҡушылған?

1) килеш 2) күплек 3) эйәлек заты

**7.** Эйәлек заты ялғаулы һүҙҙе билдәләгеҙ.

1) мәктәпте 2) мәктәбе 3) мәктәптең

**8.** Бәйләү юлы менән яһалған исемде билдәләгеҙ.

1) ҡурай сәскәһе 2) ҡурай еләге 3) ҡурай моңо

**9.** Яңғыҙлыҡ исемде билдәләгеҙ.

1) илем 2) еркәйем 3) Уралым

**10.** *Уҡыусының* һүҙендә ниндәй ялғау билдәләнгән?

1) эйәлек заты 2) хәбәрлек заты 3) килеш

## § 42. Ҡылым

★ Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Йөкмәткеһе буйынса уны нисә өлөшкә бүлеп була? Һәр бүлектең төп фекерен әйтегеҙ. Тәүге бүлектәге ҡылымдарҙы һорауҙар ярҙамында билдәләгеҙ. Уларҙың һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгәнен әйтегеҙ.

ОНОТМАБЫҘ

Йыл да, Тыуған илемә байрам булып, яҙ килә. Ул Еңеү байрамын да килтерә. Байрам менән йылы яҡтан ҡоштар ҙа ҡайта. Ҡанатлы дуҫтарҙың һайрауы һоҡландыра, шатландыра. Ҡыуаныстарының һис сиге юҡ. Әйтерһең, яҙҙы үҙҙәре килтергән.

Шундай уй тыуа: яуҙа ҡалған һалдаттар тыуған яҡтарына ҡош булып ҡайтамы әллә? Ана, бейектә торналар осоп бара. Ауыл тапҡырында, сәләмләгәндәй, ҡысҡырып алдылар. Гүйә, улар беҙгә: «Беҙ ҡайттыҡ. Еңеү көнөн байрам итергә ҡайттыҡ. Һеҙ беҙҙе онотманығыҙмы?» – тиҙәр. Мин үҙем дә уларҙы: «Юҡ, онот-ма-ныҡ!» – тип сәләмләйем. *(«Йәншишмә» газетаһынан)*

● Тура телмәрле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ. Һөйләмдәрҙе тағы ла бер тапҡыр дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ.

**249.** Хикәйәне уҡығыҙ, төп фекерен әйтегеҙ. Һуңынан ҡылымдарҙы табып, уларҙың ниндәй һорауға яуап биргәнен билдәләгеҙ. Уларҙың эш-хәрәкәттеме, хәлдеме сағылдырғанын әйтегеҙ.

ЙӘЙГЕ ТӨН

Тирә-яҡ тынып ҡалған. Малдар ҙа ихатала ял итә. Бер тауыш та ишетелмәй. Ҡоштар ҙа, баҡсалағы ағастар ҙа, гөлдәр ҙә, эштән арып ҡайтҡан кешеләр ҙә ҡаты йоҡоға талған.

Тәлмәрйендәр генә йоҡламай, ара-тирә серләшәләр. «Иртәгә йылы буласаҡ, балалар беҙҙең менән һыу инәсәк», – тип шатлана кеүек улар. Ауыл ситендә аттар бышҡырғаны ишетелә.

Еләҫ, саф һауа. Күк йөҙөнә төн ҡарауылсыһы – ҡыйғас ай ҙа ҡалҡты. Тышауҙай ғына ҡыҫҡа төн хәҙер үтер. Алһыу таң атыр. Тыныс йоҡо һеҙгә, кешеләр.

● Үҙегеҙ билдәләгән ҡылымдарҙың ҡайһы заманда тороуын әйтегеҙ. Һуңғы абзацты дәфтәрегеҙгә яҙып алығыҙ. Ҡылымдарҙың аҫтына һыҙығыҙ.

**250.** Хикәйәне иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡылымдарҙы табығыҙ. Улар эш-хәрәкәттең ҡасан үтәлеүен белдерә? Ҡылымдарҙы эйәреп килгән һүҙҙәре менән бергә өлгөләгесә яҙып алығыҙ.

Өлгө: *илағанын күрҙем; кеҫәһенә тыҡты.*

АНТ

Тирә-яҡта бомбалар, снарядтар шартлаған мәхшәрҙә мин берәүҙең аҡ ҡайынды ҡосаҡлап илағанын күрҙем. Ул: «Ант итәм һеҙгә, ҡайындарым минең, һеҙ үҫкән ерҙе фашистарҙан оҙаҡ тапатмам», – тине лә ҡайындан туҙ һыҙырып алды. Уға бер ус тупраҡ һалып, кеҫәһенә тыҡты.

Мин кешегә һәр нәмәнең ниндәй ҡәҙерле булыуын аңланым. Ул кеше тыуған ер матурлығын күрә белә. Шуға ла тыуған ерен, илен, халҡын өҙөлөп ярата. Ул бер ай самаһынан һуң Ватаныбыҙ өсөн батырҙарса һәләк булды. Еребеҙ биҙәге урмандың ҡәҙерен нығыраҡ белеп ҡайттым мин һуғыштан. *(Н. Мусин)*

● Ҡылым һүҙ төркөмө тураһында һығымта сығарығыҙ, ҡағиҙәне дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ, миҫалдар килтерегеҙ, миҫалдарҙағы ҡылымдарҙың һорауҙарын яҙығыҙ.

## § 43. Ҡылымдарҙың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше

★ Өҙөктө уҡығыҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙың замандарын әйтегеҙ. Ҡылымдарҙың һөйләмдә ниндәй киҫәк булыуын билдәләгеҙ. Үткән, хәҙерге, киләсәк замандарҙа торған ҡылымдар менән берәр һөйләм яҙып алығыҙ.

ДУҪЛЫҠ ЕПТӘРЕ

Башҡорттар рустар менән төрлө походтарҙа **ҡатнашҡан.** 1558–1583 йылдарҙа уҡ Ливон, Ҡырым һуғыштарында бер нисә башҡорт полкы **булған.** Башҡорттар Азовта Иван Грозныйҙың саҡырыуы буйынса **һуғышҡан**. Рәсәй өсөн иң ауыр, ҡатмарлы, хәүефле көндәрҙә поляктарға, шведтарға ҡаршы ла башҡорттар рустарға ярҙамға **ебәрелә.** Улар 1608 йылдың декабрендә дошмандың бик ҙур көсөн **ҡыйратҡан.**

Башҡорт һыбайлылары Мәскәүҙе поляк пандарынан азат итеүҙә лә ҡыйыулыҡ **күрһәткән**. Уларҙың ҡаһарманлыҡтары күптәрҙе **һоҡландырған.**

Туған халҡыбыҙҙың шанлы тарихы йәштәрҙе изге эшкә һәр саҡ **саҡырып торор.** *(Я. Хамматовтан)*

● Текстағы даталарҙың яҙылышын аңлатығыҙ.

**251.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ҡылымдарҙың заманын, затын һәм һанын әйтегеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙы өс заман менән үҙгәртегеҙ, дәфтәрегеҙгә яҙып алығыҙ.

1. Ағасты япраҡ биҙәй, кешене хеҙмәт **биҙәй.** 2. Алтын бөртөкләп йыйыла. 3. Ата алмаған йәйә һайлар. 4. Ауыр йөктө ат тарта, ауыр эште ир тарта. 5. Бер көн артта ҡалһаң, биш көн **йүгерерһең.** 6. Уңған кешенең көрәге лә утын **киҫер.**

► Ҡылымдар заман, зат, һан менән үҙгәрәләр. Ҡылымдың өс заманы була: **үткән**, **хәҙерге**, **киләсәк замандар.**

● Һәр заманды миҫалдар менән аңлатығыҙ; шул уҡ ҡылымдарҙы берлектә һәм күплектә зат менән үҙгәртегеҙ.

Өлгө:

| | Берлектә | Күплектә |
|---|---|---|
| **Үткән заман** | | |
| 1-се зат | *мин ҡайттым* | *беҙ ҡайттыҡ* |
| 2-се зат | *һин ҡайттың* | *һеҙ ҡайттығыҙ* |
| 3-сө зат | *ул ҡайтты* | *улар ҡайттылар* |
| **Хәҙерге заман** | | |
| 1-се зат | *мин барам* | *беҙ барабыҙ* |
| 2-се зат | *һин бараһың* | *һеҙ бараһығыҙ* |
| 3-сө зат | *ул бара* | *улар баралар* |
| **Киләсәк заман** | | |
| 1-се зат | *мин уҡырмын, уҡыясаҡмын* | *беҙ уҡырбыҙ, уҡыясаҡбыҙ* |
| 2-се зат | *һин уҡырһың, уҡыясаҡһың* | *һеҙ уҡырһығыҙ, уҡыясаҡһығыҙ* |
| 3-сө зат | *ул уҡыр, уҡыясаҡ* | *улар уҡырҙар, уҡыясаҡтар* |

**252.** 1. Уҡығыҙ. Ҡылымдарҙы тейешле затҡа ҡуйып, нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр өҫтәп, күсерегеҙ. Уларҙың һөйләмдә ниндәй киҫәк булып килеүен аҫтына һыҙып күрһәтегеҙ. 2. Тәүге ике һөйләмдең дөрөҫ әйтелешен таҡтаға яҙып аңлатығыҙ.

Юлсылар араһында бер аҙға һүҙ бөтөп тор.. . Ат, бышҡыра-бышҡыра, атлауға күс.., тауға үрлә.. . Ҡалҡыулыҡтың түбәһенә күтәрелеү менән, тирә-яҡ бөтөнләй яҡында ғына йәйелеп ят.., берләм юл йәнә түбәнгә төш.. лә баҫыуҙар араһында юғалып ҡал.. . Әнүр ағай башын сайҡап ҡуй.. ла башаҡты юғары күтәр.. . *(Д. Буләков)*

ТҮ **253.** Һөйләмдең мәғәнәһенә ҡарап, һыҙыҡтар урынына белешмәнән тейешле һүҙҙәрҙе кәрәкле затҡа ҡуйып уҡығыҙ, аҙаҡ күсереп яҙығыҙ.

ҮЛЕМҺЕҘЛЕК

1944 йылдың 8 мартында Ғөбәйҙуллин таң менән һалдаттарын дошман дзоттарын штурмлауға – –. Ялан уртаһындағы әҫкерткә еткәс, беҙҙең һуғышсыларҙы дошман һиҙеп – – һәм көслө ут – –. Ергә боҫорға мәжбүр булған совет һуғышсылары, амбразураларға тоҫҡап ата-ата, алға – –. Һәр метр ер көрәшеп – –. Пулемётсылар бер-бер артлы сафтан – –. Уларҙы ҡотҡарырға тырышып, ҡаты яралы Миңлеғәле барлыҡ көсөн туплап, һикереп тора ла кәүҙәһе менән ялҡынлы ут бөрккән дошман дзотын – – .

Шулай итеп, Миңлеғәленең тыуған көнө үлемһеҙлек көнөнә – – . *(Я. Хамматов)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *күтәр, ҡал, ас, шыуыш, алын, сыҡ, ҡапла, әүерел.*

**254.** Тексты уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ. Йөкмәткеһен ике һөйләм менән әйтегеҙ. Һуңынан эйә менән хәбәрҙәрҙе табып,

уларҙың һанын билдәләгеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙы зат менән үҙгәртеп яҙығыҙ, зат ялғауҙарының аҫтына һыҙығыҙ.

Һыҙылып таң атты. Тау аръяғынан[2] ҡалҡып килгән ҡояштың нурҙары һибелде. Иртәнге[3] матурлыҡты маҡтап, туғайлыҡта[2] һандуғастар **сутылдаша.** Үлән баштарында, ағас япраҡтарында ысыҡ бөртөктәре **йымылдай.** Елгә игендәр[1] тулҡынып **ҡуйҙы.** Көтөүҙәге малдар ҙа, эҫе башланғансы туйынып өлгөрәйек тигәндәй, баштарын да күтәрмәй, ашай-ашай тауға **үрмәләне.** Яңы көн **башланды.**

► Башҡорт телендә эйә күплектә килгәндә лә, хәбәр берлектә була ала: *Йылы көндәр башланды.*

Ундай хәл төрлө күренештәрҙе тасуирлағанда осрай: 1. *Көндәр йылыға китте.* 2. *Гәрәбәләй бойҙай бөртөктәре баҙрап ята.* 3. *Мәктәптең ҙур залында өҫтәлдәр, ултырғыстар теҙелеп киткән, лампочкалар гөлт итеп тора.*

**255.** Яҙғы тәбиғәтте һүрәтләгән үҙ-ара бәйләнешле биш һөйләм яҙығыҙ. Һөйләмдәрҙең эйәләре күплектә, хәбәрҙәре берлектә булһын.

## § 44. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар

★ Һөйләмдәрҙе уҡып, ҡылымдарҙың нисә һүҙҙән тороуын тикшерегеҙ. Берәр һәм икешәр һүҙҙән торған ҡылымдарҙың мәғәнә үҙенсәлектәрен сағыштырығыҙ, ниндәй айырмалар барлығын әйтеп ҡарағыҙ.

1. Илшат инша яҙҙы. 2. Ул баҫманан сыҡҡанда йығыла яҙҙы. 3. Беҙ класыбыҙ менән экскурсияға барҙыҡ. 4. Илдарҙар бая ғына йылға яғынан киләләр ине. 5. Минең ҡартатайым Бөйөк Ватан һуғышына тиклем уҡытыусы булған. 6. Ул йәмәғәт эштәрен яратып башҡарыр булған.

**256.** *Яҙып ултыра ине, эшләп ал, йығыла яҙҙы* ҡылымдарын барлыҡ һәм юҡлыҡта, зат менән үҙгәртегеҙ. Ялғауҙарҙың ҡайһы ҡылымға ҡушылғанын әйтегеҙ. Үҙегеҙ ҙә шул формалағы ҡылымдарҙы уйлап әйтеп ҡарағыҙ.

Өлгө: 1-се з.: *мин яҙып ултыра инем*
2-се з.: *һин яҙып ултыра инең*
3-сө з.: *ул яҙып ултыра ине*

*тасуирлау*
*йәмәғәт*
*баҙрап тора*
*ла́мпочка*

**257.** Күрһәтелгән ҡылымдарҙы эйәртеүсе һүҙҙәр итеп, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙығыҙ. Уға тиклем тәүге икәүһен барлыҡ, юҡлыҡ формаларына ҡуйып, зат менән үҙгәртегеҙ.

Һөйләй торғайны, эшләй торҙо, килә торған булған, илаған була, йөрөй ине.

► Бер генә һүҙҙән тороп, тулы мәғәнә аңлатып килгән ҡылым **үҙ аллы ҡылым** була; үҙ аллы ҡылымға төрлө мәғәнә биҙәге өҫтәгән ҡылымдар **ярҙамсы ҡылым** тип йөрөтөлә: 1. *Уҡыусылар байрамға ныҡлы әҙерлек* ***башланылар***. 2. *Мәктәптең спорт майҙанында беҙ волейбол* ***уйнаныҡ***. 3. *Уҡыусылар байрамға әҙерлекте* ***башлаған булғандар***. 4. *Мәктәптең спорт майҙанында беҙ волейбол* ***уйнай һалып алдыҡ***.

● Миҫалдарҙағы үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы табығыҙ, мәғәнә үҙенсәлектәрен әйтегеҙ. Үҙегеҙ шуларға оҡшаш ҡылымдар уйлап яҙығыҙ һәм күмәкләп тикшерегеҙ.

► Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар бергә килгәндә ярҙамсы ҡылым ғына зат менән үҙгәрә.

**258.** Уҡығыҙ. Тексты күсереп яҙығыҙ. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы табығыҙ, уларҙың мәғәнәләрен төшөндөрөгөҙ, аҫтарына һыҙығыҙ.

Һеҙҙе тыңлар алдынан үҙем кисергән ваҡиғаны иҫкә төшөргө килә, Зәңгәрһыу. Беҙ йәшәгән заман-

да ла мәңге онотолмаç ваҡиғалар булып үтте. Минең замандаштарым азатлыҡ өсөн йән аямай көрәшкән ата-бабаларының һәйбәт эштәрен дауам итә, ерҙә үҙ эҙен ҡалдырырға тырыша. Үҙең күреп кисергәндәр йөрәккә нығыраҡ һеңеп ҡала, ҡасандыр булған хәл хәтереңдә килеп төшә лә тормошоңдоң берәй бите ялтлап асыла… *(Н. Мусин)*

● 1. *Ерҙә үҙ эҙен ҡалдырырға тырыша...* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

2. *Ир-егеттең аçылы ил эшендә танылыр; аçыл кеше алтын тип үлмәç, халҡым тип үлер; батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй* мәҡәлдәренең мәғәнәләрен һөйләп бирегеҙ.

**259.** Б. Домашников тураһында белешмә уҡығыҙ. Уның тураһында өçтәлмә сығанаҡтарҙан материалдар табып, тормош һәм ижад юлы тураһында ҡыçҡаса һөйләгеҙ.

### БОРИС ДОМАШНИКОВ

Танылған рәссам Борис Домашников Өфө ҡалаһында йәшәне.

Борис Домашниковтың «Минең Башҡортостаным», «Көньяҡ Урал буйлап», «Май. Ҡайынлыҡ», «Тағы яҙ», «Муйыл» һәм башҡа әçәрҙәре бик яҡшы тәьçораттар ҡалдыра. Улар өсөн яҡты һәм асыҡ төçтәр һайланылған.

Ул болот, йылғалар һәм яҙҙың тәүге сәскәләренең иртәнге сафлығы тураһында яҙа. Рәссамдың картиналары – беҙҙе һауаның сафлығы, ҡайындарҙың зифалығы, йәшеллектең күңелле ялтырауы менән саҡырып тороусы матур тыуған яғыбыҙ. *(«Башҡортостан энциклопедияһы»нан)*

**260.** Б. Домашниковтың «Һаҙ томбойоғо сәскә ата» картинаһын ҡарағыҙ һәм түбәндәге эш төрҙәрен башҡарығыҙ.

1. Картинала йылдың ниндәй миҙгеле һүрәтләнгән? 2. Картинала нимәләр һеҙҙең иғтибарығыҙҙы

үҙенә йәлеп итте? 3. Ағас, үлән, сәскәләрҙе һүрәтләгеҙ. Күк, һауа, ҡояш нурҙары тураһында нимәләр әйтерһегеҙ? 4. Картинаның икенсе планында нимәләрҙе күрәһегеҙ? 5. Был картина буйынса һеҙҙең фекерегеҙ нисек? Унда нимәләр оҡшаны? Был картинаға ҡарағанда ниндәй уйҙар уйлайһығыҙ? 6. Картинаның исеме менән килешәһегеҙме, икенсе төрлө нисек атар инегеҙ? 7. Был картинаның темаһына яҡын тағы ла ниндәй картиналар беләһегеҙ?

Б. Домашниковтың «Һаҙ томбойоғо сәскә ата» картинаһы буйынса һүрәтләү иншаһы яҙығыҙ. Иншағыҙҙа үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы ҡулланығыҙ.

## § 45. Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар

★ I. Бирелгән һүҙҙәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен билдәләгеҙ. Ошо һүҙҙәрҙән ҡылымдар яһап яҙығыҙ. Ул ҡылымдар нисек атала?

Матур, йыр, дан, бәхәс, дуҫ, ҡайғы, хата, эҙ, эш, уй, яҡты, аҡ, күп, ҙур.

II. *Уҡы, кил, бар, йөрө, әйт, яҙ, һөйлә, ултыр* ҡылымдарын үҙегеҙ яһаған ҡылымдар менән сағыштырығыҙ һәм ҡағиҙә сығарығыҙ.

► Тик тамырҙан ғына тороп, бер ниндәй ҙә яһаусы ялғауы булмаған ҡылымдар **тамыр ҡылымдар** була: *йөрө, ҡайт, уҡы, яҙ.*

Исем, сифат, рәүештәргә ҡылым яһаусы *-ла/ -лә, -а/ -ә, -ай/ -әй, -ар/ -әр, -ыр/ -ер* ялғауҙары ҡушылып яһалған ҡылымдар **нигеҙ ҡылымдар** йәки **яһалма ҡылымдар** тип атала: *йыр – **йырла**, тимер – **тимерлә**, аш – **аша**, күп – **күбәй**, аҡ – **ағар**, күк – **күгәр**.*

► Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар бойороҡ һөйкәлешенең 2-се затына тап килә: 1. *Ғәли, тиҙерәк* ***ҡайт,*** *Айҙар, һин дә тиҙерәк* ***кил.*** *Арба тәгәрмәсен* ***тимерлә.*** 2. *Ашыңды* ***ҡоротла,*** *унан тәмләп* ***аша.***

**261.** Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Тамыр ҡылымға – бер, нигеҙ ҡылымға ике һыҙыҡ һыҙығыҙ. Нигеҙ ҡылымдарҙы тамыр һүҙгә һәм яһаусы ялғауға айырып яҙығыҙ.

1. Ауға барһаң, зирәк бул, юлдашыңа терәк бул. Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан сереӊ һаҡла. Дошмандың көлгәненә ышанма. Күп дуҫ эҙләгән дуҫһыҙ ҡалыр. Күпте яманлаған да дуҫһыҙ булыр. *(Әйтемдәр)* 2. Үҙе өсөн генә эшләгән һәр кеше михнәт сигә. Башҡалар өсөн эшләүсе ҡыуанысын кешеләр менән уртаҡлаша. *(В. Гёте)*

**262.** *Һаҡла, хәтерлә, башла, ҡаршыла* нигеҙ ҡылымдарының һәр береһе менән һөйләм төҙөгөҙ.

**263.** Тексты уҡығыҙ, уға исем ҡушығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Унан тамыр ҡылымдарҙы табығыҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙың нигеҙен күрһәтегеҙ. Шул уҡ һүҙҙәрҙе күсереп алып, нигеҙ ҡылымдың аҫтына һыҙығыҙ.

Дуҫлыҡ булғанда, донъя **яҡтыра, йәмләнә, йәнләнә.** Кешенең ышаныслы таянысы булыу – яҡшы күренеш. Халыҡта «ҡоштар ағасҡа **таяна,** мин ҡайҙа таянайым» тигән йыр ҙа бар. Ана шул яҡын кеше, **таяныр** терәк – дуҫ бит ул. Дуҫлыҡ **ололарға** ғына түгел, балаларға ла бик кәрәк. Бәләкәйҙән башланған дуҫлыҡ ғүмергә дауам итә, ундай кешеләр иң бәхетлеләрҙән **иҫәпләнә.** *(Ф. Рәхимғолова)*

## § 46. Ҡылымдарҙың яһалышы

★ Тексты уҡып, уның төп фекерен билдәләгеҙ. Һуңынан һөйләп бирегеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙың яһалышын тикшерегеҙ, тамырҙарын һәм яһалма ҡылымдарҙы табығыҙ. Яһаусы ялғауҙарҙы атап күрһәтегеҙ.

СӘСКӘ – ТОРМОШ ЙӘМЕ

Ергә матур яҙ **килде**. Ҡар ирей, гөрләүектәр аға, йылғалар таша, боҙҙар китә. Беҙ яҙ матурлығын йәшеллектә, ҡоштар моңонда, сәскәләрҙә күрәбеҙ. Иң беренсе булып умырзая беҙҙе ҡыуандыра. Унан үгәй инә үләне **сәскәләнә**.

Яҙҙың тәүге сәскәләре бик күп: баллыҡай, күк умырзая, кәкүк емеше, кәзә һаҡалы, яҙ йондоҙо, сибәркәй, ҡарлуғас үләне, һаҙ томбойоғо, һары умырзая. Был сәскәләр йылдан-йыл аҙая бара. Сәскә атҡанда кешеләр ҡосаҡлап-ҡосаҡлап, самаһыҙ күпләп йыя, уларҙы аяуһыҙ өҙөп ала, матур тәбиғәттең йәмен ебәрә.

Сәскә – тормош йәме. Бөтәбеҙ ҙә уға ҡарап һоҡланайыҡ, уларҙы **һаҡлайыҡ**. *(Календарҙан)*

► Яһалышы яғынан ҡылымдар өс төрлө була:

1. Тамыр ҡылымдар: *кил, яҙ, кит, һуҡ, күр, ҡун, тор, баҫ, йөрө, таны, һөйрә* һ. б.

2. Яһалма ҡылымдар: улар төрлө һүҙ төркөмдәренә ялғауҙар ҡушылып яһала. Яһалма ҡылымдар *тамыр һүҙ+ҡылым яһаусы ялғау* формаһынан яһала: *баш+**ла**, ҡот+**ла**, ят+**ла**, һаҡ+**лан*** һ. б.

Яһалма ҡылымдар тамыр һүҙҙәргә күбеһенсә *-ла/ -лә; -лан/ -лән; -лаш/ -ләш; -а/ -ә; -ар/ -әр; -р; -ай/ -әй; -ыҡ/ -ек; -һын/ -һен* ялғауҙары ҡушылып яһала: *хуш-**лаш**, иҫән-**ләш**, һан-**а**, ҙур-**ай**, яҡшы-**р**, бай-**ыҡ*** һ. б.

3. **Ҡушма ҡылымдар** исемдәргә ярҙамсы ҡылымдарҙы йәнәш ҡуйыу юлы менән яһала: *өмөт итеү, яр һалыу, көн күреү, зыян күреү, зарар итеү* һ. б.

**264.** 1. Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ, уға исем бирегеҙ. 2. Ҡылымдарҙы яһалыштары яғынан тикшерегеҙ, уларҙың нисек яһалыуын тарҡатып күрһәтегеҙ.

Ҡалаға ҡайтыр саҡ етте. Мин ауыл тирәһен, баҫыу яҡтарын бер әйләнеп, хушлашмаҡсы булдым. Аяҡтарым мине һөрөлөп күмелгән күл тәңгәленә алып килде. Туҡтаным да һөрөлгән ергә ҡарап, күлемдең элекке матурлығын күҙ алдыма баҫтырырға тырышып, уйға ҡалдым.

Янымда ғына нимәлер сипылдағандай тойолдо, ләкин бер ни күренмәй. Ул тауыш тағы, тағы ҡабатланды. Аҙаҡ килеп, ул сипылдауҙың ҡайҙан ишетелгәнен шәйләнем. Бер бураҙнанан һыу һарҡып сыҡҡан. Ул түбәнгә – Килйылғаға ҡарай йыбырлап ҡына юл эҙләй ине.

Шишмә! Баҫыу уртаһында күмелеп ҡалған күлдең шишмәһе, тереләй ҡәбергә күмелергә ризалашмай, эҙ ярып килеп сыҡҡан! Мин шишмәнең яңынан тыуыуына сикһеҙ ҡыуандым. *(Ф. Иҫәнғолов)*

● Стена газетаһына тәбиғәтте һаҡлауға бағышланған хәбәр-
**ТҮ** ләмә яҙығыҙ. Яҙғандарығыҙҙың күргәҙмәһен ойоштороғоҙ.

**265.** *-лаш/ -ләш; -һын/ -һен; -а/ -ә; -ай/ -әй* яһаусы ялғауҙарын ҡушып, ҡылымдар яһағыҙ; һуңынан һәр яһаған ҡылымығыҙ менән һүҙбәйләнеш төҙөп яҙығыҙ.

Өлгө: *дуҫ-лаш, кәңәш-ләш; иптәштәрең менән кәңәшләш.*

**266.** *Ярҙам итеү, ҡолаҡ һалыу, күс һалыу, ғәйеп булыу, зарар күреү* кеүек ҡушма ҡылымдар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Уларҙы яҙып тикшерегеҙ.

**267.** Бирелгән һүҙҙәргә тейешле ялғауҙар ҡуйып, ҡылымдар яһағыҙ. Шул ҡылымдарҙы индереп, өс һөйләм төҙөгөҙ.

Үткер, дым, һыу, зәңгәр, тура, ҡыҫҡа, һау, ыҫ, йыш, киң, ҡыҫҡа.

**268. 1.** Тексты уҡып сығығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Легенданы дауам итегеҙ. 2. Тамыр һәм яһалма ҡылымдарҙы табып, уларҙың ялғауҙарын, нигеҙен билдәләгеҙ.

ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ

Бик борон заманда ер ҡалаҡтай ғына, күк табаҡтай ғына булған. Әҙәм заты ишәйә, кейек, йәнлек заты күбәйә, ер әкренләп киңәйә барған. Ер киңәйгәс, күк тә ҙурайған.

Ул саҡта бөтә халыҡ бер ҡаҙандан ашай икән. Бер Алып килеп сыҡҡан да ҡаҙанды күтәреп эскән. Ни эшләмәк кәрәк? Тотонғандар яңы ҡаҙан яһарға. Ҡаҙаны булғас, сүмесе лә кәрәк. Ҡаҙанды ҡойғандар көмөштән, сүместе яһағандар алтындан.

## § 47. Ҡылымдың затлы формалары

★ 1. Өҙөктө ҡысҡырып, дөрөҫ тауыш менән тасуири уҡығыҙ. Унда ниндәй осор һүрәтләнгәнен һөйләгеҙ. Өҙөккә исем бирегеҙ. Шуға оҡшаш тағы ниндәй әҫәр уҡығанығыҙ бар? 2. Билдәләнгән ҡылымдарҙың ниндәй затта, заманда, һанда тороуҙарын әйтегеҙ. Ул ҡылымдарҙың берәүһен зат менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Зат менән үҙгәргән ҡылымдарҙың тағы ниндәй грамматик билдәһе бар? Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ һәм уларҙың төрҙәрен әйтегеҙ.

Апайым былтыр уҡ бесән **саба башлағайны.** Ул әле лә әсәйем артынан салғыһын килешле генә һелтәп китте. Бакуй башы эшләгәс, миңә ҡарап көлә бит әле.

— Һин, Кинйәбай, минең үксәне ҡыя **сапма,** — тигән була.

Өндәшмәнем. Ирәгәләшеп **торғо килмәй.** Бына мин тәүге тапҡыр ҡырҡым башына сығып **баҫтым.** Тәүге тапҡыр сабынлыҡта салғы **һелтәнем.** Өсөнсө һелтәүемдә салғым тупраҡҡа **ҡаҙалһа ла,** унан һуң салғым өҫтән генә кәйелеп **үтте.** Асыу менән сабып алып **китмәксе булғайным да,** салғым түҙлеккә **бәрелде.**

Хәшейә апайым ыңғай сабып тик бара... Көнө буйы әсәйем мине өйрәтте лә **өйрәтте.** Һуңға табан ап-аруҡ **һелтәй башланым,** әммә хәл бөтөбөрәк китте. Битемдән аҡҡан тиремде еңем менән һөртәм дә тағы сабырға тотонам. *(Н. Мусин)*

- Өҙөктө ҡылымдарҙы 2-се затҡа ҡуйып һөйләгеҙ.

► Башҡорт телендә бойороуҙы, хәбәрҙе, шартты, теләкте белдергән ҡылымдар зат менән үҙгәрә.

1. Бойороҡ һөйкәлеше: *һин **кил**, һеҙ **килегеҙ**, ул **килһен**, улар **килһендәр**.*

2. Хәбәр һөйкәлеше: *мин **көләм**, беҙ **көләбеҙ**, беҙ **килербеҙ**; мин **ҡыуандым**, беҙ **ҡыуандыҡ**; мин **киткәйнем**, беҙ **киткәйнек**, һеҙ **киткәйнегеҙ**; ул **китер булған**, ул **китер ине*** һ. б.

3. Шарт һөйкәлеше: *мин **килһәм**, һин **килһәң**, ул **килһә**; беҙ **уйнаһаҡ**, һеҙ **уйнаһағыҙ**, улар **уйнаһалар**, улар **уйнамаһалар*** һ. б.

4. Теләк һөйкәлеше: *мин **ҡайтайым**, беҙ **ҡайтайыҡ**; минең **ҡайтҡым килә**, уның **ҡайтҡыһы килә**; мин **китмәксе булам**, һин **китмәксе булаһың**; минең **эшләйһем бар**, һинең **бараһың бар**, уның **бараһы бар*** һ. б.

**269.** Тексты башҡортсаға тәржемә ит. Аҙаҡ ике тексты сағыштыр. Башҡорт теленең һөйкәлештәренә тап килгән ҡылымдарҙы күрһәт. Ниндәй һөйкәлеш рус телендә юҡ?

ЛУНА И ЗУХРА

Когда-то давным-давно жила-была девочка. Звали её Зухра. Она очень рано осталась без матери. Отец привел в дом мачеху. Та девочке житья не давала: била её, обижала, заставляла делать непосильную работу.

Как-то вечером мачеха послала Зухру по́ воду. «До утра наполни эту кадку водой», – приказала она. Сама же проткнула гвоздём дно кадки.

Целую ночь таскала Зухра воду, но в кадке её не прибывало. Безмолвно плыла по небу луна. Зухра взглянула на неё и воскликнула: « Эх, луна, хоть ты мне помогла бы. Возьми же меня к себе!» И тогда луна засветилась ярче, протянула свои лучи на землю к сироте и подняла её к себе.

## § 48. Бойороҡ һөйкәлеше

★ Тексты уҡығыҙ, исем бирегеҙ. Йөкмәткеһенә төшөнөгөҙ. Бойороуҙы сағылдырған ҡылымдарҙы табығыҙ. Уларҙың затын әйтегеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙы башҡа заттар менән үҙгәртегеҙ.

Кеше әйберенә ҡағылма, үҙеңдекен һаҡлап йөрөт.

Һораған әйберҙе биреп тор, һинән көсләп тартып алһалар, үҙеңде яҡларға **тырыш**.

Сәбәпһеҙ һуғышма.

Юҡҡа-барға үпкәләмә.

Уйынға саҡырһалар – **уйна**, саҡырмаһалар – үҙең ҡушыл, бының ояты юҡ.

Уйнағанда намыҫлы, ғәҙел, ҡыйыу бул.

Насар билдә алһаң, илама, ғорур бул. Билдә өсөн уҡытыусы менән бәхәсләшмә, уға үпкәләмә.

Иптәштәреңде **ошаҡлама**.

Әрпеш булма, быны бер кеше лә яратмай.

«Дуҫ булайыҡ», «бергәләп уйнайыҡ», «өйгә бергә ҡайтайыҡ» һүҙҙәрен йышыраҡ ҡабатла.

Тәкәббер булма. Һин тиҫтерҙәреңдән яҡшыраҡ та, насарыраҡ та түгел. Мәктәп һиңә шатлыҡтар килтерһен. *(С. Соловейчиктан)*

> ▶ Бойороуҙы, ҡушыуҙы, үтенеүҙе белдергән ҡылымдар **бойороҡ һөйкәлеше ҡылымы** тип атала: *һаҡла, көйлә, эшләһен, килһен, килегеҙ.*

**270.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, һәр мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатып, яҙып алығыҙ. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, уларҙың затын әйтегеҙ. Һәр ҡылымды 3-сө затҡа ҡуйып, һөйләмдәргә үҙгәртеп яҙығыҙ.

*мөһим*
*мөғжизә*
*әхлаҡ*

1. Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт. 2. Намыҫлы булһаң, намыҫһыҙ менән буталма. 3. Намыҫыңды йәштән һаҡла. 4. Кешеһенә ҡарап һүҙ һөйлә. 5. Һандуғас булһаң, һайрай ҙа бел. 6. Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде. 7. Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама. 8. Кешегә шәфҡәт ит, уҙаманға хөрмәт ит.

● Мәҡәлдәр нимә тураһында? Уларҙың бөтәһенә бер исем бирегеҙ. Оҡшаған мәҡәлде файҙаланып, өйҙә бәләкәй генә инша яҙығыҙ.

ТҮ

**271.** М. Нестеровтың «Яҙ» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Унда йылдың ниндәй миҙгеле төшөрөлгән? Алғы планда ни күрәһегеҙ? Ағастарҙы, яҙғы һыуҙы һүрәтләгеҙ. Һауа, ер тураһында ни әйтерһегеҙ? Артҡы планда нимәләр күренә? Яҙғы урманда булғанығыҙ бармы? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

**272.** 1. Шиғырҙы уҡығыҙ. Шағирҙың уҡыусыға әйтер фекерен төшөнөгөҙ. Аңлатып бирегеҙ. 2. Күсмә мәғәнәләге ҡылымдарҙы күрһәтегеҙ, -һын/ -һен ялғаулы ҡылымдарҙың һөйкәлешен, һанын әйтегеҙ. Ҡалын хәрефле һүҙҙәрҙең килешен билдәләгеҙ.

КЕШЕ

Кеше
**Кешеләргә** кәрәк булһын,
Бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын.
Эшләгәндә
Янып эшләһен дә,
Ял иткәндә
Көлһөн,
Йырлаһын!..
Ҡыуанһын ул,
Яҡты **эҙен** күреп,
Аҡыллы һәм оҫта **ҡулының.**
Хыяллаһын,
Янһын,
Ҡанатланһын,
Тынғы белмәй алға ынтылһын.
Һөйһөн,
Көйһөн,
Күркәм булһын кеше...

*(Р. Ғарипов)*

**273.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Унда йылдың ҡайһы миҙгеле һүрәтләнгәнен әйтегеҙ. Йыл миҙгеленең билдәләрен һанап күрһәтегеҙ. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнә биҙәктәрен асыҡлағыҙ. Төрлө мәғәнә биҙәге ниндәй юлдар менән бирелгәнен аңлатығыҙ.

ЛӘЙСӘН КӨТӘМ

Күкрәп кенә килгән күк болотҡай
(Кешеләрҙең беләм көткәнен),

Һипсе йылы, йомшаҡ ямғырыңды,
Йыуһын ерем ҡайнар биткәйен.
Күтәрелеп китһен ебәк ужым,
Үлән, бәпембәләр, еҫле гөл...
Күкрәп кенә килгән күк болотҡай,
Яусы! Бар теләгем ошолор.
Быуылып ҡына торған һағыш йәшем
Ләйсән тамсыһына ҡушылыр.

*(Ф. Рәхимғолова)*

► Ҡылымдарҙың бойороҡ һөйкәлеше түбәндәге мәғәнәләрҙе сағылдырырға мөмкин.

1. Ғәҙәти бойороу: *Уҡыусылар, дәрестән һуң спорт майҙанына волейбол уйнарға **килегеҙ**, берегеҙ ҙә **ҡалмағыҙ**.*

2. Ҡаты бойороу: *Походҡа барырға әҙерлекһеҙ килеп тә **йөрөмәгеҙ**!*

3. Рәсми бойороу: *Класта өлгәшмәгән бер уҡыусы ла **булмаһын**! Һәр кем кластың намыҫы өсөн **көрәшһен**!*

4. Үтенес, инәлеү, ялбарыу: 1. ***Кил әле** һин, иптәш, **бир** һин миңә һөйәлләнеп ҡатҡан ҡулыңды.* (М. Ғафури) 2. *«**Инегеҙ инде, инегеҙ**, апай», – тип инәлде Самат.* 3. ***Йәшермәсе**, радио алдамайҙыр, һин киләһең съезд залына. **Әйтсе**, бурыл, **әйтсе**, йәшәр өсөн ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар?..* (Ғ. Сәләм)

**274.** I төркөмдәге һөйләмдәрҙә һыҙыҡтар урынына ҡылымдар ҡуйып, тулы килеш әйтегеҙ, аҙаҡ күсереп яҙығыҙ. II төркөмдәге һөйләмдәрҙең ҡылымдарын бойороҡ һөйкәлешенә әйләндерегеҙ, унан һөйләмдәрҙе шул ҡылымдарға ярашлы итеп үҙгәртеп яҙығыҙ.

I. 1. Мәктәптең, кластың таҙалығын – –. 2. Уҡыуҙа бер-берегеҙгә – —. 3. Урал менән Зөһрәгә –– ,

мәктәп баҡсаһына – – . 4. Ҡәҙерле уҡыусылар, йәйге каникул ваҡытында ла тимурсылар эшен – –. Оло кешеләргә шефлыҡ – –, уларҙың йорттарын – –, һыу – –, баҡсаларын – – .

II. 1. Беҙ тәжрибә майҙанында сөгөлдөр үҫтерәбеҙ. Үҫемлектәргә төрлө ашламалар бирәбеҙ. 2. Мине тикшеренеү эше ҡыҙыҡһындыра. 3. Өфө ҡалаһына барасаҡмын. Унда китаптар һатып аласаҡмын, экскурсияларға йөрөйәсәкмен.

## § 49. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының зат, һан һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше

★ Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ, бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының ниндәй затта һәм һанда булыуын әйтегеҙ. Өндәш һүҙле һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөгөҙ.

1. Тороғоҙ, балалар, тороғоҙ! Бәкер, тороғоҙ инде! 2. Улар йә автомашина менән, йә поезд менән барһындар. 3. Бир әле, мин дә күрәйем. 4. Мәүлет менән сиратлашып эшләгеҙ. 5. Уҡыусылар ҙур залға йыйылһындар. 6. Ҡарағыҙ, бына хәҙер ниндәй матур ултыраһығыҙ. *(С. Агиштан)*

► Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары зат, һан менән үҙгәрә, барлыҡ-юҡлыҡта килә. Тик бойороҡ һөйкәлешенең 1-се заты булмай, сөнки кеше үҙенә үҙе бойора алмай. Мәҫәлән:

| берлек | күплек |
|---|---|
| мин – | беҙ – |
| һин *уйна, уйнама* | һеҙ *уйнағыҙ, уйнамағыҙ* |
| ул *уйнаһын, уйнамаһын* | улар *уйнаһындар, уйнамаһындар* |

● *Йөрө, йырла, ҡал, ышан, дуҫлаш* ҡылымдарын зат менән үҙгәртегеҙ, һәр береһе менән һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

**275.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының затын, һанын күрһәтегеҙ.

ӘСӘ ҺҮҘЕ

Улым! Әсәң ҙур ышаныс менән
Ил һаҡларға һине ебәрә.
Һин тейешһең уның теләктәрен
Һис бер тайпылмайса үтәргә.
Туҡма дошманыңды аямайса,
Бул дошманға ҡаты бәғерле,
Ул килтермәһен һинең әсәйеңә
Ҡамсы, бығау, үлем, ҡәберҙе.
Танкыла булһаң, уны тапатып уҙ,
Самолёттан утта ҡойондор,
Ҡайҙа ғына һине ҡуйһалар ҙа,
Ышанысын аҡла илеңдең.
Батыр, һаҡла һәр ус тупрағыңды,
Һулыш, һауа, һыуын Ватандың.

*(Т. Морат)*

● *Аҡла, һаҡла, килтермәһен, тайпылма* ҡылымдарын күплеккә ҡуйып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**276.** Хәбәрҙәре бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарынан килгән өс һөйләм төҙөгөҙ. Ҡылымдарҙың һанын, затын әйтегеҙ.

## § 50. Хәбәр һөйкәлеше

★ Тексты уҡығыҙ. Күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе күрһәтегеҙ. Тексты, йөкмәткеһенән сығып, өлөштәргә бүлегеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙың нимә (бойороуҙымы, һорауҙымы, хәбәр итеүҙеме) аңлатҡанын һөйләгеҙ.

КИТАПТЫ ЯРАТЫҒЫҘ

Китаптар миңә тормошта үҙ урынымды күрһәттеләр, улар мине тормош һаҙлығынан тартып

сығарҙылар. Китаптар минең алдымда донъя сиктәрен киңәйткәндән-киңәйтә барҙылар, кешенең яҡшылығын аңларға өйрәттеләр. Миндә һәр бер хеҙмәт кешеһенә мөхәббәт туплана барҙы. Тормоштоң ауырлыҡтарына, яуыз кешеләргә нәфрәт тәрбиәләнде миндә.

Фекеремдең дөрөҫлөгөнә мин тәрән ышанам. Шуға күрә кешеләргә: «Китапты яратығыҙ. Ул һеҙҙең тормошоғоҙҙо **еңеләйтер**, тәрән фекерҙәр **тыуҙырыр**, нескә тойғолар тәрбиәләр, тормошоғоҙҙо аңларға ярҙам итер. Китап үҙегеҙҙе һәм башҡа кешеләрҙе хөрмәт итергә өйрәтер. Китап аҡылды һәм йөрәкте донъяға, кешегә ҡарата мөхәббәт тойғоһо менән **ҡанатландыра**», – тип белдерәм.

Китапты **яратығыҙ** – ул белем сығанағы. Тик белем генә кешене тормош ауырлыҡтарынан **ҡотҡарасаҡ**. Тик белем генә кешегә хөрмәт һәм ихтирам тәрбиәләйәсәк. *(М. Горький)*

► Һөйләмдә эш-хәрәкәттең эшләнеүе йәки эшләнмәүе хаҡында хәбәр биреүҙе аңлатҡан ҡылымдар **хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары** тип атала: *ашыға, ҡайтҡан, барасаҡ, уйнар, ҡайта торғайны, уйнай торған булған* һ. б.

**277.** Өҙөктө уҡығыҙ, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, уларҙың затын, һанын әйтегеҙ. Биш ҡылымды уларға эйәреп килгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ.

ТЕРЕ ЭШЛӘПӘ

Өҫтәлдә эшләпә ята,Ваучер исемле бесәй иҙәндә уйнап йөрөй ине. Айтуған менән Айбулат һүрәт төшөрә. Ҡапыл эргәләрендә нимәлер иҙәнгә төштө. Әйләнеп ҡараһалар – эшләпә. Айтуған эшләпәне ҡулына алмаҡсы булғайны, ҡысҡырып ебәрҙе.

– Ни булды? – тип аптыраны Айбулат.

– Ул тере лә баһа!

Айбулат, яҡыныраҡ килеп, эшләпәгә ҡараны. Тегеһе уға ҡарай шыуыша башламаһынмы!

– Ай! – тип ҡысҡырып ебәрҙе лә малай диванға һикерҙе. Уның артынан Айтуған да.

Эшләпә иҙән уртаһында туҡтаны. Малайҙар шөрләүҙәренән ҡатып ҡалды. Шул саҡ «Мыяу!» тигән тауыш ишетелеп ҡалды. Күп тә үтмәй, эшләпә аҫтынан ҡойроҡ күренде. *(Н. Носовтан)*

**278.** Тексты уҡығыҙ. Һөйләгеҙ. Ниндәй хаталар тураһында һүҙ бара? Аңлатығыҙ. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын эйәреп килгән һүҙҙәре менән күсереп алығыҙ. Уларҙың затын, һанын күрһәтегеҙ.

НИНДӘЙ ХАТА БАР?

Мәхмүзә китапхананан «Арба менән ат» тигән китап алып ҡайтты. Китапты ул яратып уҡып сыҡты.

Шунан ҡыҙыҡай китаптың аҙағындағы буш биткә: «Был китап миңә оҡшаны. Һеҙ ҙә алып уҡығыҙ», – тип яҙып ҡуйҙы.

Мәхмүзә тапшырғас, китапты Хәмзә алды. Китап уға ҡыҙыҡ түгел төҫлө тойолдо. Ул да китаптың артҡы битенә: «Мәхмүзә дөрөҫ яҙмаған. Был китап миңә оҡшаманы», – тип үҙенең фекерен яҙҙы.

Ошо яҙыуҙарҙың икеһендә лә ҙур хата бар. Йәгеҙ, уны кем таба? *(Ф. Иҫәнғолов)*

*тасуирлау*
*китапхана*

*фекер*
*зиһен*

**279.** Белешмәләге ҡылымдарҙы файҙаланып, һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ, ҡылымдарҙың ниндәй һөйкәлешкә ҡарағанын әйтегеҙ. Һуңынан тәүге ике һөйләмде һөйләм киҫәктәре буйынса анализлағыҙ.

Төш ауыуға, яҙғы ҡояш ҡыҙҙырырға – . Әле иртән генә тубыҡтан ятҡан ҡар күҙгә күренеп – – . Тау баштары күптән – . Урман көтмәгәндә – – .

Хатта әрәмәлектәрҙә ҡоштар – – . *(Ә. Гәрәев буйынса)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *асылды, тотондо, сутырлай башланы, юғала бара, йәнләнде лә китте.*

## § 51. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман менән үҙгәреше

★ Өҙөктө уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләп бирегеҙ. Үҙегеҙҙең ауыл, ҡала тирәһендәге таҙалыҡ менән сағыштырығыҙ. Бүлектәргә бүлеп, һәр береһенең темаһын әйтегеҙ. Һуңынан хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табып, уларҙың ниндәй заманда тороуын аңлатығыҙ.

Атайҙар ауылды һуғышҡа тиклем бик матур тота торғайнылар. Һаҡмарға, Ҡаран йылғаһына тиҙәк, бысраҡ түгеүсе булманы. Яҙҙан урамды бәпкә, еҫле төймәкәй үләндәре ҡаплай. Яңы ғына тәпәй баҫҡаны ла, имгәкләгәне лә урамда булыр ине. Атайҙарға ауылдың йәшел урамы ни тиклем ҡәҙерле булған.

Атайҙар әмер, күрһәтмәләр көтмәгәндәр: үҙҙәре ауыл эшен ойоштorғандар, өмә яһағандар. Яҙғы эштәрҙән һуң, йылға күперҙәрен йүнәтәләр, иҫкеләрен яңырталар, Һаҡмар йылғаһын буралап быуалар, уртаһына ҡуласа ҡуялар. Аҫҡа ағып төшкән һыу шарлауыҡтай гөрләй, һыу тамсыларында йәйғор уйнай.

Ғүмәр ағай бура төшөргән ҡоҙоҡтарҙы кем генә хәтерләмәй?.. Бигерәк тә әсәйҙәр ҡыуана. Күнәк ултыртырға һап-һары таҡта ла һалынған, аяҡ аҫтына таш түшәлгән. Һәр эшкә лә күңел һалған алтын ҡуллы атайҙар бынамын итеп һыйыр, йылҡы һарайҙарын да төҙөр, иген, картуф һаҡлағысын да эшләр, тимерлек тә ултыртыр, ҡул менән силос соҡорон да ҡаҙыр, йәштәргә өй ҙә күтәрер булғандар. *(А. Йәғәфәрованан)*

► Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше өс заманда килә: 1) үткән, 2) хәҙерге, 3) киләсәк замандар.

1. Үткән заман: *Кәрим мәктәптән* ***ҡайтты****. Кәрим мәктәптән* ***ҡайтҡан****. Кәрим мәктәптән* ***ҡайтҡайны****. Кәрим мәктәптән* ***ҡайтыр ине****. Кәрим мәктәптән* ***ҡайта торған булған****.*

2. Хәҙерге заман: *Кәрим мәктәптән* ***ҡайта****.*

3. Киләсәк заман: *Кәрим мәктәптән* ***ҡайтыр****. Кәрим мәктәптән* ***ҡайтасаҡ****.*

**280.** Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табып, уларҙың ниндәй заманда килеүен әйтегеҙ. Заман ялғауҙарының ниндәй төр ялғауҙарға ҡарағанын күрһәтегеҙ. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгәнен билдәләгеҙ.

1. Йыйылышта бик күп кешегә яңы эштәр бирҙеләр. Олатайымды тимерлеккә ҡуйҙылар. Ул элек тә тимерлектә эшләгән. Әсәйемде атайым урынына бригадир иткәндәр. Ул Бөйөк Ватан һуғышына тиклем табельщик та, бригадир ҙа булмаған, тик ҡыҙыу эш ваҡытында утауҙа, бесәндә, ураҡта, иген һуғыуҙа ғына эшләгәйне.

Йыйылыш һуң бөттө. Олатайым[2] менән әсәйем мине тышта ғына күрҙеләр. *(С. Агиш)*

2. Тиҙ бул, егет, тиҙҙән ҡояш батыр,
Зәңгәр томан ҡаплар болондо:
Аҙашырбыҙ, юлды юғалтырбыҙ,
Табалмабыҙ таныш урынды...

*(М. Йәлил)*

**281.** Бирелгән ҡылымдарҙан хәбәр һөйкәлешенең үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман формаларын яһап яҙығыҙ. Билдәләнгән ҡылымдар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Һайра, **йыйын**, уҡы, **осраш**, ос, **күр**.

Өлгө: Үткән заман: *ҡараны, ҡараған, ҡарағайны, ҡарай торғайны, ҡарар булған.*
Хәҙерге заман: *ҡарай.*
Киләсәк заман: *ҡарар, ҡараясаҡ.*

**282.** Һөйләмдәрҙең мәғәнәләренә ҡарап, ҡылымдарҙы тейешле заманға ҡуйып яҙығыҙ.

## ЙӘШ НАТУРАЛИСТАР

Теплицала әле лә эш ҡайна.. . Бер төркөм малайҙар түтәлдәрҙә соҡорҙар яһа.. . Улар бригадир Илшат[1] Вәлиев етәкселегендә һуған ултыр.. . Үткән йылдың ошо айҙарында ғына 500 килограмм йәшел һуған мәктәп ашханаһына[2] тапшыр.. . Ә теплица төҙөлгәндән бирле, унан 9 тоннаға яҡын уңыш ал.. . Әгәр мәктәп уны һатып алған булһа, бик күп артыҡ аҡса тотонол.. ине.

Оҙаҡламай ергә наҙлы яҙ кил.. . Йәш натуралистар баҡсаларға ағас үҫентеләре, төрлө сәскәләр ултырт.. .

| |
|---|
| *теплúца* |
| *бригадúр* |

| |
|---|
| *болондо* |
| *болотто* |

## § 52. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы

**283.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Исем бирегеҙ. Билдәләнгән ҡылымдарҙың заманын әйтегеҙ. Улар нисә һүҙҙән тора? Ярҙамсы ҡылым менән килгән ҡылымдарҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Үткән заманды белдергән ялғауҙарҙы яҙып алығыҙ һәм аҫтына һыҙығыҙ.

Беҙгә ут күрше булған урмансы Ғәббәсов Мөхәммәт бабайҙы яҡшы хәтерләйем. Беҙ уның Ҡыҙыл Йондоҙон тотоп-тотоп, ҡыҙыҡһынып **ҡарай торғайныҡ. Хөрмәтләй ҙә,** әҙерәк **шөрләй ҙә торғайныҡ** үҙенән. Әкиәттәге ер-һыуҙы һаҡлаусы урман эйәһе кеүек ине Мөхәммәт бабай.

Фронтовик Мөхәммәт бабай ғүмеренең аҙағынаса урман **үҫтерҙе,** уны **һаҡланы.** Аҡланда үҫкән һәр үләндең, һәр сәскәнең исемен **белер ине:** «Сәскәләрҙе өҙмәгеҙ. Урманды матурлап, кешеләргә зауыҡ биреп ултырһындар әйҙә», – тип **әйтә торғайны.**

Шулай беҙҙе тыуған яғыбыҙҙың тәбиғәт ҡомартҡыларын ҡарарға, матур-матур ваҡ йылғалар һыуынан сәй ҡайнатып эсергә, ата-бабалар ултыртҡан ҡарағайҙарҙы күрһәтергә тип, әле беҙ аяҡ баҫмаған ерҙәргә **йөрөтөп алып ҡайтҡайны.** Ул поход беҙгә уҡылған шиғырҙарҙан, һөйләнелгән хикәйәләрҙән нығыраҡ тәьҫир **иткәйне.** Беҙ Мөхәммәт бабайҙың мылтыҡ тотоп ҡош-ҡортҡа атҡанын, балта тотоп йәш ағасты сапҡанын **күрмәнек.** Ул йөрәге, выжданы ҡушыуы буйынса кешеләрҙә тәбиғәткә һөйөү **тәрбиәләй торған булған.** *(А. Йәғәфәрова)*

► Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының үткән заманы

1) һөйләү ваҡытынан алда булған эш-хәрәкәтте белдерә: *ҡайтты, киткән, үткән, килә торғайны, һөйләй торған булған, яҙыр ине;*

2) алыҫ, күптән үткән заманды белдерәләр: *Маянһылыу берсә ҡыуанып, берсә ҡото осоп, йә бер көлөп, йә илап, үҙ ыласынына һоҡланып ҡарай торған булған.* («Ҡуҙыйкүрпәс» эпосынан)

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы яһалышы буйынса нигеҙҙә ике төрлө була:

1) бер генә һүҙҙән торған ҡылымдар: *уҡыны, өйрәндек, килдек, киттеләр, йырланым, ҡайтҡан, ҡараған;*

2) ике һәм унан да күберәк һүҙҙән торған ҡылымдар: *йөрөй торған булған, ҡайтҡан булған, һөйләй торғайны, ҡайтҡылай ине, уйнар булған.*

**284.** Өҙөктө күсереп яҙығыҙ. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының аҫтына һыҙығыҙ. Ул ҡылымдар аңлатҡан эш-хәрәкәттәрҙең үҙенсәлеген аңлатығыҙ.

Военрук ағайыбыҙ күрше ауылдан килгәйне. Ул һуғышҡа саҡлы тимерлектә эшләгән. Һуғышта йөрөп, һалдат кейемендә ҡайтҡан Харрас ағайҙың хәрби әҙерлектән уҡытыуы бик ҡыҙыҡһындырҙы. Шулай булмай ни, ул бит фашистар менән күҙгә-күҙ килеп һуғышҡан. Фронттан беҙҙең тирәнән беренсе булып ул ҡайтҡан. Зарипов ағайҙың кейеменә, силғауына ҡыҙыҡһынып ҡарай инек.

Бына ул дәрес үткәрергә тотоноп китте. *(Н. Мусиндан)*

● *Килгәйне* һәм *килгән; ҡайтҡан булған* һәм *ҡайтты* ҡылымдарының мәғәнәләрендәге айырманы һәм оҡшашлыҡты әйтегеҙ.

**285.** Өҙөктө уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табып, уларҙың заманын, затын, һанын билдәләгеҙ. Ялғауҙарҙың аҫтына һыҙып, тексттың тәүге өлөшөн яҙығыҙ.

## УРМАН ҠАРАУЫЛСЫҺЫ ҒАРИФ ОЛАТАЙ

Аунай-аунай уйнаған балаларын рәхәтләнеп ҡарап ултырҙы Инә айыу. Ана, ҡайһылай ҙурайып киттеләр уның бәләкәстәре…

Ҡапыл… сеү… нимә булды һуң? Алда сабып барған балаһы ҡапыл, ҡапҡанға эләккән аяғының ауыртыуына түҙмәй, йөрәк әрнеткес итеп ҡысҡырып ебәрҙе. Ул балаһына нисек ярҙам итергә белмәне. Ҡапҡанды һуҡҡылап ҡараны, сынйырын тартҡыланы.

Ғариф олатай, айыу балаһын өйөнә алып ҡайтҡас, ныҡлап аяғын бәйләне. Көндәр үтә торҙо, айыу балаһы йорт тәрбиәһен хушһынманы. Яраһы бер аҙ төҙәлгәс, олатай уны ирекке ебәрмәксе булды. Кискә табан, Инә айыуҙың һыулауға килә торған ваҡыты еткәс, айыу балаһын шул ергә төшөрҙө. Айыу балаһы еҫкәнә-еҫкәнә бер аҙ тапанды ла үҙән буйлап аҫҡа табан сапты. *(«Аманат»тан)*

**286.** Күсереп яҙығыҙ. Һөйләмдәрҙең мәғәнәләренән сығып, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын тейешле үткән заман формаһына, затҡа, һанға ҡуйып яҙығыҙ.

1. Төнөн көслө ямғыр – –. 2. Тауҙарҙан, соҡор-саҡырҙан ямғыр һыуы – –. 3. Былтыр ултыртҡан ағастар бик тиҙ – –. 4. Әхмәттәр берәй яҡҡа – – , ахыры, ишектәре бикле тора.

**287.** Бирелгән ҡылымдар менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ. Һөйләмегеҙҙең мәғәнәләренә ҡарап, ҡылымдарҙың затын, һанын үҙгәртергә лә мөмкин.

Йәйләй торған булған, килгән булған, һөйләй торғайны, ярҙам итә торған булған, ярҙам итер ине, төшөндөрөп бирә торғайны.

**288.** Әкиәтте уҡығыҙ. Төп фекерен әйтеп бирегеҙ. Йөкмәткеһенән сығып, әкиәтте бүлектәргә бүлегеҙ, һәр бүлеккә исем бирегеҙ. Шул исемдәрҙе план итеп, изложение яҙығыҙ. Яҙғанда үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын ҡулланығыҙ.

**ТҮ**

АЛТЫНСӘС

Борон-борон заманда ҡуйы урманда кеше аяғы баҫмаған ап-аҡ матур аҡлан булған, ти. Ап-аҡ ҡар бөртөктәре, төрлө төҫкә инеп, йәйғор нурҙары уйнатып, алмас бөртөгөндәй йылҡылдап, тирә-яҡты матурлыҡҡа күмгән.

Көндәрҙән бер көндө Ҡояш ҡыҙы Алтынсәс әсәһенән шул аҡланға төшөргә ризалыҡ һораған. Ҡояш ҡыҙының теләгенә ҡаршы килмәгән. Үҙенең нур сәстәренә тотондороп, уны ергә төшөргән. Алтынсәс, матурлыҡ бөркөп торған аҡланда шатланып, йүгерә-йүгерә уйнарға тотонған.

Ҡыҙ баҫып торған урындарҙа умырзаялар баш ҡалҡытҡан, ҡарҙар иреп, шарлауыҡтар ағырға тотонған. Ҡыҙының һәр аҙымын күҙәтеп торған Ҡояш уға ҡышты яҙ алмаштырырға ваҡыт етеүен әйткән.

– Әсәкәйем, – тигән Алтынсәс, – ерҙәге аҡлыҡты бөтөрмә. Мин әле ап-аҡ аҡланда уйнап туйманым.

Әсәһенең:

– Борсолма, ҡыҙым. Хәҙер һин ҡышҡы ап-аҡ аҡландың тағы ла матурыраҡ аҡлыҡ менән алмашыныуын күрерһең, – тиеүе булған, тирә-яҡ ап-аҡ ҡайындар менән тулған.

Алтынсәс һылыу ҡайындарҙы күреп, көлөп ебәргән. Шул көндән башлап, ерҙә ҡыш аҡлығын һаҡлап, ҡайындар үҫә башлаған. Аҡланды ал, ҡыҙыл, зәңгәр, һары сәскәләр ҡаплаған. Йырлай-йырлай алыҫ яҡтарҙан ҡоштар ҡайтҡан. Улар Алтынсәскә күстәнәс итеп бойҙай, борсаҡ, тары,

арпа бөртөктәре алып килгән. Терпеләр иген бөртөктәрен ергә һибеп сыҡҡан. Тирә-яҡты йәшеллеккә күмеп, иген баҫыуы ҡалҡып сыҡҡан. *(Д. Булгакова)*

▶ Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының **үткән заманы** һөйләүсенең шул ҡылым аңлатҡан эш-хәрәкәттең башҡарылыуын йәки башҡарылмауын үҙ күҙе менән күреү-күрмәүен белдереп килә. Мәҫәлән: 1) *Әминә сәғәт өстә мәктәптән* ***ҡайтты.*** 2) *Иртәнсәк ҡыр ҡаҙҙары теҙелешеп* ***осоп баралар ине.*** 3) *Юлдаштың атаһы балыҡ ҡармаҡлағанда ҡысҡырып һөйләшкәнде* ***яратмай торғайны*** һөйләмдәрендәге ҡылымдар һөйләүсенең эш-хәрәкәттең үтәлеү-үтәлмәүен күреүен, шаһит булыуын белдерәләр, ундай ҡылымдарҙы шаһитлы үткән заман тип йөрөтәләр.

*Атайым эштән төнөн, беҙ йоҡлағас ҡына,* ***ҡайтҡан.*** *Был хәл күптән* ***булған.*** *Уны атайым олатайымдан, олатайым үҙенән дә оло ҡарттарҙан* ***ишетеп белгән.*** *Ул саҡта тауҙарҙа мылтыҡ тауыштары ла* ***яңғырамай торған булған*** һөйләмдәрендәге ҡылымдар һөйләүсенең эш-хәрәкәттең үтәлеү-үтәлмәүен үҙ күҙе менән күрмәгәнен белдерәләр, бындай ҡылымдар шаһитһыҙ үткән заман ҡылымдары тип йөрөтөлә.

**289.** *Ос, йәшә, яула, даула, бел* тамыр һәм нигеҙ ҡылымдарынан үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымының ябай һәм ҡушма формаларын яһап, һүҙбәйләнештәр яҙығыҙ.

Өлгө: 1) *йәшәне, йәшәй торғайны; йәшәгән, йәшәй торған булған, йәшәгән булған;* 2) *дан менән* **йәшәне;** *эшкә күмелеп* **йәшәй торғайны;** *илһамланып* **йәшәгән;** *ҙур маҡсаттар менән* **йәшәй торған булған.**

**290.** Уҡығыҙ. Ябай һәм ҡушма формала килгән шаһитһыҙ үткән заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын айырып күрһәтегеҙ.

АҠЙЕГЕТ УРМАНЫ

Атайым менән Аҡйегет урманына юл тоттоҡ. Мин атайымдан ни өсөн Аҡйегет урманы тип аталғанын бер нисә тапҡыр һорағайным, ул ошо хәҡиҡәтте һөйләне.

Бынан күп йылдар элек, Пугачёв һуғышы заманында, беҙҙең ауыл кешеләре лә, Салауат ғәскәренә ҡушылып, байҙарға ҡаршы һуғышырға киткән булғандар. Улар араһында Аҡйегет исемле егет тә булған. Ул ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәгән, ғәжәп көслө егет булған икән. Йәйәнән атып, йөҙ аҙымдан балдаҡ аша уҡ үткәрә торған булған. Пугачёв менән Салауат һуғышы бөткәс, Аҡйегет өс иптәше менән ошо урманда йәшеренеп йөрөгән булған. Ул шунда ҡартайған һәм донъя ҡуйған. Шуға был урманды Аҡйегет урманы тигәндәр. *(Н. Мусин буйынса)*

● 1. *Киткән, һөйләгән, йөрөгән* ҡылымдарын барлыҡта һәм юҡлыҡта зат менән үҙгәртегеҙ. 2. *Йөрөй торған булған, ҡайтыр булған* ҡылымдарын индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

## § 53. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы

★ Өҙөктәрҙе уҡығыҙ һәм һөйләп бирегеҙ. Һәр өҙөктөң кинәйәһен нисек аңлағанығыҙҙы әйтегеҙ, шунан сығып, һәр береһенә исем ҡуйығыҙ. Унан хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, уларҙың замандарын әйтегеҙ. Заманды белдергән ялғауҙарҙы күрһәтегеҙ.

1. Донъялағы бөтә нәмәнән дә көл ҡала. Тиҙәктән дә, тимерҙән дә көл ҡала. Юлсы ла, дошман да

көл ҡалдыра. Тимер көлө тут була. Тиҙәк көлө ергә әйләнә, тупраҡҡа ем була. Юлсы йылынып көл ҡалдыра, дошман көйҙөрөп көл ҡалдыра. Көлдән гөлдәр үҫә, сәскәләрҙе һөрөм дә баҫа.

Эй кеше! Гөлдәр үҫер көлдәр генә ҡалдырһаңсы.

2. Ҡаяларҙы ел емерә, онтай, осороп йөрөтөп, теләһә ҡайҙа ташлап китә. Таш ҡаяларҙы[1] тулҡындар ҙа емерә, умырып алып китеп, тәрән төпкөлдәргә[2] батыра.

Ә бит шул уҡ таш, ҡом бөртөктәренән кешеләр гүзәл һарайҙар, болоттарға ашҡан йорттар төҙөй. *(З. Ураҡсин)*

▶ **Хәҙерге заман** хәбәр һөйкәлеше ҡылымы эш-хәрәкәттең һөйләү моментында үтәлеү-үтәлмәүен йәки һәр ваҡыт булып торған эш-хәрәкәтте белдерә. Мәҫәлән: *Зөләлә ҡына гөлдәре үҫтерергә ярата. Ал, ҡыҙыл, һары булып сәскә аталар ҙа күҙҙең яуын алып торалар.* (Д. Бүләков)

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымының хәҙерге заманы түбәндәге юлдар менән яһала:

1. Тамыр ҡылым тартынҡы өнгә бөтһә, ялғау **-а, -ә** өнө менән башлана: *ҡайт – ҡай-**та**, төш – төш-**ә**.*

2. Тамыр йәки нигеҙ ҡылым һуҙынҡы өнгә бөтһә, ялғау **-й** өнө менән башлана: *ҡара – ҡара**й**, уйна – уйна**йы**м, ташла – ташла**й**һың, башла – башла**й**.*

3. Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымының юҡлыҡ формаһы тамыр йәки нигеҙ ҡылымға *-ма/ -мә* ялғауы ҡушылып яһала, шунан һуң ғына **-й** ялғауы өҫтәлә: *бар**ма** – бар**май**, тот**ма** – тот**май*** һ. б.

**291.** Өҙөктө дөрөҫ итеп, ҡысҡырып уҡығыҙ, диктофонға яҙҙырығыҙ. Һуңынан тыңлағыҙ, хаталарығыҙҙы әйтегеҙ. ⊙ Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының яһалышын тикшерегеҙ, аңлатығыҙ, һуңынан хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын уларға эйәреп килгән һүҙҙәр менән бергә күсереп алығыҙ, заман, зат ялғауҙары аҫтына һыҙығыҙ.

Өлгө: *ҡыр яғына ҡарайым; тау артына төшөп бара.*

Мин ҡыр яғына әйләнеп ҡарайым[4]. Ҡояш алыҫ тау артына төшөп бара. Беҙҙең баҡса артындағы һыртта аттар ҡурпы утлап йөрөй. Уларҙың күләгәләре[3] оҙон булып ергә төшә. Яңғыҙ имән төбөндә алмасыбар ат баҫып тора. Уның исеме Атака. Ул ат та, атайҙар кеүек үк, фронтта йөрөп ҡайтҡан. Атаканың янбашына һуғышта пуля тейгән. Ул юртҡанда әле лә саҡ ҡына аҡһап китә. Атака тирәһенә тай-тулаҡ йыйылған. Ул аҡрын ғына башын ҡағып ала, ә тегеләре, ҡойроҡтарын да ҡыймылдатмай, тик кенә торалар. Бәләкәс аттарға Атака һуғышта булған хәлдәрҙе, үҙенең күргәндәрен һөйләй, ахыры. Ниҙәр һөйләй икән ул алмасыбар ат? *(М. Кәрим)*

**292.** *Той, һаҡла, һоҡлан, серләш* ҡылымдарын зат менән үҙгәртеп яҙығыҙ.

**293.** Йомаҡтарҙы уҡып, яуаптарын табығыҙ. Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының затын, һанын, барлыҡ-юҡлыҡ формаларын тикшерегеҙ.

1. Үҙе һөйләй,
   Үҙе көйләй,
   Үҙе күренмәй,
   Саҡырһаң, килмәй.
2. Ауыҙы юҡ – йырлай,
   Теле юҡ – һөйләй,
   Күп кешене көйләй.
3. Дыу-дыу килеп үкерә,
   Баҫыу иңләп йүгерә,
   Ҡамылдағы игенде
   Урып-һуғып бөтөрә.
4. Кешеләрҙе осорта,
   Үҙе ҡошҡа оҡшамай,
   Сатыр кеүек йәйелә,
   Ел-ямғырҙан һаҡламай.

**294.** Өҙөктө уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Салауат батырҙың һыҙаттарын һүрәтләгән урындарҙы уҡып күрһәтегеҙ. Өҙөктө бүлектәргә бүлегеҙ. Һәр бүлектең эстәлеген һөйләгеҙ, шунан сығып һәр бүлеккә исем бирегеҙ. Үткән һәм хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табып, уларҙың затын, һанын әйтегеҙ.

Салауат Юлаев ғүмеренең аҙағына тиклем үҙе һайлаған юлға тоғро булып ҡалған. Уның эшен тикшереү ваҡытында үҙен тотоуы көслө ихтыярлы кеше итеп һынландыра. Төрлөсә кәмһетеүҙәргә, йәберләүҙәргә ҡарамаҫтан, ул һалҡын ҡанлылыҡты һәм рух ныҡлығын һис юғалтмай.

Салауат таҙа кәүҙәле, көслө һәм үтә сыҙамлы кеше булған. Бер йыл эсендә ул Ырымбур, Көңгөр һәм Уса янындағы ҡаты һуғыштарҙа өс тапҡыр ауыр яраланған була. Әммә халыҡ эшенә бирелгәнлеге уны уңалып етмәгән яралары менән яңынан һуғышсылар сафына баҫтыра.

Документтарҙан күренеүенсә, Салауат талантлы шәхес булып күҙ алдына баҫа. Уның ойоштороу оҫталығы, Крәҫтиәндәр һуғышы саҡырыуҙарына тоғролоғо көрәштәштәре араһында абруйын ныҡ күтәрә. Салауат Юлаев – туған халҡыбыҙҙың милли ғорурлығы. Үҙенең ҡыҫҡа ғына ауыр тормошонда ул алдына ҡуйған маҡсатына тоғролоҡ һаҡлай, яҙмышын восстание менән тығыҙ бәйләй. Иң ауыр саҡтарҙа ла үҙенең изге эшенән һис тә тайпылмай. *(И. Гвоздикова)*

**295.** Тексты тасуири итеп уҡығыҙ. Йәйәләр эсендәге ялғауҙарҙың дөрөҫ вариантын һайлап уҡығыҙ. Үткән заман ҡылымды билдәләгеҙ.

## САЛАУАТ БАТЫР ҺӘЙКӘЛЕ

Балалар! «Баш ҡалабыҙ Өфөгә килгән ҡунаҡ тәүҙә ҡайҙа бара?» – тип һораһам, «Салауат

һәйкәленә!» – тип дәррәү яуап бирәсәкһегеҙ. Әлбиттә, шулай!

Ана, Ағиҙел(дә, дең) бейек ярынан, ҡунаҡсыл хужа кеүек, Салауат һәр юлсыны сәләмләп ҡаршы ала, оҙатып ҡала. Шағирҙар был һәйкәл(дә, гә) арнап шиғыр яҙа, композиторҙар көй сығара. Был мөһабәт һәйкәлдең авторы – осетин халҡының улы, скульптор Сосланбәк Дафаевич Тавасиев. Ул Бөйөк Ватан һуғышы барған осорҙа Башҡортостанда йәшәй. Башҡорт халҡына һоҡланып, уның тарихы менән ҡыҙыҡһына. Һуғыштан һуңғы егерме йыл ғүмерен Салауат Юлаев һәйкәлен ижад итеүгә арнай. Батыр һынында ул азатлыҡ һөйгән халыҡтың эске кисерештәрен, холҡон сағылдырырға тырыша.

1967 йылдың 17 ноябрендә һыбайлы Салауаттың бронза һыны Ағиҙелдең иң бейек ярында урын ала. Уның бейеклеге – 9,8 метр, ә нигеҙе – 10 метр. Нигеҙенең авторы – Мәскәү архитектура институты профессоры Исмәғил Ғәли улы Ғәйнетдинов.

Бына нисәмә йылдар инде беҙҙең Салауат һәйкәле өфөләрҙе, ҡунаҡтар(ҙы, ға) үҙенә саҡырып тора. Ул баш ҡалабыҙҙың иң күркәм урынына әүерелде. *(Р. Бикбаев)*

● Тексты файҙаланып, өйҙә Салауат батыр тураһында инша яҙығыҙ.

## § 54. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы

★ Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ. Шиғырҙың төп фекерен билдәләгеҙ. Төп фекер ниндәй юлдарҙа бирелгән тип уйлайһығыҙ? Билдәләнгән ҡылымдарҙың ҡасан башҡарыла торған эш-хәрәкәтте белдергәнен тикшерегеҙ. Тамыр йәки нигеҙ ҡылымға ниндәй ялғау ҡушылғанын әйтегеҙ.

## КИЛӘСӘК

Киләсәкте **киләсәк** ул, тиҙәр,
Киләсәкте, тиҙәр, **етәсәк.**
Шулай ҙа ул,
Ләкин кем һуң беҙҙе
Киләсәккә алып киләсәк?

Ҡул ҡаушырып ҡына көтөп ятһаҡ,
**Килерме** икән беҙгә киләсәк?
Улай булһа, тик **ҡалырбыҙ** унан,
Ә киләсәк ары **еләсәк.**

Киләсәк бит үҙе **килмәйәсәк,**
Ныҡ тырышып хеҙмәт итмәһәк,
Эшләйһе эште һуңға ҡалдырмайса,
Иртәгәне бөгөн итмәһәк.

*(И. Кинйәбулатов)*

**296.** Тура телмәрҙәрҙән торған һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡып, билдәләнгән ҡылымдарҙы киләсәк заманға, тейешле затҡа ҡуйып яҙығыҙ.

1. «Бынауы дүрт ҡатлы йорт – мәктәп. Һин шунда **уҡы..»**

2. «Их, шәп тә һуң, Ҡыҙырас! Беҙҙе ел хәҙер ярға үҙе үк сығарып **ташла.. !»** – тип ҡысҡырҙы Юлдаш.
3. «Намыҫлы, ғәҙел, тоғро бул.., атай. Бер ҡасан, бер кемде лә **алда..** . Бушты **һөйлә..** . Иң батыр, иң тоғро, иң ғәҙел кеше **бул..,** йәме, атай, йәме, өләсәй. Мин һеҙҙең кеүек **бул..**[4], йәме», – тип ҡабатлай-ҡабатлай, бәхетле йылмайып йоҡлап китте ул. *(З. Биишева)*

| *мөһим* <br> *мөғжизә* | *әхлаҡ* <br> *ҡеүәт* |
|---|---|

▶ Ҡылымдың **киләсәк заманы** киләсәктә, һөйләү мәленән һуң башҡарыла торған эш-хәрәкәт тураһында хәбәр итеүҙе белдерә: *«Ҡасан тәртибең өлгөлө була, пионерға беҙ һине шунда ғына* ***алырбыҙ****», – тине. «Ярар, мин барыбер* ***инәсәкмен****, тик ни, анауы ошаҡсы Ғариф кеүек өсләктәр менән түгел, гел дүрткә, бишкә генә уҡып* ***инермен****. Ни, бына* ***күрерһегеҙ****», – тине лә сәхнәнән йүгереп төштө лә китте.* (З. Биишева)

Миҫалдарҙан күренеүенсә, киләсәк замандың ике төрлө формаһы бар: 1. Киләсәк замандың 1-се формаһы: *Айбулат отличник* ***булыр****.*

2. Киләсәк замандың 2-се формаһы*: Айбулат отличник* ***буласаҡ****.*

● *Ҡайт, уҡы, эшлә, һөйлә, кил, көт, йөрө* ҡылымдарынан киләсәк замандың ике формаһын яһағыҙ, ниндәй ялғауҙар ҡушылғанын әйтегеҙ. Һуңынан үҙегеҙ яһаған ҡылымдар менән һүҙбәйләнештәр яҙығыҙ.

**297.** Өҙөктәрҙән хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заман формаларын табығыҙ һәм уларҙың яһалыштарын тикшерегеҙ.

1. Егет, һиңә аҙаҡ һүҙ:
Бүләк итәм бер йөҙөк.
Унда булыр һигеҙ күҙ;
Атың юҡта ат булыр,
Юлың юҡта юл булыр,
Айың юҡта ай булыр,
Быуың юҡта һыу булыр,
Яуға сыҡһаң, көс булыр…

*(Әкиәттән)*

*абруй*
*яугир*
*ғорур*
*өйәңке*
*тоғро*

2. Тимәк, ул үҙенең данлы эше хаҡында яҙасаҡ. 3. «Бынан һуң мин ни тырышасаҡмын, атай. Бына

күрерһең», – тине Ҡыҙырас. *(З. Биишева)* 4. Бөгөн байрамға бағышланған стена газетаһы сығарасаҡбыҙ. 5. Экскурсияға беҙҙең отряд алдан барасаҡ.

**298.** *Онот, кей, күр* ҡылымдарынан киләсәк замандың барлыҡ һәм юҡлыҡ формаларын яһағыҙ. Юҡлыҡ ялғауҙарының урынын билдәләгеҙ.

**299.** Уҡығыҙ. Һөйләмдәрҙә хәбәрҙәрҙе киләсәк заманға әйләндереп уҡығыҙ, һөйләмдәрҙең үҙгәреүенә иғтибар итегеҙ. Тексты, һөйләмдең хәбәрҙәрен киләсәк заманға ҡуйып, яҙып алығыҙ.

*свитер*
*брезент*
*геолог*
*экскурсия*
*отряд*

Брезенттан көймә ҡоролған машина елдерә. Шулай ҙа ул мең йәшәр урмандар менән ҡапланған тауҙарҙағы таш юлдан әллә ни шәп бара алмай. Бер тауҙы менеп төшөүгә, икенсеһе башлана, унан өсөнсөһө тора. Сәскәгә күмелгән яландары матур булһа ла, тауҙары ҡырыҫ был яҡта. Алдыңда көтмәгәндә генә ҡая таш үҫеп сыға ла һинең барыр юлыңды кәртәләй. Уны әллә ни хәтлем урау яһап үтергә тура килә. Бер сәғәтлек юлды ике-өс сәғәт үтәһең. Геологтарҙың туҡтар урыны оло юлдан егерме саҡрымдар самаһында ситтә. *(Н. Мусин)*

**300.** 1. Эпос өҙөгөн дөрөҫ тауыш менән уҡығыҙ. Кешеләрҙең ниндәй яҡшы һыҙаттары һүрәтләнгәнен һөйләгеҙ. Өҙөктө, йөкмәткеһенә ҡарап, бүлектәргә бүлегеҙ, һәр бүлектең төп фекерен әйтегеҙ. 2. Киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табып, уларҙың затын, һанын билдәләгеҙ. Һәр ҡылымды уға эйәреп килгән һүҙе менән яҙып алығыҙ.

БАТЫРҘАР ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

Атайың хаҡында күп маҡтау һүҙҙәре ишеткәнем бар. Ул үҙе лә кешене ихлас күңелдән ярата ине, кешегә гел ҡунаҡсыллыҡ күрһәтер, барынса ярҙам да итер ине; һәр кемде яҡын күреп яратҡанға уны

*ихлас*
*холоҡло*
*уҙаман*
*аҡһаҡал*

кәңәшһеҙ ҡалдырмаҫ, хуш күңелле булғанға кешеләр менән бик татыу йәшәр ине.

Күптәрҙе батыр тип йөрөтәләр, иллә-мәгәр уларҙың бөтәһе лә был исемгә лайыҡ түгел, ундай батырҙарҙың барлыҡ даны алдашыуҙан, мәһайыуҙан, ҡомһоҙланып, барымтаға йөрөүҙән тора. Тап ана шундай холоҡло Сарыбай батыр һине яратмаған, мәһайыуҙан яҡшылыҡты онотоп, ҡыҙын һиңә биреүҙән баш тартҡан, үҙ файҙаһын ғына күҙәтеп, ҡыҙын хан улына бирергә булған. Һин иһә, улым, атайыңдың юлынан барып, уның менән бер тиң дан ҡаҙанырға тейешһең. Килер быуын, һеҙҙең икеһеҙҙе лә уҙаман һанап, данығыҙҙы оҙаҡ йылдар һаҡларҙар. Ҡурайсылар маҡтаулы эшегеҙҙе, йырлап-көйләп, ырыуҙан ырыуға еткерер, халыҡ уларҙы ярыштыра-ярыштыра шатланып тыңлар. Аҡһаҡалдарҙың һеҙҙең хаҡта һоҡланып һөйләгән һүҙҙәре һис ваҡытта тынмаҫ. Һәр әсә үҙ балаһын, Ҡарабай батырҙай бул, тип иркәләр, яратыр. Бер генә ата ла улын атҡа мендергән саҡта, Ҡарабай батыр атын ошолай йөрөтөр ине, тип әйтмәй ҡалмаҫ. Уның ҡулына йәйә биргәндә, Ҡуҙыйкүрпәс йәйә керешен ошолай тартыр булған, тип әйтер. Батырмын тигән кешенең эшләгән берәй эшен Ҡарабай башҡарған эшкә оҡшаталар икән, был инде уның өсөн ҙур бүләк булыр. Нәҫелдән нәҫелгә ҡалырлыҡ яҡшылыҡ менән уҙғарылған ғүмер ана шулай була ул, улым! *(«Ҡуҙыйкүрпәс» эпосынан)*

- Бирелгән өҙөктө күрмә изложение итеп яҙығыҙ.

**301.** *Класҡа күсәсәк, 6-сыла уҡыясаҡ, тамамлаясаҡ, үтәләсәк, булмаясаҡ* ҡылымдары һәм һүҙбәйләнештәре менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Ҡылымдарҙы теләгән затҡа ҡуйырға мөмкин.

**302.** Р. Ишбулатовтың «Өфөлә Еңеү байрамы» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Кемдәрҙе күрәһегеҙ? Улар ни эшләй? Кейгән кейемдәрен, йөҙҙәрен һүрәтләгеҙ. Улар ни өсөн шат? Ниндәй байрам һүрәтләнгән? Картина буйынса инша яҙығыҙ.

## § 55. Шарт һөйкәлеше

● Өҙөктө уҡығыҙ, *-ha/ -hə* ялғаулы ҡылымдарҙың ниндәй һорауға яуап биреүен, мәғәнәһен аңлатығыҙ. Нисек аталғанын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

Баҫыу минең шатлығым да, хәсрәтем дә. Ашлыҡ уңһа – шатланам, уңмаһа – хәсрәтләнәм. Туған ҡырҙарым мине ситкә ебәрмәне. Уның серле лә, күркәм дә тартыу көсөн бала сағымдан татырға тура килде.

Миңә 10 йәш ине. Яҙ. Ағас тырма менән ужым сәселәһе пар ерен тырматам. Яланғас аяҡтарым ерҙең иркә йылыһын тоя. Әйтерһең, тупраҡ ҡояш еҫен бөркөп ята.

Кискә табан атайым миңә: «Әйҙә әле, улым! Һабан һабын тотоп ҡара. Ныҡыраҡ тотон!» – тине.

Быға тиклем мин бесән сапһам да, уны йыйһам да, иген һуғыуҙа ярҙамлашһам да, һабан тотоп, ер һөргәнем юҡ ине. Хәҙер миңә крәҫтиәндең иң мөһим эше – ер һөрөү яуаплылығы тапшырылды. Мин үҙ ғүмеремдә тәүге бураҙнамды ярҙым! Минең йөрәгем ҡыуаныс менән тулды. Был тойғо, иген баҫыуындағы хеҙмәт шатлығы ғүмерем буйына минең менән йәшәне. *(Т. Мальцевтан)*

● 1. Ҡайһы һөйләмде тексттың исеме итеп яҙырға мөмкин?

2. Өҙөктән хәҙерге һәм үткән заман хәбәр һөйкәлештәренә миҫалдар күрһәтегеҙ.

► Шарт һөйкәлеше эш-хәрәкәттең береһе икенсеһе үтәлеүенә шарт булып килеүҙе белдерә: 1. *Балалар уйынға бер* ***керешһәләр,*** *донъяларын оноталар.* 2. *Ҡулыңды* ***һуҙып тотһаң,*** *тамсылар усыңа һикереп иркәләнәләр, шаяралар. Әгәр ҙә һин усыңды* ***йомһаң,*** *бармаҡ араларынан сығып ҡасалар.*

Шарт һөйкәлешендәге ҡылым тамыр йәки нигеҙ ҡылымға *-һа/ -һә* ялғауҙары ҡушылып яһала: *ал –* ***алһа,*** *эшлә –* ***эшләһә,*** *йөрө –* ***йөрөһә.***

**303.** Мәҡәлдәрҙе тултырып яҙығыҙ. Шарт һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың аҫтына һыҙығыҙ, затын күрһәтегеҙ, ике шарт һөйкәлеше ҡылымын зат менән үҙгәртегеҙ.

1. Ҡолон аҫра.., ат менер.. . 2. Бойҙай сәс.., башағын йый.., шалҡан сәс.., тамырын йый.. . 3. Ат ысҡын.., тотоп була, һүҙ ысҡын.., тотоп булмай. 4. Ай кәртәлән.., айылың тот, көн кәртәлән.., көрәгең тот. 5. Ай ҡолаҡлан.., аяғыңды нығыт, көн ҡолаҡлан.., ҡолағыңды нығыт. 6. Айыу балаһын итәккә һал.. да илекмәҫ, бүре балаһын бүреккә һал.. да берекмәҫ.

► Шарт һөйкәлеше үткән заманда ҡалған эште, шартты белдерһә, ул *-ған/ -гән, -ҡан/ -кән* ялғаулы ҡылым аҙағынан *булһа* ярҙамсы ҡылымын ҡуйыу менән яһала: *Төнөн ямғыр* ***яумаған булһа,*** *беҙ бөгөн экскурсияға барыр инек.*

Әгәр шарт һөйкәлеше киләсәк заманда үтәләсәк эште, шартты белдерһә, ул *-р, -ыр/ -ер, -ор/ -өр* ялғауҙары менән килгән ҡылым аҙағынан *булһа* ярҙамсы ҡылымы ғына зат менән үҙгәрә: *мин* ***килгән булһам,*** *һин* ***килгән булһаң,*** *ул* ***килгән булһа;*** *беҙ* ***ҡайтыр булһаҡ,*** *һеҙ* ***ҡайтыр булһағыҙ,*** *улар* ***ҡайтыр булһалар.***

**304.** Һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ.

1. Көндәр матур торһа, – –. 2. Походҡа сығыр булһаҡ, – – . 3. Был аяҙ көндәр элегерәк булған булһа, – – . 4. Баҡсаны ултыртып бөтһәк, – – .

● *Яҙыр булһаң, китер булһаң, яуыр булһа, киткән булһа, эшләһә* ҡылымдары менән һөйләмдәр төҙөгөҙ. Һөйләмдәрҙең эйәләрен, хәбәрҙәрен табығыҙ; ҡушма һөйләм булһа, уларҙың нисә ябай һөйләмдән торғанын әйтегеҙ.

## § 56. Теләк һөйкәлеше

★ Билдәләнгән ҡылымдар һөйләүсенең эшкә, хәрәкәткә ниндәй мөнәсәбәтен белдереп килгәнен әйтегеҙ.

– Ни, ҡара әле, Юлдаш, **ҡайтайыҡ!** – тип башланы Ҡыҙырас. – Ел сыҡһа, Талҡаҫ харап яман, ти, ул.

Юлдаштың ҡармаҡҡа теклән тик ултырғанын күргәс, ул тағы ла түҙемһеҙләнеп:

– **Ҡайтайыҡ,** тим! Юлдаш, тим, **ҡайтайыҡ,** тим, – тип татылданы. – Ни, Юлдаш, әйҙә **ҡайта һалайыҡ,** йәме...

Ҡыҙырас тағы тымды. Ә Юлдаштың ошондай күңелле урынды ҡалдырып һис тә **ҡайтҡыһы килмәй...**

– Кәмәне көнбайышҡа бор. Елгә арт менән **барайыҡ, –** тип ҡысҡырҙы Юлдаш.

Ҡыҙырас: «Улай кәмәне ел ауҙара һуғыр бит», – тип ҡаршы төшмәксе булғайны ла, көслө тулҡын килеп бәрелеп, кәмәне тап шикелле итеп, үҙе үк бороп ебәрҙе. Ел көсәйҙе. Юлдаш: «Өләсәйемә балыҡ алып ҡайтаһы бар бит әле», – тип көрһөнөп ҡуйҙы. *(З. Биишева)*

● Өҙөккә исем бирегеҙ. Уның төп фекерен әйтеп, өлөштәргә бүлеп, һәр бүлектең темаһын билдәләгеҙ.

► Теләк һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың ике формаһы була: а) ябай формаһы, б) ҡушма формаһы.

1. Теләк һөйкәлешенең ябай формаһы тамыр йәки нигеҙ ҡылымға *-айым/ -әйем, -айыҡ/ -әйек, -маҡсы/ -мәксе* ялғауҙары ҡушылып яһала, ул һөйләүсенең берәй эште эшләргә теләге барлығын белдерә: *«Ашап алғас, ни, тағы балыҡ ҡармаҡлайыҡ, йәме», – тине Ҡыҙырас. «Унынһын өләсәйемә алып ҡайтайыҡ», – ти Юлдаш.*

2. Теләк һөйкәлешенең ҡушма формаһы төп мәғәнәләге ҡылым аҙағына *килә, итә* ҡылымдары һәм *бар, юҡ* һүҙҙәре ҡушылып яһала. Ул саҡта төп ҡылымға *-ғы/ -ге, -ҡы/ -ке, -ғо/ -гө, -ҡо/ -кө* ялғауҙары ҡушыла: *тарағы килә, торғо килә, кейге килә, йөрөгө килә, эшләргә итә, ҡайтаһы бар* һ. б.

*Батыр күрһәм, шул батырлыҡ тигән*
*Тауға менгем килде.*
*Дан ҡапҡаһы күрһәм, шул ҡапҡаны*
*Шаҡып ингем килде.*

(М. Кәрим)

**305.** Теләк һөйкәлешендәге ҡылымдарҙы табығыҙ. Уларҙың ябай формамы, ҡушма формамы икәнен, ниндәй затта тороуын әйтегеҙ.

1. Теге кеше эстән генә: «Туҡта әле, солоҡ эсенә бикләп, тонсоҡторон үлтерәйем», – тип, ағас башына менеп киткән. 2. Төлкөнөң яуыз ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолғоһо килгән. «Туҡта әле, мин быларҙы теге, өңө эсендә рәхәтләнеп ятҡан арҡыры аяҡ, яҫы табан айыуға ебәрәйем, үс алайым мин ул ҡомһоҙҙан», – тигән эстән генә. 3. «Беҙ һәр беребеҙ айыуҙың йөнөн өҙөп алып, шуның менән билдәрҙе нығыраҡ быуып, ысынлабыраҡ тотонайыҡ», –

тигән ҡырмыҫҡа. 4. Терпенең бер ҙә иҫе китмәгән: «Йә, алышайыҡ улай булғас, һинең түгел, хәйләкәрлеге менән донъяла дан алған төлкө ағайыңдың көсө етмәне әле миңә», – ти икән терпе. *(Ж. Кейекбаев буйынса)*

● Тәүге һөйләмде яҙып алығыҙ. Тура телмәрҙәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын һөйләгеҙ.

**306.** Өҙөктәрҙе уҡып, теләк һөйкәлешендәге ҡылымдарҙы табып, уларҙың яһалышына, мәғәнәләренә иғтибар итегеҙ. Ҡылымға эйәреп килгән һүҙҙәрҙе парлап ҡарағыҙ. Унан өҙөктәрҙең һәр береһенә исем бирегеҙ. Һәр бүлектең төп фекерен әйтегеҙ.

I. Әнүәр Заһитов бына ун биш йыл самаһы инде тыуған яҡтарында булғаны юҡ. Уның йыл да бер-ике көнгә булһа ла Болон ауылына ҡайтып килгеһе, күңелдә әллә ниндәй бер яҡшылыҡ менән балҡыған Мәндем һыуының алҡынып ағыуына ҡарап торғоһо, бәләкәй сағында бик бейек күренгән Сейәлетүбәгә менеп, уның эре ҡараһыу ҡыҙыл сейәләрен өҙөп ҡапҡыһы килде. Юҡ, булмай, йыл да бер эш табыла, теләк хыялға әйләнеп, икенсе йылға күсә. Ә ваҡыт, Мәндем һымаҡ, тулҡынып аға ғына бирә…

II. Әнүәрҙең күңелендә иң яҡшы хис ҡалдырғаны – Сейәлетүбә. Ҡуйы ҡыуаҡтарҙы йыра-йыра йөрөп ятаһың. Әле алһыуланып бешеп кенә килгән емештәрҙе өҙөп ауыҙыңа ҡабаһың. Әскелтем тәме бөтә тәнгә таралған кеүек була. Рәхәт. Өйкөм-өйкөм сейә ҡыуаҡтары араһынан үрләй-үрләй, Сейәлетүбәнең иң бейегенә менә лә Әнүәр тирә-яҡҡа ҡарап тора. Ҡояш байышына күҙ ташлаһа – унда аяҡ аҫтында Болон ауылы иҙрәп ята. Урамда бәләкәс кенә булып ары-бире үткән кешеләр күренә. Шунан күҙен әрәмәлектәр, балан, муйыл

ҡыуаҡтары, ялбыр тирәктәр араһынан аҡҡан шаршылы, урыны-урыны менән көҙгөләй ялтырап ятҡан Мәндемгә төшөрә. *(Ә. Вахитов)*

► *-маҡсы/ -мәксе* ялғаулы теләк һөйкәлеше ҡылымының зат менән үҙгәреше:

| | берлектә | күплектә |
|---|---|---|
| 1-се зат | *мин ҡайтмаҡсы булам* | *беҙ ҡайтмаҡсы булабыҙ* |
| 2-се зат | *һин ҡайтмаҡсы булаһың* | *һеҙ ҡайтмаҡсы булаһығыҙ* |
| 3-сө зат | *ул ҡайтмаҡсы була* | *улар ҡайтмаҡсы булалар* |

*Килмәксе, ҡайтмаҡсы, бармаҡсы* һымаҡ теләк һөйкәлеше *була* ярҙамсы ҡылымы менән ҡушма формала килгәндә зат ялғауҙары ярҙамсы ҡылымға ғына ҡушыла.

**307.** Өҙөктө уҡып, теләк һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың ябай йә ҡушма формаһын алып, зат менән үҙгәртегеҙ.

1. «Юлдаш, ни, Сәлим бабайға ҡарағат тирешергә гел киләйек, йәме», – тип һөйләнде Ҡыҙырас.

– Ни, Юлдаш, әйҙә бынауында боçайыҡ. 2. – Килен, ишетәһеңме, мин һинең менән һуңғы ҡат һөйләшмәксемен. 3. Һине үҙ урыныма ҡымыҙ оçтаһы итеп әҙерләгем килә. 4. – Әйҙәгеҙ, киттек, киттек. Тегендә ҡымыҙҙы белмәй эретеп кенә ҡуймаһалар ярар ине. 5. Юлдаш өләсәһенән: «Ҡымыҙҙы нисек бешеүҙәрен күргем килә», – тип, уның күрһәтеүен һораны. «Минең дә белгем килә», – тип Ҡыҙырас та ҡушылды. *(З. Биишева буйынса)*

**308.** 1. Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Һуңғы һөйләмгә яуап бирегеҙ. 2. Хәбәр, шарт, теләк, бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарын күсереп алығыҙ, һанын, затын күрһәтегеҙ.

## НИ ЭШЛӘТЕР ИНЕҢ?

Тәлғәт урамда боҙ тибеп йөрөй. Трамвайҙар килеп туҡтай. Унан күмәк кешеләр килеп төшә. Икенселәре ултыра. Трамвайҙар ары китә. Кешеләр ығы-зығы килә. Ҡыҙыҡ!

Ана, әле генә килеп туҡтаған вагондан ауылса кейенгән, таяҡ таянған бер бабай тәнтерәкләй-тәнтерәкләй килеп төштө. Трамвай ҡуҙғалып киткәс, ул тирә-яғына оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙо ла Тәлғәткә өндәште:

– Улым, Минһажев урамы ҡайҙа бында?

– Шуны ла белмәйһеңме? Туп-тура бар ҙа уңға борол. Яп-яҡын ул, – тип, Тәлғәт китә башланы.

Бабай уны йәнә туҡтатты.

– Улым, мин ҡалала йөрөй белмәйем. Башым әйләнә. Әллә оҙатып ҡуяһыңмы?

– Һи-и, бабай, ауылдан килгән һәр бер кешене оҙатып йөрөһәң, аяғың ҡалмаҫ!..

Малай тағы китә башланы.

Бабай ҡуйын кеҫәһенән аҡса сығарҙы.

– Зинһар, һүҙемде тыңла инде, мә, кәнфит-маҙар алырһың!

– Быныһы икенсе эш. Мин туңдырма яратам.

– Рәхмәт, рәхмәт, балам! Теләһәң – туңдырма, теләһәң – башҡаһын алырһың. Уны ни эшләтергә үҙең белерһең инде.

Тәлғәт аҡсаны кеҫәһенә тиҙ генә тыҡты ла:

– Әйҙә, улай булғас, атла минең арттан. Йәһәтерәк бул! – тип уны ашыҡтырҙы.

Ә һин булһаң, бабай биргән аҡсаны ни эшләтер инең? *(Ф. Иҫәнғолов)*

**309.** Һыҙыҡтар урынына ҡылымдарҙы ҡуйып, тәүҙә телдән һөйләмдәр төҙөгөҙ, уларҙы башҡаларҙыҡы менән сағыштырығыҙ, дөрөҫ, матур төҙөлгән һөйләмдәрҙе дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Ҡылымдарҙың һөйләмдәрегеҙҙә ниндәй кисәк булғанын әйтегеҙ.

1. — — ҡайтып киләйек. 2. — — уйнап алайыҡ. 3. — — бөтә көстө һалайыҡ. 4. — — барайым. 5. — — киттем. 6. — — күргеһе килә. 7. — — уҡымаҡсы була. 8. — — һөйләмәксе. 9. — — тора бирәйек. 10. — — ҡалмаҡсы бул. . .

★ Ҡылым һөйкәлештәре буйынса таблицаны тултырығыҙ.

| Ҡылым һөйкәлештәре | Яһалыу юлы | Миҫалдар |
|---|---|---|
| Хәбәр һөйкәлеше | шаһитлы үткән заман - *ты/-те, -ды/-де, -ҙы/-ҙе, -ны/-не*<br>шаһитһыҙ үткән заман<br>*-ған/-гән, -ҡан/-кән, -ҡайны/-кәйне, -ғайны/-гәйне*<br>*-а*<br>*-ә + торғайны*<br>*-й*<br>*-р*<br>*-ыр + булған*<br>*-ер* | *уҡы+ны*<br>*уҡы+ған, уҡы+ ғайны*<br>*яҙа торғайны, килә торғайны һөйләй торғайны, һөйләр булған яҙыр булған, килер булған* |
| Бойороҡ һөйкәлеше | | |

| | | |
|---|---|---|
| Шарт һөйкәлеше | | |
| Теләк һөйкәлеше | | |

**Ҡылымды тикшереү тәртибе**

1. Үҙ аллы йәки ярҙамсы ҡылым.
2. Тамыр йәки нигеҙ ҡылым.
3. Һөйкәлеше, заты, һаны, заманы.
4. Ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

Ҡылымды тикшереү өлгөһө

*Күк йөҙө болоттарҙан әрселде.*

Телдән:

*Әрселде* – ҡылым; үҙ аллы, нигеҙе – *әрсел*, тамыры – *әрсе*, хәбәр һөйкәлеше, 3-сө затта, берлектә, үткән заманда, хәбәр.

Яҙып:

*Әрселде* – ҡыл., хәб. һ., 3-сө зат, берл., үтк. з., хәбәр.

**310.** Тексты уҡығыҙ. Ниндәй байрам тураһында һүҙ бара? Тағы ла май-июнь айында уҙғарылған ниндәй байрамдарҙы беләһегеҙ? Билдәләнгән ҡылымдарҙы үрҙәге өлгө буйынса яҙып тикшерегеҙ.

Атым егелгән, әҙер.
Ҡырға китәбеҙ хәҙер.
«Ҡарға бутҡаһы» **көтә**,
Һый бөтәһенә етә.

«Ҡарға бутҡаһы» – ҙур байрам ул. Ҡар иреп, көн **йылынһа**, «Ҡарға бутҡаһы» байрамы **үткәрелә**.

Байрамда күберәк ҡатын-ҡыҙҙар, балалар ҡатнаша. Бер урында ҙур ҡаҙанда бутҡа **бешерә-**

**ләр.** Балалар түңәрәккә баҫып бейей, йырлай, ҡурай, ҡумыҙ уйнай. Бөтәһе лә бергәләп бутҡа ашай. Ҡарғаларға ла бутҡа бирәләр.

Әбейҙәр тәбиғәткә, бөтә йән эйәләренә теләк теләй: «Бар булайыҡ, бай булайыҡ, татыу, рәхәт **йәшәйек».**

**311.** Б. Домашниковтың «Һаҙ томбойоғо сәскә ата» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Тәбиғәттең ниндәй миҙгеле һүрәтләнгән? Яр буйын һүрәтләгеҙ. Рәссам ниндәй төҫтәрҙе ҡулланған? Ни өсөн? Һүрәт буйынса инша яҙығыҙ.

## § 57. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү

**312.** 1. Телдең өндәре, һүҙҙең мәғәнәләре, һүҙ киҫәктәре, һүҙ төркөмдәре, һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәр тел тураһындағы фәндең ҡайһы бүлектәрендә өйрәнелгәнен һөйләгеҙ.

2. Тыныш билдәләре, дөрөҫ яҙылыш (орфография) грамматиканың ҡайһы бүлектәре менән туранан-тура бәйләнгәнлеген әйтегеҙ.

**313.** Тел белеменә ҡараған һүҙҙәрҙе (атамаларҙы) түбәндәге таблицаның һәр графаһына урынлаштырығыҙ.

Һүҙ, өн, һүҙбәйләнеш, зат, тартынҡы, һөйләм, тамыр, нигеҙ, баҫым, һүҙ төркөмдәре, яңғырау, килеш, һуҙынҡы, синоним, ялғау, һаңғырау, хәбәр, антоним, һөйләм киҫәге, яһаусы ялғау, заман, эйәлек заты, һөйкәлеш, эйә.

| Фонетика | Лексика | Һүҙьяһалыш | Морфология | Синтаксис |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

- Таблицаға исем бирегеҙ.

**314.** 3-сө күнегеүҙе уҡығыҙ ҙа тел хаҡындағы мәҡәлдәрҙе, «Башҡортса-русса һүҙлек»те, «Башҡорт теленең сино-

нимдар һүҙлеге»н файҙаланып, «Туған телебеҙҙе өйрәнәйек» тигән темаға сығыш яһағыҙ.

Ту **315.** Р. Ишбулатовтың «Өфөлә Еңеү байрамы» исемле төҫлө картинаһын ҡарағыҙ. Кемдәрҙе күрәһегеҙ? Улар ни эшләй? Кейгән кейемдәрен, йөҙҙәрен һүрәтләгеҙ. Улар ни өсөн шат? Ниндәй байрам һүрәтләнгән?

Картина буйынса инша яҙығыҙ.

Ту **316.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Башҡорт теленең көсө, ҡеүәте һәм байлығы тураһында, шиғырҙағы һүрәтләү саралары ҡулланып, инша яҙығыҙ.

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис[1] тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!

Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш[1] ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй, йор, зирәк[1] һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!

Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем – тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем – гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем – бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле!

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир[1] юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!

Иң тәү миңә һин[1] күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем!

*(З. Биишева)*

● 1. Һәр дүрт юллыҡтан өндәш һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың нисә һүҙҙән тороуын әйтегеҙ.

2. Шиғырҙан тел байлығын, уның серлелеген һүрәтләгән юлдарҙы күрһәтегеҙ.

3. Сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы билдәләгеҙ, шиғырҙа уларҙың ролен төшөндөрөгөҙ.

4. «Башҡорт теле» шиғырынан тик ирен һуҙынҡыларынан ғына торған һүҙҙәрҙе табығыҙ, уларҙың ниндәй өндәрҙән тороуын әйтегеҙ.

**317.** Тексты уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Уларҙың өндәр составын тикшерегеҙ, дөрөҫ әйтелешендә ниндәй үҙгәрештәр барлығын һөйләгеҙ. Телдән шул һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Шул уҡ һүҙҙәргә синонимдар табығыҙ. Ҡуйылған тыныш билдәләрен аңлатып бирегеҙ.

**Отрядтың** юлын **быуырға,** уны ошонда, Урал тауҙары араһынан, юҡ итергә теләп, әленән-әле һөжүм итеп торған дошман көстәренең арта барыуы ла партизандарҙың ихтыяр көсөн **ҡаҡшата** алмай. Улар теләһә ниндәй шартта ла **һуңғы** һулыштарына хәтле көрәшергә әҙерҙәр. **Азатлыҡ** тигән **бөйөк** маҡсаттан көс алып, көрәшкә тотонған был **батырҙар** өсөн ҡурҡыу, сигенеү, икеләнеү кеүек ваҡ **тойғолар** ят нәмә. Шуға, ахыры, уларҙың һәр ҡайһыһы берҙәй үк яҡты **сырайлы, уйынсаҡ** һүҙле, теремек.

Бөтә дала кешеләре һымаҡ уҡ, Закир ҙа икһеҙ-сикһеҙ ябай **киңлектәргә,** әрем, ҡылған еҫтәренә, **шаян-теремек** дала елдәренә, мул һыулы ташҡын йылғаларға ғашиҡ. *(З. Биишева)*

**318.** 1. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Һәр мәҡәлдең ниндәй һөйләм икәнен әйтегеҙ. 2. Билдәләнгән һүҙҙәргә фонетик анализ яһағыҙ: өндәрен әйтегеҙ, баҫымын, ижектәргә бүленешен аңлатығыҙ; дөрөҫ яҙылыштарын төшөндөрөгөҙ.

1. Алғыр* кеше алымынан билдәле. 2. **Арғымаҡ** ат юл башлар, аҡыллы егет ил башлар, батыр егет яу башлар, сәсән егет дау башлар. 3. Баҫһаң, баҡыр өҙөрлөк, типһәң, тимер **өҙөрлөк** бул. 4. Батыр егет – яу **күрке**, сәсән егет – дау күрке. 5. Ебәк билбау – бил күрке, батыр егет – ил күрке. 6. **Ир-егеттең** ике юлдашы: береһе – батырлыҡ, икенсеһе – тәүәккәллек. 7. **Ҡурҡаҡ** менән юлдаш булма, көйһөҙ менән моңдаш булма. 8. **Мәргән** уғы һайын берҙе бәргән. 9. Яҡшы менән **юлдаш** булһаң – уңырһың, яман менән юлдаш булһаң – туңырһың. 10. **Яҡшы** әҙәм ил өҫтөндә һый табыр, **яман** әҙәмде дөйә өҫтөнән эт ҡабыр.

● 1. Мәҡәлдәр ниндәй темаға бағышланған? 2. *Батыр, әҙәм, ҡабыр, көйһөҙ, аҡыллы* һүҙҙәренә – синонимдар, *өҫтөнән, яҡшы, күркәм, табыр* һүҙҙәренә антонимдар табып яҙығыҙ.

**319.** 1. Шиғырҙы уҡығыҙ. Шағир яҙҙың ниндәй билдәләрен һүрәтләгән? Шул урындарҙы уҡып ишеттерегеҙ. Һеҙҙең яҡта яҙ нисегерәк килә? Һөйләгеҙ. 2. Күсмә мәғәнәле һүҙҙәр бармы? Булһа, уларҙы күрһәтегеҙ. Уларҙың башҡа мәғәнәләрен дә һанап бирегеҙ. 3. Тамыр, яһалма һүҙҙәрҙе табығыҙ. Яһалма һүҙҙәрҙең ялғауҙарын һыҙыҡсалар менән айырып яҙығыҙ.

ЯҘ

Ҡыҫмаҡ үтеп, ҡыш үткән һуң, килде яҙ,
Ҡыйҡыулашып, килде осоп өйрәк-ҡаҙ.
Ян-януар йәшел үләнгә сығып,
Көллө ғаләм шатланышып булды мәж.

Ерҙең өҫтө бәрхәт кеүек йылтырар,
Күктә – монар, ерҙән быуҙар борҡорар.
Арыҡ малдар йәшел үләнгә туйып,
Ҡырҙан өйгә уйнаҡлашып ҡайтырҙар…

---

* Алғыр – ҡыйыу, батыр.

Ҡупшы ҡыҙҙай шишмә аға сылтырап,
Алыҫта монар ята тонйорап,
Турғай сырлап, былбыл йырлап һайраша,
Теле сыҡҡан йәш балалай былдырлап.

*(Аҡмулла)*

● Сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы күрһәтегеҙ. «Теле сыҡҡан йәш бала» тигәнде нисек аңлайһығыҙ? Һөйләп бирегеҙ.

**320.** Тексты уҡығыҙ. Уның буйынса фекер алышығыҙ. Күрмә диктантҡа әҙерләнегеҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ҡайһы һүҙ төркөмөнә ҡарағанын күрһәтегеҙ.

ҺАБАНТУЙ

**Һабантуй – яҙғы** хеҙмәт байрамы. Ҡырҙа сәсеү эштәре бөткәс, күңелле байрам етә. Ярыштар, уйындар, йыр-бейеүҙәр – ҡарап тороуҙары **күңелле**! Һабантуйҙа ат **сабыштыралар**, көрәшәләр, йыр, бейеү ярыштары ойошторалар, йүгерәләр, ҡолғаға үрмәләйҙәр. **Ярыштарҙа еңеүселәрҙе** бүләкләйҙәр. Һабантуйҙа балалар ҙа **әүҙем** ҡатнаша.

● 1. Тамыр, яһалма, ҡушма исемдәрҙе күрһәтегеҙ.
2. «Милли байрамдар» темаһына проект эше башҡарығыҙ.

**321.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Ниндәй байрам тураһында һүҙ бара? Һөйләгеҙ.

– Гөлнара, һин ниндәй байрамға барҙың?
– Науруз байрамына барҙым.
– Ә ул ниндәй байрам?
– Көн менән төн марттың 18-дә тигеҙләшә. Төн дә 12 сәғәт була, көн дә 12 сәғәт була. Шунан һуң көн оҙая башлай. Был яңы көн – Науруз тип атала. Байрамда яҙ тураһында йырҙар йырлайҙар, музыка ҡоралдарында уйнайҙар, бөтәһе лә шатлана. «Науруз ҡотло булһын! Иген уңһын!» – тип матур теләктәр теләйҙәр.

– Гөлнара, әһин унда йырланыңмы әллә бейенеңме?

– Йырланым. Яңы өйрәнгән йырымды башҡарҙым.

– Гөлнара, икенсе йылға байрамға бергәләп барырбыҙ.

– Ярай, мин риза.

# МӘҢГЕ ЙӘШӘ, ЭЙ, ҺӨЙӨКЛӨ БАШҠОРТ ТЕЛЕ!

Үҙ аллы уҡыу һәм төрлө яҙма эштәрҙә, сығыштарҙа ҡулланыу өсөн текстар.

I. Тел… Һүҙ! Кешеләрҙең хикмәтле һүҙе! Ниндәй көс бар икән тағы һинең менән тиңләшерҙәй?

Теге йәки был телдә күпме һүҙ барлығын теүәл генә әйтеп биреүе мөмкин түгел. Тел тигән төшөнсә үҙе ҡатмарлы, төрлө өлөштәрҙән тора. Мәҫәлән: халыҡтың йәнле һөйләү теле (уға ерле һөйләштәр ҙә инә) һәм әҙәби тел. Телдең был ике өлкәһендә һүҙҙәрҙең һаны ла төрлөсә була. Телдәге һүҙҙәр һанының һәр саҡ үҙгәреп тороуын да иҫәпкә алырға кәрәк. Яңы төшөнсәләр менән бергә яңы һүҙҙәр ҙә яһалып тора, элек-электән ҡулланылғандары иҫкерә төшә, хатта онотола. Хәҙерге башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең һаны биш-алты тиҫтә меңгә етә. Йәнле халыҡ теле уларҙы быуындан быуынға күсерә, еткерә килә. Шул рәүешле тел йәшәүҙән һәм йәмғиәтте хеҙмәтләндереүҙән туҡтамай. *(З. Ғ. Ураҡсин, Э. Ф. Ишбирҙин.* Туған тел серҙәре. Өфө, 1983.)

II. Башҡорт әҙәби теле хәҙер – ул фән теле, күркәм әҙәби әҫәрҙәр теле, публицистика теле, рәсми документтар теле, матбуғат теле, радио, телевидение һәм сәхнә теле. Йыл һайын башҡорт яҙыусыларының, публицистарының йөҙәрләгән исемдә әҫәрҙәре, төрлө фәнни китаптар, монографиялар, терминдар һүҙлектәре, башланғыс, урта һәм юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслектәр баҫылып тора.

Тиҫтәләрсә газеталар, журналдар сыға. Башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәре, ноталарға һалынған халыҡ йырҙары йыйынтыҡтары баҫыла; юғары уҡыу йорттарында

башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедралары эшләй; махсус институттарҙа башҡорт теле, әҙәбиәте буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып барыла. (*Ҡ. З. Әхмәров.* Башҡорт яҙыуы тарихынан. Өфө, 1972. 92-се б.)

III. Элек башҡорт халҡында үҙ нәҫеленең ете быуынына саҡлы ата-бабаларын, ырыу шәжәрәһен, туған халҡының тарихын белеү шарт һаналған. Нәҫел-ырыуын белмәгән кешене, халыҡ йолаларын йүнләп белмәгәнде белдекһеҙгә тиңләгәндәр.

Башҡорт һүҙе. Ул көндәлек аралашыуҙа ғына, хеҙмәттә, уҡыуҙа ғына түгел, ер-һыу атамалары булып та ҡулланыла. Ер-һыу атамаларының яһалыу сығанағы – туған телдең дөйөм лексик байлығы.

Географик атамалар, исемдәрҙең бер төркөмө халыҡтың формалашыуында ҡатнашҡан ырыу-ҡәбилә исемдәренән тора. Мәҫәлән: Башҡорт тауҙары, Дыуан, Таҙлар, Ар, Табын, Мең, Ҡатай, Күҙәй, Ғәйнә һ. б. ауылдары. Ер-һыу исемдәренең икенсе төркөмөн кеше исемдәре, ҡушаматтары тәшкил итә. Был төркөмдә лә күбеһенсә ауыл, ҡала, утар исемдәре урын алған: Дәүләкән, Әлшәй, Буранғол, Илсеғол, Әбеш, Аҙнай, Сураҡай, Ҡараяҡуп, Туҡһанбай һ. б. Кәсеп-һөнәр, профессия исемдәре лә ауылға атама бирә: Игенсе, Һабансы, Бесәнсе, Суйынсы һ. б.

Урындың, ерҙең, тау-таштың тәбиғи үҙенсәлектәрен, хайуандар, үҫемлектәр донъяһын сағылдырған исемдәр ҙә бар: Оҫҡонло уяҙ, Ереклекүл, Йылантөшкән йылғаһы, Бурһыҡ тауы, Арҡылытау, Йыуалташ, Ҡырынҡабаҡ, Сусаҡтау, Бурлытау, Һалҡыншишмә һ. б. (*Р. Шәкүр.* Ерҙең хәтер китабы. Өфө, 1984. 31, 32-се бб.)

## АҢЛАТМАЛЫ ҺҮҘЛЕК

### А

**Аждаһа**, әкиәттәрҙә осрай торған, ҡурҡыныс, кешеләргә яманлыҡ ҡына эшләүсе мифик зат.

**Азалия**, сәскә төрө. Ул Алыҫ Көньяҡтан килтерелгән үҫемлек – гөл. Баҡсаларҙа ғына үҫтерелә.

**Акация**, ҡырағай селеккә оҡшаған, баҡсаларҙа, урамдарҙа үҫтерелә торған ағас-үҫемлек (ҡыуаҡ). Ул һары сәскә ата. *«Аҡ акация» спектакленән өҙөк ҡараныҡ.*

**Айырса**, бер нисә тармаҡҡа бүленеп аҡҡан һыу юлы.

**Алабута**, үҫемлек, сүп үләне; ашарға яраҡлы орлоҡ та бирә, уны ҡоштар ашай.

**Алатуба**, ҡыр күгәрсене тип тә әйтәләр. Урманда йәшәй.

**Атҡаҙанған**, яҡшы дан алған һөнәр эйәһе: *атҡаҙанған уҡытыусы, төҙөүсе, артист* һ. б.

### Б

**Баҙнатсыл**, теге йәки был эшкә тотоноуға тәүәккәл булыу. Шунан барлыҡҡа килгән *баҙымсаҡ* формаһы. *Баҙнатсыл егет. Ул төрлө эштәргә баҙымсаҡ.*

**Боғаҡ**, ҡоштарҙың балаларына аҙыҡ һалып ташый торған тамаҡ төбөндәге урыны.

**Бурлат**, ҡыҙғылт ҡараһыу төҫ.

**Бүлкәт**, бүлек, урманлы тау аралары.

**Бәрхәт**, туҡыманың бер төрө: уң яғы шыма, ялтырап тора.

### В

**Ветеран**, күп йыллыҡ уңышлы хеҙмәт күрһәткән кеше; Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешегә лә шулай әйтәләр.

### Г

**Гөлләмә**, сәскәләр шәлкеме (букет).

## Е

**Елпеүес,** руссаһы *веер* була. Һауаны еләҫ итеү өсөн, уны елпеп ултыралар. *Әйтерһең дә, әсә мышнап йоҡлаған һөйөклө балаһы өҫтөндә елпеүес (елбәҙәк) тотоп тора.* (И. Насыри)

## И

**Ихата,** ишек алды; ҡайһы бер райондарҙа уны урам тип тә йөрөтәләр.

## Й

**Йөҙлөк,** элек карауаттар булмаған саҡта өйҙә урындыҡ, һике ҡулланғандар. Шул урындыҡты яһағанда, йыуан ғына ағасты ырып, таҡта йәйгәндәр. Таҡтаны эләктереп торған ағастың ал яғын *йөҙлөк* тип атағандар. Дәреслектәге күнегеүҙә *йөҙлөк* тип тәҙрә ҡапҡасын күгәнләп ҡуйған рамға әйтәләр.

**Йырҙа,** йылғаның һыуы ташҡанда үҙәнен алмаштырыу. Йылғаның яңы үҙәне була.

**Йырын,** күп тапҡырҙар һыу ағыу арҡаһында емерелеп барған үҙән.

**Йәмшегән,** дунала, еҙәй, ҡамыраш, энәҙе, энәте (емеш исеме).

**Йәренгә,** *киләһе йыл* һүҙбәйләнешенә синоним, ә *былтыр* һүҙенә антоним була. *Йомро Талип йәренгә атасаҡ ҡуянын, быйыл аттым, тип һөйләһә һөйләр, тик былтыр атҡанды быйыл аттым тимәҫ.* (М. Кәрим)

## К

**Көлтә,** элекураҡ менән урылған игендең ҙур бер бәйләме. *Арыш көлтәһе; бойҙай көлтәһе.*

**Күкрәксә,** төрлө ҡораманан, ҡалдыҡ-боҫтоҡ сепрәктән ҡорап, төрлө тәңкәләр менән биҙәп эшләнгән түшелдерек. Уны килендәр ҡәйнәләренә бүләк итәләр.

**Кәлмәргән,** балыҡ аулай торған йыртҡыс ҡош. Һүҙҙең *кәл* тигән өлөшө башҡортсаға әйләндергәндә балыҡ

тигәнде белдерә. *Кәлмәргән балығын, йәпһеҙ суҡы-ғас, төшөрөп ебәрҙе.*

**Кәшмәк,** ике-өс бүрәнәне бергә бәйләп яһаған ҡоролма, һал. Уны йылғаларҙа кәмә урынына ла файҙаланалар.

## Ҡ

**Ҡаһарман,** *батыр* һүҙенә синоним була. Күбеһенсә китап стиленә ҡарай. *Утты, һыуҙы кисеп үткән ҡаһарман халҡым минең!* (М. Кәрим)

**Ҡор,** тауыҡҡа оҡшаған ҡырағай ҡош. Иртә яҙ ҡорҙар уйыны башлана. Улар ҡары асылған аҡландарҙа уйнайҙар.

**Ҡылы,** йылға ташҡанда ярҙан сыҡҡан һыу юлы. Һыуы тиҙ генә ҡоромай, байтаҡ ваҡыт ағып ята.

**Ҡырлыҡ,** ҡош-ҡортҡа ашарға яраҡлы орлоҡ бирә торған үҫемлек исеме.

## М

**Миҙгел,** йылдың дүрт осоро: яҙ, йәй, көҙ, ҡыш. *Йылдың һәр миҙгеле үҙенсә матур.*

**Мәғрур,** мөһабәт, ғорур һүҙҙәренең мәғәнәләше (синонимы). *Ҡая таштарҙа мәғрур ҡарағайҙар үҫеп ултыра.*

**Мәртәбә,** *тапҡыр, ҡат* һүҙҙәренә синоним булып йөрөй. Йәнле һөйләү телмәрендә абруй, авторитет мәғәнәһендә лә ҡулланыла. *Байғужалар үҙ мәртәбәләрен белеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуялар.* (Яр. Вәлиев)

## Н

**Нарта,** төньяҡ тундрала болан егеп йөрөй торған сана. Уны ҡыш та, йәй ҙә ҡулланалар.

## Ө

**Өҫкат,** үҫемлек, яҙын матур аҡ, ал сәскә атыусы тәпәшәк ағас, ҡыуаҡлыҡта үҫә.

## С

**Сабата,** сей (серетелмәгән) йүкәнән үрелгән аяҡ кейеме. *Кей сабата, сабата еңел атлата.*

**Селлә,** ҡыштың иң һалҡын, йәйҙең иң эҫе ҡырҡ көнө. *Ҡышҡы селләлә тамсы тамһа, йәйге селләлә ҡырау булыр.* (Һынамыш)

**Солан,** өйҙөң алдына эшләнгән бүлмә. Өйгә шуның аша инәһең. Элек уны келәт урынына ла файҙаланғандар. *Соланда аяғыңдағы ҡарҙы һепереп ин.*

**Сәмле,** ярышта тырышып эшләү, йүгереү; тырышып донъя көтөү. *Ҡыҙыҡлы уйындар, сәмле ярыштар көн һайын тип әйтерлек булып торҙо.*

**Сәйәхәт,** илдәр, ерҙәр, донъялар күреп йөрөү; сәйәхәт атта ла, поезда ла, самолётта ла, пароходта ла, йәйәү ҙә булырға мөмкин. *Уҡыусыларҙың Өфө ҡалаһына булған быйылғы сәйәхәте күңелле булды, бик күп яңылыҡтар күреп ҡайттыҡ.*

**Сәхрә,** гөл-сәскәле матур ялан, болон. *Сәхрәләрҙә үҫкән һары сәскә баҡсаларҙа үҫкән гөл кеүек.*

## Т

**Тамаша,** сәхнәлә һәм башҡа берәй ҡалҡыу урында була торған уйын, спектакль, телевидениенан төрлө программа тапшырыуы. *Бөгөнгө тамашаға кешеләр байтаҡ йыйылғайны.*

**Тимерғаҙыҡ,** йондоҙ исеме; русса *Полярная звезда.*

**Типһән,** тигеҙ ҡалҡыу урын, ер. *Ауылдың ҡояш байыш яғы типһән.*

**Толпар,** әкиәттәге, легендаларҙағы барыр еренә осоп барып етә торған ҡанатлы ат.

**Томра,** йәйге елһеҙ еүеш эҫе һауа. Күберәк йәйге йылы ямғырҙан һуң була. *Томрала тир буй-буй булып аға.*

**Туғаҙаҡ,** далаларҙа йәшәй торған ҙур кәүҙәле ҡош. Элек Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәгән. Хәҙер бик һирәк осрай.

**Тәгәрлек** (тәгәрҙек, тәгәрләүек), өйрәктән бәләкәйерәк ҡош. Һауала төрлө хәрәкәттәр яһап оса.

**Тәлгәш,** балан, миләш, муйыл кеүек емештәрҙең бер һабаҡҡа ойошоуы, суҡ-суҡ булып тороуы.

**Тюльпан,** сәскәһе бик матур, төрлө төҫтә булған үҫемлек. Ул ҡырағай ҙа үҫә, баҡсаларҙа ла үҫтерелә. *Яҙғы баҙар тюльпан менән тулы була.*

## У

**Уя,** үҙәк эсе; ике яғы булып, бер нисә йөҙ метрға, километрға һуҙылған үҙәк.

## Х

**Хазина,** тупланған байлыҡ. *Йыр – кешенең мәңге һүнмәҫ хазинаһы.* (З. Биишева) Был миҫалда *хазина* күсмә мәғәнәлә ҡулланылған.

**Хозурлыҡ,** *матурлыҡ, иркенлек* һүҙҙәренә синоним булып йөрөй. Күбеһенсә китап стиленә ҡарай. *Хайран булғаным – донъяның иҫ китмәле хозурлығы.* (Ғ. Хөсәйенов)

**Хәҡиҡәт,** дөрөҫлөк, ғәҙеллек мәғәнәһендә ҡулланыла. *Хәҡиҡәт – беҙҙең маяғыбыҙ.*

## Һ

**Һал,** һыуҙан ағыҙып алып китер өсөн теҙеп, ҡатлап бәйләнгән бүрәнәләр.

**Һалабаш,** йүкә ағасының ҡабығын ҡуптарып, һыуға һалып сереткәндән һуң һыҙырып алынған йүкә.

**Һыҙма** (тауҙар), бер-береһенә тоташып, теҙелеп киткән тауҙар.

## Ш

**Шаршы,** ҙур ғына йылғаның ташлы урындан шаулап ағыуын белдерә. *Шаршыларҙан балыҡ ырғып-ырғып үрләй.*

**Шоңҡар,** ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған һунар ҡошо. *Шаңҡылдайҙыр шоңҡар, ай, балаһы, Ирәндеккәй ташы ҡатында.*

**Шөһрәт,** дан ҡаҙаныу. *Шөһрәтле кеше. Ул эшендә шөһрәт ҡаҙанды.*

## Ы

**Ырыҫ,** *бәхет* һүҙенә синоним булып ҡулланыла. *Ырыҫлы ил тарҡалмаҫ.*

## Ә

**Әбейҙәр сыуағы,** көҙгөһөн була торған аяҙ матур йылы көндәр. *Әбейҙәр сыуағында баҫыуҙарҙа, ҡояшҡа ялтырап, үрмәксе ауҙары ғына оса.*

## Ю

**Юрға,** үҙенә бер төрлө итеп, аяҡтарын салып баҫып юртҡан ат. Юрға ат бик һирәк була. *Ерәнсәй ҙә менән, ай, Көрәнсәй юрғалайҙыр тура юл менән.*

**Юртаҡ,** юртыуға шәп ат. Юртаҡты ике тәгәрмәсле еңел арбаға егеп өйрәтәләр, һыбай ҙа юрттыралар. *Менгән генә атың юртаҡ булһа, осраған ирҙәр юл бирә...*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### Һаумы, мәктәп! Белем бар байлыҡтан да артыҡ!

§ 1. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Һүҙҙең морфологик киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Исем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Сифат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 8
Һан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 10
Ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11

### Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте

§ 2. Һүҙбәйләнеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 13
§ 3. Һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 19
§ 4. Хәбәр, һорау һәм өндәү һөйләмдәр . . . . . . . . . . . 22
§ 5. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Йыйнаҡ һөйләм . . . . . . . 25
§ 6. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Таркау һөйләм . . . . . 29
§ 7. Аныҡлаусы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
§ 8. Тултырыусы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35
§ 9. Хәлдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 40
§10. Һөйләмдең тиң киҫәктәре . . . . . . . . . . . . . . . 44
§11. Текст . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 49
§12. Өндәш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 53
§13. Ҡушма һөйләм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 57
§14. Тура телмәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 62

### Фонетика һәм графика. Орфография. Телмәр мәҙәниәте

§ 15. Өн һәм хәреф. Алфавит . . . . . . . . . . . . . . . . 70
§ 16. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр . . . . . . . . . . . . . 74
§ 17. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше . . . . . . . . . . . . 82
§ 18. Һуҙынҡыларҙың дөрөҫ яҙылышы . . . . . . . . . . . . 85
§ 19. Тартынҡы әйтелеше һәм дөрөҫ яҙылышы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 92
§ 20. Өндәрҙең оҡшашыуы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
§ 21. Ижек. Уларҙың төрҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . 109
§ 22. Баҫым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 111

### Лексика. Телмәр мәҙәниәте

§ 23. Лексика тураһында төшөнсә. Һүҙҙең мәғәнәһе . . . 117
§ 24. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге . . . . . . . . . . . . . . . 120
§ 25. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһе . . . . . . . . . . . . . . . 122
§ 26. Синонимдар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
§ 27. Антонимдар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 128

**Һүҙьяһалыш һәм орфография. Телмәр мәҙәниәте**

§ 28. Тамыр һәм ялғауҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 133
§ 29. Ялғауҙарҙың төрҙәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
§ 30. Тамыр һәм яһалма һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 140
§ 31. Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 144
§ 32. Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙең яһалыу юлдары . . . . . . . 153
§ 33. Ҡушма һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 160
§ 34. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы . . . . . . . . . . . . . . 163

**Морфология. Орфография. Телмәр мәҙәниәте**

§ 35. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Һүҙ төркөмдәре . . . . 169
§ 36. **Исем** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 173
§ 37. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр . . . . . . . . . . . . . 176

**Исемдәрҙең яһалышы**

§ 38. Ялғауҙар ҡушыу юлы менән исем яһалыу . . . . . . 185
§ 39. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән исем яһалыу . . . . . . . 189
§ 40. Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән исем яһалыу . . . . . . . 192
§ 41. Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән исем яһалыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
§ 42. **Ҡылым** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 200
§ 43. Ҡылымдарҙың заман, зат һәм һан менән үҙгәреше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 202
§ 44. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар . . . . . . . . . . . . . . 205
§ 45. Тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар . . . . . . . . . . . . . . . . . . 208
§ 46. Ҡылымдарҙың яһалышы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 210
§ 47. Ҡылымдың затлы формалары . . . . . . . . . . . . . . . . . 212
§ 48. Бойороҡ һөйкәлеше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 214
§ 49. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының зат, һан һәм барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше . . . . . . . . 218
§ 50. Хәбәр һөйкәлеше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 219
§ 51. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман менән үҙгәреше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 222
§ 52. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы . 225
§ 53. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының хәҙерге заманы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 230
§ 54. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының киләсәк заманы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 234
§ 55. Шарт һөйкәлеше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 239
§ 56. Теләк һөйкәлеше . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241
§ 57. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү . . . . . 248
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле! *Үҙ аллы уҡыу һәм төрлө яҙма эштәрҙә, сығыштарҙа ҡулланыу өсөн текстар* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 254
Аңлатмалы һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 256

*Учебное издание*

**Псянчин** Вали Шагалиевич
**Псянчин** Юлай Валиевич
**Габитова** Закия Муллагалиевна
**Аюпов** Рифат Рифович
**Мухаметова** Райса Минигалиевна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**учебное пособие для 5 класса**
**общеобразовательных организаций**
**с родным (башкирским) языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Псәнчин** Вәли Шәғәли улы
**Псәнчин** Юлай Вәли улы
**Ғәбитова** Зәкиә Муллағәле ҡыҙы
**Әйүпов** Рифат Риф улы
**Мөхәмәтова** Рәйсә Миниғәле ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған**
**дөйөм белем биреү ойошмаларының**
**5-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррирҙәре *С. Б. Аҡъюлова, А. Р. Байҙегетова*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Г. Р. Попова, А. Х. Хәкимова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 27.06.2017. Форматы $60 \times 90^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 16,5+0,25 форзацы + 0,5 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 36,0.
Иҫәп-нәшер таб. 9,86+0,40 форзацы + 0,42 йәбештермә.
Тиражы 8 400 дана. Заказ 1.0015.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

# ОРФОГРАФИЯ

## ҠЫЛЫМ

### Ҡылым һөйкәлештәре

Бойороҡ һөйкәлеше:

*һаҡла, эшлә, барһын, яҙһын.*

Хәбәр һөйкәлеше:

*көлдө, килде, һөйләшәләр, инделәр.*

Шарт һөйкәлеше:

*барһа, күрһәләр, уянһа, аҫраһаң.*

Теләк һөйкәлеше:

*барайыҡ, киләйек, әйтәйем, килмәксе.*

## МОРФОЛОГИЯ

### ИСЕМ

#### Исемдәрҙең яһалышы

Ялғауҙар ҡушыу юлы менән:

*көтөү — көтөү**се**, уҡыу — уҡыу**сы**, тимер — тимер**лек**.*

Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән:

*ҡулъяҙма, көньяҡ, ҡулъяулыҡ, Ағиҙел.*

Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән:

*һауыт-һаба, соҡор-саҡыр, тоҙ-моҙ, тау-таш.*

Һүҙҙәрҙе бәйләү һәм ҡыҫҡартыу юлы менән:

*класс мөйөшө, ҡурай елләге, спорт залы; профком, универмаг; БДУ, БР, РФ.*

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

5

КИТАП